# Ағиҙел

Өфө,
октябрь
2008

10 (1027)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Роберт БАЙЫМОВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары),*
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ,
Фәнил ҠОҘАҠАЕВ,
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире),*
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип),*
Тамара Ғәниева, Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррирҙәре),*
Гөлнур Яҡупова *(өлкән мөхәррир),*
Зилә Йәнбәкова, Рүзилә Саптарова *(корректорҙар),*
Рәйсә Камалетдинова, Ләйсән Хазиева *(компьютерҙа йыйыусылар),*
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе),*
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар).*

Журнал Башҡортостан Республика ының Матбуғат  әм киң мәғлүмәт министрлығында
1992 йылдың 10 декабрендә теркәлде.
Таныҡлыҡ № 646.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды  әм биттәргә  алынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.10. 2008. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70x100 1/16.
“Times” гарнитура ы.  Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 4 850 экз.  атыуҙа хаҡы иреклe. Заказ № 2.0209.08.

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республика ы,
Өфө ҡала ы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакция ы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http:// www. jurnal-agidel. narod.ru.

Баҫма Матбуғат  әм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль
агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республика ының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятие ында баҫылды.
(450001, Башҡортостан Республика ы,
Өфө ҡала ы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в ГУП РБ «Уфимский полиграфкомбинат»
(450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р /с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

©«Ағиҙел», 2008 (10, 1027)

# БЫЛ ҺАНДА: №10


ҠӘЛӘМДӘШТӘР ТӨҪӨ

**Мостай Кәрим.** Көндәлектәр. Дауамы. ..........................................5

ШИҒРИӘТ

**Фәнил Күзбәков.** "Хушлашыуҙар ҡыйырсыҡ ай икән..."
Ш и ғ ы р ҙ а р. ..........................................................................23
**Салауат Рәхмәтулла.** Ҡыҫҡа шиғырҙар. ........................................30
**Миңлегөл Хисамова.** "Мөлдөрәгән өмөттәрем йәнәш..."
Ш и ғ ы р ҙ а р. ..........................................................................36

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Ринат Камал.** Талаҡ! Р о м а н . Аҙағы. ............................................42
**Ғәли Ғатауллин.** Ете ят йәр. Х и к ә й ә. ..........................................79
**Хәйҙәр Тапаҡов.** Төштәремә кермә. Х и к ә й ә. ................................87

ӘҘӘБИӘТ ҒИЛЕМЕ

**Зиннур Нурғәлин**. Әҙәби мираҫ әм әҙәбиәт тарихы ....................115

БЕҘҘЕҢ ЮБИЛЯРҘАР

**Дамир Шәрәфетдинов.** Тәбиғәт йырсы ы
*(Рим Ахмедовҡа 75 йәш).* Әңгәмә. ..................................................122

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Роберт Байымов.** Оло ба аға лайыҡ ижад
*(Әсғәт Мирза итовтың тыуыуына 80 йыл).* ................................125
**Замир Низаметдинов.** Олпат әм яҡты шәхес ине... .....................130

ПУБЛИЦИСТИКА

**Радик Вахитов.** Өфөгә нигеҙ алыныу:
мифтар әм ысынбарлыҡ. ...........................................................135
**Рәмил Йәнбәк.** Ил азаматы. **Әҙ әм Исҡужин.** Яҙмышнамә. .......142
Интеллигенция әм интеллигентлылыҡ: *өйләшеүҙе дауам итәбеҙ.* **Мәхмүт Хужин.** Үгәй етелгән ҡатлам. .............................164

*2008 – Ғаиләгә социаль ярҙам йылы*

**Рәшит Кәлимуллин.** Бала таптырырғамы, әллә байлыҡ
арттырырғамы? ......................................................................171

МУЗЕЙҘАР – МӘҘӘНИӘТЕБЕҘ КӨҘГӨ Ө

**Фәнис Янышев.** Рухи бүләк. ....................................................174

БЕҘ ЙӘШӘГӘН ҠАЛА: САЛАУАТ

**Рима Ҡотлоғәлләмова.** Батыр рухы әр бер ташында. ................179

МӘХМҮТ ҠАШҒАРИ ЙЫЛЫНА АРНАЛҒАН КОНКУРС ЙОМҒАҠТАРЫ
"АҒИҘЕЛ"ГӘ ХАТТАР КИЛӘ
ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ЖИВАЯ ПАМЯТЬ

**Мустай Карим.** Дневники. *Продолжение.*

ПОЭЗИЯ

**Ф. Кузбеков, Салават Рахматулла, М.Хисамова** *(стихи)*.

ПРОЗА

**Ринат Камал.** Брачный развод *(роман). Окончание.*
**Г. Гатауллин.** Невозлюбленная *(рассказ)*.
**Х. Тапаков.** Оставь мои сны *(рассказ)*.

ТЕОРИЯ ЛИТЕРАТУРЫ

**З.Нургалин.** Литературное наследие и история литературы.

НАШИ ЮБИЛЯРЫ

**Д. Шарафетдинов.** Певец природы *(75 лет Р. Ахмедову, интервью)*.

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**Р. Баимов.** Творчество, достойное высокой оценки; **З. Низаметдинов.** Светлая память о личности. *(80 лет со дня рождения А. Мирзагитова)*.

ПУБЛИЦИСТИКА

**Р. Вахитов.** Основание Уфы: миф и реальность.
**Рамиль Янбек.** Сын Отчизны. **А.Искужин.** Автобиографические записки.

*2008 – Год социальной поддержки семьи*

**Р. Калимуллин.** Рожать или копить богатство?
Интеллигенция и интеллигентность: продолжаем полемику.
**М. Хужин.** Подчерица безвременья.

МУЗЕИ – ЗЕРКАЛО КУЛЬТУРЫ

**Ф. Янышев.** Прошлое ради будущего.

ГОРОД, ГДЕ МЫ ЖИВЕМ: САЛАВАТ

**Р. Кутлугаллямова.** Каждый камень здесь помнит батыра.

ИТОГИ КОНКУРСА РАССКАЗОВ ИМЕНИ М. КАШГАРИ

ПИСЬМА В "АГИДЕЛЬ"

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир – 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары әм яуаплы сәркәтип – 274-89-65
Шиғриәт әм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре –277-87-73
Проза бүлеге – 277-87-50
Бухгалтер – 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай әм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күр әтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етеш еҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.

**Мостай**
**КӘРИМ**

# КӨНДӘЛЕКТӘР*

**1995 йыл**

**1.I.95.**

*Был көндө лә күрҙек. Бөтәбеҙ ҙә бергә. Борсолоуҙар артта ҡалды шикелле. Алда — өмөттәр. Яңы йылды Әлфиәләрҙә ҡаршыланыҡ — бишәүләп. Булат ныҡ үҫкән, егет булған. Сәғәт икегә тиклем ултырҙыҡ. Рауза ныҡ арыны, ләкин ынатманы. Олег менән Булат беҙҙе оҙатып ҡуйҙы.*

**6.I.95.**

*Кисә Дүртөйләлә булдым. Әсәндә Бабичтың 100 йыллығын уҙғарҙыҡ. Ауылдың культура арайында халыҡ туп-тулы ине. Назар, Рауил, Ирек, Сафуан, Ғәзим ҡатнашты. Назар миңә ҡарата иғтибарлылыҡ күр әтте, мин дә шулай яуап бирҙем. Сығыш я аным. Бик уңышлы килеп сыҡманы, буғай. Ярай, барыу, ҡатнашыу әйбәт булды. Киске табынды Дүртөйләлә тау башындағы йортта ойоштороғандар. Был өйҙә беренсе тапҡыр Рәзил еҙ ултырҙыҡ. Минең менән Тимербулат та барҙы. Сәйәхәт уға бик оҡшаны.*

**7.I.95.**

*Алмағастар ҡыҫыр сәскә атты.*
*Булманы ла шуға алмалары.*
*— Дин! Дин! Дин! — тип өрән ала күптәр,*
*Эстәрендә юҡ тик аллалары.*

*Был строфаны Мусаның ниндәйҙер китап тышына яҙып ҡуйғанмын икән. Шуны әле ул телефон аша әйтте.*

**9.I.95.**

*Көн аяҙ. алҡынса. Күңел ис кенә лә аяҙымай. Чечня фажиғә е, Россия етәкселегенең булдыҡ ыҙлығы, халыҡты, аҡты-ҡараны күрмәй, ығы-зығыға саҡырыу (үҙәк гәзиттәр, радио, телевидение аша), халыҡтың үсен ҡабартыу сик еҙ борсой. Халыҡты бер яр ытып ебәр әң, ул нимә бул а ла емерергә, ҡыйратырға тотонасаҡ. Чечняны яҡлаған булып, беҙҙең бәғзе "эшмәкәрҙәр", телә әтеләмә ә лә, әҙәмдәрҙе болаға саҡыра. Был йә эттән янап түгел, мәслихәт уйлашып өйләшергә кәрәк. Боғаҙ менән түгел, аҡыл менән үҙ алып барылырға*

* *Дауамы. Көндәлектәрҙең тәүге өлөштәре журналдың 2006 йылғы 10-11-се, 2007 йылғы 10-сы андарында сыкты. Матбуғатҡа балалары* ***Илгиз КӘРИМОВ*** *менән* ***Әлфиә КӘРИМОВА әҙерләне.***

*тейешле. Дудаев та бөтөнләй шашҡан: “ уңғы малайға тиклем уғышасаҡмын”,— ти. уңғы малайға тиклем халҡын ҡорбан итергә ни хаҡы бар уның? уңғы малай әләк булғас, кемгә кәрәк инең азатлығың? Ни хаҡы бар Ельциндың беҙҙең балаларҙы нахаҡ эш өсөн ҡанға батырырға, утҡа ырғытырға?*

**28.I.95.**

*Кисә Булат Нью-Йоркка осто. Бөгөн иртән шылтыратты. Имен-аман барып еткән. Шулай ҙа күңел моң оу. Айрылышҡас, тәүге мәлдәрҙә ауыр була шул.*

*Бөгөн З. Н. Нуриев тура ында мәҡәлә яҙып бөтөрҙөм. “Известия Башкортостана” өсөн. Уға 80 йәш тула. Мөнәсәбәттәребеҙ гел генә ал да гөл булма- а ла, үҙен ныҡ ихтирам итәм. Ҡай ы саҡта ул ҡуҡрайып китә торғайны. Мин был хаҡта туп-тура әйткеләнем дә. Бер саҡ “Москва” гостиница ында (1964 йыл ине, буғай) ошо мәсьәләлә нык ҡына сәкәләшеп алдыҡ. “ ин бит шуға барып еттең: сумаҙаныңды ла Аҡназаровтан күтәртеп йөрөй өң”,— тип бәйләндем. Ул аптырабыраҡ ҡалды. Беҙ үҙгә килешкәндә номерҙа Аҡназаров, уның ҡатыны Федора, Зәғәфуранов, Нәжибәк Хафизов бар ине. “Нимә еҙ бында оппозиция ойоштороп йөрөй өгөҙ?”— ти. Мин әйтәм: “ ин шулай түрәгә әйләнеп, ма айып, кемгә таянырға уйлай ың?”*

*Иртән осрашҡас, Зия Нуриевич миңә әйтә: “Кисәге хәлде булманы тип иҫәпләйек. инең менән минең әрепләшкәнде Өфөнөң белеүе кәрәк түгел. Булғаны ошонда ҡал ын”,— ти.*

*Зия Нуриевич менән бергә күп йөрөнөк. Мәскәүенә лә, Киевына ла, Ҡазанына ла...*

**8.II. 95. Переделкино.**

*Муса менән тағы Переделкиноға килдек. Әүәлгесә ижади талпыныуҙар, өмөттәр самалы. Раузаны ҡалдырып китеүем дә маҙамды ала. Быйыл Переделкино менән хушлашыу йылы булыр, ахыры ы.*

***

*Мы, башкиры современного поколения, обвиняли русских и других, которые хитростью и обманом присвоили башкирские земли. Вдруг пришла ко мне такая странная мысль: почему в оправдание легковерия и глупости своих предков мы обвиняем ум и смекалку других. Якобы, наши предки легко поддавались уловкам. А в действительности ни один клочок общинной земли не отторгался без юридического оформления. Не такими простофилями были наши предки. Они умели торговаться. Но если какой-то беспутный бай расточал свои земли, то это было исключением. Я не принимаю легенду о том, что за плитку чая башкир отдавал десятки-сотни десятин. Это придумано для унижения башкир, чтобы их показать легкоумными.*

**10.II.95.**

*Көндәш тигән үҙ бар. Ниндәй тәрәнә мәғәнәле ул. Көндәштәр — уртаҡ көн итеүселәр. Улар айҙаш, йылдаш, ғүмерҙәш. Минең Оло инәйем менән үҙ инәйем көндәштәр ине. Улар 19 йыл бергә ғүмер итте. Үҙемдең күҙәтеүем буйынса ла, Кесе инәйемдең өйләүе буйынса ла, шундай өҙөмтәгә килергә булыр ине: улар көндәш, ғүмерҙәш кенә түгел, улар йәндәш, рухташ булғандар. Был үҙе бер мөғжизә бит. Көндәш тигән трагик (фажиғәле) үҙ эсендә ниндәй ила и бөйөк мәғәнә ята. Ила и йәнлеләр өсөн, әлбиттә. Тик шундайҙар өсөн генә. Мин, ике инәйемдең мөнәсәбәттәренә әйләнеп ҡайта-ҡайта, хайран ҡалам.*

*1928 йылдың ҡышында Оло инәйемдең улы (атайымдыҡы ла) Мортаза*

*ағайым кәләш алды. Еңгәбеҙ беҙҙең Серсә урамының Тәмәнәй осондағы Камалетдин ҡыҙы ине. Үҙ улының туйына Оло инәйем үҙе барманы, үҙе урынына Кесе инәйемде ебәрҙе. “ ин, Вазифа, йәш ең, матур ың, туйҙы йәмләп йөрөр өң. Аталарын үҙем күндерермен”,— тигән. (Быны Кесе инәйем миңә ҡартайғас әйтте.) Быны ын мин дә хәтерләйем: туйға атайым Кесе инәйем менән барҙы. Ике йәшлек ҡустым Ильясты ла алды. Салисә әм мин Оло инәйем менән ҡалдыҡ. Йола аҡлаптыр инде (быны ын хәҙер аңлайым), аҙнаға яҡын ҡунаҡ булдылар, бер урамда тор аҡ та, өйгә ҡайтып күренмәнеләр. Мал-тыуарҙы Сәлих ағайым бер үҙе ҡараны. Ул — Кесе инәйемдең артынан килгән улы.*

**11.II.95.**

*Теге пьесаға тотона алмай яфаланам. уғыш тура ында булырға тейеш. Идеям бар, аныҡ ҡына сюжетым юҡ. Барып сыҡмаç, ахыры ы. “Ғүмер миҙгелдәре” тигән яҙмаларҙы дауам итергә тотонам. Унда хикәйәләү аҙыраҡ, уйланыуҙар күберәк булырға тейеш.*

**15.II.95**

*Көн дә аҙлап бул а ла яҙам. Элекке кеүек яртышар көн ҡуҙғалмай ултырып булмай. Ике-өс сәғәттән кәр бөтә. Арҡа ла ауырта башлай. Эргәлә Мусаның булыуы бик әйбәт. Әмирхан Еники ҙә бында. Күп өйләй. Хәтере бик әйбәт. Бихисап кешеләрҙең исемдәрен хәтерләй.*

*Рәсүлгә шылтыраттым. Бик ҡыуанды. Өфөнән минең юбилейҙан бик риза булып ҡайтҡан икән. Шунан бирле өйләшмәгәнбеҙ, күрә ең.*

*уңғы йылдарҙа Муса бөтөнләй зарланмай тиерлек. Беренсенән, шөкөр, сәләмәтлеге насар уҡ түгел. Икенсенән, минән зар ишетмәгәс, ул да тыйыла. Уның менән еңел. Ипле, итәғәтле дуç. Икебеҙ ара ындағы мөнәсәбәттәрҙә яҙылмаған ҡағиҙәләрҙе — әҙәп нормаларын аҡлай белә. Юҡ, күрәләтә үҙен икенсе планға ҡуймай, барыбер ара аҡлай белә. Был мине лә билдәле рамкаға ҡуя.*

**21.II.95.**

*Ике көн яҙмаларымды дауам иттем. Кисә көтмәгәндә “Бабич өнө” тигән шиғыр яҙҙым. Күрә ең, күптән күңелдә йөрөгәндер. Мусаға оҡшаны. Өс кенә строфа. XX быуатҡа киңерәк характеристика биреп, уҙырға ла мөмкин булыр ине. Шыйыҡланыр, тип уйланым. Көтмәгәнерәк концовка килеп сыҡты. Шул еткәндер: “Егерменсе быуат мин ул...”*

**22.II.95. Переделкино.**

*Мир-Хәйҙәров ҡунаҡҡа саҡырҙы. Ул Ташкенттан ҡайтты. Йылҡы ите, ҡаҙы, затлы балыҡ килтергән. Табынды ул Ҡыҙыл Армия көнөнә атап ойошторған. Әмирхан ағай, Муса, мин булдыҡ. Өсөбөҙ ҙә фронтовиктар бит. Хужабыҙҙың был көндө онотмауы өсөн рәхмәтле булдыҡ. Ни әйт әң дә, фронтовик улы бит.*

**23.II.95.**

*Бер ирмәк хәл иçемә килеп төштө. абандан ҡайтҡан Мортаза ағайым тышта йыуына. Мин ыу ҡойорға ҡомғанды алдым. Йыуына башлағансы ул миңә: “Бар, Йәшнәйҙән орап (Кесе инәйҙе ул “Йәшнәй” ти) абын алып сыҡ”,— ти. “Нимә абын?”— тим. Был ҡысҡырып көлдө. “Балта абын”,— тине. “Балта-ы менән бергәме?”— тим. Төрлө ҡоралдарҙың абына — балта, бысаҡ, көрәк .б. абына — йыш тотонола. Йыуына торған абын керәçтиән бала ына мунсала ла теймәй. Үҙем дә иçәүән булғанмын инде.*

**25.II.95. Переделкино.**

*Төш. Келәштә ниндәйҙер ҙур тантана бара. Академиктар, артистар, меңәрләгән ҡунаҡтар йыйылған. Кемдер әйтте: “Мортаза ағайың ҡайтҡан. уғышта ғәйеп булғайны бит, бында тарих уҡыта”,— тине. Мин уны эҙләргә керештем. 1935 йылда үлгән ағайымдың төҫөн яҡшы хәтерләйем. Таптым. Ап-аҡ сәсле. 60-тар тирә ендә. Төҫө үҙенеке. Мине күргәс, бер кешенең артына боҫоп сүгәләне. Мин быны шәйләп ҡалдым. Ул баҫты. Нығытып ҡосаҡлаштыҡ. “Ниңә оҙаҡ ҡайтманың? Ҡайтҡас та хәбәр бирмәнең?”— тим. “Шулай тура килде, аҙаҡтан өйләшербеҙ әле”,— ти. Тағы ҡосаҡлаштыҡ. Ул минең арҡамдан өйә: “Эсең тулы хазина бит инең”,— ти. Бына шундай төш.*

**26.II.95.**

*Әле хәтирәләр яҙып ултырғанда бер нәмә иҫкә килеп төштө. Шәрғиә Сәфәре менән Ишбай күлендә балыҡ ҡаптырабыҙ. Август айы булғандыр, күрәең. Балыҡ ҡапмай. Мин күл урта ында йөҙөп йөрөгән бер пар өйрәкте күҙәтәм. Уйнайҙар, бер-бер артлы сумған булалар, бер-бере енә яҡын килеп, ыйынышалар. Арғы яҡта берәү, ҡамыш ара ында боҫа-боҫа, күл ситенә килде. Шунда уҡ атыу яңғыраны. Өйрәктәрҙең бере е осоп китте, икенсе е, ҡанаттарын йыя алмай, ыу өҫтөндә ҡалды. Шунда уҡ албыр ҡолаҡ ары эт имгәнгән өйрәкте хужа ына алып сыҡты. Хужа ы кем ти егеҙме? Беҙҙең Серсә мәхәллә енең мулла ы Муса хәҙрәт! Иҫтәрем китте. Мулла башы менән көпә-көндөҙ йән ҡыйып йөрөй. Бүтән кешеләрҙең мал уйғанын да күргәнем бар, ҡуян-төлкө атҡандарын да беләм. Сәрәндән Хәбибулла еҙнәбеҙ үҙе ҡуянсы. Ә Муса мулланан быны көтмәгәйнем. 10 йәшлек бала аҡылы ана шулай ҡаушап ҡалды.*

*Аҙаҡтан шуны аңлармын: кешелектең күпселегә йән ҡыйып туклана, ҡан ҡойоп ризыҡ таба.*

*... Ҡайтырға ни бары өс көн ҡалды. Ямғыр ҡатыш ҡар яуа. Сығып йөрөрлөк түгел. Яҙғаным байтаҡ булды. Килеүем бушҡа булманы.*

**27.II.95.**

*Әмирхан Еникиҙе Ҡазанға оҙаттыҡ. 86-ны тултырып кил ә лә, әле ныҡ күренә. Яман ыу булып ҡалды. Китер алдынан ҡыҙыҡ ҡына фекерҙәр әйтте: “Хәҙер инде йылдарҙы түгел, айҙарҙы ғына анап йәшәргә ҡала. Үлемдән ҡурҡмайым. Йәшәү теләге менән тормоштан биҙеү тойғо о типә-тиң булып тиңләште. Йәшә әм дә ярай, үл әм дә ярай”,— ти. Үҙе ике тапҡыр Мәскәүгә барып, йәйге костюм ҡарап йөрөнө. Ҡыйбат ынып алмай ҡайтты. Өҫтөндә бик әйбәт оро костюм, көҙ Өфөгә килгәндә лә өр-яңы ҡара-көрән костюм кейгәйне. Тимәк, әле битарафлыҡ уның рухына инмәгән. Был бик әйбәт. Әмирхан ағай әле егәрле, сәләмәтлегенә лә зарланмай. Йәне арығандыр, күрәең. Шуға күрә: “Йәшә әм дә ярай, йәшәмә әм дә ярай”,— ти. Былдай кәйеф ара-тирә миңә лә уғыла. Ҡартты аңлайым.*

*Беҙҙең вәкиллеккә өс тапҡыр шылтыраттым. Тамара Васильевна тигән секретарь: “Он занят”,— тип тик тора. Үҙемдең кем икәнемде аңлата алмай яфаландым башта. “Исемегеҙҙе яҙып ҡуйҙым: Мустай Каран”,— ти. Башҡортостан вәкиллегендә Мостай Кәримдең исемен дә белмәгәс, Ярлыҡаповтың помощниктары (ҡатын үҙен шулай тип танытты) Башҡортостан тура ында хәбәрҙәр түгел икән. Етмә ә: “Ниндәй йомошоғоҙ бар?”— тип орай...*

*Бына шулай, Мостай абзый, был иңә Өфө түгел, Мәскәү. Ә арттарына ыу кер ә, шундайҙар шунда уҡ миңә йүгереп килә: “Кәңәш бир, ағай, фәлән-фәсмәтән...”*

**9.III. 95. Өфө.**

*Әлфиә Мәскәүсә 13 сәғәттә Нью-Йоркка осасаҡ. Тимербулат уны ҡаршы аласаҡ. Бына заманалар! Ер ситенә барыуҙы бер нәмә урынына ла күрмәйҙәр. Кисә 8 Март менән ҡотлап Булат нәнә енә шылтыратты. Донъя яҡтырып китте. Переделкинола яҙып ҡайтҡан шиғырҙарҙы, эпиграммаларҙы Нәжиб Асанбаевҡа уҡыным. Үҙенә яҙылған эпиграмманы иң уңышлы ы тип тапты.*

***

*“Йәпләү” тигән үҙ бар. Ул — яйлау, рәтләү, самаға индереүҙе аңлата. Беҙҙең ауылда уның тағы бер мәғәнә е бар: “Фәлән ҡоҙа фәлән ҡоҙасаны йәпләгән икән...”*

**13. III. 95.**

*“Ағиҙел”дә булдым. Рафиҡов менән Гөлнур Яҡуповаға Переделкинола яҙып ҡайтҡан шиғырҙарҙы, эпиграммаларҙы уҡыным. Баҫырға тип алып ҡалдылар. Унан уң “Аҡбуҙат”ҡа индем. Сәй эстек, коньяк менән ыйланылар. “Аҡбуҙат-”тар бик ихластар. Ундай йылы мөхитте Факи а тыуҙыра инде. Уларҙан уң “Башҡортостан”ға киттем. Ғилемдар Рамазанов тура ындағы иҫтәлекте илттем. Тәлғәт Сәғитов баҫырға вәғәҙә итте. Йәнә “Бабич өнө” тигән шиғырымды ла ҡалдырҙым. Шулай итеп, донъя мәшәҡәттәре менән йөрөнөм.*

**14.III. 95.**

*Иртән сәғәт 8-ҙә Ирек Кинйәбулатов шылтыратты. Мин инде, бының башы ауырталыр, дауа кәрәктер, тип уйлар инем, тауышы бик борсоулы.*

*— Динис үлде бит, сәғәт унда Союзда йыйылабыҙ.*

*Төн эсендә китеп барған Динисебеҙ. Был фажиғә күптән аңдып йөрөй ине. Бына килеп уҡты. Союздан уң Рәйлә эрғә енә барҙым. Динистең иҫке бүркен күкрәгенә ҡыҫып илай: “Бөтә хаталарын ғәфү итер инем. Ғәфү итәм...”— ти. Кескәй ҡыҙы Миләүшә дүрт сәғәт өҙлөк өҙ илаған. Шулай ҙа был тиклем үк иртә көтөлмәгәйне был әжәл.*

**8. IV. 95.**

*4 — 6 апрелдә Көйөргәҙе районында, Рәшит Солтангәрәевтың тыуған яғында, булып ҡайттым. Район башлығы Рәил Әбдрәшитов күптән саҡыра ине. Әле 1990 йылда Татарстанда Башҡорт әҙәбиәте көндәрендә уның менән бер төркөмдә йөрөнөк. Әбдрәшитов шул саҡта уҡ минән вәғәҙә алғайны. Бына әле килеп шул вәғәҙәне үтәнем. Рәшит менән бергә барҙыҡ. Иҫ киткес матур ике көн булды. Дүрт ерҙә: Ермолаевкала, Күмертауҙа, Морапталда, Солтангәрәевтың тыуған ауылы Таймаҫта осрашыуҙар уҙҙы. 4-5 йөҙлөк залдарҙа халыҡ шығырым тулы булды. Унда кешеләр төрлө ауылдарҙан вәкилдәр булып килде. Күренеп тора, бында минең әҫәрҙәремде уҡып белгән халыҡ йыйылған. Уйлап ҡара аң, әр залда өс быуын кешеләре ултыра: балалар, атайҙар-әсәйҙәр, олатайҙар-өләсәйҙәр. Ошоларҙың бит әммә е тиерлек минең әҫәрҙәремде мәктәптәрҙә өйрәнгәндәр. Күҙҙәрендә — мөхәббәт, изгелек, яҡтылыҡ. Ике тәүлек эсендә бер тапҡыр ҙа зар үҙе ишетмәнем. Ихтирам ыҙ, сетерекле бер генә ораү ҙа бирмәнеләр. үҙ өйләгән кешеләр минең әҫәрҙәремде генә түгел, үҙемдең бөтә тормошомдо, ғаиләмде, балаларымды, хатта ейәндәремде белеүҙәрен күр әттеләр. әр йә әттән шул тиклем йомарт ҡунаҡ иттеләр. Тәүге төндө 4 сәғәт, икенсе төндө 5 сәғәт йоҡланды. Әммә арыуҙың әҫәре лә иҙелмәне. Әйткәнемсә, ике көндә дүрт тапҡыр ҙур сығыштар я аным. Рәшит әр ерҙә ике-өс үҙ әйтә торған булды. Яҡташтары өсөн минең күберәк*

*өйләүемде, күберәк шиғыр уҡыуымды ораны. Ул бит бында үҙен түгел, мине күр әтергә алып килде. Ҡай ы саҡта алабарманлыҡ күр әткән Рәшит был сәфәрҙә үҙен асылына хас аҡыллы әм юғары тотто. Тимәк, булдыра ала. Байтаҡтан бирле үҙемде бәхетле итеп тойғаным юҡ ине. Был ике тәүлектә бәхет татығандай иттем.*

**19. IV. 95.**

**Экспромт**

*Яҙыҡтарым үкенеүҙәр аша*
*Донъямды яңырта.*
*Әгәр шул булма а, был тормошта*
*Ни кәмей, ни арта?*

***

**Тәүбә**

*Әйтмәгеҙ: был аталыр, тип, сафсата.*
*уңғы шешәмде ыттым мин — Мостафа.*
*Хәмер миңә бынан ары мең харам.*
*Антты боҙ ам, буласаҡмын мин харап.*
*Әйткәндән ҡайтмам ис ҡасан, ис ҡайҙа.*
*Был антымды тапшырамын Хоҙайға!*
*(Антты аҡлау- аҡламау уның иркендә.)*

***

*Атайым инәйемә әйтә торғайны: "Аяғыңды шулай өйрәп атлама, ҡыштырҙатып баҫма",— ти торғайны. Ҡыштырҙатып баҫҡан инәйем 105-кә етте. Текә баҫып йөрөгән атайым 82-лә китеп барҙы.*

***

*Беҙҙең ауылда ғүмере буйы сабата кейеп йөрөгән Ғәбделәхәт бар ине. Бер саҡ толчоктан иҫке итек атып алып ҡайтты. Шуны кейеп йөрөй башлағас, ҡуҡырайҙы ла китте. Кешеләргә танау буйынан ғына ҡарай. Тегенең танау оҙон. Кисә генә үҙен әҙәмсә тотҡан бәғзе бер бәндә бәләкәс кенә түрә булып ал а, Ғәбделәхәткә әйләнә лә китә.*

**15. V. 95.**

*Был арала күп ваҡиғалар булды. Еңеүҙең 50 йыллығын билдәләнек. Бик күп осрашыуҙарға барҙым. Шулай ҙа байрам шатлығы күңелгә эркелеп тулманы. Беҙ бит бындай көндәрҙе күреү өсөн уғышып еңмәнек. Ельцин указы менән мине "За заслуги перед Отечеством III степени" тигән орден менән бүләкләнеләр. Ҡыуанысы шулай уҡ әллә ни булманы. Ниндәй Ватан, ҡай ы Ватан алдында? Шулай ҙа мин уны Ельцин бүләге итеп түгел, ә Рәсәй бүләге, Тыуған ил бүләге, Башҡортостан бүләге тип ҡабул ҡылдым. Алтын Йондоҙ ҙа — Брежнев бүләге, Ленин премия ы Черненко рәхиме түгел. Ә хеҙмәтемә — ба а.*

*Кисә Тимербулат шылтыратты. Экзамендарын әйбәт биргән. Бер айға эшкә ҡала икән. Бар аҡыл-зи енен аҡлап, шулай камиллаштыра бар а ине. Иң ҙур ҡыуанысым: Раузаның хәле арыулана. Алтмыш йыллыҡ ижади ғүмеремдә ҡулдан килгәне эшләнде, буғай. Ҡалған ғүмеремде Раузаны тәрбиәләп тотоуға арна ам да заяға булмаҫ. Ул миңә ирек бирҙе, рухымды быуманы. Күңел азатлығы менән ижад иттем. Йөрөр ерҙәремә йөрөнөм, күрер нәмәләрҙе күрҙем. Көнләшеп тә, ваҡлашып та йәнгә теймәне. Әммә өйрәтте инде. Мәҫәлән,*

*Мәскәүгә киткәндә әйтә торҙо: “ ин унда мәрйәләр менән сыуалып йөрөмә”,— тине. “Ярар, йөрөмәм”,— ти ең инде, анттар итмә әң дә...*

**17. V.95.**

*Үҙемсә бер күҙәтеү. Мин былай тәбиғәтем буйынса алдаҡсы түгелмен. Ҡулыма ҡәләм алып, әҫәр яҙа башла ам, алдаҡсы булам да китәм.*

**19.V.95.**

*“Ҡоролтайға ҡотлау” тигән шиғыр яҙҙым. Тура кил ә, шунда, Ҡоролтайҙа, уҡырмын.*

**24. V. 95.**

*Сегодня наш дворник хорошо объегорил меня. Дело было так. Собираемся на дачу. Выносим вещи. Наверху осталась одна тяжелая коробка с продуктами, на самом верху которой лежал батон деликатесной колбасы. Дворник вызвался спустить коробку. Он понес ее в машину, мы с Раузой остались сдавать квартиру. Спустившись, я механически захлопнул багажник. Он говорит мне: “Одолжите 5000 рублей до завтра”. Я вынул деньги, отдаю ему: “Угощаю тебя бутылкой. Ты хорошо убираешь”,— говорю. Приехали на дачу. Все хорошо. Нет только той колбасы. Дворник обзавелся хорошей закуской. Чтобы колбаса не осталась просто едой, а стала запкуской, он и попросил денег на выпивку. До того, как пойти ко мне наверх, мы довольно долго стояли вдвоем возле машины, и он ничего не просил. Колбаса соблазнила его. Виноват тот, кто положил ее на самое видное место.*

**30. V. 95.**

*Бөгөн сәғәт 12-лә “Ғәлиә” мәҙрәсә е бина ына Бабич хәтирә енә таҡташаш ҡуйҙыҡ. Рауил бик матур инеш үҙ әйтте. Асыуҙы Кәтибә менән миңә тапшырҙылар. Халыҡ күп түгел ине. Тимәк, хәбәр насар таратылған.*

**3. VI. 95.**

*Ҡоролтайға мине Шишмәнән айланылар. Иртән 10-да бөтәбеҙ ҙә барып теркәлдек. Беҙҙең делегацияны 21-се төҙөлөш тресы ҡарап, ыйлап, хөрмәтләп йөрөтөүҙе үҙ өҫтөнә алған икән. Өс тәүлек буйына ифрат ҡунаҡсыллыҡ күр әттеләр. Ҡоролтай беренсе июндә сәғәт унда Нефтселәр а-районда асылды. Бөтә е лә тантаналы, байрамса. Алға уҙып әйтәм: Ҡоролтайҙа бер төрлө лә ығы-зығы булманы. үҙҙә лә, аралашыуҙа ла, хеҙмәтләндереүҙә лә юғары кимәл булды. Ситтән килгән башҡорттарҙың күңелдәре бигерәк тә күтәренке ине. Күптәре менән осраштым, өйләштем. Минең әҫәрҙәремде байтағы уҡып белә. Хөрмәттәрен күр әтеп, миңә ыйыналар, бергә рәсемгә төшөргә тырышалар.*

*Ҡоролтайҙы Аҡназаров асты, тәүге үҙҙе Рәхимов әйтте. Минең “Милли дәүләт — ул милләттең йорто” тигән үҙҙәремде ҡабатлап китте. Мәскәүҙән килгән вәкилдәрҙән уң миңә үҙ бирҙе Аҡназаров. Ихлас ҡабул итте зал. үҙ өйләмәнем, Ҡоролтайға арналған шиғырымды уҡыным. Икенсе көндө секция ултырышы үтте. “Состояние духовности башкирской нации” тигән секцияға етәкселек иттем. Бында ла эшлекле, аҡыллы өйләшеү булды. Пленар ултырыштан уң Рәхимов ҡабул итте. Минең дә тост әйтеүемде оранылар. “Әүәлдән шулай килгән,— тинем,— телә ә ҡай ы ырыуҙың абруйын, данын уның батырҙары, оҫталары, сәсәндәре күтәргән. Әммә был ғына әле аҙ. Ырыуға хөрмәт күр әтеп килгән арҙаҡлы ҡунаҡтар — аҡыл эйәләре, дәрәжәле бейҙәр уға шө рәт өҫтәгән. еҙ, арҙаҡлы ҡунаҡтар, беҙҙең байрамыбыҙҙы*

*күтәрҙегеҙ, йорт-еребеҙгә дан өҫтәнегеҙ. Минең күреүемсә, бында иҫке дуҫтарыбыҙ ҙа бар, яңы дуҫтарыбыҙ ҙа байтаҡ. Иҫке дуҫлыҡ иҫкереп туҙма а, яңы дуҫлыҡ тора-тора иҫкер ен. Ҡунаҡтар өсөн!”*

*Сәғәт 6-ла Салауат әйкәле янында шиғыр байрамы булды. Унда төрлө районлар тирмәләр ҡорғандар. Мин Бөрйән, Әбйәлил, Йылайыр тирмәләренә инеп сыҡтым, ый-хөрмәт күр әттеләр. Әбйәлилдәр тирмә ендә ҡымыҙ эскәс, ошондай шиғри юлдар телгә килде:*

*Маҡтауымды дөрөҫләрлек*
*Миндә бик күп дәлилдәр:*
*Ҡунаҡсыл да, туғансыл да,*
*Йомарт та әбйәлилдәр.*
*Хатта бында килтергәндәр*
*Үҙ ыйҙарын, йорттарын.*
*Ҡоролтайҙы йәмләнеләр*
*Әбйәлил башҡорттары.*
*Өйҙәре лә бейектер, тим,*
*Ҡуйылыр өйрәләре.*
*Үҙҙәре зи енле булғас,*
*Башлылыр түрәләре.*

**3. VI.95.**

*Шишмә абантуйына килеп алдылар. Унда Ҡоролтай ҡунаҡтары ла саҡырылған. Мин, алданыраҡ барып, уларҙы Келәш сигендә ҡаршылаштым. Ҡаҙағстандан килгән башҡорттар — 7, Мәскәүҙән — 3, Омскиҙан, Төмәндән .б. ерҙәрҙән килгәндәрҙең бөтә е 20-гә яҡын ине. Район башлығы Ғәлимуллин, осҡон кеүек, бөтә енә лә өлгөрә, бөтә енә лә иғтибар күр әтә. Бында ла әр колхоз үҙенең йортон ҡорған, ихата ын кәртәләгән. ый-хөрмәт әҙерләнгән. “Дим” менән фермерҙар палата ынан башҡаларында әр ерҙә йыр-бейеү менән ап-айыҡ хужалар ҡаршы алып торҙо. Теге икәү ендә инде “шумел камыш” башланғайны. Келәштәр өсөн ояльдым. Туҡтамай, ҡунаҡтарҙы ары алып киттем.*

**6. VI.95. Дача.**

*Мин Сәғит Агишты бик йыш хәтергә алам. 1956 йылда мин Вьетнамда йөрөп ҡайтҡас, Союзға ағай-энене йыйып, йөрөгән ерҙәр, күргән илдәр тура ында өйләнем. ораүҙар булды. Сәғит ағай ҙа ораү бирҙе:*

*— Вьетнамда кәүҙәгә халыҡ ниндәйерәк: ереме, ваҡмы? — Үҙе буйға бәләкәй булған өсөн ҡыҙыҡ ынды, ахыры ы.*

*— Сәғит ағай,— тинем мин,— ин Вьетнамға барып сыҡ аң, торғаны менән бер бә леүән булып күренер инең...*

*Сәғит ағай, уйлап та тормай, былай тине:*

*— Улай а бармайым мин Вьетнамға. Бә леүәнлегемә күнегә алмай яфаланып бөтөрмөн. Мин кешеләргә эйелеп түгел, үрелеп ҡарарға өйрәнгәнмен.*

*Ни тиклем мәғәнә был шаярыуҙа!*

**7. VI.95.**

*Сахалинда ер тетрәүе тура ында көн дә өйләйҙәр. Ҡот осҡос фажиғә. Илдә фажиғәләр бигерәк күбәйҙе. Төрлө ө. Әле мин шуны уйлайым: Хоҙай ҡә әре был. Ни өсөн? Хәҙер, динде тергеҙәбеҙ тигән булып, бик күптәр ялған динсегә әйләнеп китте. Эстән иман ыҙҙар тыштан иманлы булып күренә. (Ата коммунист Ельцин сиркәүҙә шәм тотоп тора.) Хоҙай шуларға рәнйей. Ғөмүмән, ялғанлыҡ, ике йөҙлөлөк, хаинлыҡ, мөртәтлек күбәйҙе. Хоҙай шуға рәнйей. Ба-*

*шта рәнйей, түҙә, сабыр итә. Сабырлығы бөткәс, яза ебәрә — ер тетрәүҙәр, янғындар, ташҡындар, ыҙғыш-ҡырылыштар, ҡан ҡойоштар әммә е лә шул арҡала. Мин быларҙы Хоҙайға ышанғандан түгел, ышанам тип алдашмағаным өсөн яҙам.*

**9. VI.95.**

*Көн йылы. Сыуаҡ. Ҡоштар айрашып туймай. Кәкүк саҡыра. Ҡарлуғастар бала осора. Кисә матур ғына ямғыр яуғайны. Донъя бөгөн йәм-йәшел. Күңел дә күшекмәй. Бынан тап 57 йыл әүәл яҙған “Беренсе тамсылар” исемле шиғырым иҫемә килеп төштө. Уны А. Фетҡа эйәреп яҙғайным. Тәүҙә “Фетҡа эйәреп” тигән аңлатма ла бар ине. Хәҙер хәтерләмәйем, ҡай ылыр редактор ул аңлатманы алып ташланы, ләкин уның килтергән дәлиле иҫемдә ҡалған: “Нису иңә бер кем белмәгән, бер кем күрмәгән Фетҡа эйәреп йөрөргә,— тине.— Етмә ә, берәй баярҙыр әле. Комсомол башың менән шуға эйәрергә иңә ни ҡалған? Үҙең алдан барып, бүтәндәрҙе әйҙәргә тейеш ең ин. “Фетыңды” ыҙып ташла”. ыҙып ташланыҡ. Был турала онотоп йөрөнөм. Хәҙер иҫкә килеп төштө. Уңай - ыҙ булып китте, хилаф эш ҡылғандай иҙҙем үҙемде. Әле биш томлыҡты әҙерләгәндә төҙәтәйем дә тигәйнем, ҡул елтәнем. Шул тиклем ғүмерҙән уң төҙәтеү аңлашылмаҫ та. Хәйер, ул шиғырҙа Феттың шауҡымынан башҡа әллә ни юҡ. Шулай ҙа, “тегендә” барғас, үҙенән ғәфү орарға тура килер.*

**15.VII.95. Дача.**

*Гел ҡоролоҡ. Күңел ҡорғаҡ ырлыҡ ҡоролоҡ. Инде өсөнсө аҙна бында икенсе ҡатҡа менеп, ҡәләм тотҡаным юҡ.*

***

*Бер фекер, йәнә е. Беҙ кешеләрҙе бер-бере енә изгелек эшләргә саҡырабыҙ. Әгәр улар бер-бере енә яуызлыҡ күр әтмә ә, изгелек ҡылыуҙың хәжәте лә ҡалмаҫ ине. Рәнйетеү булма а, йыуатыу ҙа кәрәкмәҫ ине. Әйҙәгеҙ, әҙәм балаларын яуызлыҡтар ҡылмаҫҡа өндәйек! Ергә Хоҙай үҙе лә төрлө-төрлө бәләләр килтерә. Шунан кешеләр, бер-бере енә ярҙам күр әтеп, изгелек ҡыла, йәнә е...*

*... Кискә ҡаршы ямғыр ибәләй башланы. Өйгә инергә ҡурҡам, мин инеп кит әм, ямғыр туҡтар ымаҡ. Шул тиклем көттөрҙө был ямғыр. Ике-өс сәғәткә яҡын ибәләне. Үткәрә алмағандыр, шәт.*

**16. VII.95. Дача.**

*Тышта бик оҙаҡ йөрөнөм. уңғы ҡарағат, ҡурай еләге, сейә бөртөктәрен өҙөп ҡаптым. Сәйер уй килде: тағы бер йыл ыҙ мин уларҙы ағастарынан, ҡыуаҡтарынан өҙөп ала алмаясаҡмын... Назар Нәжми Еңеү байрамы көндәрендә Союзға ветерандар мәжлесенә йөрөмәй ине. Быйыл килде, минең эргәмә ултырҙы, саҡ ҡына эсте лә. “Быйыл килдем әле,— тине, бойоғоп.— Ихтимал, уңғы ы булыр”. Мин әле сейә емештәрен өҙгәндә Назарҙың анау үҙҙәрен хәтерләнем. Хәҙер инде ғүмерҙәр оҙон-оҙаҡ йылдар менән иҫәпләнмәйәсәк. Был хәл өркөтмәй ҙә, хафаға ла алмай. Донъяның фанилығы күптән мәғлүм инде.*

**31. VII.95.**

*Булат, мин, Сабир Шәрипов Белорет районында йөрөп ҡайттыҡ. Ихсан Түлебаев бик алсаҡ ҡабул итте. Гел беҙҙең менән йөрөнө. Бөтә ерҙә үтә ихлас ҡаршыланылар.*

*Сабир Шәрипов бик әйбәт юлдаш булып сыҡты. Ул үҙенең ик еҙ-сик еҙ ерен — Белорет районын биш бармағы кеүек белә. әр ҡалҡыулыҡты, әр түбәне, әр үҙәнде, әр шишмәне, әр уҡмаҡты, Ағиҙелдең әр боролма ын исемләп атай. Шуларға бәйле хәл-ваҡиғаларҙы өйләп бирә. Төрлө ауылдарҙа, төрлө төбәктәрҙә йәшәгән йөҙәрләгән кешеләрҙе исемләп телгә ала. Бына иңә йомоҡ Сабир! Сабирҙың заядлый балыҡсы икәнен ишеткәнем бар ине. Әле юл-*

*да килгәндә был хаҡта үҙ сыҡҡас, ул эре генә:"Булдырабыҙ уны!.."— тип кенә ебәрҙе. Ғәмәлдә хәлдәр бүтәнсәрәк килеп сыҡты. Булат менән икәү енә бер табалыҡ та балыҡ тота алманылар. Ошо уңай менән "Бәрҙе йыры" тигән мәҙхиәне яҙып, көнөндә үк Сабирға тотторҙом.*

## *Бәрҙе йыры*

*("Ашҡаҙар" көйөнә)*

*Иртә таңдан китте беҙҙең Сабир*
*Ағиҙелкәй буйына бәрҙегә,*
*Бәрҙеләргә китеп, бәжеп ҡайтты.*
*Ҡайҙан алыр икән кәр генә?*
*Ҡояш сығыу менән Ағиҙелдә*
*"Сабирым" тип бәрҙе ҡармайҙыр.*
*Күңелдәре бойоҡ Сабирйәнден,*
*Тамағына аштар бармайҙыр.*
*... Ағиҙелдә бәрҙе ҡармайҙыр.*

***

*Шәғәли-Шаҡмандың ҡәбере аҡланған Ҡа арман ауылында булдыҡ. Ҡәбер риүәйәт буйынса бында тип ҡабул ителгән. Әммә Шәғәли-Шаҡмандың тарихи шәхес икәнлеге, уның Рәсәйгә ҡушылыуыбыҙға юл алып йөрөүе раҫ. Тамъян ырыуының башлығы бей-кенәз ул. Бей ошо ерҙә йәшәп киткән. Шуға күрә ҡәбере лә бар. Беҙ күреп киткән Ҡа арман зыяратындамы, әллә бүтән төбәктәме — уны ы мө им түгел. Ҡа армандан башҡа ауылдар быға дәғүә итмәй. Тимәк, бәхәс тә юҡ. Башҡорт халҡының тарихи хәтере бик ныҡ уның.*

*Арыҫлан Мөбәрәковтың тыуған ауылы Ассыла булдыҡ. Бик йәмле төбәк икән. Тоҙло, асы ыулы шишмә бар бында. Шуға ауыл Ассы тип аталған. Мөбәрәковҡа арнап әйбәт кенә музей эшләнгән. Шуны ы сәйер: ауылдаштары уны бөйөк артист тип өйләп бармайҙар, яҡташтарына ящиклап араҡы эсергәнен тәмләп иҫкә алалар, ләкин ниндәйҙер эске йылылыҡ, кешелеклелек сифаттарына оҡланыу бик иҙелмәне. Ихтимал, хаталанамдыр. Был яҡтың кешеләре бик асылып бармай, сабырҙар. Ғөмүмән, мин был яҡтарҙа маҡтаныу, шәп булып ҡыланыу тойманым. Шунлыҡтан, моғайын, мәш үр яҡташтары менән ҡысҡырып маҡтаныу ғәҙәткә инмәгәндер.*

*Әлбиттә, За ир дуҫымдың Сермәнендә булдыҡ. Ауыл музейында уға арналған бүлмә бар. Бай ғына. Шул музейҙа минең pединститут буйынса абаҡташым Закир Вафиндың ҡыҙы Ләйлә эшләй икән. Вафинды мин " еҙ кәрәк" тигән хикәйәмдә лә ағынып иҫкә алып китәм. Ләйлә өйөнә саҡырып ҡунаҡ итте.*

*Янybай Хамматовтың тыуған ауылы Исмаҡайҙа шундай матур осрашыу булды. Бик йылы итеп ҡаршыланылар. өйләнем. Шиғырҙар уҡыным. Хамматов тура ында ла маҡтау үҙҙәре әйттем: " еҙҙең яҡтарҙы Хамматов әҫәрҙәре буйынса күҙ алдына килтерә инем. Тәки шулай булып сыҡты",— тинем. Ниңәлер ауылдаштары Янybай тура ында орашманылар, сәләм дә әйтеп ебәрмәнеләр.*

*Был ерҙә ҡыуанысым ишәйҙе. "Мин россиянмын", "Ҡайын япрағы тура ында" тигән шиғырҙарымды уңғы йылдарҙа башҡорттоң да, татарҙың да "милли патриоттары" телдән дә, яҙып та юҡҡа сығарырға, хатаға сығарырға тырыштылар, мине "урыҫлыҡта" ғәйепләнеләр. Бында и ә әр осрашыуҙа тиерлек мәктәп балалары шул шиғырҙарҙы яттан өйләнеләр. Тимәк, уҡытыусылар уларҙы балаларға өйрәткәндәр, ятлатҡандар. Тимәк, минең яҙғаным менән ризалар.*

*Шәғәли-Шаҡманды Рәсәйгә мөнәсәбәтем буйынса рухи бабам тип атаным. Мине “урыҫлыҡта” ғәйепләүселәр алдында Шәғәли-Шаҡман да яуап бирергә тейеш, уны ла хөкөмгә тарттырыу кәрәк. “Ну ка, Шагалика, отвечай! Зачем ты русским гулял?”— ти ендәр.*

*Тимербулатты ифрат яраттылар. Үҙен тотоуы ла, әйткән үҙҙәре лә, ҡылған ҡылыҡтары ла оҡшаны хужаларға. Шуға ла шатланып йөрөнөм. Сабир Шәрипов уға: “ инең менән айыу ауына барып була”,— тине. “Арский камень” тигән ерҙә бик уңайлы өйҙә йәшәнек. ыйланылар. Булат та, мин дә эсмәгәс, ауылдарҙа хужалар ҙа тыйылды булыр. Ғөмүмән, 6 көн эсендә иҫереп йәм ебәргән бер кеше лә күренмәне. Бында ла халыҡ эсә, әлбиттә, ләкин артыҡ күҙгә ташланмай.*

*Түлебаев миңә оҡшаны. Күпте белә. Фекер йөрөтөүе миңә ауаздаш. Ил, милләт, заман тура ындағы фекерҙәре миңә бик яҡын. “Бөтәбеҙ! Милләт бөттө! Ҡәбер ситендә торабыҙ”,— тип өрән алыусыларҙы күрә алмай. Халыҡты аҡлар өсөн ҡулынан килгәндең бөтә ен дә эшләй. Ер- ыуын, тәбиғәт байлыҡтарын әрәм-шәрәм итмәҫкә тырыша. Шул уҡ ваҡытта тауҙарына атланып ултырып: “Теймәгеҙ! Теймәйем! Тейҙермәйем!”— тип баҡырмай. Аҡыл әм сабырлыҡ күр әтеп, ер байлыҡтарын, тау хазиналарын файҙаланырға тырыша, ыңғайлы саралар, ысулдар, юлдар эҙләй, хәрәкәт итә.*

*Беҙ тағы Әүжән, Шығай, Үткел ауылдарында булдыҡ. Үткелдә арыҡ уйҙылар. Әүжәндәге балалар йортондағы таҙалыҡҡа, тәртипкә оҡланып киттем.*

**1.VIII. 95.**

*Күптән инде Рәсүл Ғамзатов тура ындағы төрлө ирмәктәрҙе теркәштергеләп ҡуйырға йыйына инем. Шуны эшләргә булдым. Беҙ уның менән 1947 йылда йәш яҙыусылар конференция ында таныштыҡ. Семинарҙа тикшергәндә уның талантлы шиғырҙары бөтәбеҙгә лә оҡшаны. 50-се йылдар башында нык дуҫлашып киттек. Шунан бирле араларыбыҙҙан ел дә үтмәне. 1958 йылда мин беренсе тапҡыр дуҫымдың тыуған ерендә булдым, унан уң да Дағстанға юлым төшөп торҙо. Уның ата ы йортонда ла ый күрҙем, төн төнәнем. Башҡортостанға ул ни бары 1969 йылда ғына килә алды.*

***

*Шул уҡ 1969 йылда хәмер затынан үҙем теләп баш тарттым. Ун йыл буйы ҡағиҙәмде боҙманым. Ул йылдарҙа Рәсүл, уның өсөн Патимат шул йә әттән яфа сигә ине. Патимат ирен өгөтләп, мине гел өлгө итеп ҡуйыр булды. Шуның арҡа ында дуҫымдың миңә ҡырын ҡарарға ла хаҡы бар ине. Белдермәне генә. Өгөтләй торғас, Патимат тегене күндергән. Рәсүл вәғәҙәләр биргән, хәнйәр үбеп анттар иткән, эсеүен ҡырт туҡтатҡан. Ҡапыл бер көн Рәсүлдән телеграмма килеп төштө. Бәлә-ҡаза булманымы икән, тип ҡурҡып киттем. Сөнки беҙ телеграф аша түгел, телефон аша ғына аралаша инек. Телеграмманы астым. Шундай текст: “Семь дней шел по твоему следу, на восьмой день споткнулся и упал. Тропинка не для меня. Обнимаю. Расул”.*

***

*Бер мәле Рәсүл Кремль больница ына ятты. Палата ында телефоны бар, борсолоп, хәл белергә шылтыратам быға. Дуҫымдың теле көрмәлә. Мин ҡойолоп төштөм. Әммә тауышы көр яңғырай. Тыныслана бирҙем.*

*— Нимә, тамағың шештеме әллә?— тип хафаландым.*

*— Юҡ, төшөрҙөм.*

*— Кем менән? Дуҫтарың килдеме ни?*
*— Юҡ.*
*— Яҡташтарың килдеме әллә?*
*— Юҡ.*
*— Дауалаусы врачың менәнме ни?—Ундай хәлдәр ҙә әүәлерәк була торғайны.*
*— Юҡ.*
*— уң?*
*— Бер үҙем.*
*— Бер үҙең, япа-яңғыҙмы?*
*— Япа-яңғыҙым.*
*— Нисек инде ул?*

***

*СССР Верховный Советына уңғы айлауҙарҙа төрлө ойошмаларға үҙ депутаттарын айларға хоҡуҡ бирелде. Мәҫәлән, КПСС-тың Үҙәк Комитетынан 100 депутат, Яҙыусылар союзынан — 20, Кино союзынан — 20 .б. .б. Яҙыусылар союзы буйынса үткәреләсәк 20 кандидат иҫәбендә мин 8-се урында инем. Икенсе тур алдынан мин самоотвод менән сыҡтым. Пленум ҡабул итмәне. Икенсе тапҡыр сыҡтым: “Мин инде етмеште ҡыуам. Йәштәрҙе айлайыҡ”,— тинем. Бара торғас, ризалаштылар. Рәсүл Дағстандан айланды. Билдәле булыуынса, Верховный Совет ығы-зығылы, тәртип еҙ, мәғәнә еҙ эш башланы, оят, әҙәп тигән нәмә юҡҡа сыҡты. Сессия барышында депутаттар әрләшәләр, төрткөләшәләр, бер-бере ен мыҫҡыл итәләр. Ошоларҙың бөтә ен дә телевизорҙан күр әтәләр. Залда ултырыусылар ара ында ара-тирә Рәсүл дә күҙгә салынып ҡала. Йөҙө бойоҡ, ҡарашы моң оу. Бындағы тамашаны ауыр кисерә, күрә ең. Бер көндө шундай телеграмма килеп төштө: “Из Москвы. Правительственная. Друг мой, ты мудрый человек. Завидую тебе. Гамзатов”.*

***

*Әле бик күп йылдар әүәл Рәсүл менән Мәскәүҙә Калинин урамы буйлап автомашинала китеп барабыҙ. Ленин китапхана ы тирә ендә ғәҙәттә министрҙар әм башҡа эре түрәләр йөрөй торған ҙур-ҙур ҡара машиналар теҙелгән.*

*— Нимә эшләп бында шул тиклем ҡара машина тора икән? Яҡындараҡ берәй төрлө йыйылыш микән ни?— тим.*

*— Бында Ленин китапхана ына төшкө тәнәфес ваҡытында ҙур начальниктар гәзит-журнал уҡырға, китап ҡарарға киләләр,— ти был.*

*Мин — бер ҡатлы, икелән әм дә, ышанам:*

*— Кит, әй. Ысынмы?*

*— Нишләп ысын булма ын, ти. Анау мөйөштә, Грановский урамында — Кремль ашхана ы (“Кремлевская столовая” тип атала икән). Шунда төшкөлөктө ашарға килгәндәр. Мин дә элек, гәзит уҡырға йөрөйҙәр икән, тип уйлай инем.*

***

*Әле ике-өс йыл элек кенә Переделкино ижад йортонда бер ҡатын: “Бер ҙә бирешмәгән егеҙ, Рәсүл Ғамзатович, аман матур ығыҙ”,— тине быға. “Элек мин йәш тә, сибәр ҙә инем. Хәҙер сибәрлегем генә тороп ҡалды”, — тине шағир.*

**2. VIII. 95. Дача.**

*Төйәләр тура ында телефильм ҡараным. Бер нәмәгә ҡабат-ҡабат хайран ҡалдым. Тәбиғәт бөтә тереклеген, бөтә йән эйәләрен үҙ өнәре менгән тыуҙыра. әммә йәнлектәр, ҡоштар, бөжәктәр тыуғас та йәшәү әләтенә эйә була. Ә әҙәми зат ғүмер буйы өйрәнә, ә белеп тыуған әйбере аҙ. Әйтәйек, әҙәм бала- ы ыуҙа йөҙөргә өйрәнә алмай яфалана. Төйә бала ы, мәҫәлән, аяғына баҫҡас та йөҙөп китә. Кешенең өйрәнергә ғүмере оҙон, ә бүтән күп йән эйәләренең — ҡыҫҡа. Шуға күрә тәбиғәт уларҙы өйрәтеп тыуҙыра.*

**6. VIII. 95. Дача.**

*Рауза бөгөн бик ауыр үҙ әйтте: “Мин бөтәгеҙҙе лә еләттем инде”,— тине. Сирле кешенең күңеле гел китек шул. Үҙ ҡулы менән күп эште башҡара алмағас, ҡулымдан эш килмәй, тип кәм енәлер, күрә ең. Ысынында ул бөтә эшкә ҡатнашырға тырыша, ә беҙ уны ситләштерәбеҙ, ҡыҙғанабыҙ, уның көсөн аҡ- ларға тырышабыҙ. Йыш ҡына: “Бар, ултырып тор. Бар, йөрөп кил”,— тибеҙ. Шуны ул үҙенән биҙеү тип аңлай, ахыры ы. Әлбиттә, элек тә гел ипле булмаған холҡо тағы ла ҡырҡыуланды. Зарланып әйтмәйем быны. Минең зарланыр урыным юҡ. Ҡалған ғүмерҙе ваҡлашмай ғына ослап ҡуйырға кәрәк.*

**6. VIII. 95.**

*Иртән тарттым ғүмеремдең тиҫбе ен,*
*Уйлап тормай ни булырын киске ен.*
*Хәҙер беләм, аңдый мине нимәләр:*
*Еп өҙөлөр ҙә ибелер төймәләр.*
*Еп ялғанмаҫ, төймә ҡабат теҙелмәҫ.*
*... Хоҙайҙың ис быға эсе өҙөлмәҫ.*

**24. VIII. 95.**

*1948 йылда минең “Цветы на камне” тигән йыйынтығымды тәржемә итергә Ленинградтан Келәшкә Михаил Дудин килде. Икенсе көндө иртә таңда инәй мине уята: “Тор әле, тор, ана, урыҫ дуҫың ҡоторған!”– ти. Торҙом. Миша бер ҡулы менән ҡолағын баҫып, ыңар аяғында икерә. Мин дә шомланып киттем. Баҡтыни әң, уның ҡолағына ҡандала ингән икән. икереп, шуны сығарырға маташа ҡунағыбыҙ. Бер аҙҙан теге бөжәк үҙе килеп сыҡты. Әллә ниндәй ҡараңғы соҡорҙа ҡалырға ҡандаланың башына тай типмәгән дә... Ингән, күргән, тикшергән, сығып киткән.*

**29. VIII. 95.**

*Ҡышын Переделкинола яҙып ҡайтҡан яҙмаларымды күсереп бөттөм. Табаҡ ярым сама ы булыр. Күсереп сыҡҡас, күңелем ҡайтты: “Нимәгә, кемгә кәрәк был?”— тигән ораy килде. Бәлки, күңел урынында булмауҙандыр (Булат киткәнгә ике аҙна, хәбәре юҡ), шулай тойолалыр. Бәлки, ысынлап та: кемгә кәрәк был хикәйәләр?*

***

*Ни өсөн бала тыуғас та илап ебәрә. “Тыуҙым бит!”— тип ҡыуаныуҙан түгел. “Үләм бит!”— тип ҡайғырыуҙан өрәнләй.*

**6. IX. 95.**

*Кисә Шәриф Бикҡолдо уңғы юлға оҙаттыҡ. Ул беҙҙән йәшерәк. Назарҙы күрҙем: “Бына шулай,— тинем,— беҙ ҙә китербеҙ. Нисек китәбеҙ? инең*

*менән араларыбыҙ ошо көйөмө?” Аныҡ ҡына яуап бирмәне. Флорида үҙгә ҡушылды: “Етер инде. Иҫәрләндегеҙ, бөт өн”,— тине. Рауза апа ын яратыуын әйтте: “Бер нәмәгә ҡарамаҫтан...”— тип өҫтәне.*

**9. IX. 95. Дача.**

*Минең тарафтан иң йыш үгелгән кеше — мин үҙем. Башҡортса ла, урыҫса ла үгенмәйем мин. Халыҡ-ара телдә бер генә үҙ әйтәм: “Идиот!” Уны ысҡындырыр өсөн сәбәптәр сығып тора. Әммә кеше алдында ысҡындырмайым. Үҙемә асыуым ныҡ кил ә лә тыйылам. Ышанып ҡуйыуҙарынан шөрләйем.*

**10.IX. 95.**

*Ниндәй генә гәзитте асып, ниндәй генә телеэкранға күҙ алма, гел йондоҙҙар тура ында өйләйҙәр. Сәхнә йондоҙо, эстрада йондоҙо, поэзия йондоҙо... Баҡ аң, йондоҙ тигәнең йыш ҡына сысҡан уты булып сыға. Ярым шәрә берәй туҙғаҡ баш йәки ҡатынша ир килеп сыға ла: “Йондоҙ! Йондоҙ!”— тип шаҡ ҡаталар. Шундай кешеләр бар: сәләм биргәндә күҙҙәрендә нур ҙа, тауышта-рында йылылыҡ та юҡ. Әйтер ең, улар телеграф бағана ы менән иҫәнләшәләр.*

***

*Кешеләр хәрефтәр төҫлө. Берәү “А”, берәү “Б”, берәү “Т”, берәү “И”... Улар алфавитта әр бере е үҙаллылығы менән ма айып тора. Ләкин бер-бере енә ҡушылма а, үҙ-мәғәнә сыҡмай. Беҙ — кешеләр ҙә — алфавиттағы хәрефтәр кеүекбеҙ. Кәрәк саҡта, кәрәк тәртиптә берләшмә әк, йәшәүебеҙҙең мәғәнә е булмаясаҡ. “А” хәрефенә ике “Л”, тағы бер “А” өҫтәлмә ә, бер шәүлә генә булып ҡаласаҡ. Шуларҙы бергә теҙ әң, “Алла” үҙе хасил буласаҡ.*

**14. IX. 95.**

*Лион Фейхтвангерҙың Иосиф Флавий хаҡындағы әҫәренең икенсе китабын уҡыйым. “Иудейскую войну” тигәнен элек уҡығайным инде. Быны ы — “Сыновья”.*

*Удивительна великая и трагическая судьба Иосифа. Великий еврейский писатель, историк, римский всадник-дворянин второй категории. Душою — еврей, делами — римлянин. Одни ненавидят его за дела, другие — за душу. Это — не раздвоенность его, а судьба его — трагическая и блестящая. Читая про Восток и Запад древности, вернее, про Иудию, Египет, Грецию, Рим, Скифию, я прихожу к мысли, что римляне не любили (хотя почитали) греков за образованность, греки в свою очередь не любили римлян за их могущество, греки и римляне относились свысока к евреям за их талант, а все трое пренебрежительно смотрели на египтян за их благородство и изящество.*

*Евреев я не могу назвать целиком умной нацией. Самое большое количество пустых мечтателей на душу населения, наверное, среди евреев. Иудейскую войну проиграли они из-за отсутствия трезвого расчета. Расчет — это прозорливость ума. В то же время они — нация талантливых людей, только отчасти — и умных людей. Принято думать, что евреи расчетливы. Да, они умеют считать. Особенно в житейском плане. Но это еще не есть предвидение.*

* * *

*Если правители и политики будут строить заборы между странами, то поэты должны прорубить хотя бы лазейки, коли они не смогут предотвратить деяния правителей.*

***

*“Дела проходят, легенды остаются. А легенды создают новые дела”. (Л. Фейхтвангер. “Сыновья”).*

***

*“Величие и история нации умножают только силу того, кто силен от природы, но слабому она (нация) помочь не может. Если слабый хочет опереться на нацию, она оказывается обманчивой опорой, а неразумное чванство ее силой — только лишает его понимания собственной слабости”. Так сказал еврейский мудрец “о смысле и бессмыслице” национализма. Будто сказано сегодня. И еще: “Народ значителен историческими личностями, ставшими легендами, а не легендами — мифами, плотью чистого воображения”.*

**18. IX. 95.**

*Мине Яҙыусылар союзына 1939 йылдың февралендә алдылар. Егермем дә тулмағайны. Беҙҙең быуын — күмәк инек. Өлкәнерәктәрҙән — Мәлих Харис, Вәли Нафиҡов, Назар Нәжми, Яҡуп Ҡолмой, Зиннәт Ҡотип, кесерәктәрҙән — Ғәли Ибраимов, Рәйес Ғабдрахманов, Кәтибә Кинйәбулатова, Фәүзиә Рәхимғолова, Сабир Кинйәкәй... Шулар араһынан бер мине айырып алдылар. Моғайын, “шағир” тигән төшөнсәгә яҡыныраҡ булғанмындыр. Күрә ең, шиғыр яҙған өсөн генә түгел, шағир булырға өмөтө бар кешене Союзға тәҡдим иткәндәрҙер. Әммә ул саҡта ла, хәҙер ҙә үҙемде, иң шәп булғанмындыр, тип уйламаным.*

*Парадокс булһа ла, әйтәйем: минең ижадымды ҡабул иткән кешеләр генә түгел, миңә ҡырын күҙ менән ҡараған әҙиптәр ҙә миңә ярҙам итте. Беренселәре мине дәртләндерҙе, икенселәре сәмләндерҙе. Икенселәре рәтендә Зәйнәб Биишева менән Әнүәр Бикчәнтәевҡа мин ихлас рәхмәтлемен. “На то и щука, чтобы карась не дремал...”*

**21. IX. 95.**

*Бар ине бит йондоҙ сөйгән саҡтар,*
*Сысҡан уты табыр әмәлем юҡ.*
*Тимер өҙҙөм, тип әм, таштар ярҙым.*
*Ҡыл өҙөрҙәй генә хәлдәрем юҡ.*

**26. IX. 95.**

*В суверенитете наше счастье, но счастье наше не может быть суверенным.*

**26. IX. 95.**

*Илгиздең бәләкәй саҡта урамда өйрәнеп ҡайтҡан йырҙарын Рауза әле лә хәтерләй:*

*Беҙ бәләкәй саҡтарҙа*
*икереп мендек аттарға,*
*Ағай үлеп, еңгә ҡалһа,*
*Ебәрмәбеҙ яттарға.*

*Ә был йырҙы уға 1946 йылдың декабрендә, мин отпускыға ҡайтҡас, Келәшкә ҡунаҡҡа килгән Баязит Бикбай өйрәтте:*

*Арғы яҡтан берәү килә*
*Аҡ шарыфын төшөрөп,*

*Кисә көттөм, бөгөн көттөм*
*Бауыр аҡтар бешереп.*

*Әлфиә и ә 5 йәшендә:*

*“Йәш наратҡа өйәлеп көтәм ине...”— тип башланған йырҙы үҙенсә төҙәтә ине: “Йәш Маратҡа өйәлеп көтәм ине...”— тип. Нараттың ул нимә икәнен белмәй, Маратты белә. Ике туған аға ы ул Марат.*

**22. IX. 95.**

*1968 йылда Истамбулдан Невзат Үстүн тигән шағир ҡатыны Шөкрән менән миңә ҡунаҡҡа килде. Өфөлә лә, дачала ла йәшәнеләр. Мөмкин тиклем Өфөнө, Башҡортостанды күр әтергә тырыштым. Туймазы яҡтарынан да йөрөп ҡайттыҡ. Үҙем рулдә инем. Ҡайтыр юлда Ҡандракүл буйында хужалар бик матур табын ойошторҙолар. Мин самаламайыраҡ эстем, буғай. Төндә ҡайтып еткәс, дачала имән төбөнә ултырып алдыҡ. Ҡатындар өйҙә. Невзат төрөксә өйләй, мин татарса (татарса еңелерәк аңлай). Аңлашабыҙ. Ул борсолоп үҙ башланы:*

*— Тура ын әйтәм, дуҫым, ин мине хафаға алдың. Күп эсә ең. Үҙеңде харап итеүең бар. Әгәр Симонов йәки Твардовский шулай эшлә ә лә әйбәт түгел, әммә борсолоуым ул тиклем булмаҫ ине. Бөйөк рус әҙәбиәтендә бөйөк яҙыусылар күп булған, әле лә бар улар. Башҡорт әҙәбиәтендә бөгөн инең урының юғары, бәлки, иң юғарылыр. Халҡың да ярата. Быны үҙем күрҙем. Үҙеңде исраф итергә хаҡың юҡ инең. Руста индәйҙәр күп, ә башҡортта ул тиклем байлыҡ юҡтыр. Ҡунаҡ хужаның өрөп торған этенә лә тел тейҙерергә тейеш түгел. Мин иңә йөҙгә-йөҙ килеп әйтәм. Сөнки ин минең өсөн хужа ғына түгел — яратҡан дуҫым.*

*Ҡунағым ошо ғәмдәрен белдерҙе. Хатта ҡатыраҡ та, әсерәк тә әйтте, буғай. Үҙәккә үтерлек итеп әйтте. Мин ҡапыл тайшанып ҡуйҙым. Өҫтөмә бынау йөҙйәшәр имән ауа башланы, шикелле. Ҡаршы әйтмәнем. Аңым яҡтыра төштө. Йәнемде сәнсеү алды. Был кеше мине нык яҡын күрмә ә, миңә әсе хәҡиҡәтте әйтеп, үҙен ғазапламаҫ ине былай.*

*Әйткәндәрен йомшартмаҫ өсөндөр инде, ул бүтән әңгәмәгә күсмәне. “Арытты, йоҡлайыҡ инде”,— тине лә тороп китте.*

*Иртәгә ен дә, уңыраҡ та төнгө өйләшеүгә, төнгө битәргә әйләнеп ҡайтманы. Мин и ә ҡаты абаҡ алдым. Кемдән бит әле — осоп ҡына килгән ҡәҙерле ҡунағымдан. Ярты йыл сама ы уҙғас, “ҡоро закон” ҡабул иттем. Невзат өгөтө арҡа ында ғына түгел, әлбиттә. Ләкин имән төбөндәге киске сәғәт минең хәтеремә нык еңде. 10 йыл буйы закон көсөндә ҡалды. Шунан уң ғына сабырлығы өсөн нәфсемде ирәк-мирәк ыйлаштырғылай башланым.*

*Невзат менән уңғы осрашыуыбыҙ өс йылдан уң Мәскәүҙә булды. Улар Шөкрән менән Швециянан ҡайтып киләләр ине. Ул миңә йәшел фуфайка бүләк итте. Күп тә үтмәне, Төркиәнән яман хәбәр килде. Истамбулға ҡайтҡас, Шөкрән менән автомобиль авария ына эләккәндәр. Невзат әләк булған, Шөкрән бик нык имгәнгән. Үстүндең әле илле е лә тулмағайны.*

*... Имән тағы 29 йәшкә олоғайҙы. Ана, ул япраҡтарын ҡоя. Бер мәле ошо имән төбөндә ишле табында ултырғанда берәү, миңә оҙон ғүмер теләп, тост әйтте.*

*— Рәхмәт. Борсолмағыҙ. Мин ошо имән ауғансы йәшәргә иҫәп тотам,— тип яуапланым.*

*Алдағы ҡыш үтә зә әр килде. Имәндең олоно сатнаны. Йәй урта ында ҡай-ы бер ботаҡтары ҡороно, ярылған ҡабыҡ аша, яранан аҡҡан ҡан ымаҡ, ут*

*арҡып торҙо. Икенсе йылды ағас оторо хәл еҙләнде. Кейәүем Олег, белгән кешеләрҙән кәңәш алып, имән олонондағы ярыҡты буйҙан-буйға цемент менән яманы. Был хаҡта беҙгә белдереп тә торманы. Теге тосҡа яуап итеп әйткән үҙемде онотҡанмын. Ә Олег уны күңеленә еңдереп ҡалған, ағас бәләгә тарығас, ныҡ борсолған. Байтаҡ ҡына көслө ботаҡтарын юғалт а ла, имән әле ышаныслы баҫып тора. Яраларын сыҙамлыҡ менән уҙғарҙы.*

**10. X. 95.**

*Кисә төштән уң Ҡазанға остом. Унда Ғариф Ахуновтың 70 йыллығында ҡатнаштым. Ҡотлау үҙе әйттем. Бөгөн иртән Шәймиев менән бергә уның самолетында Өфөгә ҡайттым. Ул беҙгә ҡунаҡҡа килде. Сәғәт дүрттә республика үҙаллылығының 5 йыллығына арналған тантана башланды. Мин дә сығыш я аным. Рәсәй Премьер-министры В. С. Черномырдин килгәйне. әйбәт тәьҫир ҡалдырҙы. Кисен банкет я анылар. Рауза гел эргәмдә булды.*

**17. X. 95.**

*Йәштәр театры "Салауат"ты ҡуя. Бөгөн уңғы репетицияны ҡараным. Азат Нәҙерголов үҙенсә ҡуйған. Тамаша ифрат оҡшаны. Ваҡ-төйәк ҡытыршылыҡтары бар. Төҙәтер әле. Спектакль бер мәғәнәгә йүнәлтелгән — Салауаттың эске донъя ын асыу, аңлау әм аңлатыу.*

***

*Кисен Ғафури театрында Флорид Бүләковтың "Бибинур, ах, Бибинур"ын ҡараным. Тәүҙә ауырыраҡ ҡабул ителде. Әммә әҫәр бик үҙенсәлекле, ҡуйылышы — хәтәр талантлы. Исрафилов, шайтан, рәхәтләнгән: ҡушҡан, айырған, әүәләгән, сүпләгән, әллә нимәләр ҡыландырған, ахырҙа шаҡ ҡатырлыҡ спектакль килтереп сығарған. Минең эстетик ҡараштарыма тура килмәгән әйберҙәр ҙә бар. Бул ын. Мин бит берҙән-бер бизмән түгел. Был сезон асылыу көнө ине. Тәүҙә сәхнәгә артистар сыҡты. уңынан драматургтарҙы сығарҙылар. Асанбаев, Атнабаев, Сафин, Богданов, Байбулатов, мин теҙелеп баҫтыҡ. Асанбаев, Атнабаев, мин ҡотлау үҙҙәре әйттек. Әнғәм миңә арналған шиғырын уҡыны. Алдан былай тине: "Был шиғыр, Мостай ағайҙың 75 йәшенә арнап, былтыр яҙылғайны. Сирле булыуым сәбәпле, ул саҡ халыҡ алдына сығып уҡый алмағайным, хәҙер шуны уҡыйым".*

**22. X. 95.**

*Ғалимдарын танымаған халыҡтың зи ене томаланыр, йырсыларын тыңламаған халыҡтың ҡолағы аҡбайланыр, рәссамдарын тамаша ҡылмаған халыҡтың күҙе уҡырайыр, ә шағирҙарын анға уҡмаған халыҡтың зи ене лә томаланыр, ҡолағы ла аҡбайланыр, күҙе лә уҡырайыр әм өҫтәүенә – йөрәге туңып, боҙға әйләнер.*

***

*Часто говорят: "Человек с большой буквы". Человек-то есть, а где взять большую букву? Большие буквы давно разобраны.*

**24. XI. 95.**

*"Российская провинция" тигән журнал өсөн "Башкортостан, который во мне" исемен ҡуйып мәҡәлә яҙып яфаланам. Элек нимә яҙ ам да, күҙ алдымда уҡыусыларым тора ине. Хәҙер уларҙы ҡыйын төҫмөрләйем. Үҙемә үҙем өндәшеү кеүегерәк килеп сыға.*

***

*Ҡарттар ике сәбәптән төндәрен насар йоҡлай. Берәүҙәр әүәлге гона тарын уйлап үкенәләр, икенселәр ҡылған сауаптарын уйлап ҡыуаналар. Шунан йоҡолары ҡаса.*

***

*Алексей Кольцовты бик әҙ кеше уҡый, бөтә илдә мәктәптәрҙә өйрәнелә, Расул Ғамзатовты бөтә ил уҡый, мәктәптәрҙә әҙ өйрәнәләр. Поэзияны тик туған телдә генә өйрәнеп булалыр шул.*

**21. XII. 95.**

*Эстәрлегә сығыш я арға барҙым. Әхмәр Үтәбай оҙата йөрөнө. Осрашыу бик матур үтте. Бүләк итеп биҙәкле самауыр бирҙеләр. Иртән беҙ тормаҫ борон уҡ ҡунаҡханаға бер ҡатынҡай килде. “Кисә  еҙгә самауыр бүләк иткәйнеләр, шуны “алдым” тип бынау ҡағыҙға ҡул ҡуйығыҙсы”,— ти. Мин аптырап ҡалдым. Быгаса бер бүләкте лә имза ҡуйҙырып бирмәйҙәр ине. Самауырҙарын кире биреп ебәрҙем. Әхмәр генә мәхрүм булып ҡалды. Миндә самауырҙар күп, быны ын уға бирермен, тип уйлағайным.*

*Төн буранлы ине. Йоҡо килмәй торҙо. Ошо юлдарҙы  ыҙғылап ташланым.*

*“Эстәрлекәй ҡала — сәхрә-дала”.*
*Шулай йырлай ине ағайым.*
*Был буранлы төндә Эстәрлелә*
*Күңелдәрем ҡалды  ағайып.*

*“Ашҡаҙарҡай буйына шәшкегә...”— тип*
*Зар моңая булған  өйгәнем.*
*Был буранлы төндә Эстәрлелә*
*ағыштарҙан рәхәт сигәмен.*

*Торатауға менеп бер йырлармын:*
*— Эстәрлекәй, ҡала, Эстәрлем.*
*Килке-килке ине  ағыныуымдан*
*Бушамаҫ та инде эстәрем.*

**1.I. 96.**

*Был Яңы йылды Әлфиә еҙ ҙә, Булат ыҙ ҙа ҡаршылайбыҙ. Әлфиә Америкаға улына ҡунаҡҡа китте. Нәк 12-лә Булат шылтыратты, Әлфиә лә  өйләште. Йәндәребеҙ тағы бергә йыйылды. Ҡыуаныстан өй тулып китте.*



Фәнил
КҮЗБӘКОВ

# “ХУШЛАШЫУҘАР ҠЫЙЫРСЫҠ АЙ ИКӘН...”

## Ҡараның бер ирпелеп*

Ҡараның, бер ирпелеп, –
Осто хыял елпенеп;
Ниндәйен был мөғжизә?! –
Тауҙар торған икереп.

Ҡушымта:

Алтын нурға мансылған
Йондоҙ яуа эркелеп;
Сихри илгә саҡырып,
Ҡараның бер ирпелеп.

Үҙәндәре үҙгәргән, –
ыуҙар аға елкенеп;
Күк ҡабағы асылған, –
Ҡанат ҡына елперлек.

Ҡушымта.

Йәйғорҙай юл тартылған –
Офоҡтарға илтерлек.
Йөрәккәйгә ут ҡапҡан –
Ғүмер буйы өтөрлөк!

Ҡушымта.

*Риф Арыҫлан көйө.

*Фәнил Күзбәков Мәләүез районының Әбет ауылында тыуған. Урал университетын тамамлай. Филология фәндәре докторы. Әлеге көндә Башҡортостан мәғариф үҫтереү институтының ректоры булып эшләй.*

## иңә*

*Ҡайындарҙың алҡа суҡтарын*
*Бүләк итәм иңә.*
*Сәскәләрҙең ҡаҡмай (ы)сыҡтарын*
*Килтергәнмен иңә.*

*Ҡушымта:*

*Был донъяның барса тылсымын*
*Бүләк итәм иңә.*
*Йөрәгемдең ҡанса йылы ын*
*Бүләк итәм иңә.*

*Ал таңдарҙың тәүге нурҙары –*
*Улары ла иңә.*
*андуғастың сыңлы моң-зары,*
*Арбауы ла иңә.*

*Ҡушымта.*

*Яҙмышымды – Хоҙай бүләген*
*Бәйләгәнмен иңә.*
*уҡмаҡтарым – йөрәк ҡылдарым*
*иңә илтә, иңә!*
*Ал, йәнем!*

*Ҡушымта.*

## Хушлашыуға булмай күнегеп*

*Хушлашыуға булмай күнегеп –*
*Телгеләнә генә йөрәгем.*
*Осрашыуға бәйле өмөттәрҙе*
*Күңел түрҙәреңә төр, йәнем.*

*Ҡушымта:*

*Яңғыҙ ҡалған тәүге минутта уҡ*
*Юлға сығам ине ағынып…*
*Ҡаршы йүгерә ең төҫлө, иркәм,*
*өйөү шәмдәлдәрен ҡабыҙып.*

*Шул шәмдәлдәр йондоҙҙарҙай балкый,*
*Төндөң ҡараларын ағартып.*
*Шул шәмдәлдәр усаҡтарҙай яна,*
*Ҡуйы томандарҙы таратып.*

*Ҡушымта.*

*Хушлашыуҙар ҡыйырсыҡ ай икән –*
*Осрашыуҙар – яныр ҡояштыр.*
*Офоҡ арттарында ярты йәнем…*
*Хаҡ Тәғәләм!*
*Беҙҙе осраштыр!*

*Ҡушымта.*

---

*Риф Арыҫлан көйө.

## *Хоҙай ине – фәрештә ен...**

Рәйсәмә – берҙән-беремә

*ин, тип яндым,*

*ин, тип көйҙөм, –*
*иңә арналды ғүмер.*
*Көлгә әйләнгән мәлдә лә*
*Был йөрәк “ ин” тип тибер.*

*Ҡушымта:*

*Хоҙай ине – фәрештә ен –*
*Ергә нисек ебәргән?!*
*Йәшәүҙәрең йәннәткә тиң*
*өйгән- өйөлгәндәрҙән.*

*Ожмах баҡса ына юлды*
*Ғашиҡтар ғына табыр.*
*Улар өсөн балдар тамыр,*
*Йондоҙҙай алма яуыр.*

*Ҡушымта.*

*Яҙмыш беҙҙе ҡауыштырҙы*
*Атканда өйөү гөлө;*
*Нурҙар эсеп асылғанда*
*Яланда сәскә теле.*

*Ҡушымта.*

*Рәхмәтлемен яҙғанына,*
*Яҙмышыма – мең шөкөр!*
*Инде, Хоҙай, шәфкәтеңде*
*Балаҡайҙарға еткер...*

*Ҡушымта.*

## *өйөү – өйөлөү***

*Туй күлдәге аҡтан була,*
*Теләктәр пактан була.*
*Ғүмерҙәрҙең алдағы ы*
*Шау өмөттәргә тула.*

*Ҡушымта:*

*Йәшәүҙәрҙең мәғәнә е –*
*өйөп- өйөлөүҙәлер,*
*Берҙән-берең,*
*йәрең өсөн*
*Үлеп терелеүҙәлер,*
*Мәғәнә е йәшәүҙәрҙең*
*өйөп- өйөлөүҙәлер.*
*өйөп- өйөлөүҙәлер...*

---

**Риф Арыҫлан көйө.*
***Вернар Семенов көйө.*

*Туйҙар уҙа, йылдар уҙа, –*
*Аҡ күлдәктәр ҙә туҙа.*
*Гөлләмәләр урынына*
*Тормош сәнскәген уҙа.*

*Ҡушымта.*

*Ҡулдарыңды ғына түгел –*
*Күңелеңде яралар.*
*Ысын өйөүҙәрең генә*
*Яраларҙан аралар.*

*Ҡушымта.*

***

Ҡатын кеше генә
Асылмаҫ сер...

Мостай Кәрим.

*Ҡатын-ҡыҙҙың барса ында барҙыр*
*Йылмайыуы Мона Лизаның.*
*Йылмайыуға серен төргән ҡатын –*
*Серҙәр серелер ул донъяның.*

## *үҙ тылсымы*

Йомабикә Ильясоваға

*Йомабикә, йома көндө тыуған ыңдыр,*
*Биттәреңде таң нурында йыуған ыңдыр.*
*Ата-әсәң юрағаны юш килгәнгә*
*Хоҙай онған яҙмышыңдан уңған ыңдыр.*
*Әле инең ҡанат ҡағыр сағың ғына,*
*Наҙға тулы ҡарашыңда күк сағыла.*
*Үтәләйгә күренмәле зәңгәрлектән*
*үҙ тылсымы яралдырған моң ағыла.*
*Ағылыр моң, йөрәктәргә ул яғылыр, –*
*Ысыҡтай саф күңелдәрҙә ул яңырыр!*

## *Ирек ба а ы*

*– Ҡайҙа ғына ашыға ың, ҡырмыҫҡа?*
*– Мәшәкәттәр етерлек бит тормошта...*
*– Билеңде лә биштән ҡыҫып быуған ың?*
*– Хоҙай эше – шулай булып тыуғанмын...*
*Ә үҙеңдең күрәм: ҡайыш бушаған...*
*– Аҙна ына бер ысҡынам ҡоршауҙан.*
*– Уны иңә кем билеңә ала уң?*
*– Үҙем...*
*Шулай бәндә татый ирек ба а ын!*

# *Морон**

*Тәрән ятыулы Морон –*
*ыу инә торған урын.*
*Йәшел хәтфә яр башында*
*Ҡоролор ине уйын.*

*Сағыу ҡояшлы мәлдәрҙә,*
*Иртәнән кискә ҡәҙәр,*
*Тупыр-тупыр итеп ҡалған*
*Ялан аяҡлы йәйҙәр.*

*Йөрәк еп тә ҡайттым бына –*
*Күҙҙәрем томаланған.*
*Былмы минең аҫау йылға*
*Йәшлектән юрғалаған?!*

*Текә ерҙәрен өҙәкләп,*
*Тәпәшәйткәндәр ярын.*
*Сырамытып ҡына киләм:*
*Ҡайҙа ыу ингән урын?*

*Бер ыныҡ икмәк бүлешкән*
*Таҡыр башлы дуҫтарым!*
*Килегеҙсе, эҙләшегеҙ*
*Бала саҡ усаҡтарын.*

*Ҡайҙа беҙҙең тәрән ятыу –*
*Буйлап буйҙар етмәгән?*
*Күпме-күпме сер сиселгән, –*
*үҙ өйләнеп бөтмәгән!*

*Ҡайҙа минең ыу ылыуым,*
*Ҡайҙа инең Миң ылыу?*
*ылыуҙар ыу сайпылтканда,*
*ин ҡыйыу ҙа мин ҡыйыу!*

*Ҡайҙа ығыҙ?!*
*Арғы ярҙан*
*Ҡайтауаз ғына яуап.*
*Ваҡыт-дарья*
*ис бер ниҙе*
*Тормаған икән аяп,*
*Тормаған икән аяп...*

---

**Нөгөш йылға ы буйындағы Әбет ауылы бала-саға ының иң яратҡан ыу ингән урыны ине заманында.*

## Бит алмаң соҡорҙарында

*Бит алмандағы соҡорҙо*
*Суп итеп үпкәйнем бит.*
*Күҙең йомоп, онотолоп,*
*“Йәнә!” – тип көткәйнең бит.*

*Күктәрҙең ете ҡатына*
*Мин шул саҡ еткәйнем бит.*
*Йондоҙҙар тиреп биргәнде*
*ин Ерҙә көткәйнең бит.*

*Ете тауҙар, ете диңгеҙ,*
*ин тип, мин кискәйнем бит.*
*Сабырлығың ис юймайса*
*ин ярҙа көткәйнең бит.*

*Бит алмаң соҡорҙарында*
*Ғинуар ҡары ирене.*
*Ылыҫтанмы, әллә күктән*
*Аҡыҡ, ынйы түгелде.*

*Бит алмаң соҡорҙарында*
*Таптым йондоҙ балҡышын.*
*айлап алған яҙмышым ин,*
*Хыялдағы табышым…*

***

*Кеше булып ҡалыр кәрәк нисек тә –*
*ыйма аң да ҡай ылыр бер ишеккә.*

***

*Эй-й, Ила ым!*
*Әгәр ин булма аң,*
*Кемгә генә,*
*кемгә ығынырмын?!*
*Бәғерҙәрҙе сәмреғоштар суҡығанда,*
*Бары иңә,*
*иңә генә*
*ыйынырмын…*

## Яҙған ризыҡ

Оҙайлы юлға сыҡҡаныңда ҡабып
Бөтмәйенсә өйҙә ҡалдырған ризығың
Иҫән- ау ҡайтыуыңды теләп торор.

*(Юрамыштан.)*

Яҙған ризыҡ теш ындырып бул а ла инер.

*(Халыҡ әйтеме.)*

*Әрмеләргә тиеп киткәнемдә*
*Өшәкәйҙе, әсәй, тешләттең.*
*Ҙур өлөшөн,*
*Ҡулъяулыҡҡа төрөп,*
*андығына алдың келәттең.*

*Юлдар илтте төньяҡ диңгеҙгәсә,*
*Дөмдәй ҡара поляр төндәргә.*
*Аҡ өмөттәр була күңелдәрҙә,*
*Ил бурысы була иңдәрҙә.*

*Флот макароны тәм еҙ, тиеп*
*Әйтә алмам…*
*Телем әйләнмәҫ!*
*Тик барыбер өшәкәйгә етмәҫ, –*
*Сәңгелдәктән уны тәмләгәс.*

*Ғилем тигән Ҡаф тауҙарының да*
*Ватҡыланым ҡайраҡ таштарын.*
*“Тешең үтә…” – тине уҡытыусым,*
*Башын ҡаҡты арҡаҙаштары.*

*Ете диңгеҙ кисеп, тауҙар ашып,*
*Ризыҡтарын татып еткелек,*
*Ҡайтыр юлдарыма ҡанатландым,*
*Йөрәккәйҙе услап, елкенеп.*

*Теш ындырыр таштай өшәкәйем*
*Ебене лә ҡуйҙы йәшемә.*
*Тамағымда төйөр…*
*Әсәкәйем!*
*Аҡ юлаҡтар ятҡан сәсеңә…*



Салауат
РӘХМӘТУЛЛА

## Ҡыҫҡа шиғырҙар

Ҡояш сыға ла бата,
Ҡояш сыға ла бата:
Ҡояш юлдарында беҙҙең
Йәшәлгән ғүмер ята.

***

Мылтыҡ тауыштары ла юҡ:
Ил тыныс улыш ала!
...Эскелек, наркомания
Халыҡты ҡырып ала.

***

Әй уҡыттылар! –
Баштарҙан
Ашты ғилемдәребеҙ!
...Юҡ колорадо ҡуңғыҙын
Еңер белемдәребеҙ...

***

Икмәк тағын ҡиммәтләнгән
(Уй – гел ашау хаҡында...):
Америкала нефткә
Хаҡ артҡан бит тағын да!

***

Указлы шағирҙар арта:
Улар илдә ни ҡылған?!
Указлы муллалар барҙа
Халыҡ иманлы булған!

*Салауат Рәхмәтулла Ауырғазы районының Солтанморат ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлай. Мәктәптә уҡыта, журналист була.*
*Стәрлетамаҡ ҡала ында йәшәй.*

***

Тәңкә ҡарҙар яуа…

*. Таҡташ.*

*Ҡарҙар – тәңкә-тәңкә!*
*“Тәңкә ҡарҙар”*
*Түгел – шиғыр, түгел йыр өсөн:*
*Көҙҙөң алтын бөртөктәре өсөн*
*Был – Ҡыш түләй Ергә бурысын!*

***

*Ғүмер – эштә*
*(Йорт, дача, машина –*
*Кермәйҙәр бит хатта уйыма…):*
*Бер бүлмәле фатирға ла етмәҫ*
*Эшләгәнем ғүмер буйына…*

***

*Таштар ват аҡ та – икмәклек,*
*Тоҙлоҡ ала ы бит беҙ:*
*Киҫеп ал алар ҙа – ләм-мим,*
*Совет бала ы бит беҙ…*

***

*Пенсиям – ашарға етмәй*
*(Нишләйем был йәшемдә?!):*
*Ҡыҙыҡ – йәшәмәйем  ымаҡ,*
*Ҡыҙғаныс – йәшәйем дә…*

***

*ыу буйында йәшәй был халыҡ:*
*Балыҡ тота белмәй ухалыҡ.*

***

*Тәмле аш та*
*Тәм еҙ тойола:*
*туйыла…*

***

*Ил күреп… йәйәү йөрөйөм –*
*Янға ла ҡала сумма:*
*алым – юҡ әле, был хаҡта*
*Уйламай әле дума…*

***

Тоҡ туҙ а – юйғыс була,
Ебәк туҙ а – юйғысҡа ла ярамай.

Мәҡәл.

*Ғүмер уҙҙы: донъя ына*
*Бар көстө биреп уҙҙым:*
*Ебәктәр булып туҙманым,*
*Эх, тоҡтар булып туҙҙым.*

***

*Ишек ҡағып инеү осоро – үтте:*
*Ишек ватып инеү осоро – етте…*

## *Игенсе үҙе*

*Баҫыуҙарҙа иген иктем*
*(Уҙҙы ғүмер иҙҙермәй):*
*Икмәк үҫтереүҙәр – ауыр,*
*Ауыр – ләкин биҙҙермәй.*

***

*Яҙмыштарым – ҡыл өҫтөндә*
*(Дуҫтар ҙа тештәр ҡайрай…).*
*… андуғастар ҙа,*
*Ҡыл кеүек,*
*Талдарға баҫып айрай…*

***

*“Алға!” – тиеп*
*Да иҙар ҙа*
*Хата “тура юл” яра:*
*Донъя алға “тура” бармай,*
*Спираль буйлап бара!*

***

*…Заманалары – харап:*
*Ашау – эшкә ҡарап түгел,*
*Эшләү – ашауға ҡарап…*

## *Шиғырҙарыма*

*Яҙам – ыҙам, яҙам – ыҙам*
*( ыҙыр өсөн яҙаммы!..):*
*Теләп алған маҙаммы – еҙ?*
*Күктән ингән яҙаммы!..*

***

*Эстәрле – Солтанморат*:*
*Алтмыш саҡрым – йыраҡ…*
*… И, ағындым: ҡайтып киләм,*
*Әйтер ең, донъя урап…*

***

С. Есенин Рәсәй карта ын
ыйырға оҡшатҡан.

*“ ыйыр тула а, аттан да яман”:*
*Туламай ыйыр, туламай аман…*

## *Серәкәй*

*Безләй…*
*Күҙләй –*
*Ҡуныр ерҙәр эҙләй*

---

**Солтанморат – тыуған ауылым.*

*(Әйтер ең, – бал ҡорто,*
*мин – сәсәк...):*
*Юҡ итергә үҙен өлгөрмә әм,*
*Үҙе... минең ҡанды эсәсәк...*

## Эволюция

*Башта – тишек уйғандар,*
*Унан – ишек ҡуйғандар...*

***

*Ҡарттар хәле – шағыр-шоғор,*
*Тик йөрөйҙәр – тереләр:*
*Тирeләрен өйәк тота,*
*өйәктәрен – тиреләр...*

***

Нет на свете краше
Родины нашей!..

Совет осоронда беҙ яратып
йырлаған йырҙан.

*Алмағас ҡорто – алмала,*
*Тиреҫтә – тиреҫ ҡорто:*
*әр ҡай ының – үҙ Ватаны,*
*Үҙ тыуған-үҫкән йорто...*

***

*Аңыңа еңдер быны:*
*Элек – “Ишек” ине, хәҙер –*
*“Инеү (сығыу) урыны”.*

***

Юғары уҡыу йорттары
Уҡытыусылары ни тиҙәр?..

*Уҡыу йорттарына хәҙер*
*Инеү шарттары – үҙгә:*
*Белем үҙебеҙҙә лә бар!*
*Белемле – түгел, аҡсалы*
*Студент кәрәк беҙгә!..*

***

*...Ниңә беҙ кәм башҡаларҙан?!*
*Батшалармы – илдән уңмай?*
*Әллә ил – батшаларҙан?..*

## Йәш уҡытыусы үҙҙәре

*Төн – ҡарауыл, көндөҙ – мәктәп,*
*Урам еперәм кисен:*
*Йәнем – фиҙа, ғүмер фиҙа*
*“Үҙгәртеп ҡороу” өсөн...*

***

*Кеше тыуа – йондоҙ арта*
*(Үлә – кәмей булғаны):*
*Ерҙәге кеше анынса*
*Күктәге йондоҙ аны!*

***

*“Дуҫ”, “дошман” төшөнсәләрен*
*Тормош-остаз аңғарта:*
*Йәшәй-йәшәй дуҫтар – кәмей,*
*Дошмандар – арта, арта…*

***

*Йорт алыу өсөн ни кәрәк?*
*Башта – урман киҫеү кәрәк,*
*Унан – таш ватыу кәрәк…*
*Унан – баш ватыу кәрәк!*

***

*Уҡ уйлаған кеше!*
*…Уҡтың аман*
*Тиңдәштәре юҡҡа оҡшаған:*
*Ракеталар йондоҙҙарға оса,*
*Осоштары – уҡҡа оҡшаған!*

***

Эт – кешенең дуҫы, тиҙәр…

*Шундай дуҫтарым бар минең,*
*Күп – ирәк-мирәк түгел!*
*әм… шундай “дуҫтарым” да бар:*
*Эттәр ҙә кәрәк түгел.*

***

*“Кеше ашаусылар булған… –*
*Тыңлап, юлдашым тына, –*
*Хәҙер ҙә барҙар, – тим, –*
*Хәҙер –*
*Ашайҙар… башын ғына…”*

***

Ауырып ятҡанда

*Кемдәр илар икән, мин үл әм?*
*Кемдәр илар икән… терел әм…*

***

*Берәүҙәр: “Хаҡ юл – уңда!” – ти,*
*Берәүҙәр әйтә: “ ул-да-а-а!..”*
*Батшалар наҙан булғанға,*
*Кешелек хата юлда…*

***

*Өйөмдә… көн буйы – уғыш,*
*Төн буйы секс бара…*
*индә лә – шул!*
*“Юҡ – ю-ю-юҡ!”лама:*
*ис юғы тәүлек йоҡлама –*
*Өйөңдә… “телик” ҡара!*

***

*Сәйәсәткә яраҡлашыусылар*
*Кәкре өйләп, тота туры ын!*
*Ә мин…*
*Ә мин – яраҡлашалманым:*
*Кәкрәйҙем – өйләп туры ын…*

## Илдә

Ай юғары, Ай юғары –
Айға менә ем килә…

Халыҡ йыры.

*Уҡытыуҙа юҡтыр*
*Ысул – ҡулланылмаған:*
*Тик аман Айға осорлоҡ*
*Белем – тупланылмаған…*

## Телевизорҙан кинолар ҡарағанда…

*Артистар бит…*
*Уйнайҙар бит –*
*Аңлап-белеп торам бит:*
*“Атырҙар… үлтерерҙәр…” – тип*
*Ҡалтырап ултырам бит…*

***

*Бер ҡара аң, донъя – шаҡшы,*
*Бер ҡара аң – яҡшы ул.*
*…Үҙең яҡшы бул аң – яҡшы,*
*Шаҡшы бул аң – шаҡшы ул!*



**Миңлегөл**
**ХИСАМОВА**

# “МӨЛДӨРӘГӘН ӨМӨТТӘРЕМ ЙӘНӘШ...”

## *Тик үҙемсә…*

*Тик үҙемсә йырлап ятҡан көнөм,*
*Яҡыная көн дә ҡара төнөм.*

*Ә мир риза ошо халәтемә,*
*Тик үҙемә тейгән йәннәтемә.*

*Тик үҙемсә йәшәп яткан булам,*
*Гәү әр таштар ҡай саҡ тапкан булам.*

*Төн йөҙөндә өн өҙ өшөп туңам,*
*Ҡояш ҡалҡып сыҡ а, төҫөм уңа.*

*Тормош типкеләй ҙә, иркәләй ҙә,*
*Язаларын оноп иртәләй ҙә.*

*Атлата ул ерҙең өҫтәренән,*
*Арып йығылғансы көстәреңдән.*

*Ә мин риза ошо йәннәтемә,*
*Ҡаршымын тик бары йәлләтеүгә.*

***

*Был донъяның бар бит ул яғы ла:*
*Уңыр төҫөң, туңыр күңелең.*

---

*Миңлегөл Хисамова 1948 йылдың 25 сентябрендә Көйөргәҙе районы Ялсыҡай ауылында тыуған. Өфөлә 1-се республика мәктәп-интернатын, БДУ-ны тамамлай. Әлеге көндә мәктәптә эшләй. 1994 йылдан Яҙыусылар союзы ағза ы.*

*Ҡәләмдәшебеҙҙе күркәм юбилейы менән ҡотлайбыҙ!*

*Аяу ыҙҙыр ваҡыт әммәбеҙгә,*
*Килер төндәрең бар төңөлөр.*

*Был донъяның бар бит күләгә е,*
*Ул ҡапламаҫ әммә ҡояшты.*
*әр кемгә лә хөкөмдар тик ваҡыт,*
*Ул онтар ҙа иләр тау-ташты.*

*Салт аяҙҙай яҡты яғы ла бар,*
*Күңел күҙең күр ә шул яғын.*
*Ҡара төндәреңде еңеү булыр,*
*Үкендермәй килер әр яҙың…*

## Тыныс йәшәп ҡара…

*Ҡайҙа китә икән был ғүмерҙәр,*
*Ҡояш сыға күберәк ҡан ырап.*
*ары ағыш төҫлө ай ҙа ҡалкты,*
*Үҙе ымаҡ тыныс таң юрап.*

*Тыныс буламы уң атҡан таңдар,*
*Нимә генә тормай ағалап?*
*Золом көтә бәндә яҙмыштарын,*
*Муйыныңдан ала яғалап.*

*Тыныс торамы уң замандары —*
*Ҡан ҡаҡшата, рухың аҡ ата.*
*Шул анаулы ҡыҫҡа ғүмереңдә*
*Ҡылыс йөҙҙәренән атлата.*

*Ерҙәй тетрәй ҡайҙа, ут урғыла,*
*Бәндә ғүмерҙәрен тураҡлап.*
*Был донъяға ниндәй ҡарғыш төштө:*
*Атыш, ҡан-ҡойоштар әр яҡлап.*

*Ошо мәлдә тыныс йәшәп ҡара,*
*Диуаналар, бәлки, йәшәрҙәр.*
*Йөрәгемә минең ҡандар ауа,*
*Тағы ниндәй шартлау көҫәрҙәр.*

*А , донъялар ҡайҙа китеп бара,*
*Ер өҫтәрен утта төтәтеп.*
*Ҡояш йөҙө саҡ-саҡ күренә лә,*
*Ҡара көйөп, тағы етә төн…*

## Зарланмайым

*Зарланмайым: барына ҡәнәғәтмен,*
*Өҫтәлемдә тора аҡ икмәк.*
*Кеше ҡулдарының көҙрәтенә,*
*Хикмәтенә уның ни етмәк?!*

*Зарланмайым: барына ризамын мин,*
*Тапҡан ризығыма, хеҙмәткә.*
*Күктәр бейегенә ым ынамдыр,*
*Хыял менән бергә йөҙмәккә.*

*Зарланмайым: күрелгәндәр — дарья,*
*Алдарымда тағы ни барҙыр?*
*Мине эҙләп яналмаған бер ут —*
*уңғы нөктә — көткән шул ярҙыр.*

## Етмәне…

*Көн дә, төн дә миңә етмәне,*
*Бүҫкәрмәне тойғо ташҡыны.*
*Ваҡлыҡтары күҙҙе бәйләне,*
*Әллә ҡайҙа үҙем ашҡындым.*

*Көн дә, төн дә миңә етмәне,*
*Саптым эшкә, яктым усаҡты.*
*Ел елгәрҙе яңғыҙ минутты,*
*Янып көткәндә лә буш саҡты.*

*Көн дә, төн дә миңә етмәне,*
*ары ағыш ҡына үтмәне.*
*үрәнләнде инде көн йөҙө,*
*Шымсы ымаҡ баҡты төн күҙе…*

## Йыр ҡала

*Тәҙрәләрҙән ҡояш якты төшә,*
*Йылым, ахры, әйбәт башланыр.*
*Мөлдөрәгән өмөттәрем йәнәш,*
*Шик-шөб әләр килеп баш алыр.*

*Шулай булыр, ышанысым тере,*
*Уйлағандар әр саҡ — алдымда.*
*Алтын- ары күлдәгемде кейәм,*
*Көн башлан ын, тиеп, ялкындан.*

*Ышанмағыҙ, ғәйбәт өйлә әләр,*
*Үкенмәйем — бары ы йөрәктә.*
*Мөхәббәттең әсе тәмен белә,*
*Татын тоя алған ирәктәр.*

*Тәҙрәләрҙән ҡояш якты төшә,*
*Аҡ таң ата йәнә ҡурсалап.*
*Моң ағылыр ҡалам иртә енә,*
*өйөү үҙе булып йыр ҡала.*

## *Даръяларҙа йөҙәм*

*Даръяларҙа йөҙәм, даръялар тар,*
*Нимә етмәй яңғыҙ башыма?!*
*Инде генә ярға еттем ти әм,*
*Көслө тулҡын сыға ҡаршыма.*

*әләкәттән әләк булмауҙарҙы*
*Нисек аңлатырға, нисек уң?*
*Йән көсөнә етеп, йән тартыша,*
*А , язалар, яза кисек ен.*

*әләкәттән ҡотҡарғандыр ерем,*
*Тыуған туп ам, асыр ишегем.*
*Даръяларҙа йөҙәм, даръям да киң,*
*Дауылдарҙы еңер кеше мин!*

## *Яҙмышым*

*ауаларға, офоҡтарға текләп,*
*Үҙ-үҙемә теләк теләнем:*
*Бер-беребеҙҙе осраштырма ҡабат,*
*Яҙмышҡынам, йәллә,*
*Күрмәй еңме әллә,*
*Төндәремдән таңға еләмен.*

*Айлы төнгә баҡтым, хыял ярты,*
*Уйҙарымдан арып киләмен.*
*Бер-беребеҙҙе осраштырма ҡабат,*
*Яҙмышҡынам, йәллә,*
*Күрмәй еңме әллә,*
*Ғазап йөрәгемде иләне.*

*Ила и нур яуған урмандарға,*
*Исем китеп өн өҙ ҡалғанмын.*
*Яҙмышҡына — селлә,*
*Ғүмер көҙө килә,*
*Ҡала ерҙә эҙҙәр алғаның.*

*Был урманға башҡа килә алмам,*
*өйөү моңдарынан ағышланмам,*
*Бер-беребеҙҙе осраштырма ҡабат,*
*Яҙмышҡынам, — ут ың,*
*Минән башҡа юҡ ың,*
*Ғәфү итсе, ҡабат яналмам.*

## *Мең ҡат үлеп...*

*Мең ҡат үлеп, мең ҡат терелгәндә*
*Аңлаусылар булмаҫ эргәңдә.*
*Тормош шулай: кеше әр саҡ яңғыҙ,*
*Яңғыҙлыкта китә ергә лә.*

Мең ҡат үлеп, мең ҡат терелгәндә,
Асылғанда күҙең яҡтыға,
Яңғыҙ ҡояш бағыр нурын сәсеп,
Битең ыйпар айы аҡ ҡына.

Ғазаптарҙа яңғыҙ яныр бәндә,
Яңғыҙлыҡта түгер күҙ йәшен.
Шатлыҡтарҙа ғына йондоҙҙар күп,
Бәхет миҙгелдәрен күҙләшер.

Мең ҡат үлеп, мең ҡат терелгәндә
Сығып барған йәнең тартыш а,
Яңғыҙ ҡояш сығыр йыуатырға
Оҙатырға ине сал ҡышта…

## Алып китә тыуған яҡҡа

Алып китә тыуған яҡҡа
Аҡ ҡайын сауҡалығы.
Серҙәр гөлләмә ен ибә
Елдәргә сайҡалыуы.

Алып китә тыуған яҡҡа
Мөхәббәт уҡмаҡтары.
Хыялым янды күктәрҙә,
Йондоҙҙар йоҡлатманы.

Ауырлыҡты иң күтәрҙе,
Беләм намыҫ хаҡтарын.
Йөрәгем тетелгәндә лә
Яттарға таш атманым.

Тыуған яҡҡа атлығам мин
А тарым өткәндә лә.
Күңелемде мең ҡанатып,
Юҡ ыныу көткәндә лә.

## Йәшлегеңә ҡарап оҡланғанда…

Йәшлегеңә ҡарап оҡланғанда
Йәшен йәшнәр кеүек күктәрҙә.
Ҡараштарың көйҙөрөп тә алды,
Йәшнәү мәлен генә үткәрмә…

Моң оу ағышымдан алыҫ ың ин,
Аңламаҫ ың йәнем балҡышын.
Матурлыҡҡа асыҡ саф йөрәгең,
Йыраҡтарҙа әле сал ҡышың.

*Ғәйепләмә минең ялҡынымды,*
*уңғы ылыр, бәлки, был ялҡын.*
*Ялмап алып көлдәр итеп бөтөр,*
*Көлдәр генә ҡалыр бик алҡын.*

*Ба адирҙай буй- ыныңа ҡарап*
*Торғанымда йәп-йәш ылыуҙай,*
*Хистәремдән янып бөтөрмөндөр,*
*Тойғоларҙы тунап тыйыуҙан…*

## *Асып ебәр тәҙрә пәрҙәләрен…*

*Асып ебәр тәҙрә пәрҙәләрен,*
*Ҡара төндәр ҡарай шомло итеп,*
*Нимә эҙләй икән өйөбөҙҙән,*
*Елен йүгерткән бит шымсы итеп.*

*Асып ебәр тәҙрә пәрҙәләрен,*
*Бәреп ин ен өйгә яктылыктар,*
*Язаламай тор он укыр төндәр,*
*Ҡурҡышмайыҡ әле ят ҡылыҡтан.*

*Асып ебәр тәҙрә пәрҙәләрен,*
*Ҡара төндәр үҙе — үлем төҫө.*
*Өйгә инмәҫ борон ҡыуалайым*
*Йәндә тыпырсынған көсөм өсөн…*

**Ринат**
**КАМАЛ**

# ТАЛАҠ!*

**РОМАН**

## Икенсе бүлек

Раушания ханым ата-бабалар төйәге Мәғҙәнгә — атый иленә ҡайтып төштө. Ни эшләп йөрөй икән был бала? Әллә тыуған яҡтарын ағынғанмы, бары ағыштарын баҫа алмай, ер- ыуҙарын күреп китергә булғанмы Бәхтейәр ҡыҙы?

атыйҙа — бәхтейәрҙәрҙең нәҫел тамыры. Бик боронғо замандарҙа атый мәғҙәндәрҙең йәйләү ере булған, аҙаҡ урыҫтарға атып ебәрелгән. Революциянан уң ҡабат башҡорт ҡулына күскән.

Хәҙер атыйҙа бер нисә ғаилә генә йәшәй. Донъялар илләнгәс, көнитмеш еңеләйгәс, кешеләр ҡабат был ерҙе ташлап, Мәғҙәнгә күсенеп бөткән. Яңы быуын балаларының күбе енең кендеге Мәғҙәндә ҡырҡылған, атыйҙа тыуған балалар ҙа хәҙер Мәғҙәнгә төбәп ҡайта. Тарих мең дә туғыҙ йөҙ ҙә илле икенсе йылда Мөнирәләр ҙә Мәғҙәнгә күсенде.

Оло о Фәриҙә, аталары артынан күп тә тормай, Орондолағы иренән айырылып ҡайтты. Хәҙер әсә е менән төп йортта донъя көтә. Баныубикә менән Рабиғаларҙың донъя ы башҡа. Артҡы урамда өс өй — Фәриҙәләр, Баныубикәләр, Рабиғалар — Бәхтейәр балаларының донъя ы. Раушания ҡай ы ына ҡайтып кер ә лә хуп. Туғандары апай тип өҙөлөп тора. Дәрәжәле ханымды арала иң затлы, иң өйкөмлө өйәк күрәләр. Бәхтейәрҙәр үҙҙәре аҡ өйәк нәҫеленән, шул аҡ өйәктәрҙең дә аҡ өйәге — Раушания үҙе булыр.

Мәғҙән ҙурайған, танырлыҡ та түгел. Әүәлге тәпәшәк кенә өйҙәр урынына алты мөйөшлөләре теҙелгән. Арала бик иҫкергәндәре лә осрай. Раушания тыуған ауылы урамы буйлап атлай, әр өйҙө танырға теләгәндәй күҙҙән кисерә. Азамат урамы. Атайындың төп йорто ошонда булған, тип күр әттеләр уға... Бай Байназар ҡарттар шунда ғүмер өргән! Хәҙер әсә е менән Фәриҙә апа ы, еңнеләре Артҡы урамда йәшәй.

Артҡы урамдан юлы Мота ар урамына алып сыға. Ҡаршыла — Афариздар йорто. Раушания уны әллә ҡайҙан таный.

Афариз. Өфөлә йәшәй, тиҙәр, хәҙер. аулыҡ аҡлау министры урынбаҫары. Өс

*Аҙағы. Башы 9-сы анда.

бала тәрбиәләп үҫтергәндәр... Раушания ханымдың уйы әллә ҡайҙа, үткәндәргә барып төшә. Заманында тыуған ауылы Мәғҙәндән булған Афариз менән бергә уҡынылар. Ятаҡтары йәнәш ине. Шул осҡор күҙле, теремек егет уға ғашиҡ. Бергә тура килгән лекцияларҙа күҙҙәрен упайтып ҡарай ҙа ултыра. Ни саҡлы артынан йүгерҙе, ярты йәнен өҙөп бирергә әҙер ине, «ауылдашым Раушания» тип өҙөлөп торҙо, Өфөнән бергә Мәғҙәнгә ҡайталар. Эй иҫәр саҡтар, эй күңелле мәлдәр! Раушания, тәкәббер зат, шул ябай, ипле ауылдаш егетте тиң енмәгән булды. Йәнә е, ул үтә ябай, ауылдаш, үҙенә туған кеүегерәк тә егет, ҡыҫҡа буйлы. Ә уға ят, серлерәк кеше кәрәк. Тылсым эйә енә уның сер сиске е килә! Күҙгә-башҡа салынып бармай, алға икереп тә төшмәй, бүтән ҡыҙҙарҙың башын да әйләндермәй. Япябай егет, бүтәндәрҙән бер ере менән дә айырылып тормай.

Шул егет хәҙер кем булып киткән, уҡымышлы, дәрәжәле зат, ана, ҡайҙа, ниндәй урында эшләй; балалары бар, ғаилә е бөтөн. Иҫәр. Раушания шул ипле егет менән бәхетле булмаҫ инеме ни? Раушания шул кешене үҙенә тиң енмәне, яҡын юлатманы. Хәҙер тағы үкенеүҙән ни файҙа? Тер әгенде тешләй еңме? Сибәр, омғол ир Тәлғәт менән йәшәй, өйөклөм, берҙән-берем тип атаған бәндәнән күреп ултыра.

Фәриҙә апа ы колхоз идара ына эшкә кит ә, Раушания көн оҙоно әсә е менән икәүҙән-икәү. Бөтә донъяны айҡап сығалар. үҙ тағы үткәндәргә күсә.

— Үтте ғүмер, — ти диндар ҡарсыҡ Мөнирә. — Хоҙай Тәғәләгә рәхмәт, аяҡҡулым ау, бер ерем дә ыҙламай.

— Ярай, инәй, — тип маҡтай Раушания.

— Хоҙайға шөкөр, әтейең дә, ана, илдән илгә йөрөнө.

— Ҡарғай ыңмы әтейемде?

— Юҡ!

«Ә мин иремде ҡарғайым», — үҙенекен уйлаы көй өҙ ҡатын. Үҙе — бында, уйҙары — тегендә. Ире, балалары, йорто хаҡында баш вата. Тыуған яҡтарына ла, башымда ҡайнаған бөткө өҙ ораүҙарыма яуап тапмаммы, тип ҡайтҡайны бит. Таптымы?

Баныубикәләрҙә лә булды. Мейес сығаралар. Рабиғаларға барҙы — өй алалар. Туғандарының әр ҡай ы ының үҙ ҡайғы ы, үҙ мәшәҡәте. Раушания: « еҙҙең ратҡан Тәлғәт еҙнәгеҙ хыянат итте, өҫтөмдән йөрөй», — ти енме, кәрәкме был хәбәр уларға? Кеше ҡайғы ы төштән уң, хәжәтме уларға инең хәсрәтең? Тыңларҙар ҙа уфтанышырҙар, шунан ҡайтып ирҙәренә өйләрҙәр... Әсләм мыйығы аҫтынан көлөп, үсәп ултырыр. «Шулай була ул беҙҙе, Мәғҙән егеттәрен, тиң енмә әң», — тиер. Ҡысҡырып әйтмәҫ, күҙҙәре әйтер шул үҙҙәрҙе. Ниғмәт кейәү өндәшмәҫ, Рабиға ышанмаҫ, ә Фәриҙә апа ы сәс-баш йолҡор, а тар орор — ни фәтүә? Шунан хәле еңеләйерме, донъя ы, ни айәт, урынына ултырырмы? Әсә е уфтаныр, кейәүен әрләп, тәсбих тартып, эсенән белгән доғаларын ҡабатлап ултырыр, доғалары ара ында ул да «кейәү — ҡайны тупрағынан шул» тип ығымта я ар. Ул әле белмәй, Таңғырға ҡунаҡҡа барған саҡтарында ла артығын ишетмәҫкә тырышалыр. Әсәйҙәр етеп бөткән уландары йөгөн дә иңдәренә ала... Туғандар ҙа, телә әләр ҙә, иңә бер нисек тә терәк була алмай. Ҡулдары ҡыҫҡа.

Раушания быны ына төшөндө инде. Уларҙың — үҙ донъя ы, баштарында — мең хәсрәте, ә инеке — башҡа, инеке ят, иш түгел уларға. Улар бик-бик бәләкәй кешеләр, бик-бик көс өҙ заттар. Китаптарҙа ғына кешене көслө, титан тип иғлан итәләр, ә тормошта бәндә — мәхлүк, бер ни ҡыла, бер ниҙе лә үҙгәртә алмай! Донъя океанына ул тамсы ғына бул а ла бөртөк өҫтәй алмай, донъя йөҙөнөң бер генә ыҙатын да үҙгәртә йә боҙа алмай! Йы ан битенә бер ыр ыҙа алмай!

Кеше — бары маҡтансыҡ, ҡылансыҡ бер йән, ялған иллюзиялар ҡоло,

мираждар – салыш күҙгөләр илендә йәшәй. Ерҙәге иң оҫта, иң зирәк әкиәтсе – ул кеше. Башы йоморо, әкиәт тигәндә аҡылы йүгерек, зи ене осҡор.

– Кейәү ни хәлдә, Раушания, эшләп йөрөймө?

«Эх,» – тип үр әләнде ханым эсенән, тағы әсә е үҙе үк яуабын да ҡайтарып ҡуйҙы түгелме – Раушанияға йөпләй е-мүкләй е-сүпләй е генә ҡалды.

– Эшләй.

– аман да шул эшендәме – ревизормы?

– аман ревизор.

– Бурҙарҙы тотамы?

«Әллә үсектерә был мут ҡарсыҡ?»

– Үҙе лә бур.

– Нисек?

«Көлә был ҡарсыҡ.»

– Бур, тинеңме?

«Эйе.»

– Кейәү нимә урлаған? – Баш осондағы меңәр, йөҙәр ҡыңғырауҙар зыңлап киттеме, Раушания, күңеле тулышыуына түҙмәй, илап ебәрҙе.

– Ҡыҙым, илай ыңмы?

«Ҡай ылай яғымлы итеп ораша ул».

– Ни булды, Раушания?

«Инәй, инәкәйем...»

– Әллә ысындан илай инде: кейәү менән бер-бер хәл булдымы, тим?

Бағана таяуҙары ынды күңелдең, яр ыу быуалары йырылды. Бигерәк хәйлә еҙ кеше бит, бигерәк игелекле зат Раушанияның әсә е. «Таш менән атҡанға ла аш менән ат» бит уның тормош философия ы. Берәүгә этлек ҡылмаҫ, йомшаҡ үҙенән башҡа үҙе сыҡмаҫ ауыҙынан... Әрләшә белмәҫ, иң ауыр үҙе «Ҡара-ҡара, ни ти бит әле ул» булыр.

– Инәй, ярай, онот, иҫкә алма үҙемде – аптырағандан өйләнем. Әллә нишләп күңелем тулышып китте. Әйҙә, онотайыҡ, хәйерле ҡаза теләйек шул яман хәбәргә!

Мөнирә ҡарсыҡ тетрәнде. Күҙен бер асты, бер йомдо: үҙ йомғағы әллә ҡайҙа тәгәрәп кит ә лә, был туҡталышты күптән уҙ алар ҙа, үҙ ҡабат ошо туп аға өрләктә.

– Әтейең дә шундай булды, ҡыҙым...

«Нисек түҙҙең ин, инәкәйем?» – Тик тыны сыҡманы бисара ҡатындың.

– Мин әтейеңә баштан уҡ ҡул елтәгәйнем, Раушания. Белә еңме, ирҙәрҙең бөтә е лә шундай була, аптырама. Ҡул елтә, үҙ эшеңде бел. Улар – ата ҡаҙ бит, күршегә йөрөй-йөрөй ҙә кире ҡайта. Мал да ашаған еренә ҡайта.

– Әтейем теге ваҡытта ҡайтманы бит! – Ары түҙеме-сыҙамы етмәне йәш ҡатындың.

– Әтейеңде, белгең кил ә, уңғы тапҡыр үҙем ҡыуҙым бит, бер мәсхәрә енән уң.

«Ниңә?» – Ҡыҙы быны ҡарашы менән генә ораны.

– Әтейең төрмәлә йөрөп ныҡ боҙолғайны. Шунан уға йәш бисә кәрәк булды, ә ин төҫ-башҡа арыу әле, ҡыҙҙарға бирге еҙ ең. Шунан Бәхтейәр «колхозда ыҙырылып йөрөйөм» тине, сиған кеүек тормошҡа өйрәнгәйне. атыйҙа йәм табып ята алманы. Ныҡ боҙолғайны ул.

«Ә Тәлғәт?..»

– Кейәү донъя көтә, эштән башы сыҡмай, балаларығыҙ ҙа бәләкәс – уларға яҡлау кәрәк.

«Нишләргә миңә, инәй? Күнә, кисерә алмайым был хыянатты, айырылышыр-

ға етештем. Нишләргә, ни ҡылырға?»

– Ҡабатлайым: Тәлғәт кейәү насар кеше түгел, кешегә яғымлы... Ул ғына түгел. Бөтә ирҙәр ҙә шундай: ҡырҡты уҙғас, шаярып алалар, үтә ул, уларға ҡыҙыҡ, бер яңылыҡ кәрәк. Улар яңынан-яңы донъя аса. уңынан барыбер, аҙғын мал ымаҡ, ашаған ерҙәренә әйләнеп ҡайта. Көҙөн үгеҙ ҙә көтөүенән юғалып тора, имергәс, аулаҡта йә тоҡонда ята. Ир хәләлен яратмағандан түгел, ә ҡыҙыҡ иткәндән, ирмәк тапҡандан йөрөй, төкөр.

– Инәй, бөтә ирҙәр ҙә, ти ең, бөтә е лә шулай микән?

– Әллә, донъя булғас... Мин ундайҙарҙы осратманым. ин ашыҡма, ҡыҙған баштан донъя туҙҙырыуҙан ни... – Шунда Мөнирә ҡарсыҡ иренең талаҡ әйтеүен өйләй яҙҙы. – Кейәү ин тип өҙөлөп тора, алдына-артына сыға...

«Хәйләкәр ул. Ике йөҙлө.»

– Өлтөрәп тора, бөтә өй эшен эшләй, мал ҡарай...

«Тағы, табаныңды ғына үпмәй, тиң.»

– ине әллә кем итә. Ирҙәр бисәләрен ярата. Ярат а ла, әҙерәк ҡыҙыҡ күреп, ситкә ҡарап ала. Уларға шаярырға кәрәк, яңыны татып ҡарағылары, ят емеште тәмләгеләре килә... Тәндәре орай, был, йәндәре бүтәндә, тигәнде аңлатмай бит әле. Күңелдәре менән улар инеке, инең янда. Ситтә тән ләззәте татығылары ғына килә. Быны оло гона ҡа анау, шунан оло бәлә я ау – үҙе алйотлоҡ.

«Ә үҙең әтейемде ҡалай ҡыҙғана торғайның...»

– Ирҙәр ят менән булғанда ла хәләлен уйлай. Тән ләззәте үтә, ә йән тартыуы үтмәй. Был нимә? Мөхәббәтме! Әләй ә, еңел генә ратыу тура ында үҙ өйләү китте... Йөрәк түрендә барыбер – ин, балалары менән барыбер уның күңеле.

«Инәй, етте. Үлтерҙең.»

– Тыңла, балам, үҙемде. Тормошоғоҙ матур, донъяғыҙ етеш, балаларығыҙ уңған...

Раушания ҡаршы әйтә алманы, тыштан да, эстән дә әсә ен хупламаны. Әсә е барыбер йөрәгендәге боҙҙо иретеп бөтмәне. Шулай ҙа уның нотоғон тыңлау зарлы бисәгә мауыҡтырғыс бер әкиәт ымаҡ тәьҫир итте.

Ысынында Раушания был әкиәткә ышанманы ла, күңеленән әсә е фәлсәфә ен ҡабул да итмәне. Әсә енең тормош фәлсәфә е, ирҙәргә мөнәсәбәте уға иҫкелек ҡалдығы булып тойолдо. Был – ғәфү итеү, хаслыҡты аҡлау, хыянатты өн өҙ кисереү. Был – мәхрүм заттар фәлсәфә е, көс өҙҙәрҙең ҡоралы. Ҡарт-ҡоронон, яҙмыш тарафынан аяу ыҙ туҡмалып, инде тәүбә иткән, көрәштән ваз кискән, тәҡдиренә күнгәндәрҙең, көслө алдында теҙ сүгеп, баш эйеп йәшәгәндәрҙең аҡылы.

Раушания әсә е өгөтөн ҡабул итә алмай, шулай ҙа бер үҙ ҙә ҡаршы әйтмәй. Тағын әсә е үҙҙәренән уң күңеленә йылы булып ҡалды, йәне урынына ултырҙы, йөрәк яр ыуҙары баҫылды. Ни хикмәт, әллә, тыуған яҡ ауа ы килешә, ер йылы ы табандарына үтә, йөрәкте йылыта, күҙҙәрҙе аса, тиеүҙәре шулмы? Тыуған яҡ ауыҡтыра, йөрәккә көс бирә, зи енде яҡтырта. Был ысынмы?

Рәхмәт иңә, ғәзиз Мәғҙән ере – ата-бабалар төйәге!

Раушания аңланы: барыбер бушҡа йөрөмәне, бушҡа ҡайтмаған тыуған иленә. Ата-бабалар еренә баш эйеү ҙә дауалай, игелекле бала ын ер шулай ҡурсалай... Нисек тә йән яр ыуҙарын баҫырға, ҡай ылай ҙа күңел яраларын уңалтырға ынтыла. Рәхмәт иңә, ерем, рәхмәт иңә, Мәғҙән иле!

## Өсөнсө бүлек

I

Тәлғәт балаларына әр ваҡыт бер үҙен тылҡыны. Бесәнгә толо ҡыҙы Йы ания менән йөрөйҙәр. Баш бала ы малай булмағас, әр саҡ ҡыҙын ала. Мотоциклы артына ултырта ла өйҙән алыҫҡараҡ, бисә е ҡолаҡ итен ашамаған ергә сығып китә!

Бында сәхрә. Ҡоштар айрай, иңкештәр гөжләй, күгәүен мыжғый, себен ябырыла, шулай ҙа йәне тыныс. Бында әр аҙымыңды күҙәтеп, киҫәтеп тормайҙар: «Улай баҫ, былай ит! Иҙәнде бысрата ығыҙ! ыу килтер!..» Тәлғәт китап тот а ла ярамай: «Эштән ҡасып, китап уҡый ың! Күҙемә ут төшә, йоҡлай алмайым!» — тигән әр яуа башына.

Бесәнлектә берәү ҙә мыжымай.

— Ҡыҙым, тыңла...

— Атай!

— Ултыр! — Йы ания янына сүккәс, дауам итә. — Ҡыҙым, әсәйеңә ҡаршы әйтмә! Ул үҙе ғәйепле түгел, уға ата-әсә йылы ы етмәгән — уны хөкүмәт тәрбиәләгән...

— Мин уға: «Ҡалаға ҡабат бар аң, артыңдан шул Мәғәмүр менән Сәхүәрҙе эйәртмә», — тинем. Әләй ә, бесән мәлендә өрләгөшөп килеп төшәләр, беҙҙең каникул гел шуларҙы ҡарап уҙа...

— Әсәйең аңламай шул...

— Ул: « ин ҡыҫылма, бәләкәс ең», — ти. Йәй буйы шул туғандарын тәрбиәләп үтә. Уларға — иң имеҙ өләш, иң татлы аш!..

— Ҡыҙым. — Тәлғәт тәрән көр өнә. — Шуға әйтәм: атай ыҙ йә әсәй еҙ егеткә кейәүгә сыҡмағыҙ! Ул бала берүк, әсәйегеҙ ымаҡ, детдомда үҫкән булма ын!

Ҡыҙы башын эйә.

— Детдомда улар ата-әсә йылы ын күрмәй, шуға донъяға, кешеләргә үсле була. Улар үҙҙәре түгел, ә йәнәштәге кешеләр, күршеләр ғәйепле. Хөкүмәт ғәйепле, шуға улар атай ыҙ, әсә еҙ ҡалған! Тәрбиәселәре ғәйепле, сөнки улар быларҙы бәхетле итә алмаған...

— Атай, ин гел шул үҙҙе тылҡый ың, ә әсәй аңламай...

— Уны еңеп, алдына сығып булмай. Мин уға әйтеп, уны тәрбиәләп арыным. Ана өтө менән инмәгән тана өтө менән инмәй. Кешене үҙгәртеп, яңы кеше я ап булмай. Кеше нисек тыуған, шулай булып ҡала.

— Атай, мин дөрөҫөн әйттем. Быйыл да йәй буйы инең туғандарыңды ҡарап, арттарынан йыуып-йыйыштырып ятмаясаҡмын, тинем.

— Аңламай ул, уға әйттең ни, стенаға ни... Әйҙә, ҡыҙым, бишмәтеңде үләнгә түшә, серем итеп алабыҙ. Бында — саф ауа, ҡарағай урманы...

— Атай...

— Хәҙер әсәйең шул туғандары менән ҡатыша, йәй — уның каникулы... Ул иң татлы өлөштө ситтәргә бирә, ә үҙенең балаларына ҡаты-ҡото о ла ярай. Сит-ятҡа ярарға тырыша, кеше күҙе алдында арыу булып күренә, ә үҙенекеләргә — нисек тә бата...

— Атай, мин ундай түгел, мин уның кеүек булмаясаҡмын! — Йы ания намыҫлана, Йы ания тауышын күтәрә.

— Ҡыҙым, тағы ҡабатлайым: әсәйең киҫәк еҙ! Шуның өсөн, уның... минең хатаны ҡабатламаҫ өсөн, еҙ йәтим балаға кейәүгә бармағыҙ, тим. Ул барыбер ҡәҙимге, теүәл кеше булмай... Әйҙә, йоҡлап алайыҡ!

Ҡыҙ менән атай әүен баҙарына сума.

Төшөндә ҡыҙ Яйыҡ буйын күрә. Имеш, уларға ҡабат Мәғәмүр туғандары килгән, күмәкләшеп йылға буйында табын ҡорғандар, Йы ания, ғәҙәтенсә, усаҡ янында... Биттәре янып сыҡҡан. Мәғәмүрҙәр, Мәғәмүр балалары ыу инә, ҡояшта ҡыҙына, ә ул — аш- ыу тирә ендә!

Йәй. Ҡунаҡтар иҫерешкән. Әғәләй-тәғәләй киләләр. Тәлғәттең дә ауыҙы йы-

рылған. Йомшаҡ зат. Ап-аҡ күлдәк төймәләре ысҡынған... Яйыҡ буйына төшөргә, балыҡ өҙөп, балыҡ урпа ы бешерергә үҙе тәҡдим итте бит.

Әсә е лә, туғандары килгәс, өйөнгән. Ул – детдом бала ы бит, уны детдомға ташлап киткәндәр, исма ам, ҡалған ғүмерен туғандары менән ҡатышып үткәрә!

Ул – туғандары балаларына гөл, ә үҙенекеләргә әйлән ә – көл. Үҙеңдекеләргә нисек тор аң да, ҡай ылай аҡыр аң да бата.

– Ниңә ҡоштабаҡты йыумай ығыҙ? Ана, уҡлауҙы ла, мин әйткәс, Ғәфүр килтерҙе... – Раушания Йы аниярларға бәйләнә, мең бәлә тағы үҙ балаларына.

Раушания ханым туғандарына яҡты йөҙ күр әтә, ә үҙенекеләр уға кеше түгел.

– Суйынды ҡом менән ышҡып йыу!

– Ана, ыу алып, тағы усаҡҡа ултырт!

*Тау башында – карауат,*
*Шунда ят та йоҡлап кит...*

– Мәғәмүр, иплә́п! – Сәхүәрҙең сәркелдәк тауышы.

Йы ания – уҫал ҡыҙ. Әсә енә ҡаршы әйтә, алдын-артын уйлап тормай. Мәғәмүрҙең бисә е Сәхүәр ҙә көлә: « ай, беҙҙең Йы ания уҫал да ул, үҙебеҙҙең яҡҡа тартҡан!»

Йы ания ауыт- аба йыуа, табынды йыйыштыра. Суйында балыҡ урпа ы бешә, сеүәтәләрҙә мөлдөрәмә тулы әсе бал бызырлай.

*ай, эсәбеҙ балдарҙы,*
*Вай, эсәбеҙ балдарҙы.*
*Беҙҙең былай ултырыуҙар*
*Көнләштермәй кемдәрҙе.*

Табын гөрләй. Раушанияның ҡаланан килгән туғандары Яйыҡ буйын күтәреп алып бара. Сәхрә, йәй урта ы. Кемгә тейә быңдай ый, кемдәр шулай күңелле йәшәй белә? Туғандар юл айҡан төшмә ә, былай ултырырҙар инеме лә Яйыҡ буйында, былай йәйләрҙәр инеме?

Йы ания менән Миләүшә ситтә, күҙ йәштәрен йотоп, тәрилкә йыуа. Уларға тағы сират етмәне, уха ла, балыҡ та ауыҙ итә алманылар.

Йы ания уянып китә. Төшөндә күргәндәре хаҡында уйлай. Мәғәмүрҙәр йәй ти ҙә киләләр, ял алалар ҙа айҙар буйы ашап-эсеп, кешене эшенән айырып яталар. Улар кил ә, Йы аниярларға көн бөтә: көн-төн ҡунаҡ ҡара, ауыт- аба йыу, ҡунаҡтар артынан йыйыштыр! Яллап ҡуйылғандар!

Тәлғәт өлтөрәп тора, әле арығын, әле тауығын сала.

– Бажа йомарт...

– Еҙнәм – донъялағы иң кешелекле кеше...

Яҡшы үҙ килешә, ары майҙай арыла күңелгә. Хужалар оторо дәртләнә, оторо ҡунаҡтарға ярарға тырыша.

Мәғәмүр ҡатыны Сәхүәр бигерәк таҫма тел:

– Йы ания, ваҡ-ваҡ ҡына итеп турай ың ул туҡмасты! Татар кеүек – эрерәк тә ярай бит...

– Беҙ ни, апай, нисек тә еҙгә ярарға тырышабыҙ...

– Уй иркәм!..

Йы ания шунда күҙҙәрен аса. Ата ы ла тәмле төштәр күреп йоҡлай, бында өйрәтеп-төҙәтеп тороусы юҡ бит, бесәндә генә шулай рәхәтләнеп ҡалалар. Ә Раушания ханым үҙе – өйҙә, бесәнгә йөрөмәй.

– Атай...

– Әү, ҡыҙым...

– Көн ниндәй матур!

– Сәхрә!

– Атай, мин иңә сәскә йыйҙым...
– Рәхмәт, ҡыҙым!
– Атай, мин ине яратам...
– Мин дә, ҡыҙым.

II

Зекерйән оҫта яҡшылап мейес сығарып бирҙе. Ҡупшы, дүрткел оло урыҫ мейесе яңы өйгә йәм өҫтәп ултыра! Тәлғәт ҡыуанды. Ул өй ала, ни айәт, мәктәп фатирын бушатырҙар, үҙҙәренең ыйыныр мөйөштәре булыр. Күрше ауылдағы туғандары, Ғәлиәкбәр ҡусты ы ярҙам итте.

Раушания ла шат ине. Оҙаҡламай өй туйларҙар, күмәк итеп туған-тыумасаны йыйырҙар. Етте дәүләт фатирында йәшәү, үҙҙәренеке, үҙ ҡулдары менән ҡорған донъялары бар... Тағы ла матурыраҡ йәшәп алып китерҙәр, балалары ла кинәнешер. Өйлө кеше – ыйлы кеше, үҙ донъя ы булған зат – көслө зат, кеше ара ында тиң әҙәм.

Тәлғәт менән Раушания, бер нәмәгә лә ҡарамай, Таңғырҙа үҙ донъя ын ҡорҙо; Сөнәғәтуллиндар этләшеп торҙо, төрлө хаслыҡ ҡылды – бере енә лә ҡараманылар, үҙ эштәрен белделәр. Килмешәктәр, имеш! Тәлғәт үҙе шул районда бит, тамырҙары шул ергә береккән, ә уны сит-ят күрәләр, килмешәк тип төрткөләйҙәр. Имеш, ул ят бауыр... Бер Сөнәғәтуллиндарға ярамаҡ тип, ниндәй көнгә төштөләр. Йәнә е, Таңғыр – Сөнәғәтуллиндарҙың төйәге, улар бында баш та, түш тә! Кеше ҡайҙа ғына йәшә ә лә, үҙ иленең хозурлығын, йәмен ишәйтеп йәшәмәйме? Юҡ, Сөнәғәтуллиндар башҡаса уйлай, Тәлғәттәр уларға ярай алманы. Улар шул эре нәҫелдең тамағына арҡыры торҙо.

Зекерйән ағай менән мәгәрисен эстеләр, яңы мейесте ыйпаштырып ҡаранылар. Дан сыҡты ул мейес! Өйгә ҡот, йәм биреп ултырыр, ғаилә усағын үндермәҫ!

– Мейесең төтәмәҫ, Тәлғәт. Үҙемә ышанғандай ышанам! Минең ҡул тейгәс, үҙең белә ең инде, – тип ҡупайып та алды мәгәристән теле сиселгән Зекерйән ағай.

Тәлғәт уны ишек алдынаса оҙата сыҡты. Күктә эре-эре йондоҙҙар емелдәшә, август ауа ы саф, алҡынса. Күкрәккә тула, улыш алыштарын киңәйтә. Эй, ошо бейек иркен күктәр аҫтында оҙаҡ-оҙаҡ, тыныс-тыныс йәшәге, кешеләргә лә, үҙеңә лә игелектәр ҡылғы килә!

– Иртәгә лә көн аяҙ булыр, – тине оҫта, хушлашып. – Изгелеген күрергә яҙ ын, ҡустым.

Иртәгә е көн, ысынлап та, аяҙ тыуҙы, тик Тәлғәттең өр-яңы мейес мөрйә е пыран-зыран килгәйне: төндә кемдер инеп, юғарынан таяҡ гөжөп мөрйәне емергән... Өй эсенә саң-туҙан тулған, тирә-йүндә кирбес ватыҡтары ғына ерәйешә. Кемдең эше булыр? Кем шулай төн заманында донъя туҙҙырып, кешегә этлек ҡылып йөрөй?

Кемдер уларға ҡаршы сыға, кемдеңдер уларҙы ауылдан бик тә ҡыуғы ы килә. Таңғырға өй алмағыҙ, Таңғырҙан табанығыҙҙы ялтыратығыҙ, Таңғырҙа еҙгә игелек булмаясаҡ, тип иҫкәртә кеүек. Аңлашылып тора: таңғырҙар килмешәктәрҙе яратмай, таңғырҙар Тәлғәттәрҙән нисек тә ҡотолорға теләй!

Ир тешен ҡыҫты, бисә сәмләнде. Раушаниялар яңынан ын турайтты: улар Таңғырҙа ҡала, Сөнәғәтуллиндарға үс итеп ошо ауылда төпләнә! Нисек кенә этмә ендәр, ҡай ылай ғына биҙҙерергә тырышма ындар – ҡара эслеләрҙең уйы барып сыҡмаясаҡ, улар Тәлғәттәрҙе ауылдан өрөп ебәрә алмаясаҡ!

Тәлғәт мылтыҡ атып алды, өйгә күсенгәнсе, шунда мылтығын ҡосаҡлап ҡуна ятты.

Мейесте яңынан сығарҙылар, яңынан бурысҡа баттылар, нисек тә би-

решмәҫкә, нисек тә түҙергә тырыштылар. Таңғыр менән Тәлғәттәр ара ындағы айҡашыу дауам итте.

Ҡараңғы төн. Күҙгә төрт әң дә иҙмәҫ ең. Тәлғәттәр мейестең дә кибә төшкәнен көтә, оҙаҡламай үҙ өйҙәренә күсенәсәктәр. Раушания, ирен йәлләп, ҡайт, инде теймәҫтәр, тип әйтеп тә ҡарай, теге е күнмәй. Ул аҙаҡҡаса урынын ташламаясаҡ, көнө еткәнсе шунда ҡунасаҡ! Өйгә күсенгәс тә, мылтығын я аулы ғына тотор, карауат аҫтында балта ы ятыр... Үҙ өйөндө аҡлап айҡаш аң да була! ин — үҙеңдең ҡәлғәндә, ин өй баҫыусыға ҡаршы сыға ың. Үҙ-үҙеңде яҡлай ың!

Барыбер күнмәҫтәр, дүнмәҫтәр был таңғырҙар!

Ҡорбанын аңдығандай, өйөн, мөлкәтен ағаланы, берәй эте барыбер этлек ҡылырға маташыр, тип көттө Тәлғәт.

Ул бәндә таң алдынан килде. Тәлғәттең иң тәмле йоҡо онда баҫып инде өйгә! Ишек шығырлап ҡына асылды, шундуҡ кире ябылды; Тәлғәт шундуҡ уянды, төн ҡунағы артынан төштө... Мылтығын я аулы көйө тотоп, әүен артына баҫтыра сыҡты. Ҡараңғыла ҡасыусының ынын ғына сырамытты, тоҫҡап атып та ебәрҙе. Теге өрләгәп барып төштө, әммә ҡалҡынып тағы торҙо, тағы ҡасты... Тәлғәт ары тегенән күҙ яҙҙырҙы.

Икенсе кис бәлә алыусылар урам яғына ҡараған тәҙрәләрҙе ҡырып китте, ләкин төндә өжүм итеүсенең исемен белә алманылар. Яраланыусы больницаға ла мөрәжәғәт итмәгән.

Өсөнсө кис теге билдә еҙ үс алыусылар Зекерйән оҫтаның да урам яҡ тәҙрәләрен ҡойоп китте. Йәнә е, шул төҫ иңә, мейессе: Таңғыр кеше е була тороп, шул килмешәктәргә яҡшатланып йөрөмәҫ ең!

III

Әсе ел иҫте, дауыл ҡупты.

Ханлыҡҡа яу ябырыла. Йы ания ханбикә иң тоғро кеше е Ғаян менән генә тороп ҡалды. Хан арайы ла, хәрәме лә тар-мар. Өҫ-баштары әллә утҡа, әллә ботаҡ-атаҡҡа йолҡоноп бөттө. Әллә ҡайҙа ҡасалар? Шулай ҙа ханбикә шат, бәхетле. Йылмая! Ханбикәнең, тоғро юлдашына бағып, йәне ирей, туң йөрәге яр ып тибә. Улар яңы илгә, бөтөнләй ят донъяға килеп сыға.

Тәлғәт ике иҫәр баланы, ҡыҙыҡ күреп, ситтән генә күҙәтә. Теге хыялыйҙар хәҙер ни эшләрҙәр икән, ҡайҙа барырҙар? Юлдары бөтөнләй сит-ят тарафтарға тоҫмалланды, буғай.

Бәй, был үҙҙәренең ауылы ла. Район үҙәге бит. Ана, шул уҡ урам... Ана, йәштәр Йомабикә өйөнә табан ашыға. Йәтим бисәнең тәпәшәк өйө — йәндәре теләгәне, ашҡынып көткәндәре. Уларға бүтән бер ниндәй арайҙарың да кәрәкмәй!

Күшеккәндәр, өшөгәндәр бисара балалар; өйгә ингәс тә, тәҙрә ҡорғанын төшөрөп ҡуйҙылар. Өйҙә — яҡты, тышта — ҡараңғы, тыштан өй эсе күренмәй ҙә. Икәү аулаҡта ҡалды. Ик еҙ-сик еҙ далала ел-дауыл ҡубарыла, ә бында — ышыҡ, бер өн дә юҡ. Донъяла былар ике е генә.

Йы ания йөҙөн асты, ихлас йылмайҙы. Түп-түңәрәк бит, өрөләп бешкән ирендәр, нурлы күҙҙәр... Ғаян, тыйыла алмай, өйөклө өн ҡоса. Бар хафалар тышта тороп ҡалды, бында, аулаҡта, улар ике е генә. улыштары тигеҙләнде, устары яна, тәндәре эҫе. Рәхәт. Тағы онотолдолар. Устар устарға, ирендәр ирендәргә ҡушылды.

— Ниңә инең менән шундай тыныс икән? Ниңә икәү ҡалғас, йәнем баҫыла?

— ин мине ярата ың...

— Көлмә. — Ғаян баҫылмай.

— ин — иҫәр. — Көлә Йы ания. Ҡаштары осона, эйәктәре осона, бит алмалары осона нур ҡунған. Ирәйеп көлә генә.

– Йыания...
– Туҡта, сәй ҡуям!
– Кәрәкмәй, мин былай ҙа туҡ, йәнем. инең менән осраш ам, күңелем урынына ултыра, миңә шундай рәхәт. Хәс тә бала сағыма ҡайтам. Өләсәйем ҡосағы йылы, йомшаҡ. Мин, бесәй бала ылай, уға ырығып барам, ырылып барам. Йәнемә тыныс.
– Эй, бесәйем минең... – тип шырт сәстәренән ыпыра шаян Йыания.
– Йыания, мин дә инән ҡалмайым... – Ғаян үр әләнә.
– Ҡалма!
– Мин дә инең менән ҡалаға китәм, бында хаслы кешеләр йәшәй, улар яттар бәхетенә көнләшә... – Ғаян өҙләгә. – Беҙ алыҫ илдә йәшәрбеҙ, бер-беребеҙгә иш булырбыҙ. Мин уҡырға керәм, Йыания...
– Ғаян, йәрем, ин дөрөҫ уйлай ың: әйҙә мин уҡыған ергә!
– Килештек, йәнем. Беҙҙе, бындағы кеүек, Солтанбайҙар эҙәрлекләмәҫ!..
– Әсәйем баҫтырмаҫ, төрмәгә тығам, тип яҫҡынмаҫ, Ғаян!..
– Беҙ унда яңы тормош башларбыҙ: мин уҡырға керәм, икәү уҡырбыҙ, бер-беребеҙгә ярҙам итербеҙ, илгә файҙалы өнәр эйәләре булырбыҙ. Мин, Йыания, инән ҡалмам, иңә тиң, инддәш булырмын!
– Ғаян, шәп!
– Мин бер нәмәгә ҡарамам, беҙ айырылышмаҫбыҙ, йәнем!
– Эйе...
– Беҙ бер-беребеҙҙе ҡеүәтләрбеҙ, бер-беребеҙҙе яҡларбыҙ. Яңы ерҙә яңыса йәшәрбеҙ, бер-беребеҙгә дәрт-дарман өҫтәрбеҙ, бер-беребеҙҙе күтәрешербеҙ, тайғанда терәк булырбыҙ. Мин бер нәмәнән дә ҡурҡмайым, Йыания, мин үҙ-үҙемде, наҙанлығымды барыбер еңәсәкмен! Мөхәббәт тауҙарҙы шыуҙырырға, мөғжизәләр тыуҙырырға әләтле...
– Ғаян, ин хыялый икән ең – белмәй йөрөгәнмен; сәмсел дә, ғәрсел дә икән - ең, ин мөхәббәткә хаҡлы... ине яңынан астым, тағы ла нығыраҡ ярата башланым, ахыры ы. Кил, аҡыллым, кил, йәрем, беҙ айырылышмабыҙ, беҙҙе әсәйҙәр ҙә, бер ниндәй ел-дауыл да айыра алмаҫ!
– Беҙ – бер, йәнем!
Был тилеләр бер-бере енең ҡосағында ирей. Әллә ниҙәр ҡыландырып бөтәләр: әле арҡан ымаҡ ишеләләр, әле... Улар бер-бере енә иш, йәр булып бөткән бит, улар ҡушылып бөткән! Бәй! Тан ыҡтары ҡанғансы көлөшәләр.
– Бер йән, бер тән булған заттарҙы, Раушания, иңә әйтәм, ниңә айырырға маташырға? Уларҙы ҡушырға, ҡауыштырырға! – Тәлғәт бисә енә өндәшә.
Тәҙрә ҡорғаны тартылған, тышта – ҡараңғы, бында – йылы. Йәштәр ике е генә олоғара ошо донъя урта ында.
Шунда ишек шаҡыйҙар.
– Туҡ-туҡ!
– Кем?
– Был – мин, әсәйең, Йыания!
Ике тиле – Ғаян менән Йыания – шәрә килеш ырғып тора.
Тәлғәт иләү ерәп уянып китә, ян-яғына баға. Ғаян менән Йыания ла, Раушания ла юҡ.
Өйҙә бер кем дә юҡ, имеш.

## IV

Раушания ҡаңғырҙы: «Нишләргә? Айырылышырғамы, әллә аман шул тормош ебен уҙырғамы?»
Мәғҙәндә әсә е менән серләшеп ҡайтҡас, әҙерәк тынысланғандай иткәйне,

йөрөй-йөрөй уйҙары тағы ҡуйыра, сәме ҡуҙғала. Нисек түҙеп ятырға, хыянатты ҡай ылай ғәфү итергә? Тәлғәткә йәшлек мөхәббәтен, иң-иң ила и тойғоларын арнаны... Был – иленде атыуға, әсәйеңдән ваз кисеүгә тиң. Раушания үҙе ғүмере буйы балаларға шуны тылҡыны.

Аңлай: ирҙәр бер мәл аҙып-туҙып ала, аҙаҡ был үтә. Ҡырҡты уҙған ир ҡыҙыҡ эҙләй, ситтә шаярып ала... Аҡылы менән аңлай, хатта ҡул да иҙәй, ә йөрәге... Ҡон ҡайтарырға өндәй.

– Ҡон, ҡон! Хыянатҡа – хыянат!

Ни ҡылырға, ҡай ылай хәл итергә! Нисек йырып сығырға был үрмәксе ауын? Әлеге көнгәсә аңлашҡаны ла, йөҙөнә бәреп әйткәне лә юҡ. Нимә көтә? Самалай, ни эшләргә белмәй. Тәлғәт – уйнашсы, уйнаш – уның ҡанында. Раушания ғәфү итә алмаҫ, наҙан бисәләр шикелле әрләшеп кенә ҡуймаҫ... Түҙер-түҙер ҙә өҙә уғыр.

Раушания ханым, ни айәт, айырылышырға ҡарар итте. Ул әсә е Мөнирә ҡарсыҡ фәлсәфә ен ҡабул итә алмай, ул таш менән атҡанға аш менән атмаясаҡ. Тәлғәт әле уның кемлеген белмәй. Әйҙә, аушайған донъя ы түңкәрел ен, уңмаған көнөн ҡыумаҫ ул... Тәлғәт әҙәм мәсхәрә енә төшәсәк, күрмәгәнен күрәсәк.

Раушания етерлек язаланды, хәҙер Тәлғәт татып ҡара ын. Раушания – әсә, барыбер балалары менән ҡала. Ә Тәлғәт өйҙән сығып китә. Ҡултыҡ аҫтына папкаын ҡыҫтыра ла... Ревизор, ана бара юлың!

Кисә тағы яңы хәбәр килтерҙеләр. Миләүшә менән Шәүкәт машина кузовында барған. Юҡ. Шәүкәт машина кузовында булған, ә Миләүшә йәйәү. Шәүкәт машинаны туҡтатҡан, Миләүшә янына төшкән. Икәү ғәм халыҡ алдында ҡосаҡлашҡан!

Раушания ханым тағы ҡыҙы менән өйләшеп ҡарарға булды. Әүәл ул Шәүкәткә үҙе барырға йыйынғайны...

– Ҡыҙым, ин аман да шул Шәүкәтте ташламай ыңмы...

– Әсәй...

– Атайың – теге яҡта, ин...

– Әсәй, ни эшләйем мин? Мөхәббәтемдән баш тартайыммы? Мин уны яратам... Мин унан башҡа йәшәй алмайым...

– Миләүшә...

– Әллә атайым менән үҙем өйләшәйемме?

– Юҡ!

Ханым түшәккә ҡаплана, ҡыҙы ла илай.

...Шәүкәт Раушания ханымдарға үҙе килде.

Бынан алда ғына Раушания менән Тәлғәт аңлашты.

Тәлғәт балалары уҡыған кластарға ата-әсәләр йыйылышына йөрөй. Раушания ханым класс етәкселәре менән әрләшеп бөттө. Өйҙә лә олоғара ғауға ҡупты. Шунан бирле Тәлғәт үҙе... Ҡыҙҙары ла риза.

– Йыйылыш тип, Йомабикәгә тейә еңме?

Ни айәт, быуа йырылды, бисәнең түҙем таяуҙары ынды.

– Белмәй тип йөрөй өңмө? ин генә аҡыллы, бүтәндәрҙе төп башына ултырта - ың...

Тәлғәт тел еҙ ҡалды, ә Раушания әллә нисә үҙгә етте.

– Хәҙер нисек балаларҙың күҙенә ҡарарға уйлай ың?

үҙ өҙөлмәне, әр баҫылманы. Ир урынында ҡаҙаҡланғандай торҙо, бисә тынманы.

– ин миңә хыянат иттең, иң изге хыялдарымды тапаның... ин бынан ары был туп аны аша атлап үтергә хоҡуғыңды юғалттың – сығып кит! Был туп аға бүтән

баҫма!

– Раушания...

– Өндәшмә миңә!

– Был беренсе әм уңғы ҡат!..

– Ана, ҡыҙҙарыңды ҡарар инең. Ә ул бисәләр менән типтерә... Миләүшә нишләй? Ул бер ни белмәй, моңшамай ҙа!

– Раушания...

– Мин иңә ышанмайым, бер үҙеңә лә... Шул көнгә төшөрҙөң ин мине.

Үк еҙ бисә инрәне.

– Мин ине төрмәнән ҡотҡарҙым... Судтан судҡа йөрөгәнеңде, каталажкала алып киткәндәрен оноттоңмо? Мин ин тип йән аяманым...

Был «хөкөм» уҙылды ғына. үҙҙәр – баш осона эленгән ҡыңғырауҙар, Тәлғәттең уларҙан ҡолағы тондо.

– Сығып кит, Тәлғәт, күҙемә күренмә! ин миңә хыянат иттең, мин ин тип йәшәнем, бөтә ғүмеремде иңә арнаным. Бит еҙ!

Ир хәҙер үк йыйынырға, хәҙер үк ниндәйҙер ҡарар ҡабул итергә тейеш. Ир ҡымшанманы, бисә тынманы. Ир ике ут ара ында ҡалды, ә бисә икеләнмәне. Ул әлегәсә оҙаҡ көттө, оҙаҡ самаланы, әле хәл итте, киҫә өҙҙө.

– ...Раушания апа, аумы ығыҙ!

Шәүкәт был йортҡа ин дә мин килде лә инде. Әйтер ең, әсә е әпәй бешерә, әсеткегә тип йомошҡа ебәргән... Тауышы тау яра, барса өй эсен яңғырата.

– Раушания апа... – Тауышы ихлас.

Хәс тә шулай тейеш, ғүмер баҡый ҡатышып йәшәгән кешеләр генә шулай өйләшә... Шәүкәттең был кешеләргә бер хаслыҡ та ҡылғаны юҡ, киләсәктә лә яман уйы булмаҫтыр. Шәүкәт йөрәген аса был кешеләргә, Шәүкәт яҡты йөҙ менән килә, Шәүкәт яҡшылыҡ ҡына юрап йөрөй...

– Кем?

– Шәүкәт. – Шәүкәт аптыраманы, төшөп ҡалғандарҙан түгел.

– Шәүкәт?.. – Раушания ханым ҡойолоп төштө.

– Мин, апа. өйләшергә тигәйнем...

Ҡаршы ында дошманы тора. Унын мәсхәрә е. Унын ғибрәте! Бисә айырған ир, иң аҫыл емешенә үрелергә йөрьәт итеүсе... Был әр еҙ алабайҙы хәҙер үк ҡыуалап сығарырға ла ҡапҡаны бикләп ҡуйырға!

– Ни йомош?

– Ни йомош тип, Раушания апа... Мин өйләшергә тип килгәйнем... Ҡыҙығыҙ Миләүшәне яра-а...

– Уға теймә! Ишетә еңме??? – Яр ыған, йөҙө ағарынған ханым урынынан ҡалҡты. Хәҙер ул аяғүрә баҫты, өжүм итте. Инде уны бер ни туҡтата алмаясаҡ. – Ул – ҡыҙ бала, сабый... Ә ин... ин – бисә айырған кеше. Балаң да бар, буғай...

– Раушания апа...

– Мин ине ары тыңламайым!

– Раушания апа, беҙ...

– Юҡ!

– Беҙ Миләүшә менән бер-беребеҙҙе яратабыҙ...

– Юҡ! Юҡ! Юҡ!

– Раушания апа...

– Бары минең кәүҙәм аша ғына инәсәк ең был өйгә!

– Раушания апа...

– Әйтмә!

– Мин яҡшылыҡ менән килдем...

– Үтенәм!

— Беҙ ир менән бисә булып бөткәнбеҙ...

Шашҡан, сәсе-башы туҙған ханым тегенең ҡаршы ына килә башланы.

V

Раушания хәҙер «кейәү ҡайны тупрағынан» тигән әйтем хаҡында йыш уйлана. Аптырағандың көнөнәндер инде, шул үҙҙәр келт кенә итеп иҫенә килә лә төшә. Аптыраған өйрәк арты менән ыуға сумған, тиҙәр. Раушания ла, бәләгә тарығас, төрлө өн уйлай, кемде лә ғәйепләп ҡарай. Йыш ҡына ата ы Бәхтейәр хәтеренә төшә. Әллә Тәлғәт кейәүе лә ҡайны ы Бәхтейәр тупрағынанмы?

Бәхтейәр ҡарт йөрөмтәл зат булды шул. Икенсе ҡат төрмәнән урап ҡайтҡас та, ғаилә ен туҙҙырып сығып китте. Әллә нисә ерҙә әллә нисәмә ғаилә ҡороп, әллә ни саҡлы бала-саға сәсеп бөттө — ис төңөлә, ис тыйыла белмәне. Әллә Тәлғәт кейәүе лә шуның нәҫеленәнме? Әллә Хоҙай юрый шулай тура килтерәме, тәбиғәт шулай үҙе яраҡлаштырамы? Раушания алйый уйҙарынан, ис бер аҡларлыҡ дәлил таба алмай тормоштоң боролоштарынан. Елкә енә яҙмыш туҡмағы төшөп кенә тора. Миләүшә лә көйҙөрә, йәнен үртәй. Ул да ата ы ҡыҙымы, әллә олата ы Бәхтейәр яғына тартҡанмы?

Бөтә бәләләр — бер башына. Әлегә саҡлы тыныс йәшәнеме, бәхетле булдымы? Балалар йортонда үҫкән кеше бер ҡасан да үҙен бәхетлемен тип атамаҫ. Улар — бүре балалары, тормошҡа бүре балалары күҙе менән баға. Уларҙы ил, хөкүмәт күпме генә ҡарама ын, ҡәнәғәт түгелдәр, яҙмыштарына ғүмерҙә лә рәхмәт уҡымайҙар. Үҙҙәрен әр ваҡыт кәм тоялар, донъяға кәм енеп бағалар. Ата-әсәле балалар — уларҙың бәхетен урлаусы, өлөшөнә кереүсе, ә хөкүмәт гел бурыслы. Кемдер гел уларҙы ҡайғыртып торорға, уларға гел ниндәйҙер игелек ҡылырға тейеш. Бурыслы. Улар — кеше елкә ендә йәшәүселәр, гел кемдәндер ниндәйҙер ярҙам алып торорға тейештәр.

Раушания ла детдомдағы тормошон бәхетле сағына анамай. Аҙаҡ уғыш сыҡты, атай аман колхозда башлыҡ ине, шунан тағы төрмәгә китте. Ҡыҙ ҡалала уҡыны, үҙ йүнен үҙе күрҙе, аслы-туҡлы йәшәне. Ә ул үҙ-үҙен генә ҡараны бит, ә, Баныубикә туғаны шикелле, бүтән кесе туғандарын ҡарашманы, өй эсе мәшәҡәттәрен күрмәне, бүтән хәстәрҙе белмәне.

Бары уҡып сығып, кейәүгә барғас ҡына, донъя ы теүәлләнгәндәй итте, тормошо бер ыңғайға төшөп китте. Ошо йылдар ғүмеренең иң бәхетле мәлдәре булған икән. Тәүге әм берҙән-бер өйөүе, балалары тыуыуы, Тәлғәтте төрмәнән ҡотҡарыу... Йы ания, Миләүшә, Фәнил...

Инде килеп, шул ҡыҫыр ғына бәхете лә ҡороп ҡуйҙы: Раушания тәүләп иренең хыянатын асты, Миләүшә ҡыҙының әҙәм ышанмаҫтай мәсхәрәгә тарып йөрөүен ишетте... Шул аран ғына бәхете лә байыны, Раушания япа-яңғыҙы тороп ҡалды. Ире ташланы, күңеле менән унан түбән йәнгә әүрәне, ә балалары... Йы ания ы, Фәниле? Раушания — үк еҙ, хәҙер шуларға бауырын баҫырға мәжбүрме? Ары шул балалар ғына йөрәген йылытырмы?

Раушания ни ҡылырға, был хәтәрҙе ҡай ылай сисергә лә белмәй: айырылышырғамы, әллә аман шул бер күнегелгән ғүмер йомғағын тағата бирергәме, хәс тә бер ни ҙә булмаған кеүек ҡыланырғамы? Мәктәп алдында, уҡыусылар ҡаршы ында оят, кешеләргә ниндәй йөҙө менән ҡарай ала?

Төрлөсә уйлай. Ишеткәне лә бар: ирҙәр йүн еҙ инде ул, ҡырҡты уҙ алар, боҙолалар, ситкә ҡайыра башлайҙар, йүгәнде шыпырып ҡасырға ғына торалар. Раҫтыр: уның ире лә бүтәндәрҙән бер ҙә артыҡ та, кәм дә түгелдер? Әлегәсә Раушания ғорур йөрөнө: йәнә е, ул бүтәндәргә оҡшамаған, ире лә — бүтән! Тоғро зат, өйөклө ҡатынының күҙенә генә ҡарап тора... Раушания — дәрәжәле ханым, ауылда беренсе сибәр, Тәлғәт уға ис хыянат итмәҫ, уны шәп күрер, ила иәм тип атар.

Бер көн килеп хыял арайҙары емерелде, ошо иллюзиялары пыран-заран булды, Раушания ергә төштө. Ерҙә ҡай ылай төҫ өҙ тормош, йүн еҙ бәндәләр, аяу ыҙ хәҡиҡәт тантана ы! Ерҙә тамсы ла бәхет юҡ, хыял тигәнең дә буш ҡыуыҡ ҡына икән... Мөғжизә, матурлыҡ, ҡыуаныс ул күктәрҙә генәме, әкиәт емеше, хыял осошо ғынамы? Ҡай ылай ҡыйын был тормош, ҡай ылай асы хәҡиҡәт – йәшәге е килмәй хыял ыҙ, бәхет еҙ көйө – әлегәсә нисек түҙеп, дөрөҫө, нисек шулай алданып йәшәлгән. Сабый балалар ымаҡ, әкиәткә ышанылған, әкиәткә инанылған. Раушания мәктәптә лә ысынбарлыҡты түгел, ә әкиәт уҡытҡан балаларға, уларҙы әкиәт донъя ына сәйәхәткә әҙерләгән! Эй, балалар, әкиәт иленә рәхим итегеҙ!

Бөгөн үҙе лә уянды, балалыҡ иленән айырылды, аяу ыҙ тормош менән маңлайға-маңлай сәкәште... Танауы емерелде, күҙе асылды, йөҙө йәмрәйҙе. Тормош – төҫ өҙ бер нәмә икән... Хәҙер нишләргә тейеш? Бала-саға ғына булған, алданып йәшәгән, өйөклө иренә арҡаланып, иркәләнеп йәшәгәнме әлегәсә был наҙлы бисә?

Нишләргә, был тубал башты ҡайҙа орорға? Айырылышырғамы? Нисек түҙергә, был мәсхәрәне нисек кенә күтәр ен? Иң-иң яҡын тип йөрөгән кешең, берҙән-берең, өйөклө өйәгең... Тағы нисек, ҡай ылай итеп бөтә ен бер юлы түңкәреп ташларға, бөтә енән бер тында нисек баш тартырға, ғаиләне тарҡатырға, мөлкәтте бүлергә? Ә балалар...

Нисек, нисек түҙергә, нисек күтәрергә был хурлыҡты? Раушания бер ҡасан да, бер кемде лә ғәфү иткәне юҡ бит, теге ваҡытта ла, аҙаҡ та ата ын ис ғәфү итмәне, тейешле енә тәғәйен яза ын бирә барҙы. Тәлғәт тә енәйәт ҡылды, ул да яза ын алырға тейеш! Ул Алланың ҡашҡа тәкә еме, әллә язанан, хөкөмдән өҫтөнмө? Ул – иң оло енәйәтсе, уның күңелен талаусы, мөхәббәтен урлаусы зат, ул иң хәтәр, иң аяу ыҙ язаға лайыҡ: йөрәген, нәҡ йөрәген яраланы, йөрәк түрендәге мөхәббәт гөлөн умырып йолҡто. Мөхәббәт ҡарағы! Раушанияның күңел түтәлен тапаны, йөрәген үлтерҙе.

Хәҙер Раушания юҡ, элекке бәхетле, мөхәббәтле Раушания үлде, хәҙер ул – ҡоро өлдә, ҡоро кәүҙә... Ул – хөкөмсө, ул – үткер хәнйәр. Йөрәк урынында бары көл өйөмө, усында шул мөхәббәт күмере тороп ҡалды... Үс аласаҡ, ҡон ҡайтарасаҡ; мөхәббәте ҡуша, үткәне талап итә; Тәлғәттең анты ҡуша – ул хыянатсы, ул яза ын аласаҡ!

Тәлғәт мөхәббәтен үлтерҙе, хыял илен емерҙе. Тәлғәт үткәндәргә, ғаилә енә хыянат итте, Тәлғәт – енәйәтсе!

Раушания ни ҡылыр, нисек хәл итер? Аҡылынан ғына яҙып ҡуйма а, алйотланып ҡына бөтмә ә ине...

Ниңә үр әләнә, ниңә, ирем – йәрем, тип үртәлә? Ниңә үткәнен ағына, юғалтҡан мөхәббәтен эҙләй, татыған бәхетен юллай? Ниңә, ниңә бөтә е лә? Үткән – бөткән, үпкән – онотолған, ҡосҡан – елгә осҡан түгелме? Был донъяла бөтә е лә үтә, бөтә е лә мираж бит, тағы ниңә үкенергә, ниңә үртәлергә – бөтә е лә бушҡа ғына бит. Хәтирәләрҙән дә бер ниндәй фәтүә юҡ, кеше, бөгөнгөндө бел, бөгөнгөң менән йәшә! Үткән – онотолған, буяуы ҡупҡан, уҡа ы таушалып бөткән бит.

## VI

Мәктәптә Советтар Союзы Геройы Талип Сөнәғәтуллин менән математика уҡытыусы ы Раушания Бәхтейәровна алышты. Тәкәббер директор уны йә эшенән сығарып ебәрә алманы, йә ҡул елтәп кенә ҡуйманы. Рушания завучлыҡтан киткәненән уң директор ағыҙаҡтай ҡаҙалды: әле был, әле теге сәбәбен тапты, дәрестәренә кереп ултырҙы, эш пландарын тикшерҙе. Ахыр бер дәғүә лә белдерә алмағас, кластан тыш эштәренә бәйләнде.

Мәктәптә лә теге-был бәлә е, теге-был ваҡиға ы сығып ҡына торҙо. Ҡыш көнө

Раушания класынан бер бала аҫылынып үлде. Күрше ауылдан йөрөп уҡый ине. Иптәше менән мәктәптең хәрби әҙерлек класынан мылтыҡ урлайҙар. Милиция тегеләрҙең эҙенә төшә. Малайҙы әйләнгән айын милиция бүлегенә саҡырталар, орау алалар... Оҙаҡламай икегеҙҙең дә эшегеҙ судҡа тапшырыла, ата-әсәйҙәрегеҙ, мәктәптән уҡытыусыларығыҙ саҡыртыласаҡ, тип ҡурҡыталар. Теге бала ҡурҡыуға төшә. Өләсә е менән генә йәшәй икән, әсә е менән ата ы әллә ҡайҙа.

Раушания ла әле милиция бүлегенә, әле РОНО-ға йөрөп ялҡты, уҡытыусылар ара ында уның был хәленә өйөнгән кешеләр ҙә бар кеүек. Директор үтә лә эшмәкәр булып китте: йә милицияға, йә РОНО-ға йүгерә, баш эймәҫ уҡытыусыға танау буйынан ғына ҡарай. «Күрҙегеҙме, бик текә сирттерә инегеҙ. Был – класығыҙҙа тәрбиә эшенең түбән ҡуйылыуы хаҡында өйләй...»

Тағы класс журналдарын йыйып алдылар, йыллыҡ пландарын тикшерҙеләр... Бөтә е өсөн дә класс етәксе е – Раушания Бәхтейәровна ғәйепле! Ул киҫәтмәгән, тәрбиәүи дәрестәр алып бармаған, өҙөмтәлә уҡыусы ы үҙ-үҙенә ҡул алған!

Эш РОНО советына барып етте, Раушания ханымдың игеҙенсе кластар менән эшен энә енән-ебенәсә тикшерҙеләр. Класс етәксе енә ҡаты шелтә иғлан ителде. Мәктәптән ҡыуыу, хатта класын икенсе уҡытыусыға тапшырыу хаҡында тәҡдимдәр булды булыуын, ләкин совет ағзалары ваҡытында тыйылып ҡалды. Кемдер, милиция үҙе лә ғәйепле, ул йәтим баланың ҡотон алған, уны нығ ҡурҡытҡан, тип сығыш я аны.

Ярай, был хәлде шул ҡаты шелтә менән йомоп ҡалдырҙылар. Эш үт ә лә, күңелдә йөйө ҡалды, йәтим бала әрәм булды. Ә РОНО советында Талип Сөнәғәтуллиндың ҡысҡырыныуҙары, класс етәксе енә әллә ниндәй бәлә тағыуҙары... Ҡолаҡ осонда ғына зыңлап тора аман директор өндәре... Имеш, класс етәксе е ғәйепле. Иң тәүҙә ул баланың хәлен күрергә, аңларға тейеш ине... Класс етәксе е – баланың әсә е урынында!

Бөтә был ваҡиғаларҙан башы ҡатты, нервы ы ҡаҡшап бөттө Раушания ханымдың. Шулай ауыл менән юғары белемле белгестәр ара ындағы бәхәс тәрәнәйә генә барҙы. Хатта бер заман, әллә ҡул елтәйекме, әллә ташлап ҡына китәйекме шул Таңғырҙы, тип бөттөләр. Ауыл көслө, Сөнәғәтуллиндар ҙа бында тармаҡлы нәҫел, барыбер уларға, килмешәктәргә, бында көн күр әтмәйәсәктәр...

Өйҙө яңы ғына алып сыҡҡайнылар. Инде сигендек, инде ҡул елтәнек тигәндә, кире уйлап тороп ҡалдылар.

## VII

Уларға рәхәт. Нисә айҙан уң ҡабат осрашалар, Йы ания йәнә ауылға каникулға ҡайтҡан.

– Ғаян... – Егеттең түшенә ырлыға, ағынған, имеш. Аңламаҫ ың был кешене! Остоҡ ҡына бәхетенә лә өйөнөп, шуға разый булып йәшәй.

– Йы ания, ағындыңмы?

– ораған була. ин генә ул туң йөрәк! Хат та яҙмай ың. – Иркәләнеп тә, үпкәләп тә әйтте йәне яралы ҡыҙ. Әйтер ең, шул мәлдә зарлы егеттең өҫтөнән оло йөк шыуып төштө. Йәне баҫылып, күҙе асылып ҡалды.

– Йы ания, ин минең хаҡта уйланыңмы?

– Уйламайса... ораған була бит әле тағы... – Алсаҡланып көлдө, сәс толомдарын тағы арҡа ына ибеп ебәрҙе шаян ҡыҙ. Ул инде наҙға, мөхәббәткә тан ыҡланғайны, түҙеме күптән ынып бара ине.

Ғаян да өйөклө өн көткән – өйөш уйындары иркенә бирелделәр: иркә йәренең яңаҡтарынан, ирендәренән үпте, сәсен ыпырҙы. Ирендәр элек тәме әйтә, сей элек тәме, әллә ниндәй ят тәм кеүек. Күптән ағындырған тәм... Шунда инде туңдың туңы тигән Ғаян да балауыҙҙай йомшара, ҡатҡан йөрәге лә иреп ҡуя.

— Ғаян... — Әллә кем бышылдай.

— Йы- а-ни-ям... — Әллә кем яуап ҡайтара.

Инде арҡандай ишелә, бер-бере ен йоторҙай булып сапсына, аттар ымаҡ тешләшеп бер булалар. Инде сапсандар түшәктә тулап йөрөй, ҡом оҙлана. Саялар, инде тан ыҡтарын ҡандырыр ирект әргә тарып, күҙҙәрен йомалар, был булмыштан айырылалар, йәндәре күккә аша, был донъяны ташлап ҡаса.

Ләззәт иркенә бирелеп ҡыҙ тәрән улай, егете лә көр өнөп ҡуя, инде наҙ, наҙ ғына сәсәтә иҫәрҙәрҙе, хыялыйҙарҙы шул ила и бәхет минуттары тонсоҡтора...

— Ға-я-н...

— Йы- а-ни-я...

Йондоҙҙар күктә ойоған, был йы анда ваҡыт ағышы туҡталған, йөрәк тибештәре онотолған.

Был бәхет тан ыҡ ҡына бит... Тағы тиҙ үк өҙөлөп тә ҡуйыр. Урамда хаслы кешеләр йөрөйҙөр йә дошмандар арттан күҙәтәлер. Ә был тиле икәү бер ни хаҡында ла уйламай — донъяларын, хәсрәттәрен, хәстәрҙәрен онотҡандар, дошмандарын иҫтән сығарғандар. Улар хәҙер хыял иркендә, наҙ ҡойоно эсендә, ерҙән, был фани донъяларҙан айырылған.

Был ғәмәл тағы нисә ҡат ҡабатланыр икән? Был бәхеттең осо-ҡырыйы булырмы, был ғашиҡ уйынының бер осо сығырмы?

## VIII

Больницанан сыҡҡас, Сәрби киленде өйгә индермәнеләр. Ҡаты күңелле ҡәйнә барыбер мораҙына иреште, үҙ үҙендә ныҡ торҙо, бер аҙым да сигенмәне. Уртансы улы Ғәлиәкбәрен үҙ яғына ауҙарып бөткәйне.

— Өй — инеке, әр бер ҡаҙағын үҙең ҡаҡҡан ың, килендең бер ҡыҫылышы ла юҡ, — тип ебәрҙе ҡәйнә. Ғәлиәкбәр мәмәй ҡарсыҡ үҙенә еңел генә төштө лә ҡуйҙы. Бер ҡасан да үҙ үҙе булманы, әсә е бер ҡулы менән бир ә, икенсе ҡулы менән алды. Сәрби киленен дә ун алты йәштәге көйө улына үҙе йәрәшкәйне, үҙе ҡыуып сығара.

Сәрби килен, ике бала ын йөкмәп, Яйыҡ аша ындағы сыбыҡ осо туғандарына барып ыйынды. Әҙерәк хәл кереп, баш-күҙ алғас, туғандары өйҙө юлларға керешт е. Яҡшылыҡ менән бирмә ә, Сәрби судҡа барасаҡ!

— Йыуаштан йыуан сыға, тын күлдә ҡорт үрсей, — тип туҙынды Хәкимә ҡарсыҡ.

Ғәлиәкбәр өндәшмәне, башын баҫып ултырҙы.

— Судта кире сикмә! Сәрби килендең ул өйгә ни ҡыҫылышы бар?

Ҡаты күңелле ҡәйнә тас-тос талашты, килене, унын туғандары менән йәнтәслим яғалашты. Хәҙер Хәкимә ҡарсыҡ Сәрби килене менән өй өсөн булашып китте.

...Ғәлиәкбәр суд ултырышынан башын әлендереп ҡайтты. Хәс тә өйгә эшен үтәмәгән баланы уҡытыусы таҡта янына саҡырған.

— Йә!

— Суд «Өйҙө — Сәрби менән балаларға!» тип ҡарар сығарҙы.

— Шул хәстрүштәргә — өй ынлы өй! — Ҡаты ҡарсыҡ ултыра төштө.

Хәкимә ҡарсыҡ тынманы. Әллә кемдәр менән өйләшеп бөттө. Талап итте, үҙ яғына ауҙарҙы. Кемдер ғариза яҙа, кем судта Ғәлиәкбәр яҡлы булып аңлатма бирә... Хатта оло улы Тәлғәтен дә был эшкә екмәксе итте. Тәлғәт — ревизор, яҙыуыҙыуға оҫта, күп судтарҙа ҡатнашҡаны бар. үҙе үтә, башы эшләй.

— Әсәй, ин сабыйҙар хаҡында уйла! — тип аңлата Тәлғәт.

— Әйтмә миңә бер үҙ ҙә!

— Әсәй, улар инең ейәндәрең бит!

Тәлғәт ҡул елтәне, ә Хәкимә ҡарсыҡ барыбер үҙенекен итте, барыбер Ғәлиәкбәрҙән яңынан судҡа ғариза яҙҙыртты. Суд был юлы көтмәгәндә Ғәлиәкбәр яғына баҫты. Сәрби тағы, кәрәк-ярағын йөкмәп, Яйыҡ аръяғындағы алыҫ туғандарына барып йығылды. Шулай ҙа, судтан сыҡҡас, Ғәлиәкбәргә әйткән:

– Ғәлиәкбәр, мин инә бала көйө генә барҙым, инә ике бала табып биргән бисәнең ни гона ын таптың? Рәхәт бите күрмә! Күҙ йәшем төшөр инә! Үҙең дә минең кеүек сиргә абышыр ың!

Сәрби килен шул хәлдән уң тағы ауырып китте. Больницаға алдылар. Оҙаҡламай яман хәбәр ауылды тетрәтте: Сәрбиямал килен, мандый алмай, больницала вафат булған.

IX

Был хәл бөтә ғаиләне аяҡҡа баҫтырҙы: Фәнил иҫ еҙ йығылған, Фәнил аяғын алҡын ыуға тығып ултырған!

Тәлғәт райпотребсоюздан йүгереп ҡайтты: эшенә шылтыратҡандар. Больницананмы, өйҙәнме?

– Тәлғәт, – тине лә Раушания ханым ығылып төштө – улы ҡашына тубыҡланып ултырҙы. Уны ы больница карауатына уҙылып яҡкан.

Ел-дауыл ҡубыр, ғәрәсәт ҡалҡыр тип ис уйламағайны Раушания. Шул гона -ыҙ ҡылығынан анауындай мәхшәр сыҡты. Дәрестән ҡайтҡас, почта йәшнигенән гәзит-журнал кертте. Хат та бар! Фәнилгә! Конвертты әйләндереп-тулғандырып ҡараны, ҡыҙыҡ ыныуын еңә алманы әсә. Ул мәктәптә лә балаларҙың хатын йолҡоп ала, хатта, запискаларын класс алдында ҡысҡырып уҡый торғайны. Гона лыларҙы шулай фашлай. Тағы детдомдағы теге Уҡлау йотҡан тәрбиәсе иҫенә төштө. Ул да шулай итә торғайны бит!

Өҫтәүенә, хат улына килгән. Мәрйә ҡыҙы яҙа түгелме?

Мөхәббәт хаты. игеҙенсе класс бала ы яратыу, үбешеү, тағы әллә нәмәләр, әллә нәмәләр тура ында яҙа. Мәрйә ҡыҙҙары асыҡ-яраныраҡ була шул.

Раушания, улы мәктәптән ҡайтып инеү менән, ҡыҙҙыра башланы.

– Ғашиҡ хаттары яҙып ята ың, бер апайындың абышҡа менән йөрөүе етмәгәйне миңә...

Улының йөҙө ағарынып китте, хатты әсә енән йолҡоп тиерлек алды.

Раушаниялар Фәнилде, кинйә тип, иркәләберәк үҫтерҙе. Малай үҙе лә быны иҙеп ирәйҙе, апаларына арҡаланып үҫте. Өй эштәрен эшләмәне, гел уйын менән булды, ололар әйткәнен тыңламаны, арҡыры өйләште... Арҡыры, ҡырыҫ бала, әсә енә тартыпмы, әллә Хәкимә өләсә енә оҡшапмы, ҡаты күңелле булды, йүнләп өйләшмәне, гел өҙә уҡты.

– Кеше хаты... Ниңә астың? – Әсә енә екерҙе, теге е ауыҙ асып үҙ әйткәнсе, бүлмә енә инеп бикләнде.

– иңә әле иртә, танау аҫтың кипмәгән... Ишу мөхәббәт хаты яҙыша... – Ишек төбөндә тыпыслап торҙо. – Мәрйә ҡыҙың кәрәкмәй, туп ама баҫтыра ы булма!

Теле талғас, тамағы ҡарлыҡҡас ҡына тынды Раушания, аҙаҡ үҙ эше менән мәшғүл булды. Ә үҫмер тышҡа сыҡты ла аяғын боҙло ыуға тығып ултырҙы. Ауырығы ы, ошо минутта ғына үлге е килде. Ул кемдеңдер шулай баш күтәргәнен ишеткәйне. Фәнил дә әсә енә ҡаршы шулай баш күтәрҙе.

Тәлғәт тешләнде: эсенән мең төрлө уй үтте, йөрәгендә мең төрлө нәфрәт уты тоҡанды.

Раушания ханым а тар орҙо, нәфис бармаҡтарын ындырҙы.

– Шыҡылдатма әле шуларҙы! – тине Тәлғәт, йәне көйөп.

– Ниңә, тешеңә тейәме?

– Тәнемә тейә!

– Хәҙер минең бармаҡ шыҡылдатыуым да, баҫып йөрөүем дә  инә оҡшамай – бар, сығып кит! Мин  ине тамсы ла тотмайым!

– Эх! – тине ир.

–  ин ғәйепле бөтә енә! Донъяң ята, балаларың нишләй?.. Бере е, абышҡа, ти, икенсе е аяғын  ыуға тыға...  ин өйгә төшмәй ең! Бары ы ла бер бисә елкә ендә!

– Етәр! Бала йоҡлай бит... – Тәлғәт Фәнилгә ымланы.

– Етмәй тор он! Дөрөҫлөк күҙеңә төртәме?  ин унда йөрө, мин донъя көтәм, балалар тырым-тырағай... Атай шулай нәҫел үгеҙе булғас...

– Эх! – Тәлғәт уртын тешләне. – Әйҙә коридорға!..

Коридорҙа ла әр тынманы.

–  ин, Раушания, Фәнил өсөн ғәйепле!

– Мин!..

– Уҡытыусы бул аң да,  ин тәрбиәсе түгел, балалар менән  өйләшә белмәй ең... – Тәлғәт, бер туғарылғас, эсендәге ен йәшермәне. –  ине мәктәпкә, балалар янына яҡын юлатмаҫҡа кәрәк.  ин балаларҙы боҙа ың...  ине прокуратураға ебәрергә кәрәк йә төрмәгә надзиратель итеп ҡуйырға – шунда  инең урының!

– Мин – маҡтаулы уҡытыусы, мәктәптә иң белемле е... Минең юғары категория! – Раушания үҙен белешмәҫ хәлгә етте.

–  Үҙ балаларың менән уртаҡ тел таба алмай ың, ә кешеләрҙекен уҡытып йөрөгән була ың! Балаларыңдың бере е  ыуға ташлана, икенсе е боҙло  ыуға аяғын тыға...

– Ә  инең улар менән  өйләшергә ваҡытың юҡ,  ине бисәләр нығыраҡ ҡыҙыҡ - ындыра!

– Ярай...

– Ана шул  өйәркәләреңә сығып кит!

– Мин сығып китермен, Раушания... – Ир сәсәне, бисә әйтмәҫ  үҙҙәрен әйттерә, тип үкенде, тик әйтте: – ...тик балаларҙы ғына йәлләйем. Күптән «талаҡ» тип ҡысҡырыр инем.

– Талаҡ! Талаҡ! Талаҡ! Мин әйттем  инең урыныңа, әйҙә, айырыл! Ана бара юлың! Артыңдан көл  ибеп ҡалырмын! – Бисә шашты,  ис башын бирмәне аҫау бейә. – Бар, сығып кит!

Шул арала коридорҙа йүгерешә башланылар, ата-әсә улай баҫты, былай  уғылды: ни айәт, ашығыс рәүештә Фәнилде реанимацияға оҙаттылар.

## X

Ул йылды Ғаян Раушания апайҙарҙан ҡайтты ла әсә енә инәлде:

– Әсәй, мине прокуратураға саҡырталар, Раушания апа ғариза яҙған... Әсәй,  ин үҙең барып  өйләш әле!

Фә имә – тәбәнәк буйлы, тәкәббер ҡатын. Үҙ  үҙле, үгеҙ күҙле. Үҙен, берәүҙән дә кәм түгелмен, түрә бисәләре менән дә типә-тиң баҫып әрләшә, ярыша алам, тип  анай.

– Әсәй, тыңла, эш ҙурға китмәксе. Тәфтишсе әллә ниндәй  орауҙарын бирә – мине енәйәтсе  ымаҡ күрә.

Фә имә берәүҙән дә өркмәй. Әле лә үҙен тыныс тотто, бәрелеп- уғылып, юҡҡа көйөп барманы, улы менән дә битараф  өйләште.

– Бер сәпәкләп  уҡҡан тип, ултыртып ҡуймаҫтар әле! Ҡурҡма! Ул эре бисә, әллә кем булып йөрөй...

– Әсәй, эш етди бит...

–  ине ҡурҡытырға, ҡыҙҙарынан отводить итергә уйлайҙар...

Ғаян аптырап ултырҙы.

— Беҙҙе тиң енмәйҙәр, нисек тә арағыҙға төшөргә итәләр! Улар — шәп, түрәләр менән генә ҡатыша... Ул Низамды ниңә ҡәберенән ҡаҙып сығаралар икән? Уларға тейеп торамы?

— Колхозға яңы ҡайтҡан Хурамшин этлеге был, ул — эскерле әҙәм. Эскесе Солтанбай ана шул Хурамшиндың ҡулы аҫтында эшләй. Солтанбайы баш агрономдан яңы машина өмөт итәлер.

— Төкөр шуларға, улым! Үҙеңә тиңеңде тап! — Тәкәббер Фә имә көймәне. — Йыйын килмешәктәр бында Сөнәғәтуллиндарҙан көлмәксе!

— Әсәй, бында ҡыҙ ҡайғы ы ғына түгел, баш ҡайғы ы бит...

— Көймә, буҡ та эшләтә алмаҫтар. Бер сәпәк иткәндән... — Ул икеләнә белмәй. Нисек әйтә, шулай була. Ул өҙә лә ҡуя.

Шулай ҙа Ғаян икенсе көн тағы шул үҙҙе ҡуҙғатты.

— Әсәй, Раушания апайҙарға бар! Бер өйләшкәндән телең ҡалыр, ти еңме?

— Ай әттә генә е! Өҙмәй ең дә ҡуймай ың, быуынға ғына төшә ең! Әйттем дә, улар ине ҡурҡытырға самалай... Беҙҙең нәҫелдең тубыҡланғанын көтәләр...

— Әсәй, мин апайҙан ғәфү үтендем... ин дә...

— Ғүмерҙә лә! Ғүмерҙә лә был хәл булмаясаҡ! — Тәкәббер бисә сәсрәп китте.

— Әсәй, Раушания апа, әсәйең кил ен, ти...

— Алдымда теҙлән ен, табанымдан үп ен, тимәйме?

— Әсәй!..

— Уф алла!

— Әсәй, бар, ҡотҡар мине!

— Ярай, улым, уйлап ҡарармын!

Ғаян өмөтләнде. Кем-кем, ә әсә е уны хәтәр яҙмыш ҡосағына ташламаҫ, әтнәкәле эшкә ҡул елтәп ҡуймаҫ.

Ә Фә имә апаҡай икенсе төрлөрәк уйлай ине.

## XI

Раушания ханым кинйә енең баш осонан китмәне. Уны ы ҡыл өҫтөндә ҡалған зат ымаҡ бышлыға, аташа, маңлайы ут кеүек. Ярай, аңына килде. Асыулы, йәне ялы ханым үҙенең был бәләләрҙә ғәйепле булыуын да аңлай, әммә ни хәл ҡыл - ын. Ул ҡылынғанды кире ҡайтара, үҙ-үҙен йә әт кенә үҙгәртеп ҡуя алмай бит.

Төрлө өн уйлай. Бар ғүмере күҙ алдынан үтә. Йәшлеге, Тәлғәт менән бәхетле көндәре... Булған бит, булды. Күберәк ҡырҡыу мәлдәр күңелгә уйылған... Йөрәктең тетрәнгән, күңелдең яр ыған саҡтары хәтер андығында аҡланған. Ә бәхетле көндәр, шат мәлдәр тиҙ онотола икән, уңынан бөтә үткән ғүмереһ үкенестәрҙән генә тора, кисергәндәрең үтә аянысла ла, төҫ өҙ ҙә ымаҡ тойола. Үткән ғүмер — ҡалған хәтер.

Юҡ, юҡ, уҙған ғүмер ул саҡлы ла үкенесле булмаған, уның аяҙ көндәре, сағыу биҙәктәре лә йылтыраған, ә беҙ, бәндәләр, күберәк көлгәнбеҙ, йышыраҡ өйөнөс татығанбыҙ, бәхетебеҙ ҙә мөлдөрәмә булған... Бары хәҙер, күп ынауҙар үтеп, бәгеребеҙ ҡатҡас, быуындарыбыҙ тыңламай башлағас, йыш сырхағас, үткәндәр көй өҙ булып иҫкә төшә. Юҡ, юҡ, беҙ ҙә өйгәнбеҙ, өйөлгәнбеҙ, сабый балаларҙай онотолоп, илереп көлгәнбеҙ.

Раушания ла бәхетле булманымы ни? Ул яр ып-шашып өймәнеме, өйөклө ө хаҡына ут-ғәрәсәт урта ына ташланманымы? Ә Тәлғәт... Тәлғәт шуны оноттомо икән? Шул инә бөркөттөң судта йәнен дә, тәнен дә аямай дошманына шыҡайыуын үҙ күҙҙәре менән күрҙе бит.

«Байраҡ» совхозы үҙәгендәге аҙыҡ-түлек магазины атыусы ы — бүлексә управляющийының ҡатыны Хафиза Сарбаева, ә тауар магазиныныҡы — уның ки-

лендәше Зарифа Сарбаева. Зарифа килендәшенең үҙе менән ярышып йәшәгәнен дә белә. Хафизаның ауалы, түрә ҡатыны булыуы менән кәпәренеүе лә уға сер түгел.

Райпотребсоюз ревизоры Тәлғәт «Байраҡ»ҡа кил ә, бүлексә управляющийы Сарбаев дуҫына уғылмай китмәй. Был юлы ла шулай булды. Тәлғәт дуҫына инеп өлгөрмәне, артынан баҫтыртып тигәндәй Зарифа килеп керҙе.

Хужалар, аптырап, сәмсел бисәне лә табынға саҡырҙы. Шунда Зарифа, үҙ эйәрә үҙ сығып, ҡайғы ын өйләп ташланы.

– Тәлғәт ағай, ҡотҡар! ОБХС-тан Үзбәков тигән бәндә бигерәк яуыз икән: магазинға килеп керҙе лә, учетҡа тип, ишектәрҙе бикләп алды. Ә минең кассаға мең ярым аҡса ала ым бар ине. Тотто!

Килендәшенең асыҡтан-асыҡ лаулап хәбәр алыуын башта яратмайыраҡ тыңлап ултырған Хафиза ла терелде:

– Дөрөҫ әйтә, Тәлғәт. Миңә лә бер бәйләнде: салғыны 90 тиндән атмай ың, 1 ум менән ата ың, тип акт төҙөнө...

Тәлғәттең кәйефе күтәренке сағы ине, көләм өрәне лә:

– Ярай, Зарифа ҡоҙаса, мин ул егетте беләм, өйләшеп ҡарармын! – тип вәғәҙә итте.

– өйләш, өйләш! – тип төштө Хафиза ла, килендәшенә яҡшы атлы булып күренергә тырышып.

Ревизорҙың тормошондағы был бәләкәй генә ваҡиға онотолған да булыр ине, әммә бер осо килеп сыҡты.

Тәлғәт килендәштәргә биргән вәғәҙә ен үтәне, Үзбәков менән өйләште. Артабан район универмагындағы атыусыны икәүләп ҡыҫымға алдылар. Үзбәков тегенең йәшергән тауарын тапты, ә Тәлғәт был ваҡытта юрый универмагта урандҡый ине. атыусы уға «яныу»ын өйләне... Универмаг атыусы ы, ОБХС хеҙмәткәре төҙөгән актты юҡ иткәстәр, йомартланып китеп, Тәлғәтте арыу ғына ыйланы.

Үгеҙ ауылында тауар магазинына планлы ревизия үткәрҙе Тәлғәт. атыусының бер аҙ өҫтөнә сыҡты, әлбиттә, тик йомшаҡ күңелле Тәлғәттең биш бала әсә е Фәттәхованы «яндырырға» йөрәге етмәне. Теге бисара, ыйырын салып, магазинға бурысын түләй алды.

Шул арала яңы бәлә: Хафиза Сарбаева магазинына ла ревизия бара, меңдән ашыу ум аҡса өҫтөнә сыға...

Тәлғәт башын тотто: райпотребсоюзда был эште туҡтатып өлгөрмәне. Нишләргә? Утҡа баҫҡан бесәй кеүек ыуаланды, гүйә, үҙен уйнаш өҫтөндә тотолған бәндәләй хис итте.

Был бәлә шуның менән генә ослан а ине лә...

Райпотребсоюз ревизорын район прокуроры үҙенә саҡыртты: Хафиза Сарбаева нишләптер прокуратураға «Тәлғәт... закон ыҙ рәүештә Зарифа Сарбаеваны ҡотҡарып алып ҡалды» тип аңлатма биргән! Йәнә е, мин генә урлашмайым әле, минең тирәләгеләр ҙә Алла бәндә е, шулай уҡ гона лы әҙәмдәр... Билгеле, Хафиза, Тәлғәткә үс итеүҙән бигерәк, килендәшенә көнләшеп яҙған аңлатма ын...

Икенсе көнө ревизорҙы тағы прокуратураға саҡырталар. Хафиза Сарбаева бөтән аңлатма яҙған. Имеш, Тәлғәт Үгеҙ магазины атыусы ына ла ыуҙан ҡоро сығырға ярҙам иткән... Үгеҙ ауылына барып тикшереп ҡарағандар, магазиндағы бөтә документацияны аҡтарғандар... Дөрөҫ. Хафиза Сарбаеваның ялыуы хаҡ: атыусы өҫтөнә мең ум сама ы сыҡҡан, шуны ул ыйырын атып түләгән... Ә Хафиза Сарбаева был хәбәрҙе ҡайҙан белгән? И, асыҡ ауыҙ Тәлғәт: ин ауылда йәшәмәй еңме... Үгеҙҙә лә йүкә телефон шәп эшләй.

Шулай янды Тәлғәт. Аҙаҡ ишетеүенсә, райком прокуратураға ҡаты баҫым я аған. Ревизорҙы ғәфү итмәҫкә, ҡулдан ысҡындырмаҫҡа! Ул районда кемдеңдер

юлын киҫкән, кемдеңдер тамағына арҡыры торған.

Хаҡ: прокуратура үҙ белдеге менән генә был эште ҡуйырта алмаҫ ине. Имеш, райпотребсоюз ревизоры даими рәүештә законды боҙа, растратчиктарҙы йылы ҡанаты аҫтына ала! Закон боҙоусыларға ҡарата аяу булырға тейеш түгел!

Күп йылдар әүәл Тәлғәт универмагта райпо ревизия төркөмөнә етәкселек иткәйне. Бик күп закон боҙоуҙар асылды ул ваҡытта, ике атыусының өҫтөнә күп бурыс сыҡты. Тегеләрҙе судҡа бирҙеләр. Шунда уға райкомдың икенсе секретары Миңдеғәлиев та шылтыратҡайны. Тәлғәт ул саҡта йәш, көслө ине, законды теүәл үтәп өйрәнгән. Закон уның яғында булғас, берәүҙән дә өркмәй... Миңдеғәлиевтың үтенесенә әллә ни әһәмиәт бирмәне... Әле килеп шуның осо сыҡты. Райком прокуратуранан принципиаль булыуҙы талап итә... Нисә йыл үтһә лә, теге ваҡиғаны онотмағандар...

Прокуратура тәфтишсеһе Тәлғәт менән ҡаты һөйләште.

— Бына тағы бер документ... Быныһын да кире ҡағыр ығыҙ микән, ревизор иптәш?

Ҡаршыһында — ябай ҡағыҙ ярпыһы. Ревизор ҡапылғара уҡый алмай. Мәғәнәһен аңлай алмай ҡаңғыра. Хәрефтәр, бәйҙән ысҡынған саптарҙар кеүек, күҙ алдында һикерешә.

— Был — Үгеҙ ауылы магазины һатыусыһы Фәттахованың аңлатмаһы бит, ревизор иптәш... Уҡығыҙ! — Тағы үҙе үк дауам итте: — Аҡҡа ҡара менән «өҫтөмә сыҡты, ревизор кәңәше менән һыйырымды һуйҙым» тиелгән бит... Тағы «...райпотребсоюз ревизорына бәләкәй генә күстәнәс — бер литр бал бирҙем» тиелгән. Ришүәт! Фәттахованың өҫтөнә сығыуы хаҡында акт төҙөмәгән өсөн — 1 литр бал алған һығыҙ! Хәлде ваҡытында райпотребсоюзға еткермәгән егеҙ!

Тәлғәт аңлатманы уҡый алманы, башы ла әйләнеп китте.

— Тәфтишсе иптәш, бында «күстәнәс» тиелгән, ә ришүәт тураһында һүҙ бармай. Был күстәнәс — ғөрөф-ғәҙәт буйынса рәхмәт әйтеү билгеһе генә...

Иртәгәһенә райпотребсоюз ревизорын ҡулға алдылар. Шуға тиклем ул ОБХС хеҙмәткәре Үзбәков менән дә күреште. ОБХС хеҙмәткәре менән, прокуратура алдында бер һүҙҙән торорға кәрәк, тип килештеләр. Прокуратура, райком ҡыҫылғас, эште ҡыҫҡа тотҡан: Үзбәковтан да ҡорау алып өлгөргәндәр.

— Тәлғәт дуҫ, алдан уҡ шулай килешәйек: бөтә яуаплылыҡты (әгәр ул иҫбатлана) үҙ өҫтөңә алаһың, мине был эшкә ҡыҫылдырмайһың. Килештекме?

— Ярай, — тип ризалашты Тәлғәт.

— Улай һа, әйт: һиңә ниндәй ғәйеп таҡтылар, ниндәй магазиндар буйынса дәғүә белдерҙеләр? Универмагтан сигнал булғанмы?

— Юҡ. Миңә Байраҡ һәм Үгеҙ магазиндары буйынса дәғүә белдерҙеләр...

— Хафиза Сарбаева килендәше Зарифа Сарбаеваға үс итеп...

Раушания ла иренең хәлен шундуҡ аңланы.

— Тәлғәт, төҫөң ҡасҡан. Тамағыңа ла йүнләп ашаманың...

Тәлғәт ҡатынынан был эште йәшерә алманы, түкмәй-сәсмәй һөйләп бирҙе.

— Үгеҙ һатыусыһы Фәттахованы ҡурҡытҡандарҙыр ул...

Башы тубал булды райсоюз ревизорының. Тағы, тағы саҡырҙылар прокуратураға. Үгеҙ магазины һатыусыһынан тағы ҡорау алғандар. Бисара бисә, ни айәт, өҫтөнә сығыуын, һыйырын һатып түләүен йәшермәйенсә аңлатма яҙған.

Тикшереү бик оҙаҡ барҙы, Тәлғәтте бик оҙаҡ һаҡ аҫтында тоттолар.

...Район халыҡ суды райсоюз ревизорын йыл ярымға иркенән мәхрүм итеү хаҡында ҡарар сығарҙы.

Нәҡ бына шул ваҡытта Раушания, өйөклө ирен яҡлап, иңә ҡарсығалай төш кирҙе. Судҡа тиклем дә, судтан һуң да райком, райсоюз, прокуратура туп аһын тапаны. Һатҡынан да, Өфөнән дә адвокаттар яллап бөттө, ваҡытын да, аҡсаһын да

йәлләмәне – ире өсөн, ире хаҡына!

Райкомға бара, хәлен аңлата, ҡабат райсоюзға уғыла. Райсоюз рәйесе йөҙәп бөттө:

– Мин – тәфтишсе түгел, мин уға яҡшы характеристика бирҙем, прокуратураға, судҡа барығыҙ!

Раушания ҡуймай, күнмәй, дүнмәй. Ире өсөн, хаҡлыҡ өсөн йәнтәслим көрәшә. Тәлғәт ришүәт алмаған, Тәлғәт – райсоюзда иң ғәҙел ревизор, Тәлғәттең ундай холҡо ла юҡ!

Раушания ханым өсөн киң фронт асылды: ал-ял белмәне, өйөн, уҡытыуын, балаларын онотто, мал-тыуарын ташланы, Өфө, атҡы, Магнитогорск юлынан ҡайтып кермәне; ҡабат судҡа барҙы, ҡабат иҫбат итте судья алдында.

– Тәлғәт кешенең сөйөнә лә тейгәне юҡ. Тәлғәт ул...

– Тынысланығыҙ, Раушания ханым... – Судья яр ыған ҡатын телмәренә үҙ ҡыҫтыра алмай. – Ҡабаланмай өйләгеҙ! Бөтә ен дә бергә өйә егеҙ... Пунктлап...

– Пунктлап икән, пунктлап... Тәлғәт Байраҡ атыусы ы Зарифа Сарбаеванан, Үгеҙ атыусы ы Фәттахованан ришүәт алмаған...

– Ә ниңә Үгеҙ ауыл атыусы ының недостача ы буйынса акт төҙөмәгән, ниңә хөкүмәттән атыусының растрата ын йәшергән?..

– Бәлки, ул растрата булмағандыр, хөрмәтле судья?

– Ә Фәттахова аңлатма ы?

– еҙ ауыл бисәләренән йыйған ғәйбәт буйынса хөкөм ҡарары сығарҙығыҙ, ғәҙел кешене төрмәгә ултыртып ҡуйҙығыҙ – шулмы дөрөҫлөк? Тәлғәт – райсоюзда иң ғәҙел ревизор, райком ҡушыуы, Миңдеғәлиев хөсөтө буйынса эш иттегеҙ!..

– Раушания ханым...

– Мин Верховный судҡа яҙам!

– Яҙығыҙ! Был – еҙҙең хоҡуғығыҙ. Мин нәҡ шул хаҡта әйтергә ултыра инем.

– Хушығыҙ!

Раушания ханым тынысланманы, көрәштән баш тартманы: Верховный судҡа аппеляцион ялыу яҙып бирҙе, иренең эшен яңынан ҡарауҙарын үтенде.

Хәҙер Рушания ханым, гүйә, – барса донъя менән алышҡа сыҡҡан яугир, батыр ҡатын, инә ҡарсыға... Йән аямай дошмандары өҫтөнә ташлана. Ире, өйөклө ө – төрмәлә, ә ул – иректә; шул көндә ул ҡул ҡаушырып ултыра аламы? Уның шуға выжданы етәме? Юҡ, асырғанып яуға, ғәҙеллек өсөн көрәшкә атлыға. Әллә нисә ҡат баш ҡалаға барҙы, Верховный судта эште тиҙләтеүҙе талап итте, әллә нисә адвокатҡа етте, арыуын онотто. Аҡса йәлләмәне. Тәлғәтте өгөтләне. Инәлде, ялбарҙы. Тәлғәтте ҡотҡарырға кәрәк! Раушания өйөклө өн яуыздар тырнағынан йолоп алырға тейеш! Ерҙә ғәҙеллек, дөрөҫлөк, ни айәт, тантана итергә тейеш!

Раушания адвокатҡа ҡат-ҡат барҙы. Адвокат, ярай, Тәлғәттең бәхетенә, Раушанияның бәхетенә, тәжрибәле, тәрән белемле кеше булып сыҡты.

Раушания был көндәрҙә ашын, йоҡо он онотто, донъя ы хаҡында уйламаны. Бөтә Таңғыр ауылы, бөтә район был алыш барышын күҙәтте. Раушания ханым бер үҙе анауындай дәүләттең хөкөм машина ына ҡаршы сыҡты.

Бөгөн кем «был эште Раушания бер үҙе атҡарҙы, саяланып өйөклө ирен төрмәнән ҡотҡарҙы» тип әйтер? Кемдең шуға йөрәге етер? Ә ул кеше, ул инә ҡарсыға Раушания ине лә ә.

Хәтерлә әң... Күпме йөрөнө, күпме нервы түкте Раушания ханым! Бары ы ла ире хаҡына, Тәлғәт ғәзизен төрмәнән ҡотҡарыу өсөн! Уның буялған исемен таҙаларға, тапалған хоҡуҡтарын яңынан тергеҙергә! Иркенән яҙған кешегә ҡайтанан хоҡуҡтарын, донъялағы иң-иң ҡиммәтле ен – азатлығын ҡайтарып бирергә! Быңдай эшкә, дөрөҫөрәге, батырлыҡҡа бары йәне-тәне менән ирен өйгән бисә

генә әләтле була.

Раушания ханым, ни айәт, Верховный судтың ултырышы көнөн дә көтөп алды. Был еңеү ине. Бындай еңеүҙәр, ғәҙәттә, ғүмерҙә бер генә ҡабат яулана.

## Дүртенсе бүлек

### I

уң көҙ ҙә тыуҙы. Ағастар балҡып ултырҙы, үләндәр арғайҙы, ыуҙар тондо. Яйыҡ буйҙары аяҙ көндәрҙә йәрминкәгә сыҡҡан халыҡты хәтерләтә. Ялбыр талдар, суҡ муйылдар төҙәнеп-я анған ылыу килендәрме ни! арғылт-ҡыҙғылт алъяпҡыстарын быуып алған өйәңкеләр күпте кисергән сабыр ҡатындар шикелле бәүелә.

Раушания класы менән тәбиғәт ҡосағына экскурсия я аны. Быйыл уға бишенсе класты бireп ҡуйҙылар. Тегеләр, бәләкәстәр, йылға буйына барайыҡ, тип быуынға төштө. Раушания юғары кластарҙа эшләп өйрәнгән. Яр башында моң оу хистәргә батып торҙо. Тағы ла бер көҙ килә, кеше ҡартая, ағастар кәре ҡайтҡан бәндә ымаҡ тыныс, күндәм, ис бирешмәгән булалар, ә тәбиғәт миҙгеле аяу ыҙ бит. Тормош та ярлыҡау тигәнде белмәй.

Раушания ире, йәшлеге хаҡында хәтирәләргә тарый, бөгөнгө ө тура ында уйлағы ы килмәй. Бөгөнгө өн иҫлә ә, хафа ы үҙәкте өтөп ала. аман ныҡлы ғына бер ҡарарға килә алмай: кәм енә, ҡай ы берҙә күтәреп кенә уғыр ҙа айырылышыр, ире урынына үҙе «талаҡ» тип әйтер сиккә етә. Шунан уйнашсы ирен өйҙән ҡыуып сығарыр ҙа ебәрер... Тағы тыйылып ҡала, ғаилә именлеге, балалары яҙмышы, мәктәптәге, ауылдағы абруйы хаҡында уйлай. Мәктәптә директор Сөнәғәтуллин өйөнәсәк: бына аҡтан аҡ, пактан пак булып йөрөнөң дә... атыусы Фә имә Сөнәғәтуллина сәбәкәй итер... Кешеләр уларҙы өлгөлө ғаилә тип белә, ә көндәштәре бәлә көҫәп кенә тора.

Өҫтәүенә, Миләүшәнең бынау ҡылығы, эйе, сүп өҫтөнә сүмәлә... Ҡыҙының тәртибе сәменә ныҡ тейҙе, уғата хурландырҙы. Раушания, түҙмәй, Шәүкәткә бөтә уйлағанын әйтте. Ул риза булмаясаҡ, бисә айырған кеше бер ваҡытта ла унын туп а ына баҫмаясаҡ!

Миләүшә ситтән тороп институтҡа уҡырға инде, күрше ауылдағы игеҙ йыллыҡ мәктәптә уҡыта башланы. Әҙәм мәсхәрә е. Раушанияның класынан алтмыш-етмеш процент бала вузға уҡырға инә, ә өлгөлө уҡытыусы бала ы Миләүшә шул Шәүкәт тип ауылда ҡала. Ауыртҡан башҡа тимер таяҡ ҡына булды уны ы ла... Шәүкәт менән аман осрашалар, өйләнешәбеҙ, тип үҙ ҡуйырталар.

Раушанияның үҙ хәсрәте башынан ашҡан, ана, Тәлғәттең хыянаты боғаҙынан ала. Бисара ҡатын был хәленән нисек ҡотолорға белмәй бер була. Ул, мурҙаға төшкән балыҡтай, бәргеләнә-орола. Хәҙер маңлайын стенаға бәрә е йә, Йыы анияы шикелле, ыуға ташлана ы ғына ҡала...

Яйыҡ йәйрәй ҡаршы ында. «Яйыҡҡа ташланырға!..»

Тыйнаҡ килен өн өҙ, ни ғүмер тулҡындарын алға әйҙәүен белә, өнө-тыны сыҡмай. Яр башындағы ханымда эше лә юҡ. Ни уйлай, ни кисерә ул — битараф. Ә Раушания ханым иңә үтенес менән баға бит. Ярҙам орай! Уйҙары хәтәр, Яйыҡ- ыу, ин, исма ам, шул хафаларҙы тарат аңсы, бәндә күңелдәренә йән тыныслыҡтары ҡайтар аңсы! Йыуат уларҙың күңелен, йән яраларын уңалт!

Хәтәр бәхәс был. Раушания ханым үҙенекен тылҡый: «Ал, ал мине, алҡын ыу, ҡосағыңа йом, хәсрәтемде тарат! ин, йор йылға, игелекле бит, ҡосағың йомшаҡ, наҙың татлы — инең иркендә мин йән тыныслыҡтары табырмын! Ниңә миңә хыянатсы был ир, тыңлау ыҙ балалар — бер үҙем генә ҡосағында бәүеләйем, онотолайым!»

Бәхәс өҙөлмәй, көн уҙыла. Бер ваҡиғаны икенсе е алмаштырып тора – шулай ғүмер уҙа.

II

Йыһ ания, унын ата ы-әсә е хаҡында уйланғанда Ғаян әр саҡ ытырғанып теге ваҡиғаны хәтерләй. Бер кемгә лә өйләгәне юҡ ул хаҡта. Директор улы менән ике е ара ында ғына ҡалған сер был. Бына нисәмә йылдар үтте, аман иҫтән сыҡмай, күҙ алдынан китмәй... Кем ҡотортто, кем отҡотто шул юлға? Ғаян ул ваҡытта бик бәләкәй ине, аға ы артынан эйәреп китте. Ҡыҙыҡ өсөн генә... Ул саҡта Йыһ ания-ға ғашиҡ та түгел ине. Ҡайҙа ул турала уйлау?

Әлеге этлекте улар ҡылды бит! Улар! Кем өйрәтеп, өскөтөп торҙо? Раушания апайҙы – уҡытыусыларын яман тинеләр, ауылда бөтә е лә уларҙы күрә алманы...

Ғаян хәҙер генә аңлай. Ул этлек ҡылған, ул ҡон ҡайтарған, енәйәт я аған! әр хәлдә уны ошонон өсөн генә тотоп төрмәгә ябып ҡуйырлыҡ... Ә теге саҡта бик шәп инеләр бит. Имеш, шаярып ҡына берәүҙең мөлкәтенә ҡыҙыл әтәс ебәрәләр.

Ҡараңғы төндә, алан-йолан ҡаранып, аға ы менән сабынлыҡҡа барып сыҡты-лар. Берәү ҙә күрмәй. Был икәү уйнап йөрөй: ирмәк итеп кенә теге ҡот оҙ уҡытыу-сыларының кәбәненә ут төртмәкселәр! Хәтәр, әй!

Малайҙар ашыҡты. Күҙҙәренә аҡ-ҡара күренмәне. Шыпырт ҡына барып ет-теләр кәбән янына... Ут төрттөләр ҙә ҡастылар. Хәтәр! Уйындан уймаҡ сыҡты! Ҡастылар. Уларҙы берәү ҙә күрмәне. Әле лә берәү ҙә белмәй, иҫкәрмәй. Ошо оҙон йылдар эсендә Ғаяндың йәне нисә ҡат ус төбөндә булды, нисә ҡат тәне шыбыр тиргә батып уянды. Бына килеп инерҙәр ҙә ҡулға алырҙар!

Ниндәй хаслыҡ, ниндәй бәғер еҙ эш ҡылдылар улар малай көйө? Кем өйрәтте? Директор аға ының малайы, әйҙә лә әйҙә, тине. Арттарынан күҙәтеп тә барҙылар, буғай. Ә бәлә е – Ғаянға! Ғүмер баҡый үкенә, ғүмере буйы үҙен-үҙе язалай... Бына тағы ҡапты ҡаты ҡармаҡҡа! Бәлки, был – теге ваҡытта Раушания апайҙарҙың кәбәнен яндырған өсөн хаҡ түләүҙер? Йылдар үткәс, апа ҡон ҡайтара, йылдар үткәс, Ғаянды ғәҙел хөкөмгә тарттыралар!

Ҡаңғырҙы, үртәлде. Башын ҡайҙа орор, ни ҡылырға?.. Был хаҡта, эйе, Йыһ а-ния белмәй, Раушания апа белмәй, Тәлғәт ағай ҙа ғүмерҙә лә белмәйәсәк. Ғаян, үлтер әләр ҙә, был серҙе сисмәйәсәк!.. Сисел ә, бөттө, директорҙың малайын да а-та, үҙен дә батыра... Ғаян – сым-сырыҡ. Сере үҙе менән бергә үләсәк.

Ҡара янған. Сере, беҙ кеүек, эсен тишеп сығып килә. Йыһ ания алдында тәүбә ҡылырға ла ынтылып ҡуя, тағы кисегә. Әсә енә әйтергә теләй – йөрәге етмәй. Әсә е алдында ла үҙен гона лы, енәйәтсе итеп күр әтергә ярамай.

Әсә е Раушания апайҙарға барырмы икән? Әсә е ҡасан улын тыңлар, ҡасан үҙе-нең дошманы ҡашына барып баҫыр, ярлыҡау орар? Улы хаҡына! Әсәй, әсәкәйем, ҡасан ин аңлар ың? Ҡасан үҙ-үҙеңдән, үҙеңдең тәкәбберлегеңдән оло булыр ың, уны аша атлап сығыр ың? Әсәй, улың үтенә... Ғаян аман әсә енең шул уңғы аҙы-мын, улы хаҡына игелектәр эшләүен көтә.

– Әсәй, беҙ Раушания апайҙарға күп этлек ҡылдыҡ... Улар алдында яуап көнө тыуҙы. Бөтә, бөтә ғәйептәребеҙ хаҡына: минең уға уғыуым, бала саҡта кәбәндәренә ут төртөүем өсөн ғәфү үтенәйек! Әсәй, әсәкәйем!..

Ә Фә имә Сөнәғәтуллина ныҡ торҙо. Килмешәктәр ҡашына баҫып теҙ сүкмәне, барып оранып-ялбарып йөрөмәне. Сөнәғәтуллиндар инәлә белмәй – кире енсә, уларға башҡалар баш эйә, уларҙың ҡурайына бейейҙәр был ауылда! Был ауылда Сөнәғәтуллиндар баш, тормош дилбегә е улар ҡулында!

Хәҙер ошо килмешәктәр аҫыл нәҫелгә ҡаршы сыҡты, барыбер үҙҙәре лә манды-маҫ әле. Ана, балалары нишләй... Килмешәктәр баш күтәрҙе!

Ауыл килмешәктәрҙе яратмай, ауыл уларҙы барыбер күрә алмай. Ауыл Фә имә Сөнәғәтуллинаның улын шул килмешәктәр тарафынан хөкөм итергә... юҡ, юҡ, юл ҡуймаç!

Шуға был текә ҡатын Раушания ханымдарға барырға йыйынманы ла. Килмешәктәргә ялбарырға әле! Сөнәғәтуллиндар Таңғырҙа берәй енә теҙ сүгер, баш эйер ҡәүемме? Фә имә Сөнәғәтуллина ла, Ғаян Сөнәғәтуллин да ошо затлы вә зиннәтле нәçелдең бер тармағы түгелме?

III

Аҡтан ғына тора был донъя. Хәс тә больница палата ы: стеналар ҙа, түшәкмендәрҙәр ҙә, тәҙрә лә, тәҙрә ҡорғандары ла аҡ буяуға буялған... Шул донъя уртаында – ҡарттар, Раушанияның ата ы Бәхтейәр, әсә е Мөнирә. Өç кейемдәре лә аҡтан ғына...

Хәҙер Раушанияға шулай тойола. Ата ын иçлә ә, уны әсә е менән Таңғырға уңғы ҡат ҡунаҡҡа килгән тип күрә.

Быға саҡлы Бәхтейәр, ғаилә енән айырылып, оҙаҡ ситтә йөрөнө. 1961 йылда тағы Мәғҙән иленә ҡайтты. Был ваҡытта ҡарсығы Мөнирә оло ҡыҙы Фәриҙә менән генә йәшәп ята ине. Ҙур йорт алып кергәндәр.

Раушания шатланды, өйөнөсө эсенә ыйманы. Кеше күҙе алдында кемдең атайлы булғы ы килмәй? Тәлғәт менән килешеп, ҡарттарҙы Таңғырға ҡунаҡҡа саҡырҙылар.

Хәҙер Раушания уларҙы аҡ донъя эсендә генә итеп сырамыта. Әллә нишләп ҡарттар үҙҙәре лә аҡтан кейенгән, аҡ бүлмәлә икәүҙән-икәү мәж киләләр. Бәхтейәр ҡарт, эçе тип, әллә кальсондан ғына йөрөй, әллә эске кейеме шулай апаҡ... Әсә е лә изге йәнгә оҡшап ҡалған. Аҡ донъя урта ында ҡалып, Хоҙайға ыйынып, доға ҡыла. Янына ҡартын да әйҙәй: әйҙә, ин дә!.. Гона тарыңдан ваз кис, доғалар ҡыл! Имеш, Бәхтейәр ҙә Мөнирәгә күр әткәндәренә үкенә була. Ул тәүбә итте... Йәнә е, бәндә ҡарт көнөндә Хоҙай ҡашына баçҡан, ғүмер буйы ҡылғаны өсөн ярлыҡау орай.

– Хоҙай Тәғәлә, был ғүмеремдә күп гона тар эшләнем, ҡатыным Мөнирә өçтөнән йөрөнөм, күп бисә менән сыуалдым, ярлыҡа... – Башын нығырaҡ эйә аҡ аҡаллы ҡарт.

– ...

– Күп йәшенде ҡойҙом, Мөнирә, тәүбәгә киләм, кисер... Яттарға эйәләш әм дә, күңелем инең менән булды. Мин ине генә яраттым, үҙ балаларымды ғына өйҙөм... Эйе, яҙмыш елдәре ыңғайына ғына сит-яттар ҡуйынына уғылдым, тәүбә...

– Ҡуй, ҡарт, ине күптән ғәфү иткәнмен...

– Аңла: яҙмыш ғәйепле. Ул мине бик-бик ураu юлдарҙан йөрөттө, алдыма үткееҙ кәртәләр ҡорҙо... Мин инең алдыңда ғәйепле...

Раушания ап-асыҡ ишетә уйнашсы ата ы ҡарттың тәүбә ен, ҡолаҡ төбөндә яңғырап тора шул өн. Ап-аҡ донъя, ҡарттарға бүленгән бүлмә лә аҡтан ғына, шунда икәү әғәләй-тәғәләй. Мөнирә ҡарсыҡ ғүмер баҡый «таш менән атҡанға ла аш менән атырға кәрәк» тип йәшәне, хәҙер ҡарты Бәхтейәр ҙә тәүбә иткән, изге бер бәндәгә әүерелгән. Йомшаҡ баçа, аҡ өйләшә, телендә – игелекле үҙҙәр; ҡылғаны сауаплы, инде унан да изге йән юҡ. Гона тары ярлыҡанған.

Раушания аҙарына: уйнашсы ҡарт тәүбә иткән, хәҙер Хоҙайға ыйынған... Үткәнен ҡә әрләй, үҙен-үҙе битәрләй, бөтә ғишыҡ-ғишрәттәренән дә ваз кисә...

Раушания, ахыры ы, иçәр хыялдарына тарый: ата ы Бәхтейәр ҡарт менән ире Тәлғәтте бутап бер була. Имеш, Тәлғәт тә тәүбә иткән, ҡылғандарынан ваз кискән, хәҙер бисә е алдына баçып ярлыҡау орарға әҙерләнә... Ул да, ҡайны ы

шикелле, бисәнән бисәгә әүрәне, сәскәнән сәскәгә ҡунды, гона артынан гона ҡылды, хәҙер үкенә, ғәфү үтенә. Ни айәт, кеше аҡылына килде, бисә е янында ғына торор, Бәхтейәр ҡайны ылай, Хоҙайға ыйыныр.

Раушания төшәнәме, хыялыйланып барамы? аман уйлана, күҙ алдына хәтәр күренештәр баҫа. Әллә нишләп тыуған яғын, ауылын уйлай, ата ы менән әсә е ҡашына баҫа.

Аҡтан ғына тора был донъя. Стеналар ҙа, түшәк-мендәр ҙә, тәҙрә ҡорғандары ла аҡҡа буялған. Аҡ донъя урта ында Раушания менән Тәлғәт... Ҡартайғандар, Хоҙай Тәғәләгә доға ҡылалар, биш намаҙҙы ла ҡалдырмайҙар.

Тәлғәт тә тәүбә иткән, аҡтан ғына кейенгән, бар гона тарынан яҙған... Ул да хәҙер изге йән... Юҡ, юҡ, Хоҙай уның анауса гона тарын нисек ярлыҡаны икән, нисек Раушаниянан башҡа ғәфү итте?

Раушания аптырап-йөҙәп бөттө. Ни ҡылырға, ни уйларға белмәй. Шулай ҙа йән тыныслыҡтары таба алмаҫ микәнме ни, шулай ҙа был донъялыҡта икеләнеүҙәренән ҡотолоп бөтә алмаҫмы? Ни ҡылырға? Айырылышырғамы, әллә, әсә е кеүек, ғәфү итеп кенә ҡуйырғамы? Тағы ниндәй ғәмәл ҡыла, ниндәй саралары таба ул?

IV

Тәлғәт ағаларында өй күтәргәндә, шул Солтанбай менән Ғаян уғышҡан өмәнән уң сырхай башланы Ғәлиәкбәр. Шулай ҙа аға ының өйөн алышып бөттө, тәҙрәләрен үҙе уйҙы, тәҙрә яңаҡтарын, өй туп а ын үҙе ултыртты. Уны, ғәҙәттә, өй башында ултырғанда күрәләр. Оҫтаның бер ҡулында – балға, икенсе ҡулы менән ҡалай ҡырына тотонған, ауыҙында – тутлы ҡаҙаҡ.

Уҫал ҡәйнә Хәкимә ҡарсыҡ икенсе килене Орҡоя менән дә тынышманы. Үҙ үҙен генә үҙ итеп өйрәнгәйне, килендәре и ә үҙҙәренсә йәшәп маташты.

Орҡоя – хәҙер яңы өйҙә хужабикә. Хәкимә ҡарсыҡ менән Ғәлиәкбәр барыбер Сәрби килендән теге өйҙө даулашып алды, суд алдында, өйҙө Ғәлиәкбәр оҫта хәләл көсө, үҙ ҡулдары менән алды, тип иҫбат иттеләр... әр ҡаҙағы Ғәлиәкбәр ҡулы менән ҡағылған, әр таҡта ы уның ҡулы аша үткән.

Арыу ғына йәшәп алып киткәйне йәштәр. Хәкимә ҡарсыҡ үҙенең төп йортонда, кинйә е Солтанбайы башҡа сығып, донъя көтөп ята.

Хәкимә ҡарсыҡ барыбер килеп етә: «Орҡоя килен, шулай ит, былай ит!», «Ухватты* тегеләй өйә, әпәйҙе мейестән сыҡҡас та лыпын алма – өйәп ҡуй!..»

Был хәл оҙаҡҡа барманы: Орҡоя килене баҫым аҡ түгел. Башта таяҡ менән я ил ҡәйнә енең беләген күгәртте. Хәкимә ҡарсыҡ район үҙәгендәге ревизор улы Тәлғәткә ошаҡлашып барғайны – уны ы тыңламаны, Ғәлиәкбәр донъя ына ҡыҫылып йөрөмәне.

Бүренән ҡасып, айыу оя ына юлыҡҡан тигәндәре шул булалыр. Ҡәйнә менән килен тас-тос талашты, сәс йолҡошто. Ҡәйнә ҡайтманы, килен сигенмәне. Быны ы Сәрби ише генәме, бигерәк зә әр булып сыҡты, алдына сығарманы.

Кешеләр былдай көндө тимер ҡарсыҡты онота: ул бармы-юҡмы, тормош үҙ ыңғайына ағыла. Бисәләр иртән ҡойо янында йә сепаратҡа барғанда гәпләшә, магазин ҡашында ғәйбәт ата – ғәҙәти хәл, күнегелгән ауыл күренештәре... Кемдә кем ҡайғы ы? Ғаиләлә дауыл ҡуп а ғына, тимер ҡарсыҡты иҫкә төшөрәләр.

Ҡарсыҡ кәм енеп, үсен эсенә йәшереп оҙаҡ йөрөнө, нисек тә тәнен күгәрткән килененән ҡон ҡайтарырға сәбәп эҙләне. Сәбәбен таба алманы.

Ғәлиәкбәрҙәргә шыпырт ҡына барып инде, Орҡоя килене арты менән тора ине, Хәкимә ҡарсыҡ муйыл уйыл менән арҡа ына тартты.

---

* *Оло мейескә бәләкәй суйынды тотоп ултыртҡыс тимер (диал).*

— Ай! — тип сыйнап ебәрҙе Орҡоя, ә ҡарсыҡ тороп сапты.

Бына кәмит: ҡәйнә менән килен баҫтырыша. Ғәм халыҡ алдында, ауыл урта ында тамаша... Бер заман ҡарсыҡ — бер яҡҡа, кәүеше икенсе яҡҡа барып төштө, я ил килен хәҙер ҡәйнә ен кинәнеп яра...

— А , ин шулаймы? А ...

— Килен...

Ҡәйнә менән килен ара ында өҙөш-йолҡош китте. Ғәлиәкбәр оҫта саҡ-саҡ айырып алды ике тилене. Хәкимә ҡарсыҡ илап — больницаға, шунан тура сельсоветҡа китте.

Шунан уң оҙаҡ торманы Ғәлиәкбәр: сире шәбәйә башланы, аҙаҡ аяҡтан яҙҙы. Уңманы оҫта был тормошта. Ауылдаштарына өй артынан өй алды, үҙенең генә бәхетен ала алманы, уны әсә е емереп торҙо.

Тормош үтә лә аяу ыҙ бит ул: бөгөн йөрөтә бәндә ен, иртәгә стенаға килтереп ырыҡтыра. Әйләнеп тә өлгөрмәй ең, бәхетең дә, ерҙәге был көнөң дә осланған булып сыға. Фани донъя, әҙәмдең ғүмере — ҡояштың күҙ асып йомған мәле генә... Бәндә, нисек кенә ит ә лә, ошоға әҙер түгел. Үкенестәр, үҙәкте өҙөр, алҡымдан алыр әрнеүҙәр генә ҡала.

Әллә Сәрбиямалының ҡарғышы башына төштөмө икән? Ул «күҙ йәшем төш өн, мандыма, бәхет бите күрмә» тип юрағайны. Рәнйене бит.

Ғәлиәкбәрҙең йәнен үкенес өтә. Күпме өй алды, нисәмә ауылдашын бәхетле итте! Тыуған ауылындағы өйҙәрҙең бары ына ла уның ҡулы тейгән...

Ғәлиәкбәр — вафат, Орҡоя килен кире ауылына ҡайтып китте.

Кешеләр, нишләп еҙ үҙ-үҙегеҙҙе яратмай ығыҙ, үҙ-үҙегеҙгә шулай ҙа аяу ыҙ ығыҙ? Үҙ-үҙегеҙҙе аҡлағыҙ, үҙ-үҙегеҙҙе ҡайғыртығыҙ! Үҙегеҙҙе үҙегеҙ яратма ағыҙ, еҙҙе кем яратып, кем еҙҙе ҡайғыртыр?

Ғәлиәкбәр ҙә алдағы ын уйламаны, бөтә ен дә эсенә йомдо, эстән ыҙҙы. Хәҙер тормошҡа, яҙмышҡа ниндәй дәғүә белдерә ала ың? Алдағы ын саҡ ҡына уйларға, тоҫмалларға була ине бит!

Бүтән берәү ҙә, бәндә, инең хәленде белмәй, берәү ҙә инең эсеңдәгене ярып ҡарай алмай. Шуға үҙеңде-үҙең ҡайғырт, үҙеңә-үҙең ярҙам ит, кешем!

Ғәлиәкбәр оҫта ла, Сәрбиямал ише, йә әт кенә үнеп ҡуйҙы. Кешеләр, Хәкимә ҡарсыҡ, еҙ уларҙы айырҙығыҙ... Бәлки, улар бер-бере е өсөн яратылған заттар булғандыр, хәҙер ауаларға ашырҙар — инде күктәрҙә улар айырылышмаҫ, мәңге йәнәш торорҙар, йәнәш балҡырҙар. Ерҙә лә яҙмыштары бер иш булған икән. Йәл...

V

...Тәлғәт ҡыҙы менән өйләшмәне түгел, өйләште. Миләүшә үҙ үҙенән ҡайтмай. Тағы ир ҡашҡа ы аңланы: инде бер-бере енә эҫенешеп бөткән йәндәр нишлә ен? Уларҙың бүтәнсә сара ы ла юҡ. Шуны Раушания ғына аңламай, аман, еңмеш үгеҙ ымаҡ, үҙенекен ҡыуа.

Йәштәр үҙ-ара аңлашҡан, килешкән. Мөхәббәтме был, әллә ғишыҡ уйыны ғынамы? Тағы көслөк менән икәүҙе айырып та булмай, айыр аң да, яра эҙҙәре йә оҙаҡҡа, йә ғүмергә ҡала. Иң хаҡ юл: уларҙы иркенә ҡуйыу, үҙ ыңғайҙарына ебәреү... уңынан бары ы ла урынына ултырыр, ваҡыт дауалар, яйын яйлар.

— Раушания, тыңла: беҙ бер ни ҙә ҡыла алмайбыҙ, өйләнеш ә өйләнеш ендәр, татыу ғына йәшә ендәр...

— Мин ҡаршы! Минең үле кәүҙәм аша ғына сығасаҡ ул Шәүкәтенә!

Раушания ханым тантаналы рәүештә урынынан тороп китте. Был « үҙ бөттө, ине, ир затын, күп тыңланым, күп яндым» тигәнде аңлата ине.

Тәлғәт яр ыны. Ғүмерендә тәү тапҡыр сығырынан сыҡты:

— Балаларыңды тырым-тырағай итеп, пыран-зыран килтереп бөттөң! Бере е аяғын боҙло ыуға тыға, икенсе е ыуға ташлана... Тағы нимәләргә дүндермәксе була ың уларҙы?

— Бер ни ҙә булмаҫ! Мин тапҡан уларҙы, ә ин уйнаш итеп кенә йөрөнөң...

— Мин уларҙы төнө буйы күкрәгемдә йөрөттөм, сырха алар, төндө үтә сыҡтым...

— Уйнашсы, индә бала ҡайғы ы булдымы? ин өйәркәләрең артынан саптың... Шулай булма а... Миләүшәң дә — инең ҡаның, инең ыңарың!

— Таш йөрәк, бәғер еҙ кеше ин, Раушания! Боҙ кеүек алҡын ың. Шулай булма аң, мин дә йөрөмәҫ инем, индә булмаған йылыны бүтәндәрҙән эҙләмәҫ инем.

— Бар, сығып кит шул өйәркәләреңә! Шулар менән йәшә!

— инең йөрәгең урынында — таш! Мең йылда ла иремәҫ ҡотоп боҙо!

***

Октябрь байрамы алдынан Миләүшә өйгә ҡайтты.

— Әсәй, мин ауырлы...

— Нисек? — Ҡобара ы осто ханымдың, башын тотто.

— Әсәй, рөхсәт итегеҙ!

— Ниндәй рөхсәт?

— Беҙ ҡауыштыҡ бит инде, ризалығыҡ бирегеҙ! Әсәй, байрам яҡынлаша — шунда туй үткәрәйек!

— Нимә өйләй ең ин? Ғүмерҙә булмаҫтайҙы...

— Нисек?

— Шулай, был туй булмаясаҡ, кеше ышанмаҫтай хәбәрҙе ысын бул а ла өйләмә, тиҙәр... Ауыҙыңдан ел ал ын, балам, еләк кеүек ең, бисә айырған бәндәгә... Башыңа тай типкәнме?

— Әсәй, ин...

— Ҡыҙым, Алла хаҡы өсөн әйтәм! Ана, атайың нишләп йөрөй? Был ғаилә тарҡалырға тора... Исма ам, ин...

— Әсәй, мин — ауырлы... Әсәй... Атайым ҡайҙа? Ул аңлар... Ул йомшаҡ күңелле кеше...

— Атайың ауылына ыпыртты, Хәкимә ҡарсыҡ сырхап киткән...

— Әсәй, бел: мин дә, Йы ания апайым да, Фәнил дә атайымды яратабыҙ, ул әйбәт кеше... уңғы ҡат орайым...

— Юҡ!

— Әсәй, бәғер еҙ ин, таш йөрәк!

Миләүшә ишекте шартлата япты ла тышҡа атылды.

Иҫ еҙ бала ауа-түнә бара, аяҡ аҫтын айырмай, тирә-йүнен абайламай. Уға ҡайҙа баҫ а ла, нимәгә уғыл а ла — барыбер.

Әллә йәйәү бара ауылына, әллә юлаусыға осраны — тирә-әйләнәне аңғармай, донъя — баштүбән, тауыштар тынған, хәрәкәт баҫылған, күк иңе шымтайған. Урман, тауҙар ҙа әллә ҡайҙа ҡасты, Яйыҡ ыуы юғалды — ҡыҙ иҫ еҙ көйө өҫтөрәлә. Әллә өрөнтө ергә килеп төртөлдө, әллә тапҡырҙан атлай — айырмай. Донъяны, Ер шарымы зырлап әйләнә. Бер ниҙең дә ҡыҙығы ҡалманы, тормош тәме юғалды, изге тигән әйбер юҡ, бер таянысы юҡ — уға хәҙер барыбер: йәшә ә лә, йәшәмә ә лә. Уны кешеләр аңламай, ата-әсә е кисермәй, берәү ҙә ярҙам ҡулы онмай — был донъяла япа-яңғыҙы. Эсенә ташмы, ағасмы тултырғандар, үҙе — ауырлы. Хәҙер Шәүкәтен дә күрә алмай — бөтә е лә уны ташлап китте, ул үҙ бәләләре менән генә ҡалды. Ҡайҙа барырға, был башты ҡайҙа илтеп орорға? Уның йәшәге е килмәй,

уның бере ен дә күрге е, ишетке е килмәй. Ата-әсә е лә ваз кисте, аңларға теләмәне. Иҫәр, хыялыйҙар булып яратты, шул Шәүкәткә ҡапланды – ниңә? Шунан башҡаны белмәне, уға тиңде тапманы, тиле.

Аңҡы-тиңке баҫа, иҫен юйған. Аҡылынан яҙғанмы, берәй бәләләргә тарығанмы? Кем сығарып ебәргән уны был көндө – ҡарау ыҙ көйө. Ҡара көҙҙә мал аҙғыны юғала, был да берәй енең аҙашып ҡалған байлығыр... Сәсе-башы туҙған, иҙеүҙәре асылған.

Ике ауыл ара ы әллә ни алыҫ та түгел – аман бара, ни саҡлы ғүмер уҙҙы. Ни көҫәй, ни юллай был бала? Йәм ҡалмаған был көҙгө баҫыуҙарҙа ел менән ҡыуышамы, ни самалай?

Ямғыр күҙе төштө. алҡын, ауыр тамсылар битенә бәрә, асыҡ түшенә тула – ул йөҙөн йәшермәй... Берәү осрамай юлында, берәү хәлен белмәй. Кешеләр, туҡтатығыҙ был бисараны, алдын ҡыйығыҙ, яман уйҙарынан аралағыҙ! Кешеләр, ишетә егеҙме?

Кешеләр өн өҙ, донъя битараф. Бәндә бара, ҡайғы-хәсрәттәре үҙе менән. Берәү килеп сыҡмай, берәү ишетмәй, йөгөн саҡ ҡына күтәрешмәй. Кешеләр – хәс тә айырым-айырым утрау, бер-бере енә яҡынлашмайҙар, бер-бере енең хәлен белешмәйҙәр. Уларҙы сара ыҙлыҡ, стихия айырған, кешеләр – боҙлоҡ батшалығы, бер-бере енең хәленә кермәйҙәр. Хатта туған тигәндәрең, хатта дуҫ тигәнең сәләм бирмәй. Бары ы ла үҙ өңдәренә боҫҡан, үҙ уйҙарына тарып, үҙ донъяларына бикләнгән – кеше ҡайғы ы төштән уң, туған хәсрәте көтөп торор. Уларҙың ваҡыттары тар, үҙ мәшәҡәттәре күп, үҙ бармаҡтары үҙҙәренә кәкре. Улар әҙәм хәлен белмәй, үҙ күңелдәрен бөтөн көйө аҡлай, улар үҙҙәрен борсомай... Шулай яйлыраҡ. Шулай йәшәүе еңелерәк был донъяла. Ул үҙ көнөн үҙе күрә, бүтәндән дә шуны талап итә.

Кешеләр, күңелдәрегеҙҙе асығыҙ, игелекле устарығыҙҙы мосафирға оноғоҙ!

Кешеләр битараф.

Был бисара ла яуап үҙе ишетмәй. Бите буйлап йәше аға, тыйылмай. Ана, фатир хужабикә е аласығы. Арыған, талсыҡҡан кешенең күҙҙәре йомолоп-йомолоп бара. Ҡамасауламағыҙ!

Ойо, әйҙә, бала, йом күҙеңде! Бер аҙ серем итеп ал, саҡ ҡына баҫыл, донъя барыбер үҙ урынына ултырыр ул, ултырыр, көймә. Яңы яҡтан асылыр тормош манзара ы!

Бисара сабырлыҡ ҡылманы – асырғанғайны, тормоштан, был ыҙалы ынауҙарҙан тамам туйғайны, көрәшеп арығайны... Бары онотолғо о, ҡотолғо о килде бәғер еҙ бәндәләрҙән... Ҡулына әллә ҡасан ҡойма буйында онотолоп ҡалған әйбер килеп эләкте, өшөгән ирендәрен саҡ-саҡ ҡыймылдатып уҡыны:

– Хло-ро-фос... – Шыйыҡсаны йән асыуы менән тотошлай тамағына ҡойҙо. Шунда, шул мәлдә онотолғо о, мәңгегә ойоғо о килде... «Бер мәл генә бит, – тип уйланы, – инде бөтә хәсрәттәрең, бәләләрең юҡҡа сыға, үҙең дә ҡотола ың.»

уңғы уйҙары шундай булды.

## VI

Иң тәүләп дауаханаға атай кеше килеп етте.

Тәлғәт башта йән еҙ бисә е менән яр ып талашты имеш әле, «Талаҡ! Талаҡ! Талаҡ!» тиеүгә саҡ барып етмәне... Тетрәнеүҙән тәне ҡалтырай ине:

– ин башта Йы аниянын башына еттең, хәҙер, ана, сирле... Хәҙер – Миләүшә...

– Ә ин ҡайҙа инең?

– ин бер нәмә лә аңламай ың, башыңа барып етмәй!

– Мин уға ағыу эсергәнме, ауыҙына ҡойоп торғанмы?

– ин шул көнгә еткерҙең балаларҙы, ҡандарында уйнаның: имеш, бисә айырған ир, имеш, бала ын да ташлап киткән... Хәҙер, ана, үҙебеҙҙең бала хәл өҫтөндә... Нимә тип әйттең уға?

– Мин уға, ағыу эс, тимәнем!

– иңә бөтә е лә дошман, ин бөтә е менән дә көрәшә ең. Мәктәптә лә иңә ҡаршылар, өйҙә балаларың менән алыша ың. Башта –Йы ания, аҙаҡ – Фәнил, хәҙер – Миләүшә...

– Етте иңә! Мине талай ың!

– ин балаларҙы, ғаиләне ошо көнгә еткерҙең... – Ир төкөрөгөн сәсте. – Әгәр Миләүшә үл ә, бел: мин инең менән йәшәмәйем! ин кешеләрҙе яратмай ың, үҙ балаларыңды дошман күрә ең, үҙ балаларыңа ҡаршы көрәшә ең! ин бер кемде лә яратмай ың!

– Бөгөндән үк сығып кит! Артыңа – көл!

Ир был төндө өйөнә ҡайтмаҫын белә ине, хәйер, ул бөтөнләй был өйгә, был бисә янына ҡайтмаҫҡа ҡарар ҡылып бөткәйне. Был хәл – бисә енең үҙ ҡыҙын шул көнгә еткереүе – уны сығырынан сығарҙы, уңғы түҙем таяуҙарын ындырҙы... Тәлғәт тимерҙәй ныҡ, сыҙам, ти әләр ҙә, Тәлғәт тә биреште.

– Ҡыҙым, ҡыҙым! Ба-ла-ҡа-йым! – тип олоно атай. Аяғы ергә теймәне, күҙе бер ниҙе айырманы. Кеше ҡараңғылыҡ, бушлыҡ йырып барҙы. Алда өмөт осҡоно саҡ-саҡ ҡына баҙлай, саҡ-саҡ ҡына терелә ул бөләңгерт нур.

«Ҡыҙың хәл өҫтөндә...» – тип шылтыраттылар эшенә, тик торған ерҙән аяҡҡа баҫтырҙылар, бар донъяны ҡуҙғытырға, бар бәхетен тартып алырға яҫҡынды кешеләр. ай, кешеләр! Мәрхәмәтегеҙ ҡайҙа? Кешенең уңғы өмөтөн, уңғы таянысын, атайҙың аҙаҡҡы гөл-сәсәген тартып алма ағыҙ!

Тәлғәт инрәне генә, аҡты-ҡараны айырмай барып керҙе ҡыҙы ятҡан палатаға.

...Раушания ла өйҙә ултырып түҙмәне, больницаға йүнәлде. Тәлғәт, уны күргәс, урындығынан ҡалҡынды.

Ул өйөнә ҡайтманы, юҡ, ул алҡын, ҡот оҙ, яңғыҙ ҡәберҙе хәтерләткән йортҡа әйләнеп ҡарай алманы. Күптән, күптән таныш уҡмаҡҡа төштө. Йомабикәлә – йылы, унда – яҡты сырайлы кешеләр, улар ине өҙөлөп көтөп тора, өйөнөп ҡаршылай, яратып ҡосағына ҡыҫа, уларҙың ҡулдары йылы, йөрәктәре ҡайнар, ҡараштары аяулы, теләктәре игелекле. Улар уны көтә. Ир бары балаларын йәлләй, балаларын Раушания менән күҙмә-күҙ, маңлайға-маңлай ҡалдырыуҙан ҡурҡа.

Хәҙер бөтә енә лә ҡул елтәр хәлгә етте кеүек.

– Хәҙер миңә барыбер, Йомабикә, – тине, асырғанып. – Мин балаларымды аҡлап, аяп ҡала алманым. Йы аниям нишләне, Миләүшә ағыу эсте. Раушания ҡыҙҙарымдың башына етте...

Йомабикә тыйҙы.

– Тәлғәт, улай тимә! Раушания апай...

– ин уны белмәй ең!

– Юҡ!

– Ул инең ымаҡ йомшаҡ бул а, аяй бел ә, мин иңә килмәҫ тә инем...

– Теләмә әң килмә! – Йомабикәнең дә ирендәре кипте.

– Ул инең хаҡта, беҙҙең мөнәсәбәттәр хаҡында белә.

– Шулаймы? – Сабыр бисәнең күҙҙәре аҡайҙы. – Улай а, Тәлғәт, бүтән...

– ин йомшаҡ, ин наҙлы ың, Йомабикә, ә ул алҡын, ул боҙ кеүек – ҡағыл аң, йөрәк өшөй... инең янында йылы, рәхәт, инең менән йөрәк иреп китә, күңелем йырлай, ҡайғыларым баҫыла...

– ин – сабый бала, Тәлғәт. Ә ул саҡта ниңә Раушания апайға өйләндең? Йәш саҡта бисә кәрәк, ә ҡартая биргәс, ташларға мөмкинме?

– Иҫәр булғам...

– Шулай ҙа...

– Раушания ауылда иң сибәре ине, бер егеткә лә бер ҡабат та беләгенән дә тоттормаған ҡыҙ тип таныштырҙылар – минең сәмгә тейҙе был. Егеттәр менән бәхәс иткәндәй әйттем: «Ә ул минеке буласаҡ!» Их, йүләр! Шунда бел әм... Аҙаҡ аңланым. Мәғҙәндә был туң йөрәк ҡыҙҙан бөтә е лә тайшанған!.. Уға яҡын да барырлыҡ булмаған, йыраҡтан алҡын тынын бөркkән!

Беҙ йыш ҡына алданғаныбыҙҙы тик уңынан аңлайбыҙ, сәскә күреп оҡланабыҙ, ә ул ҡағыҙ сәскә булып сыға. Раушанияға – сәскәләй сибәр ҡыҙға әүрәп, донъямды оноттом, ауылдың иң сибәрен айланым, бөтә Мәғҙән егеттәренең танауына сирттем, тип йөрөнөм... Ахыры ы, яҙмышым шулай булғандыр, хәҙер тер әкте тешләп булмай. Тағы: уны ғәйепләмәйем дә, үҙем ғәйепле. Ул – детдом бала ы, уғыш урлаған унын бала сағын...

– Тәлғәт, тыныслан!

– Юҡ, Йомабикә, ҡәҙерлем, тыйыла алмайым; минең түҙемем ынды бөгөн, аҡтыҡ сыҙамым ҡалманы: мин айырылам! Айырылышам! Бөгөн Миләүшә йә тере ҡала, йә...

– Илама, Тәлғәт, миңә лә ҡыйын... – Хужабикә лә күҙ йәшенә төйөлдө. – Тәлғәт, врачтар көслө бит...

Иҫәрҙәр, алйоттар. Тинтәктәр, тиленәр. Байғоштар, үк еҙҙәр... Ҡушарлап, ҡосаҡлашып илаштылар.

Уттар күптән үнгәйне, хәрәкәт баҫылғайны, ваҡыт та ойоғайны, ә былар тыйыла алмай: сәстәре йәшкә сыланып бөттө, ирендәре, бармаҡтары ҡалтыранды. Уларҙы « өйәркәләр» тип кенә атайҙар, шулай мыҫҡылламаҡсылар. Улар өйәркәләр генәме? Улар бер-бере е өсөн яратылған заттар түгелме? Уларҙы күктәр ҡауыштырҙы бит, күктәр генә айырыр айыр а... Улар – ғашиҡ йәндәр, – бәлки, күктәргә ашҡас та айырылышмаҫтар әле. Бер табышҡас, мендәр ара ынан бер-бере ен табып ҡауышҡас, ерҙәге бик-бик аран бәхетте лә юллап тапҡас, айырылышмаҫтар. Улар – иш йәндәр, улар – бер йәндәр.

Бәндәләр. Кемдәр ҡайҙа ыҙа сикмәй, ҡайҙа бәхет татымай был төндә? Миләүшә – түшәктә, Раушания – унын баш осонда, ә бында, аулаҡ өйҙә, икәү балауыҙ ыҡҡан була. Сисенеп тә торманылар, тәндәре ғәҙәттәгесә тәнгә ҡатышманы, тик йәндәре ҡуш-иш ине был минутта, был мәлдә уларҙы айырырлыҡ көс тә юҡ ине.

Ир менән бисә ара ында иң ысыны ла шул түгелме: ҡыҙыҡта ла, ҡыҙғаныста ла бергә булыу, хафала ла, өйөнөстә лә бер иштән тороу, өйөнөсөн дә, көйөнөсөн дә бер төптән ҡаршылау?

VII

Раушания ханым тамсы серем итмәне, Йы ания ҡыҙы тарихын иҫләне... Оло ҡыҙ менән дә нәҡ шундай хәл булғайны бит. Нишләп бер үк бәләләр ябырыла башына, бер үк хәлдәр яңынан ҡабатлана? Ҡасан сығыр бынын осона, ҡасан ҡотолор бисара был ғазаптарынан?

Теге ваҡытта ла оло ҡыҙы Йы ания ҡайтып керҙе лә яр алды:

– Әсәй, Ғаянды ҡулға алғандар!

– Шунан?

– Уны төрмәгә тығасаҡтар бит, әсәй, ник аңламай ың?

– Әле суд булмаған, Ғаяндың яҙмышы ла хәл ителмәгән... Суд ыҙ-ни еҙ кем кешене хөкөмгә тарттыра?

Раушания ханым ғәм еҙ ҡиәфәттә ултырыуын белде, ә бала үр әләнде.

— Әсәй, прокуратураға бар! Ғаризаңды ал! Ғаянды ултырт алар, ул төрмәгә китә...

— Ҡыҙым...

— Әсәй, мин уны яратам, ул минең берҙән-бер өйөклө кешем. Әсәй, мин унан башҡа йәшәй алмаҫмын, әсәй, ғәфү итә күр уны! Минең хаҡыма, ҡыҙың хаҡыңа! — Бала иңрәне генә, йәшен тыйманы. Ярай, өйҙә әсә менән ҡыҙ икәүҙән-икәү генә.

— Ҡыҙым, тыныслан! Бер ни ҙә булмаған, дауыл ҡупмаған: кешене тиҙ генә ултыртып ҡуймайҙар ул, сисен!

— Юҡ!

— Яйлап кәңәшләшәйек, шунан бер ҡарарға ла киленер.

— Әсәй, ин шаяра ыңмы? — Ҡыҙ аптыраны. — Ғаянды ҡулға алғандар, СИЗО-ға бикләп ҡуйғандар! Ул — арестант, ишетә еңме? Уны инең ғаризаң буйынса, иңә яңылыштан уҡкан өсөн генә хөкөм итәсәктәр, төрмәгә ултыртасаҡтар, шул аңлашылмаймы?

— Йы ания...

— Әсәй, ҡабатлайым: тик Ғаянды яратам, ул минең ирем буласаҡ, ул инең кейәүең буласаҡ — ҡотҡар уны, Алла хаҡы өсөн, минең хаҡым өсөн. Үтенеп о-райым: ҡотҡар, ғаризаңды прокуратуранан барып ал!

— Ҡыҙым!

— Әләй ә, мин сығып китәм, бүтән бер ҡабат та әйләнеп ҡайтмайым был өйгә, инән дә баш тартам!

— Ҡыҙым!

— ин минең мөхәббәтемде төрмәгә тыға ың!

— Ҡыҙым!

— ин минең иремде тартып ала ың!

— Ҡыҙым!

— Мин сығып китәм, әсәй...

— Ҡыҙым! — Раушания торҙо. Олпат кәүҙәле ханым, хәс тә батшабикә инде — ваҡиғалар, бәндәләр яҙмышы өҫтөнән юғары ҡалҡты. — Ярай, ҡыҙым, барырмын прокуратураға! Мин ул саҡлы ҡан ыҙ түгелмен, ләкин нишләп Ғаяндың әсә е — төпөш Фә имә шундай терәпес?.. Теге ваҡытта Ғаяндың үҙенә лә әйтеп ҡайтарҙым: әсәйең кил ен, минән ғәфү үтен ен, тинем. Ҡайҙа әсә е? Ниңә килеп баҫмай туп ама? — Әсә өйләй, ҡыҙы әллә тыңлай, әллә юҡ. — Ҡыҙым, ин белә ең, беҙҙе был ауылда яратманылар — беҙ бар ауыл менән бәхәскә керҙек! Беҙҙе ят, килмешәк күрҙеләр, Таңғырҙа уҡытыусылар ҙа, Советтар Союзы Геройы, мәктәп директоры Талип Сөнәғәтуллин да беҙгә гел ҡырын ҡараны. Атайыңды ревизор тип, мине юғары белемле тип күрә алманылар. Шул төпөш бисә — атыусы Фә имә — әлеге беҙҙе өй өнмәгән Сөнәғәтуллиндар нәҫеленән. Тәкәбберлегенә барып, ғәзиз улын да аямай. Төрмәгә тығырға ла риза, ә мин йүгереп барырға тейеш... Ярай, мин инең хаҡыңа барырмын да, ти, ә ниңә шул Фә имә Сөнәғәтуллина беҙҙе теҙ сүктерә? Беҙҙе тубыҡландыра? Уға үҙ улы ғәзиз түгелме, әллә улынан бигерәк үҙе, тәкәбберлеге ҡиммәтме?

— Белмәйем, әсәй... — Йы ания йәнә япраҡ ише ҡалтырана башланы.

— ин белмәй ең шул, ин аңламай ың, ҡыҙым, ололар ара ындағы бәхәсте...

— Мин еҙҙең арағыҙҙағы бәхәскә ҡыҫылырға теләмәйем, әсәй. Ниңә Таңғыр менән еҙҙең арағыҙҙағы буталыш, Сөнәғәтуллиндар менән еҙҙең бәхәс беҙҙең дә тормошто болғандырырға тейеш? Ниңә ин шул бисә өсөн Ғаяндан үс ала ың? Ғаяндың ололар ара ындағы низағта ни ғәйебе?

– Ә әсәләр өсөн бала ҡәҙерле түгелме? Ғаяндың әсә е эсендә йәне юҡмы? Мин инең өсөн генә ғаризаны...

– Әсәй, үтенәм...

Раушания ханым өлгөрмәне: барҙы, ғариза ын кире ораны... Әммә бирмәнеләр.

Йыания өйҙә йәнә дау ҡуптарҙы. Ата ын да үҙ яғына ауҙарҙы.

Ғаянды ике йыл ярымға хөкөм иттеләр.

Судтан Йыанияны ҡултыҡлап алып ҡайттылар. Ул бүлмә енә инде лә бикләнде. Ашарға ултырманы, кискәсә ауыҙына бер тәғәм ризыҡ ҡапманы.

Өйҙәгеләр иҫкәрмәй ҙә ҡалды, ә иҫ йыйғанда уң ине: Йыания тышҡа ғына тип сыҡҡайны...

Оло урам осонда ғына сырамытып ҡалдылар ҡыҙҙың плащын...

– Ҡыҙым! – Тәлғәт Йыания артынан төштө. – Йы- а-ния! – тигән өрән инрәтте ауаны.

Күҙгә төрт әң дә күренмәҫ ҡараңғылыҡ, атай алдан төшкән. Оло урам иңрәп тора. Йыания Йомабикәләр тәңгәленә етеп, киҫә генә Яйыҡҡа ҡайырылды.

– Ба-лам! Йы- а-ния!

Ҡыҙ йылға ярының иң текә тапҡырынан аҫҡа ҡоланы.

Боҙло ыуҙа бер ни күренмәй, боҙло ыу таша... Уның ялы ла, тотонор ҡойроғо ла юҡ бит.

– Ба-лам! – Ир ҙә ярҙан аҫҡа сумды.

Шул тигәнсе яр башына кеше йыйылып китте. Шау-шыуға баҡса артынан Йомабикә лә сыҡты. Раушания ханым көндәшен шәйләмәне – тамағы ҡарлыҡҡайны, быуындары ҡатҡан; аяҡтары атламай, ҡысҡыра – тауышы сыҡмай. Кешеләр бәләгә тарыусыларға ярҙамға ашыға.

Яр башында – халыҡ.... Раушания ла ни алырға, ни бирергә белмәй ҡатҡан. Йомабикә лә ни уйларға белмәй. Әлбиттә, үҙен генә ғәйепле анай: сәмсел бала уйнашсы ата ы өсөн намыҫланып ыуға ташланманымы икән? Раушания ханым күҙенә эленмәҫкә тырышты. Халыҡ ҡайнай, әллә ҡайҙан милиция ы, «Ашығыс ярҙам» машина ы килеп еткән.

Йомабикә ут йотоп торҙо. Бала ыуға сәсәнеме икән, Тәлғәт тә йәл – был мәхшәрҙән икәүләп сәсрәп ауырып китмә әләр ярар ине... Башын эйеп кенә атланы ҡатын, аман яҡынының хәлен белә алмай ҡаңғырҙы. Был бала ни көнгә тарыны, ни тип шул боҙло ыуға ташланды? Йомабикә үҙен генә ғәйепләне. Белгән доғаларын уҡыны. Бәндә был ер йөҙөнән үҙ ирке менән йөрөмәй, үҙ ирке менән ҡылмай ҡылығын, ярлыҡай күр! Мәрхәмәтең – киң, ҡөҙрәтең – сик еҙ, Хоҙай, ҡөҙрәтеңде изге эшкә ек! Аяҡҡа баҫтыр, әжәлдәрҙән йола шул бәндәләреңде – бисараларҙы, инде лә килеп уларҙы хаҡ юлға баҫтыр! Ишет, ишет инрәүҙәремде! Бер бисара, бер ҡолоң орай... Ул да бөгөн төнө буйы йоҡламаҫ, уның да был төнө билдә еҙлек иркендә үтер.

## VIII

Ни айәт, ғаилә уңғы ҡорға – ашығыс ҡарар ҡабул итеү сара ына йыйылды. Балаларҙың да, ололарҙың да баштары эйелгән. Бер кем дә башлап үҙ әйтергә ҡыймай. Өй шымтайған, түшәмдәр ҙә, стеналар ҙа өн өҙ.

Ә уға тиклем бер мәлдә Тәлғәткә яңынан бәхетле көндәр тыуған ымаҡ тойолғайны бит.

Раушания ханым, донъя ы бер аҙ юлға алынғас, ғаилә тормошо тағы үҙ яйына төшөп киткәс, ирен күҙәтә башланы. Ирек еҙҙән инде.

Тышта ҡара көҙ: алҡын, өшәндергес, бары аулаҡ өйҙә йылылыр, рәхәттер, ундағы йәндәр ошо мәлдә ләззәт сигәлер. Раушания ханым да ныҡ кейенгән, тағы

ире артынан баҫтыра тигәндәй килде был тәпәшәк өйгә. Инаныр өсөн йөрөй, уңғы ҡат уйын раҫларға ла, үҙ күҙҙәре менән күреп ышанырға ла өҙә уғырға. Етте, был мәсхәрәнең дә осо булырға тейеш, был хурлыҡҡа ла нөктә ҡуйылырға тейеш! Ул ары түҙә алмай, ары килешеп йәшәр хәлдә түгел – Раушания ханым күңеленән ҡарар итте: ул айырылыша! Ул быға сик ҡуя!

Аяҡ аҫты тундыра ла башлаған түгелме? Атлауы, улыш алыуы еңелерәк. Саф ауа. Раушания ханымдың да күкрәге киңәйеп, күҙе асылып китте. Әкәмәт: ул ирен күҙәтергә түгел, ә саф ауа уларға сыҡҡан, урам буйлап йөрөй, Яйыҡ ярына барып урай. Инде теге йортто, теге йорттағыларҙы онотто ла, буғай. Уйҙары менән бала сағына ҡайтты.

атый донъя ы... Ике өҙәк тау битләүенә йәйрәп ултырған бит уларҙың ауылы, уртанан Туҡмаҡ шишмә е арҡып ята; тау итәгендә – өйҙәр, йәшел сиҙәм. Ихатанан тура ағаслыҡ, eләклек башлана. Кешеләр был илдә ҡырағай тәбиғәт менән ҡатышып йәшәй. Ауыл ни, урман ни. Тырызынды әләктер ҙә еләк йыйырға йүгер, ҡуяндары ла, хәйләкәр төлкөләре дә күтәрмә алдына килеп менә.

Йәм-йәшел сиҙәм. Был урамдарҙан бер машина үткәне юҡ, гел йәйәүлеләр йә ыбайлылар. Киске эңерҙә ҡырағай урман менән ауыл бергә ҡатыша ла ҡуя: бында кешеләр йәшәйме, әллә кейектәрме, әллә кейектәр менән кешеләр үҙ-ара ҡатышып бөткәнме? Туҡмаҡ шишмә енең бер яғында болан юшай, икенсе яғында ялан аяҡ малай ыу сәсрәтә – мәрәкә.

Раушанияның бала сағы ошо сүрәттә күңеленә еңгән. Ата ы Бәхтейәр көтөү ҡыуып алып ҡайта, әсә е Мөнирә ыйыр ауа.

Шунан был картиналарҙы Орондо ауылы күренештәре алмаштыра. Ундағы иң күңелле мәл – атайҙың төрмәнән ҡайтыуы. Ул йонсоған, таушалған, тик ҡыуаныссы – тау саҡлы, бөтә өй эсе менән күтәрелделәр. Бәхеттәренең иге-сиге булмаҫ ымаҡ тойолдо шул кистә.

Шунан атай тағы төрмәгә китте, тағы ҡайтты, Раушания етенсе класты детдомда тик «бишле»гә тамамланы. Уҡытыусы ы маҡтаны, ата ы атҡа атланғандай өйөндә, хатта, ҡыуанып, ҡыҙын ҡалаға әйҙәне. Медучилищеға бирҙеләр Раушанияны башта. Ҡыҙым ҙур кеше булы, тип өйөндәләр өйҙә. Фәриҙә апа ы уғышҡа китте, атайҙы тағы төрмәгә оҙаттылар, өйҙә әсә е Мөнирә, Баныубикә, Рабиға, Дәриғә еңлеләре генә ҡалды; Раушания Өфөлә үҙ йүнен үҙе күрҙе.

уғыш бөткәс, аталары атыйға ҡайтып китте. Раушания еткән ҡыҙ ине инде, щул ваҡытта Тәлғәт менән танышты. Тәлғәт беренсе әм мәңгелек мөхәббәте ине. Улар Таңғырҙа, иренең тыуған яғында, төпләнде. Бәхетле ине ул йылдар, тәүге балалары тыуҙы...

Бисара бисә ни өсөн йөрөгәнен дә онотто, хәтирәләренә бирелде. Гүйә, бар ғүмере кинокадрҙағылай күҙ алдынан үтте. Йы ания ҡыҙы уҡыуға шәп булды, ләкин Ғаянға әүрәне, ә Миләүшә е... Ҡыҙҙарының бере е лә Раушанияның яғына тартмаған – Раушания ҡырыҫ ине, егеттәр унан ҡурҡты. Ә ҡыҙҙарына ырығып баралар... Раушания шул ҡыҙҙары менән әллә ниҙәргә дүнеп бөт ә лә, бирешмәй. Күңеле тағы тыуған яғына, атый иленә, ҡайтып урай, әсә е менән гәпләшеп ултыра. Ә тимер ҡарсыҡ – ҡәйнә е Хәкимә, Солтанбай, Ғәлиәкбәр ҡәйнештәре яҙмышы... Ваҡыт бөтә ен дә үҙенең ҡап ҡор ағына йота бара икән, күңелгә бары хәтирәләре генә уйыла.

Уйҙар тағы Тәлғәткә килеп төртөлә. Тәлғәтте бөтә йәне-тәне менән, өҙөлөп яратты бит ул. Бөтә күңеле, йөрәгенең иң саф, иң-иң ила и тигән хистәрен уға арнаны. Дөрөҫ, үҙе киҫкен, ҡоро булды, дөрөҫлөк яратты, гел ғәҙел булырға ашҡынды... Ә нимәгә ирешә? Тәлғәт ниңә унан йөҙ сөйөрҙө, уны өйәркәләренә алмаштырҙы? Ул да бисә ен өҙөлөп өйә, «кәләшем» тип кенә тора ине; әллә Раушания үҙе бер ерҙә хаталандымы; ире әллә уны юрый төп башына ултыртып йәшәйме?

Раушания теге наҙан, сәрелдәк бисәләр шикелле тауыш ҡуптармаҫ, көндәше тәҙрә ен ватып йөрөмәҫ инде, ундай түбәнселеккә төшмәҫ.

аман үҙ хәле, ире менән ике аралағы мөнәсәбәттәре тура ында баш ватты. Нишләп, нилектән шулай килеп сыҡты әле: Тәлғәткә үҙ хәләленән яттар ҡәҙерлерәк, өйҙә түгел, ул унда йәм, тәм таба... Бисә ен хәҙер ен урынына күрә. Юҡ, Раушания ары икеләнмәҫ инде: ул айырыла, улар айырылышасаҡ барыбер! Быны ы күңелдән хәл ителгән, әммә бисә яғы аман сәбәптәрен аңлай алмай, аман үҙенең бөткө өҙ орауҙарына яуап эҙләй. Нимәгә? Ни хаҡына? Ниңә, уға барыбер түгелме ни? Уңмағас уңманы был ирҙән, тормошо пыран-заран, донъя ы зил-зилә, әйҙә, ҡапланып кит ен! Иртә уңмаған – кис уңмаҫ, кис уңмаған – ис уңмаҫ, тигәндәр. Ул уңманы был тормошта, ир бәхете тапманы, бала бәхете, эйе, күрмәне. Балалар үҫтеләр ҙә йылы ояларын ташлап олаҡтылар.

Раушания көндәшенең текмә е буйында тапана, өйҙә күптән утты үндерҙеләр. Был бисә ни көтә, нимәгә ым ына? Ни хәжәте бар уға был төндөң? Бәхет еҙ төнө, мәсхәрә е уҙыла ла уҙыла. Ниңә ул шул хурлығын үҙе уҙа?

Тағы Йайыҡ ярына баҫты. Аҫта шаян тулҡындар уйнай, ят ауаздар сығара. Нимәгә тоҫмаллай улар? Йайыҡ – уңған килен, егәрле бала, башын баҫып ыу ташыуын белә. Нисә дәүерҙәр ул шулай үҙ эшен атҡара, бурысын үтәй. Уҫал ҡәйнә енә ярарға була тырышамы? Әллә белә, әллә танымаймы ул был ханымды? Нәҡ шул тәңгәлдә, буғай, Йы ания ыуға ташланғайны, Тәлғәт – артынан... Күңел еҙ хәтирәләр эҙәрләй был ханымды; ул инде әйләнеп китәм генә тигәндә, ярҙың сите кителеп төшә. Шул шау әллә ҡайҙарға әллә ниндәй дә шәтле өндәр ала.

Ханым да тертләй. Көндәшенең емеш баҡса ын уйып-өңөп бара түгелме был ажар йылға? Кешеләр уны юҡҡа сымыры тип атамай... Әллә Йайыҡ ыуы көй өҙ бисә мәсхәрә е өсөн көндәшенән үс аламы? Шул төҫ инә, кеше ирен йәр итмәҫ ең, бүтән өлөшөнә ҡыҙыҡмаҫ ың! Хоҙай Тәғәлә белә ул кемгә ҡаза ебәрергә! Йайыҡ ыуы баҡсаң менән бергә үҙеңде лә йолоп ҡуйыр әле!

Бисара ханым шул уйынан өйөнөп китә, эсенә йылы тула. Барыбер яр башын ташлап китә: Йайыҡ ағышында ят шом, билге еҙ ишара бар. Айбан, айбан, йән эйә е, был бәләләрҙән! Кәрәкмәй! Дуҫыңа түгел, дошманыңа күр әтмә ен ундайҙы, юҡ, кәрәкмәй!

Раушания аңлай. Көндәшенең дә үҙ көнө, үҙ яҙмышы. Был бәйләнешкә ул ғәйепле лә түгел, эш башы, бөтә бәлә – Тәлғәттә! Тәлғәт йөрөй шик-шом алып, донъя болғатып. Ул яуап тотасаҡ, ул, ул! Раушания Байназарҙар затынан бит әле, тегеләй әсе телле, ауалы Бәхтейәрҙең ҡыҙы!

...Ни айәт, иргә яуап бирер мәл тыуҙы, йотҡанын ҡоҫторор хәтәр көн килде. Ни айәт, ғаилә уңғы ҡорға – киҫкен дә, ҡәтғи ҙә бер ҡарар ҡабул итер йыйынға йыйылды. Был ҡасан да бер булырға тейеш ине.

Балалар ҙа, ололар ҙа баштарын эйгән; ололар – бер яҡҡа, балалар ҡаршы яҡҡа теҙелешеп баҫҡан. Кем судты башлар, кем хөкөм ҡарарын иғлан итер? Кем бында судья, прокурор, хөкөм ителеүсе, кемдәр ша ит, ша итлыҡ ҡылыусы?

Хәҙер Раушания балалар яғына сығып баҫты әм ғәйепләү телмәрен башланы.

– Тәлғәт, ниндәй өйләшеү, нимәгә был йыйылыш, тип төпсөштөң, саҡ ҡына түҙ, хәҙер аңлатам. Балаларҙы ла шуға йыйҙым. Был уларға ла ҡағыла бит.

Тәлғәт, мин күп түҙҙем, күп ынаным ине, инде түҙемем ынды. Бер үҙ ҙә әйтмә, тыңлап бөт! Мин әлегәсә өндәшмәй килдем, хәҙер ҙә инең менән бәхәс ҡорорға, теге наҙан бисәләр кеүек сәркелдәп әрләшергә теләмәйем.

ин – уйнашсы. Балалар ҙа быға ша ит булып бөттө, бары сер сисмәйҙәр. Мин дә күп түҙҙем. Әле Мәғҙәндә үк, теге Миңзаданан уң, анттар биргәйнең... үҙеңдә торманың, хәҙер анттарың да кәрәкмәй.

Мин ин тип йәшәнем, артыңдан йөрөп, төрмәнән алып ҡалдым, – рәхмәтең

шул булды. Балалар хәҙер ҙур үҫте, улар ҙа аңлар... ин минең кемлегемде белә ең: ғәҙел еҙлекте күрә алмайым, алдашыусыны йәнем өймәй. ин — алдаҡсы, ғүмер баҡый мине төп башына ултыртып йәшәнең, өҫтөмдән йөрөнөң, йөҙөмдән көлдөң.

Йомабикәне юрый партияға алдың, йәнә е, бирәү — тәүге партия ойошма ы секретары! Улар йыйылышҡа китә, ә бисә донъя көтә, балалары өйҙә ултыра. Тәлғәт бөтә ен дә кәкре ҡайынға терәтә. Ни айәт, мин ҡарар ҡабул иттем...

— Раушания, туҡта! — Тәлғәт алға уҡталып ҡуйҙы.

— Нимә?

— Былдай эштәр орҙом-бәрҙем генә хәл ителмәй.

— Ә мин күп уйландым, Тәлғәт, күп ыҙа сиктем, инә лә, балаларға ла иҙҙермәй язаландым. Әле килеп...

— Юҡ, Раушания, был мәсьәлә икебеҙгә генә бәйләнмәгән... — Тәлғәт ашыҡты, күҙ алдында көтмәгәндә ғаилә е — уңғы ҡәлғә е емерелеүе уны яр ытты. — Балалар бар, улар ни тиер? Ғаилә — үҙе бер кескәй генә дәүләт бит, ин ни йәнең менән шуны бер елтәүҙә... Юҡ, беҙ уны егерме йыл буйы бергә төҙөнөк...

— Тәлғәт... — Раушания әллә үҙ тапманы, әллә ныҡ тулҡынланды — өҙөлөп ҡалды. Балалар ҙа өн өҙ, баштарын эйеп, күҙ ҡараштарын табан йөҙлөгөнә төбәгән. Ысынлап та, хәтәр: улар ҙа аңғарып ҡалды, хәҙер күҙ менән ҡаш ара ында бөтә ғаиләнең яҙмышы, уларҙың да киләсәге хәл ителәсәк.

— Тәлғәт, мин күңелемдән хәл иттем, мин әҙер...

— ин хәл иткән ендер ҙә ул, ә беҙ хәл итмәгәнбеҙ: мин, балалар...

— Йы ания ла, Миләүшә лә был хаҡта белә...

— Ҡыҙҙарым... Йы ания, Миләүшә... — Атай, асырғанып балаларына баҡты, гүйә, уларҙан ярҙам, ярлыҡау үтенде. Уның, билдәле, ис тә әле генә, ошо минутта ғаилә ен юғалта ы, ғәзиз балаларынан яҙғы ы килмәй ине — ул, гүйә, уңғы алам осона тотондо. — Балаларым, мин риза түгел! Мин әсәйегеҙҙән дә, еҙҙән дә баш тарта алмайым!

Раушания ла бер мәлгә юғалып ҡалды, донъя дилбегә ен ҡулынан ысҡындырҙы. Инде өркәк ат үҙ ыңғайына ҡайырып алып сығып китте, ә арбалағылар, борсаҡ ише, ҡай ы ы ҡай ы яҡҡа ибелешеп-осоп ҡалды. Бер мәлгә өйҙә үле тынлыҡ урынлашҡандай итте, ололар ҙа, балалар ҙа шымтайҙы. Бисә енең киҫкен холҡон белгәнгә күрә өрктө Тәлғәт. Ысынлап та, уның өсөн ғаилә арба ы хәҙер упҡын ситендә әленеп тора, саҡ ҡына тарт — аҫҡа ҡолаясаҡ. Раушания аяу ыҙ: ул ғәҙеллек ярата, ул әҙ генә хилафлыҡты ла кисермәҫ, ғәфү итмәй, киҫә уғыр... Юҡ, Тәлғәт әле бер уғыуҙа ғаилә ен тарҡата, балаларынан яҙа алмай! Уның өсөн ғаилә — тәүге урында, балалар — изге! Ул әллә ниндәй өйәркәләренән дә балалары хаҡын юғары ҡуя! Хатта был хаҡта баш ватып та тормаясаҡ: ул ғаилә е менән ҡала, балалары, ғәзиз ҡыҙҙары хаҡына Раушанияның үҙе менән генә түгел, ете башлы дейеүҙең үҙе менән дә бергә йәшәргә әҙер! Был тормошта уның өсөн иң ғәзизе — балалар!

— Балалар, мин еҙҙән айырылмайым!

— Мин ҡарар иттем: мин айырылышам! Тәлғәт, бүтән мин был мәсхәрәне күтәрә алмайым. Өйҙән сығып кит!

Әллә ҡайҙан килде был ауаз. Оран! Ул сиркәү ҡыңғырауҙары зыңы булып ябырылды мейеләргә, өй эсен тултырҙы, түшәмдәргә бәрелеп кире ҡаҡлыҡты әм тағы ла хәтәрерәк булып яңғыраны... Гүйә, Алла хөкөмө, ауаларҙан ергә төшкән оран. Юҡ, ул Раушания ханымдың әмере лә түгел, уның уңғы үҙе түгел, ә күктәр күкрәүе, ауалар хөкөмө.

— Раушания...

— Сығып кит!

— Раушания, үтенәм! Мин балаларҙан башҡа йәшәй алмайым.

– Сығып кит! – Хәтәр оран, ҡәтғи бойороҡ! Хөкөм! уңғы үҙ! Хәҙер унын аша атлап та булмай: Раушания бөгөн бында – прокурор ҙа, судья ла. Ул ғәйепләй, ул үҙе хөкөм ҡарары сығара. Уға шундай хоҡуҡ бирелгән, ул әле шул хоҡуҡҡа эйә. Яҙмышмы, тәҡдирме был – эт белә.

ауаларға эленгән был хөкөм, баш өҫтөндә хәтәр айбалталай эленгән был ауаздар.

– Мин атайым менән китәм!

Әллә ҡайҙан – түшәм аҫтынанмы, шаршауҙар артынанмы – ишетелде был өн, әм оло ҡыҙы Йы ания ышаныслы аҙымдар менән ата ы эргә енә барып баҫты. Хәҙер аталы-ҡыҙлы икәү булдылар.

– Мин дә еҙгә эйәрәм! – тине Миләүшә әм ата ы менән Йы ания апа ы йәнәшенә баҫты.

– Мин дә!.. – тине Фәнил әм ата ы менән апалары ҡашына өҫтөрәлде.

– Юҡ, мин барыбер айырылышам, барыбер әшәке ир менән йәшәмәйем! – Раушания, асырғанып, диванға ташланды, әрнеп-үкереп, түшәккә йөҙтүбән ҡапланды. Шунын менән был «спектакль» тамам булды.

## Эпилог

Раушаниянын ата ы Бәхтейәр ҡарт бер мең дә туғыҙ йөҙ алтмыш өсөнсө йылда – Дыуанда, ә әсә е Мөнирә ҡарсыҡ бер мең дә туғыҙ йөҙ ҙә ик әненсе йылда Мәғҙәндә вафат булды. Раушания ханым ата-әсәләренең йыназа ында ҡатнаша алманы, ара йыраҡлығына ылтанды. Хәйер, ул хәҙер тыуған яҡтарынан – Мәғҙән иленән бөтөнләй айырылды тиерлек, атый хәлдәре менән ҡыҙыҡ ынмай, тугандары менән дә ирәк- аяҡ хатлаша, ә Баныубикә, Рабиға еңлеләре менән бөтөнләй белешмәй, сөнки хәҙер уға туғандар кәрәкмәй.

Тәлғәттең Солтанбай ҡусты ы барыбер яңы машинаға ултыра алманы: колхоздың йәш рәйесе Хурамшин Йы анияға өйләнә алмағас, уға ырт бирҙе. Әйткәндәй, уңынан эскесе Солтанбайҙы иҫке автомашина ынан да төшөрҙөләр.

Хәкимә ҡарсыҡ аман да иҫән, аман ҡаты баҫып уҙа ауыл урта ынан, ҡаты өйләшә, эре ҡылана. Йылдар уны ындыра ла, тамам үҙгәртә лә алманы: килендәренән яҙҙы, улан-ейәндәрен күрмәне, төп йортта япа-яңғыҙы йәшәп ята.

Бүтән персонаждар яҙмышы ла үҙгәрҙе. Орҡоя яңынан кейәүгә сыҡты, үкенмәй, геүләтеп донъя көтә. Балаларын да үҫтерә. Тағы балаларҙың ни ғәйебе – улар был донъяға йәшәр өсөн, бәхет тигәнде татыр өсөн килгән; уларҙы аталарының ҡылығы ла, сауабы, нахағы ла ҡыҙыҡ ындырмай, улар был донъяға саф сабый күҙҙәре менән баға.

Сәрбиямал килендән ҡалған ҡыҙ балаҡай ҙа үҫте, Тәлғәттәргә килеп йөрөнө. Әйткәндәй, уҙған көҙ Тәлғәт баба ы уны кейәүгә бирҙе, матур итеп туй үткәреште. Рәхмәт изге эшенә!

Раушаниянын уҡыусы ы Ғаян яҙмышы башҡа төрлөрәк булды. Ул төрмәлә ултырҙы, ә Йы ания ы, тере ҡал а ла, йөрәк ауырыуына дусар ине. Уны иҫәпкә ҡуйҙылар, миҙгел айын больницаға ҡаралырға ҡуштылар. Ғаян менән Йы ания, әлбиттә, ҡауыша алманы – Раушания ханым бер маҡсатына иреште. Йы ания сирле, ә Ғаян төрмәнән бик үҙгәреп ҡайтты. Ул хәҙер элекке Ғаян да түгел ине, Йы аниялар затына ла ныҡ асыулы. Кешеләрҙе яратмай, хатта тыуған ауылына ла ҡул елтәне, ауылдаштарына ҡайтып йөҙөн асманы. Башҡа ис ҡасан да ауылына аяҡ баҫманы. Бөтә кешеләргә үсле, бөтә донъяға асыулы.

Өйләнгәнме ул, юҡмы, эшләйме – ауылда быны ын белеүсе лә, ҡыҙыҡ ыныусы ла булманы. Шулай инде: бәндә ауылдаштарынын да хәтеренән сыға. Кеше йәшәй-йәшәй ҙә иҫәптән төшөп ҡала. Ул хәс тә бөжәк кеүек: бер йәй генә мыжғып осоп ала ла юҡҡа сыға, уны ерҙә бүтән йәндәр алмаштыра.

Шулай ҙа Ғаянды кемдер күргән: әсә е Фә имә үлгәс, Ғаян ҡайтып киткән. Ауылға кермәгән, ә зыяратҡа ғына уғылған. Әсә е тере сағында ҡайтып күренмә ә лә, әсә е ҡәберенә баҫып, рухына баш эйгән. Унда ла ҡойма аша йөрөгән, тиҙәр: әллә ҡапҡаны онотҡан, әллә ныҡ ашыҡҡан – ҡойма аша икереп кенә төшкән дә... Аҙаҡ шул юлынан кире сыҡҡан. Шунан уң уны ауылда күргәндәре лә, иҫләгәндәре лә юҡ. Кеше эҙ еҙ юғалған. Ауылдаштары өсөн ул ҡасандыр бар булған, хәҙер юҡҡа сыҡҡан.

Миләүшә менән Шәүкәт тә ҡауыша алманы. Хлорофос эскән Миләүшә больницала оҙаҡ ятып, оҙаҡ дауаланып сыҡҡан сығыуын, әммә врачтар унының тамам ауығырына шик белдерә икән. Сирле инде Миләүшә е лә...

Ҡаҡшамаҫ зат Раушания ханым балаларының бары ын да теҙ сүктерҙе, шай. Бына ире Тәлғәткә булған дәғүә ен генә алмаған, ике аралағы иҫәп-хисап аман өҙөлмәгән. Ниңә, ти егеҙме? Айырылышам, тип ҡәтғи бер талапмы, шартмы, әллә үҙме алғайны уртаға... Ғаилә ағзалары – балалары килешмәне. Шул ваҡиға Раушания ханымды аҡылға ултырттымы, әллә ваҡытлыса ғына туҡталып ҡалырға мәжбүр иттеме? Раушания ханым аман икеләнә, аман айырылышыу уйынан баш тартмай. аман ирен ғәфү итмәй, итә лә алмай, кире енсә, Тәлғәтте эсенән ҡарғап ултыра... Хәҙер уға нимәгә донъя ҡыйышып йәшәргә? Герой Сөнәғәтуллин да директор вазифа ынан күптән төшөрөлдө, теге терәпес атыусы ҡатын – Фә имә Сөнәғәтуллина ла вафат...

Аңламаҫ ың был кешене: шул йәшендә ниңә инде уға тормош менән бәхәсләшеп, дәғүәләшеп йәшәргә? Әллә, ысынлап та, килен ҡәйнә тупрағынан, тигәндәре дөрөҫмө икән? Хәкимә ҡарсыҡ ымаҡ, бер юлынан атлай бит Раушания ханым да... аман ауалы ханым, аман шул көйө баҫа, тамсы ла үҙгәрмәгән... аман икеләнә, айырылышыу уйын башынан сығарып ташламай. Ире лә ҡаңғырҙы был икеле-микеле хәленән, билдә еҙ тормоштан, шулай ҙа ул да: «Талаҡ! Талаҡ! Талаҡ!» – тип ҡысҡырғаны юҡ, ҡысҡыра алмай; Раушания үҙе лә уҙа, йәнен аман шул бер уй талай: айырылышырғамы, әллә кире дүнеп кенә ҡуйырғамы, инде ологайып та бөткәс, тағы бер хәл дә итә алмай: айырылып кит ә лә, ни ҡылыр, нимәгә ирешер, ары яңғыҙы нисек көн күрер, ҡабат кейәүгә сығырмы, тағы шулай ҡаңғыр а ла, оят, әҙәм мәсхәрә е, урамға сығырлыҡ, кеше күҙенә күренерлек түгел. Мәктәпкә бар а ла, бөтә е лә көлә, уҡытыусы коллегалары бармаҡ төртөп күр әтә кеүек: ана, ире хыянат иткән, ире битенән көлгән текә ханым килә... Юҡ, Раушания ханым биллә и-валла и күнмәҫ, ә айырылышасаҡ!

аман икеләнә, аман уҙа был кеше. Айырылышыу мәсьәлә е аман баш осонда башты ҡыйырға әҙер хәнйәр шикелле әленеп тора.



**Ғәли**
**ҒАТАУЛЛИН**

# ЕТЕ ЯТ ЙӘР

ХИКӘЙӘ

Аяҙ, тын төндәрҙә, бигерәк тә эсе бошҡан саҡта Ғүмәр күк япма ына ибелгән йондоҙҙарҙы күҙәтергә, улар менән, иҫәр кеүек, күңеленән генә гәпләшергә ярата. Әлеге ғәҙәте унның күптәндән — йәшлек осоронан килә.

Бар ине Кәркә тигән ауыл. Берҙән-бер урамы дүрт тараф елдәренә лә шыр асыҡ өҙәк тау битләүендәге уй ыулыҡҡа кирелеп ятҡан. Утын, ағас әҙерләү өсөн урманға биш-алты саҡрым теркелдәргә кәрәк — айыҫҡан ҡунып шыҡырҙарлыҡ та урманы булмаған ауыл ул. Ләкин был тәү ҡарашҡа ғына шулай... Әбей батша заманында Арса яҡтарынан сәфәр ҡылған Харис мулла нәҡ ошо урынға иң тәүге ҡаҙыҡты бик белеп ҡаҡҡан. Ҡояшҡа ырт биргән Кәркә баҫыуҙары яҙын ҡарҙан бик иртә асылып, сәселгән орлоҡто өшөтмәй, ҡуйырмай ғына шытыр хәлгә еткереп йылыта икән. Ә унның ере! Ерен әйт ин унның! Көҙгө төн кеүек ҡара. Ҡойма ямғырҙарҙа аяҡты йәбештереп, мисәтләп ҡуя, әйт әм әйтәйем, йыл айын тупылдатып бала табыусы унған, йомарт ҡатын кеүек уңдырышлы, игелекле ер ул! Тик сәс кенә. Бише менән ҡайтарыр.

Ә ҡыштарын? Ә ҡыштарын бында ғәрәсәт ҡуба. Килде-китте бурандар Кәркә баҫыуҙарын көрт ырынтылары аҫтына йәшереп ҡуя. Ауыл да ҡар аҫтында. Ир-ат быға өйөнә генә: "Дым шәп буласаҡ! Хет ҡоролоҡ бул ын — беҙгә нипачум". Шулай тиҙәр, шулай уйлайҙар, сөнки улар белә: Кәркә тупрағы тәбиғәт биргән дымдың тамсы ын да ағыҙып ебәрмәйәсәк, ә, мамыҡ кеүек ҡом оҙланып, үҙенә еңдерәсәк. ендерә. әм, кәрәк сағында, кәрәгенсә генә кире бирә. Йылдың йылында өҫтәлдә күпереп бешкән икмәк хуш еҫен аңҡытып, хөрлөк, муллыҡ белдереп тор а — иң ҙур байлыҡ, йәшәүҙең матурлығы, мәғәнә е бына шул. Керәҫтиән икмәк алыуҙан икмәк алыуға ҡәҙәр йәшәй. Икмәге уң а — күңеле көр, донъя матур, ә инде бик уңма а — ҡатын ниҙер килештереп бөтөрмәгән, ахыры. Кәркә икмәге —

---

*Ғәли Ғатауллин 1948 йылда Бүздәк районының Таулар ауылында тыуған. 1972 йылда Башҡорт дәүләт университетын тамамлағас, райондың Яҡуп, Туғай мәктәптәрендә уҡыта, Өфөлә “ әнәк” журналы редакция ында эшләй. Әлеге көндә тыуған ауылында йәшәй әм ижад итә. Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағза ы, бер нисә китап авторы.*

күмәс, тиҙәр. Ҡабарып бешкән булыр, унын өҫтө ҡыҙҙар битендәй шыма, ҡыҙарып, ялтырап торған булыр. Ул осорҙа туйҙар өсөн, ҙур ҡунаҡ-төшөмдәр өсөн яҡын-тирә ауыл халҡы күмәсте гел генә Кәркә еңгәләренән алдырып алыр ине.

...Хәҙер Кәркә юҡ инде – магазин икмәген ашаусылар, кескенә ауыл перспектива ыҙ тип, уны туҙҙырҙылар, урынын көтөүлек иттеләр. Ҡасандыр туйҙырған, ә хәҙер инде билсән, әрем, ары сәскә баҫҡан Кәркә баҫыуҙарында дегәнәккә батҡан арыҡ өйөрө, ыйыныр күләгә таба алмайса, майылдашып йөрөй.

...Заманында Кәркәлә Хәнифә исемле еткән ҡыҙ ҙа бар ине. Өҫтән үрелгән ҡалын толомдары алға, тығыҙ, йомро күкрәктәре өҫтөнә алынған булыр ине. Сәстәренең ҡаралығы ғына етмәҫтер, типме, тәбиғәт уға муйыл күҙҙәр ҙә биргән, саҡ ҡына ҡалынраҡ ҡаштарын да ҡараға буяған. Йылмайғанда бит остары уймаҡланып соҡорая. Заманында Кәркә ҡыҙы Хәнифә күп егеттәрҙең осколоғон тотторҙо инде, ә үҙе бере енә лә ыр бирмәне, асылып барманы, аяҡ аҫтында йөрәктәрен тотоп тәгәрәшеп ятҡан егеттәргә иҫе лә китмәне хатта. Бына шул тәкәббер, үҙ алдына йылмайып йөрөгән Хәнифәгә Ғүмәр ҙә ғашиҡ булды...

Эй, ул йоҡо оҙ төндәр! Эй, ул ҡыҙ ҡырында ғына баҫып тороуҙарҙың рәхәтлегенән, унын сәстәренән, тәндәренән килгән еләк тәменән, әрем, бәпкә үләне еҫенән, яңы ғына ауған парлы өт еҫенән – тағы ла әллә ниндәй, быға ҡәҙәр бер ҙә белмәгән, туймаған хуш еҫтәрҙән иҫереп, миңрәүләнеп, иңке-тиңке йөрөлгән гона ыҙ, бәхетле саҡтар! Булды ул. Булған ул. Юҡҡа ғына Ғүмәрҙең йөрәге ошондай салт аяҙ йондоҙло төндәрҙә ыҡранмай ҙа инде.

Йыр бар: беренсе йәр ятҡа ҡала, тип йырлайҙар, өҙөлөп өймәгеҙ, тиҙәр. Ысындыр, өҙөлөү кәрәкмәй икән дә ул. Ғүмәр ҙә, башҡа егеттәр кеүек үк, Хәнифә йөрәгенә асҡыс яраталманы. Тырышманы түгел тырышты – ҡыҙға хистәрен ыҡы-мыҡы аңлатмаҡ булыр ине, ә Хәнифә, матур башын артҡа сөйөбөрәк, беләктәрен ым ындырғыс күкрәктәре өҫтөнә ҡаушырып, күктәге йондоҙҙарға төбәлеп үҙ үҙен өйләр. Башҡаларҙы ишетмәй ул. "Эй-й, матурҙар... Ҡарәле, бере-е бигерәк яҡты яна. Белә еңме, Гершель тигән ғалим, әр йондоҙҙоң үҙ пары бар, ти. Ул 3347 парлы йондоҙ тапҡан. Йондоҙҙар төрлө төҫтә була: зәңгәр, йәшел, ҡыҙыл, арылары ла бар. Иғтибар менән ҡара! Йондоҙҙоң төҫө унын эслегенең температура ына бәйле, имеш. Беҙгә күренгән 3000 йондоҙҙоң иң яҡты ы – Сириус... Ә миңә, белә еңме, уғышта ил азатлығы өсөн үлгән кешеләрҙең рухы йондоҙҙа йәшәйҙер кеүек, шунан, йыраҡтан, галактика төпкөлөнән, уларҙың ҡарашы нур булып сағылалыр ымаҡ. Эй-й, иҫәр ҙә инде мин, эйеме..."

Өй мөйөшөнә бәйләп ҡуйылған быҙау, мейес артындағы арыҡ бәрәсе ара ында үҫкән ауыл ҡыҙы йондоҙҙар тура ындағы ғилемде шул тиклем ҡайҙан алғандыр – уны ын үҙе генә белә, ә бына Хәнифәне оҙатҡылаған егеттәр күк есемдәрен китапханалағы берҙән-бер "Астрономия" китабынан уҡып өйрәнде. Музейға ҡуйырлыҡ данлыҡлы китап ине шул. "Йондоҙҙоң яҡтылығы беҙгә саҡлы биш йөҙ йыл буйы килә. Бына, ҡарап тора ың, ул, фактически, үнгәндер ҙә", – тип кенә ебәрә ине Кәркә егеттәре ул мәлдәрҙә. Берәй е йондоҙ тура ында лығырҙай икән – тимәк, ул Хәнифәне оҙата барған йәки әле әҙерләнә, оҙаҡламай оҙатасаҡ тигән үҙ.

Ысынын да, Кәркә күгендәге йондоҙҙар үҙенсә ине, яҡты ине, күп инеләр әм бейек тә булып сыҡтылар – буй етерлек түгел. Ул йондоҙҙар Ғүмәрҙең күҙ төбөнә лә “ҡунып” ҡайтҡыланы – үҙ ҡыҙҙары янына ситтәрҙе яҡын килтерергә яратмай ине Кәркә "астроном"дары.

...Булды инде.

Ә бер саҡ, көҙгә кергәс, Хәнифә Стәрлегә эшкә урынлашты, әм ҡала икмәге ашап билдәре тағы ла нескәреберәк кенә киткән кеүек ине – Яңы йыл алдынан

чечен егетен эйәртеп ҡайтты. Кейәүгә сыҡҡан, а-ба! Хәнифә йөрәгенә нисек, нисек шулай бик тиҙ үтеп керә алған ул чечен? "Вәт, бына беҙҙең яҡта Кавказ тауының иң бейек түбә енә менә ең дә кәрзиненә йондоҙҙарҙы сүпләп-сүпләп тултыра ың инде", – тип лыҡылдағандыр, айрағандыр, күрә ең.

Бөттө, үлде, үнде Ғүмәр. Ул ғына ла түгел, көтмәгән яман хәбәрҙән Хәнифәгә күҙ алған бүтән егеттәр ҙә ҡырылды. Ә чечен кейәүгә, бөҙрә башҡа, оҙон сираҡҡа нимә – уны, пальто ының иҙеүҙәрен ысҡындырып (Ғүмәрҙәр өҫтөндә – бишмәт) аҡ шарфтарын таратыбыраҡ ебәреп, Кәркәнең әр өйөнә кереп, күрешеп-танышып йөрөгән, тинеләр.

– Әссәлләме-ғәләйкүм! Мин – еҙҙең кейәүегеҙ! Мин дә, иншалла, мосолмандыр, — ти икән.

Асыҡ йөҙлө, күңелсәк кейәүҙе ауыл ҡабул итте.

...Могамед (Кәркәлеләр – Мөхәммәт тине) менән Хәнифә, Хоҙай бирмеш әр йылды, йөрәк яндырып, ҡунаҡҡа ҡайтып йөрөнө. Ҡайтҡан айын балалары гел берәүгә артҡан була ине. Өс ҡайтыуға – өс малай. Теремек, йылғырҙар. Мөхәммәт ҡунаҡ булыуын, ғәҙәттәгесә, балаларын күтәреп, эйәртеп, өйҙән өйгә йөрөп хәләхүәл белешеүҙән башлар.

– Әссәләме-ғәләйкүм! Ҡайттыҡ әле. Дин ҡәрҙәштәр бит беҙ...

Йөрөп алалар ине шулай урам тултырып. Уларға ауыл балалары ла эйәрә. Китә этеш-төртөш, шаярыу, уйнауҙар. Башлыҡтары – Мөхәммәт.

Ә әсәләре, нисәмә бала бағып та гүзәллеге ис юйылмаған Хәнифә, ҡапҡа бағана ына өйәлеп, үҙ уйҙарына үҙе йылмайып, уларға баҡҡан. Ни айәт, унын йондоҙҙары ергә төштө, ахыры.

Чечен Мөхәммәт Кәркәне бына шулай яулап алды. Ауыл теленә ваҡытты яңыса үлсәү бирәмеге керҙе. Кешеләр, берәр эштең, хәлдең ваҡытын асыҡлау кәрәк бул а: "Мөхәммәт кейәү ҡайтҡайны бит, точны шул саҡта", – тип кенә ебәрәләр.

Кейәүҙең иң яратҡан эше – бесән сабыу әм... икмәк алыу. Эйе, эйе, икмәк алыу. Икмәктәре менән быға ҡәҙәр шө рәт алған ауыл ҡатындарын тамам ытты Мөхәммәт!

Иң башта ул йүкә ағасынан кеүәҫ (силәк) я аны – ҡамырға йүкәнең хуш еҫе бик шәп еңә икән. Кәркәләр тағы шуны белде: икмәк ҡамырын ирҙәр, бары тик ир кеше генә иҙергә тейеш! Сөнки ҡатын-ҡыҙҙың ҡулы көс өҙ, ҡамыр иҙгәндә ул көсәнеүҙән тирләй, әм шул тир еҫе ҡамырға йоға. Ә ғәйрәтле ир-атҡа ҡамыр баҫыу – уйын. Мөхәммәт тағы ла былай ти:

– Хошь не хошь, икмәк иҙгәндә ҡатын-ҡыҙ уҡрана инде ул – ауыр эш бит. Ҡатын-ҡыҙ бер ниҙе лә үҙ эсендә тота алмай. Бына шул уҡраныу, ҡара көс булып, ҡул аша ҡамырға күсә, ә ир-егеттәрҙең натура ы хәсрәтте үҙ эсенә йота, шатлыҡты ғына уртаҡлаша торған итеп ҡоролған...

Бына шулай икән. әр хәлдә Мөхәммәт алған (бешергән түгел – алған) икмәк Кәркә өсөн тан ыҡ ине – икмәк телемен усҡа йомарла аң да, ҡулды яҙғас, ул тептеүәл үҙ рәүешенә ҡайта; сәйнәгәндә, таралып, тамаҡ төптәренә ултырмай, уны хатта тиҙ генә йота ы ла килмәй, сөнки ауыҙың ҡыймылдаған айын яңы бер хуш тәм тоя ың.

...Заманында сәйнәтте инде чечен кейәү үҙ икмәген. Ашама а, Хәнифәнән ҡолаҡ ҡаҡҡан бахыр егеттәр генә ашамағандыр ул икмәкте. Ғүмәр әле уйлап ҡуя: шәп ир, Хәнифәгә ысынлап та лайыҡ булғандыр Мөхәммәт, сөнки икмәк алған кеше насар булмай!

Икмәк ҡамыры иҙгәндә (Кәркә яғында шулай тинеләр, еҙҙә, бәлки, "икмәк баҫыу" тип әйтәләрҙер), уны булдырып мейескә тыҡҡанда Мөхәммәт ишетелер-ишетелмәҫ кенә йырлап, шаярып-көлөп кенә йөрөр ине, ә лап-лоп баҫып, уҡра-

нып, ауыт- аба шылтыратып түгел. Мөхәммәттең үҙе дөрөҫтөр: кешенең халәте ул әҙерләгән ризыҡҡа ла күсәлер, күрә ең.

Кавказ яғына, Мөхәммәттең тыуған иленә, күсенеп йәшәй башлағас та улар, инде дүрт малай эйәртеп, бер ҡайтып киттеләр. Урамдарға йәм керҙе шул саҡ.

...Ә икенсе йәйҙе Кәркәне туҙҙырып ташланылар.

***

Инде нисәмә йылдар үтте. Ил флагтары алышынды, шул флагтарҙы икмәк биреп эт ыйпаусы етәкселәребеҙ тотҡан – эйәргәнбеҙ!

Ҡасандыр Кәркә юлына туҙан ҡундырмаған кәттә егет Ғүмәр ҙә, ярым пеләш башын ялтыратып, алынмалы-кейелмәле бик тә яйлы тештәрен ҡулъяулығына төрөп, тин шутлар сағына терәлгәнен иҫләмәй ҙә ҡалды. Заманында баш кейемен ҡулына йомарлап Ғүмәр хозурына килеүселәр бөгөн инде теләр-теләмәҫ кенә сәләм бирә үҙенә. И-и, сит кеше инең ҡәҙеренде ҡайҙан бел ен, йәмәғәтең – ғүмер баҡый икәүеңә бер юрған ябынған үҙ ҡатының белмәгәнде. Шулай. Егәре бер кит ә, ҡулыңдан дилбегә ысҡын а, ир-аттың ҡәҙере аяҡ аҫтына сепрәк ише алына. Бысраҡ аяҡтарын өртәләр ҙә үтәләр. өртәләр ҙә үтәләр. Яратышып өйләнеш әң, ҡушыл аң, ҡартаймыш көн, бәлки, икенсерәктер, йүнлерәктер. Ғүмәр унын белмәй, татып ҡараманы, үҙ ғүмерен дыуамал йәшлек хата ының әсе емешен ашап үткәрҙе. Теге саҡта, чечен егет беренсе тапҡыр кейәү ҡоймағын бөкләгән көндө, хыянатсы Хәнифәгә үс итеп, инде йәше үтеп барыусы күрше ҡыҙын, клубтан ҡайтышлай, өйҙәренә алды ла керҙе. Ҡарышманы ла бит, исма ам, Мәҙинә.

– Әсәй, килен кәрәк, тей инең, бына иңә, канса-канис, бер килен!

Ә үҙе, инде ҡартайған, бөкрәйгән әсә е ҡайҙа баҫырға белмәй ҡаушап килен көйләгәндә, мейес башында “бейеп” ултырған бал балын сүмес менән генә сүмерҙе лә – сығып китте. Туп-тура Кәркәгә! Ни ҡалған унда? Ул саҡта Ғүмәр үҙенең ни эшләгәнен, ни ҡылғанын белер дәрәжәлә түгел ине шул: алдаҡсы Хәнифәнән нисек тә үс ала ы, уны аҡыртып илата ы: "Эй-й, Ғүмәркәйем, мин яңлышҡанмын, инеке генә булайымсы", – тип тилмертә е, тилмертә е лә: " а, беҙкәйҙәргә ҡыҙ бөткәнме ни", – тип эре генә "серт" итеп бер ситкә төкөрөп кенә китке е килгәйне. Шулай итмә ә, Ғүмәр кешелек исемлегенән төшөп ҡалыр, күктәге йондоҙҙар үнер, Ер шары күсәренән ысҡынып, йә әннәмгә осор ымаҡ ине. Бөттө донъя!

Ә кил ә – асыуына, ғәрлегенә быуылып Кәркәгә килеп ет ә – бында хәлдә-әр: Хәнифәгә күҙ атып йөрөп тә ҡыҙҙан мәхрүм ҡалған егеттәр, баштарына ҡайғы төшкәс дуҫлашып, ҡосаҡлашып, кейәү ҡуйынында ятҡан Хәнифәгә нисек тә ҡаҙалырға, уны үкендерергә, мендәрҙәрен йәшкә мандырырға теләгәндәй, инде уттары үнгән кейәүле йорт тура ынан әле тегеләй, әле былай йырлайҙар ҙа үтәләр, йырлайҙар ҙа үтәләр.

*Алмағасы ҡырҙарҙа,*
*Парлап яҡшы йырларға.*
*Ете ятты йәр итергә*
*Сурт та ҡушмай ҡыҙҙарға...*
*Эй, алма бит, алма бит,*
*Алма биттәр ҡала бит.*
*Алма биттәр ҡалмаҫ ине,*
*Чечен егет ала бит...*

Урам урта ында бер аҙ тәнәфес: егеттәр, түңәрәк я ап, бер-бере енә ҡаршы сүгәләп ултыралар ҙа пыф-поф тәмәке бысҡыталар. (Элек хатта төндә лә тәмәке-

не шулай боҫоп ҡына тарталар ине. Хәҙер генә ул...) Төпсөктәр, ус төбөндәге төкрөккә баҫып бороп-бороп үндерелгәс, саратский гармун күректәре йәнә бейей, көмөш ҡыңғырауҙары йәнә зыңлай – ул зың, тәҙрә быялаларына сиртеп-сиртеп, бер генә өйҙө лә йоҡлатманы, урамға йәнә бахыр егеттәрҙең ағышы, моңо, селпәрәмә килгән хыялдарының ҡыйпылсыҡтары ибелә. өйгәндәре менән саҡ ҡына үсләшеп, әҙ генә дошман да күреп, әммә ләкин барыбер өҙөлөп- өйөп хушлаша улар.

*Ашайым алма, ашайым хөрмә,*
*Ашайым сейәләрен дә.*
*Үҙен түгел, өймәм уның*
*Фамилияларын да.*
*Ана, килә автомобиль,*
*Тейәгәндәр көнбағыш.*
*Йәр өҫтөнә йәр өйҙөң –*
*Был ниндәй привычка?*

Ҡасандыр күҙ төбөнә "йондоҙ ҡундырып" ебәргән егетте ҡулбашынан "э " тип ҡосаҡлап, бәхет еҙ "бажалар"ы сафына Ғүмәр ҙә баҫты, күлдәк иҙеүен төймәләрен төбө-тамыры менән шытырлатып асып ебәрҙе. Тауышы шәп Ғүмәрҙең, уны ғүмер баҡый "Йырсы Ғүмәр" тинеләр.

*Беҙҙең илдәр туғай-туғай,*
*Бер туғайҙа беҙ, буғай.*
*Беҙҙең хәлдәр еҙҙә бул а,*
*еҙ ҙә булыр ыҙ шулай.*
*андуғасым, ҡаралған ың,*
*ыуҙарға кереп ҡойон.*
*Сәсәгенән айырылған*
*Гөл кеүек булдым бөгөн...*

...Оҙаҡ моңландылар "бажайҙар" ул төндө. Ҡарлыға башлаған тауыштары менән, бәлки, таңды ла аттырырҙар ине – эске аҡ күлдәк-ыштандан ғына Хәнифәнең ата ы, Сәрүәретдин ағайҙары, ҡапҡа төбөнә сығып баҫма а!

– Йә, егеттәр, етәрҙер... Ни хәл итә ең – алманы ғына бүлгеләп була. Тәҡдирҙер. Таралышайыҡ, булма а.

Сабыр ғына, көр өнөп шулай тине.

Саратскийҙың күреге "дыҡ" итеп йыйылды, егеттәр, Хәнифәнең ата ы менән (әйтер ең дә, ҡыҙҙың үҙе менән инде) ҡул биреп: "Ғәйепләштән булма ын", – тип аубуллаштылар ҙа әр кем үҙ яғына таралышты.

Ҡапҡа төбөндә бер Ғүмәр генә ҡалды:

– Йә, балам, бар, ҡайт! ин дә бер асыҡ ауыҙ булдың...

Ошо бер үҙгә ни ҡәҙәр мәғәнә алынды...

Шыҡ ыҙ, күңел еҙ, күңел өшөткөс Кәркә ауылында, дөм ҡараңғылыҡта чечен кейәү йылыла ғына, йомшаҡта ғына, наҙҙа ғына йоҡлап ҡалды. Бәлки, йоҡламағандыр ҙа...

Әсә е менән күрше ҡыҙы Мәҙинә, иңгә-иң терәшеп, ни уйларға, ни ҡылырға аптырап, күтәрмәлә Ғүмәрҙең ҡайтыуын көтөп ултыралар ине.

...Кәркәлә үткәргән уңғы, ағышлы төнө өсөн Ғүмәр ғүмер баҡый битәр ишетте. Төптән уйла аң, Ғүмәрҙең ул саҡтағы ҡыланышы бер ипкә лә ыярлыҡ булмаған. Хәнифәнең кейәү эйәртеп ҡайтҡанын ишеткән көндө ул үҙ-үҙен белештерер, ҡулда тотор хәлдә түгел ине шул.

Үткән – бөткән булырға тейеш. Юҡ, Мәҙинә аман онотмай, яйы сыҡҡан айын төрттөрә, ауыҙын йыра, ҡанатҡансы йөрәккә ҡаҙай.

Хәнифәнең ҡайтып төшөү хәбәрен дә ул әйтте.

– и-и, Кәркә ҡыҙы ҡайтҡан, ти бит! Япа-яңғыҙ... Зерә бөткән, тиҙәр, – тине, тимер тештәрен ялтыратып.

Бөттө, үлде, тағы әллә ниҙәр эшләне Ғүмәр: Хәнифә ҡайтҡан! Ләкин эске халәтен йөҙөнә, үҙенә сығарманы – ир булып йәшәү дәүерендә ул быға бик яҡшы өйрәнгәйне.

– Ҡайт а уң. Элек тә ҡунаҡ булып китә ине.

– Китмәй, ти, шул бына. Гүпсим ҡайтҡан, ти. Әллә инде арыҡ көтөүен көтә башлаған. Күрше бригадтан өй биргәндәр. Шул берәҙәккә, чечен ҡалдығына.

Ғүмәр ҡатынына шундай итеп ҡараны, шундай ҡараны: ул ҡараш башҡа килеп төшкән таш кеүек ауыр, ауырттырғыс, ут кеүек көйҙөргөс, үк еп илаған баланың күҙ йәше кеүек ҡыҙғаныс ине. Мәҙинә: "Ярай, бөттө, бөттө", – тип мығырҙана-мығырҙана тиҙерәк өйгә кереп китеү яғын ҡараны.

Ғүмәр ихата урта ында ҡатып ҡалды: Хәнифә ҡайтҡан! Ниңә ҡайтҡан ул, йәрәхәтле йәшлекте иҫкә төшөрөп?! Инде онотолған кеүек ине. Күңеленә бер йыр килде:

*Яңғыҙ ҡайын булмай, тиҙәр,*
*Була торғандыр инде лә:*
*әр кемдең дә бер хәсрәте*
*Була торғандыр инде...*

"Ниңә япа-яңғыҙ. Хәйер, балалары, үҫеп буйға еткәс, кеме ҡайҙа таралғандыр ҙа, ти, ә янында Мөхәммәт булырға тейеш бит?! Гел генә парлашып ҡайталар ине, чечен кейәү кәләшен тыуған тупрағына яңғыҙ ғына аяҡ баҫтырманы. Әллә көнләште, әллә инде яратыуы шулай көслө ине. Яратҡандыр, дүрт бала ата ы булғас та Кәркә урамында Хәнифә ен етәкләп, уның күҙҙәренә бағып ҡына юҡка йөрөмәгәндер".

Хәнифәнең ҡайтыу хәбәре Ғүмәрҙең йоҡо он тамам ҡасырҙы. Ул борғаланып, көр өнөп ята-ята ла, түҙеме бөткәс, ихатаға сығып китә. Өй стена ына арҡа ын терәп сүгәләп ултыра. Тәмәке ҡабыҙа... Ана, Етегән йондоҙ. Йәш сағында, шаярып, Хәнифә уны Ғүмәргә бүләк иткәйне. Көлөп, шулай була ын белгәндәй: "Мине ағынғанда шуға ҡарар ың!" – тигәйне. Ғүмәргә ғүмер баҡый шунда уларҙың ҡараштары осрашалыр кеүек тойолдо. Үҙ йондоҙона ҡарап тор а, күңелендәге а-ғыш-хәсрәте еңеләйә ине. Шулай йәшәлде. Инде Ғүмәр йәшендә йәшлектең хыялый яландарын гиҙеү, үткәнде, инде кире ҡайтмаҫ саҡтарҙы ағыныу, уфтаныу, бәлки, килешмәйҙер, ләкин, ни хәл итмәк кәрәк – онота алманы Хәнифәне. Йәшерәк сағында ҡатынын иркәләгәндә лә: "Хәнифә бит был!" – тип үҙ-үҙен алдарға, ышандырырға тырыша ине...

Шундай хәлдәр. Тимәк, ҡайтҡан. Бер күрә е ине. Ғүмәр Хәнифә йәшәгән ауылға бармаҡсы булды, мотоциклын әллә нисә ҡабыҙып, әллә нисә үндерҙе. Йәш-елкенсәк кеүек антыйланып йөрөү уның йәшендәге кешегә ис кенә лә килешеп бөтмәй. Ниндәйҙер көс уны ихатаға бәйләп тота ине.

... уңғы арала ҡайҙа барып төртөләргә белмәй йөрөгән Ғүмәргә Мәҙинә, иртән сәй эсеп ултырғанда, өҙҙөрөп былай тине:

– ин, ҡарт, эт нейе ымаҡ әлкелдәп йөрөмә әле – бар, бер ураштырып ҡайт! Кәтмәнгә аплыҡ апҡайт! Бәрәңге күмергә ваҡыт. Сәтләүек ағасы апҡа бик ипле, еңел була торғайны. Мунса яғып торам – биленде сабырға кесерткән дә апҡайт! Бар, бар, күҙ көйөгө булып торма! Ашарыңа ал. Ишек төбөндә, сумка менән. Көн оҙон.

Ғүмәр ҡуйы, өтлө сәйен эсеп тә бөтөрмәне – юлға йыйынды. Эйе, аплыҡ кәрәк ул. ап ыҙ булмай. епертке лә ындырыр...

Эй, донъя! Был донъяларҙа ирҙәрҙән дә ахмағыраҡ, ирҙәрҙән дә бер ҡатлыраҡ, ирҙәрҙән дә йәм еҙерәк әм уларҙан күндәмерәк тағы ниндәй йән эйә е бар икән?! Китте. Нисәмә көн ихатанан сыға алмай ыҙаланған Ғүмәр, ҡатыны ҡушҡас, имеш, аплыҡҡа китте – ашыҡмай ғына, бик газ бирмәй генә, үҙ ҡәҙерен үҙе белеп кенә: " ай, бөтмәç инде был ҡатын-ҡыҙ эше", – тип мығырҙана-мығырҙана ғына сығып китте ихатанан.

әм улға боролдо. Ете өй үткәс – унға, тыҡрыҡҡа борола ы. Унан уң баçыуҙы ҡап урталай бүлеп уҙылған юл – шул Кәркәгә алып бара. Ҡасандыр туҡ, хөр тормошло, Хәнифәле, хәҙер инде зат ыҙ үлән баçҡан ауыл урынына барып төртөлә ул юл. өйгәненең ҡул йылы ынан да иçереп, хыялдарға сумып елкенә-елкенә атлаған йәшлек юлы! Ҡыштарын, бурандарҙа ла аҙашмаç өсөн, әр бере енең башына алам көлтә е бәйләнеп, оҙон-оҙон таяҡтар ҡаҙала ине: маяҡ. Ғәҙәттә, уны Сәрүәретдин ағай теҙеп сыға. Йыл айын теүәл алтмыш өс таяҡ – саҡрым айын егерме иçәбенән. Ул саҡта, ниндәй генә зә әр бурандар ҡуп а ла, был юлдан ситкә тайпылыусы, аҙашыусы булманы. Хәҙер маяҡ ҡаҙалыу түгел, ҡыштарын Кәркә юлына сысҡан эҙе лә төшмәй. Нишлә ен кеше шар асыҡ тау битләүенә барып.

Ә йәйҙәрен! Ә йәйҙәрен бар кеше Кәркә юлында. Сөнки Кәркә янында ғына иң тәмле, иң эре еләк өлгөрә, шул яҡта ғына хуш еçле мәтрүшкәләр сабып алмалы булып үçә, шул яҡтан сабып киптерелгән бесәнде мал ҡыш көнө бигерәк яратып ашай, әм Кәркәнең түңәрәк күл аҙлығында ғына бил ыҙлауын баçа торған сихәтле ләм бар. әм унының инеше төбөндәге уйырташ кеүек таш яҡын-тирәлә юҡ инде. Ул ташты мунса мейесенә ал аңмы! ал аңмы! Унының ҡоро, шифалы парын шул таштарға эçе ипкән кеше генә белә. Ғүмәр күп ташыны ул уйырташтарҙы, йыл айын алыштырып торҙо. Кәркә ҡыҙының йылы ҡосағында йәшәү бәхете тәтемә ә лә, таштарының ҡыҙыуын мунса айын сығарыпмы-сығарҙы – шартлатып эçе алғас таш өçтөндә чечен кейәү икергеләй, бәргеләнә, бейей кеүек тойолдо уға.

Тауҙы үткәс юл улға, соҡорға, борола әм бер аҙҙан алтмышынсы йылдарҙа ултыртылған, инде хайран үçкән ҡатнаш ағаслыҡҡа барып керә. Юл тигеҙ, таҡыр бул а ла, Ғүмәр мотоциклын артыҡ сыбыртҡыламаны, тирә-яғына ҡарана-ҡарана яй ғына барҙы. Бында уға әр ағас, аяҡ аçтында сереп ятҡан ботаҡтарға ҡәҙәр таныш, күңеленә яҡын ине. Донъяның иң хозур, тыныс, иң моң оу мөйөшө ҡайҙа, тип ора алар, Ғүмәр: "Кәркә ерендә!" – тип әйтер ине. Йөрәгенә яҡын ошо ерҙең именлегенә, бөтөнлөгөнә, гүзәллегенә кемдер ҡурҡыныс яна а, ул, уйлап та тормай, яуға күтәрелер, кәрәк икән – йәнен фиҙа ҡылыр, әм күк йөҙөндә йәнә бер йондоҙ ҡабыныр...

Ғүмәрҙең ила и уйҙарын арыҡ тәкә е бүлде: ул ҡыуаҡлыҡтан килеп сыҡты ла, артына ҡарап бәэлдәп алғас, ебе өҙәлгән йәйә кеүек, юлға ташланды. Мәхшәр ҡупты – артында көтөү икән – арыҡтар, башлыҡтарынан ҡалышырға теләмәйсә, юлға тулдылар. Ғүмәр туҡталды. Мотоциклын үндерҙе – арыҡ көтөүенә ярып кереүҙән файҙа юҡ, улар барыбер юл бирмәйәсәк.

уңғы арыҡ артынан: " и-и, мәхлүктәр, матайҙан шулай ҡурҡалармы ни", – тип өйләнә- өйләнә бер ҡатын килеп сыҡты. Ябыҡ, буй ыу. Тар ҡайыш менән билен өҙә яҙып быуып ҡуйған. Ҡара күлдәгенең оҙон итәге ситектәренең йөҙөнә тиклем төшөп тора. Башында – яулыҡ, уны ы ла ҡаранан. Ғүмәр сәйер енеп ҡалды – кем булыр был?

Ҡатын, йөҙө менән боролоп, мотоцикл яғына ҡул елтәне:

– Үт әгеҙ ҙә була! Сығып бөттөләр, ахыры ы.

Хәнифә! Хәнифә лә ә! Ана, бит остары хас та элеккесә уймаҡланып тора, ләкин

ул хәҙер яраға оҡшаған йыйырсыҡҡа тартым.

Көтөлмәгән осрашыуҙан Ғүмәрҙең зи ене таралды, ҡойолдо ла төштө. Ә Хәнифә ис ҡаушаманы, әйтер ең, улар кисә генә айырылышҡандар.

– Ә-ә, ин икән ең, Ғүмәр. Иҫәнме? Ҡайҙа барыш?

Уның тауышы үлпән, хәл еҙ, был донъяға битараф, ләкин ҡарашы – ындай ҡарашты Ғүмәрҙең быға ҡәҙәр күргәне булманы – үткер, ғорур, ләкин моң оу ине. Ундай ауыр моң ҡайғыларҙы күп күргән күҙҙәрҙә генә булыусан.

– Ҡатынға ап кәрәк, аплыҡҡа тип килгәйнем. Ә ин, Хәнифә, ҡайттыңмы ни? Ниңә ҡайттың?

Хәнифә:

– Икмәк алырҙай мейестәр емерелеп бөттө унда. Бар нәрҫә бөттө... – тине, көр өнөп.

– Балаларың, ирең ҡайҙа? Гел бергә-бергә ҡайта инегеҙ...

Хәнифәнең кәүҙә е күҙгә күренеп дерелдәп ҡуйҙы, ығылды – ләкин ул үҙен бик тиҙ ҡулға алды.

– Улдарым да, Мөхәммәтем дә ҡайтты. Ҡайтмай ни, улар Кәркә яғын бик тә ярата ине. Минең менән ҡайттылар. Мин улар менән төндәрен уңғы йондоҙ үнгәнсә өйләшеп сығам. Яңғыҙ түгел мин. Күңел бушатыр йондоҙҙарым бар минең! Ярай, китәйем әле, йә арыҡтарым таралып бөтәр. Бер тарал а – илде генә түгел, көтөүҙе лә йыйыуы ҡыйын... Балаларым... Мина шартлап әләк булдылар. Мөхәммәтем уғышта башын алды. Улар хәҙер миңә йондоҙ булды.

Хәнифә китте...

Нисәмә йылдар үҙенең хыялый тормошонда – күктәге йондоҙҙар ара ында йәшәгән, әлеге осрашыуҙан зи ене таралған, тетрәнгән Ғүмәр кескенә бәхет-шатлыҡтары ара ында күтәрә алмаҫлыҡ ҡайғылары булған ысынбарлыҡҡа – Ергә төштө.

***

Ҡасандыр илде икмәкле иткән, ә хәҙер инде тапалған көтөүлеккә әйләнгән Кәркә баҫыуҙарында, чечен атай балалары менән өйҙән өйгә кереп хәл-әхүәл белешеп йөрөгән ауыл урынында, дегәнәккә батҡан йонсоу көтөү йөрөй. Көн эҫе, бар тараф тып-тын, бөткән ауылдың ташландыҡ зыяратындағы таштар рәшә тулҡынында еңелсә генә тибрәлә. Тирә-яҡта бер йән эйә е күренмәй. Кәркә ерендә яҡты донъяларҙың бар бәхетен, шатлығын, йәшәүҙәрҙең йәмен Кавказ тауҙарының таштары аҫтында ҡалдырып, тыуған еренә ҡайтып йығылған, ыйынған, ҡайғыларҙан кипкән Хәнифә генә. Ул, сабыйҙарын, ғүмерлеккә йәр иткән чечен Мөхәммәттең аяҡ эҙҙәрен табырға теләгәндәй, ҡара яулыҡ бәйләгән башын эйеп атлай ҙа атлай. Атлай ҙа атлай...

Күп ҡалманы инде: офоҡтағы ҡара-күгелйем урман артынан ҡояш төшөп киткәс, күк йөҙөндә аллы-артлы йондоҙҙар ҡабыныр, үҙе шатлыҡлы, үҙе аҡрып-аҡрып иларҙай ҡайғы-хәсрәтле миҙгелдәр етергә күп ҡалманы инде.



Хәйҙәр
ТАПАҠОВ

# ТӨШТӘРЕМӘ КЕРМӘ...

## ХИКӘЙӘ

1

Поезд тәгәрмәстәре тигеҙ туҡылдап алға елә. Купелағы күршеләре – әбей менән бабай – урын йәйеп әллә ҡасан йоҡларға ятты. Ҡунаҡтан ҡайтып киләләр, буғай. Кейгән кейемдәре, фиғел-тороштары, мин ауылдыҡы, тип әллә ҡайҙан ҡысҡырып тора. Бабай пинжәгенә орден-миҙалдарын таҡҡан, әбейҙең өҫтөндә лә киң итәкле күлдәк, башына эре биҙәк төшкән сәскәле яулыҡ ябынған. Уларҙы оҙатырға бөхтә кейенгән, мыҡты кәүҙәле, ялпаҡ битле ҡуңыр йөҙлө ир кеше әм ҡыҫҡа итеп киҫтерелгән ары сәсле, ылыу, ыҫпай ҡатын инделәр. Баш ҡағып ҡына иҫәнләштеләр ҙә әбей менән ҡарт ҡаршы ынан урын алып өҙөк-йыртыҡ, үҙҙәре генә аңлаған әңгәмәгә күстеләр. Дөрөҫөрәге, ир кеше өйләште, ҡатын ситтәрәк өндәшмәй ултырҙы. Ҡарттар ялпаҡ биттең ата ы-әсә е икәнлеге үҙ еҙ аңлашыл а ла, был нишләптер русса ғына үҙ ҡуша, тегеләре кемуҙарҙан башҡортса яуаплай. Оҙаҡ тотҡарланманы оҙатыусылар, ир: «Пап, мам, по приезду, на вокзале вас встретят, я звонил»,– тине лә ата ына ҡулын бирҙе, әсә ен ҡармап-ҡосаҡлап арҡа ынан өйҙө, шунан сығыу яғына төмрәңләне. ары сәс ҡайырылып: «До свидания», — тип ҡуйы тушь яғылған керпектәрен елпеп хушлашыуҙан ары уҙманы. Былар киткәс, ҡарт ялбыр ҡаштарын юлдашы яғына йүнәлтеп аҡланғандай мөңгөрләнә: « ин дә Өфөгәлер, ҡыҙым...Ярай...Тимәк, тәүлек ярым бергәләп туҡылдарға...Инәйең менән төпсөктөң хәлен белергә килгәйнек тә... Былар – беҙҙекеләр... Малайҙы әйтәм, уҡырға килгәйне — бында ҡалды. Ҡатыны мәрйә. Ир – баш, ҡатын – муйын, тигән әйтем бар бит әле, күрә ең, тап килмәй ата-олатайҙарҙың ырым- ынамышы, баштың муйынға эйәреп урыҫса упалауы...» Әбей төйөнсөктәренән ый-ниғмәттәрен сығарып өйөп ташланы әм, әр ризыҡты тәғәйен ергә урынлаштырғас, ихласлап табынға әйҙүкләне. Фәриҙә поезға ултырырҙан алда ғына ашханала ҡапҡылап алыуына ылтан а ла, былар ҡуйырҙан-ҡуймағастары, яҡынлауҙан башҡа сара ы ҡалманы.

– Әйҙәгеҙ, танышайыҡ, мин — Гөлбаныу инәйең, олатайыңдың исеме Фәтхи.

– Ә мин Фәриҙә булам.

– Йомош менән йөрөй өңдөр инде, ҡыҙым?

---

*Хәйҙәр Тапаҡов Сибай ҡала ында йәшәй, Башҡортостан Яҙыусылар берлегенең төбәк ойошма ын етәкләй. Республиканың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.*

– Эйе, командировканан ҡайтыуым... – Яуап ышаныс ыҙ ишетелде.

– Ҡасан килгәйнең уң? – Белергә теләгәненең нәгеҙен* асыҡламай ҡуямы инде ҡатын-ҡыҙ, әбей ҙә яҙып ябынған яулығын төҙәтештергеләп, нуры ҡайтҡан ҙур күҙҙәрен таҫрайтты.

– инә әйтәм, сәйең ыуынып китте түгелме? – Ҡарт әбейен әҙәпле бүлдерҙе лә ҡунағын ҡыҫтаны. – Барына етеш, ҡыҙым. ый — бынан, ҡаланан алғандары инде...

Былар ары төпсөнмәнеләр, шулай ҙа танышыу-белешеүгә тартым өйләшеү дауам итте. Бабай шул ултырыуында ҡупшы аҡал-мыйығын дәрәжәле ыпырғылай, әбейенең бытылдауын ара-тирә бүлдереп ҡуя, кәрәк урында аҙашыңҡырап киткән үҙ осон ялғай. Теге е ни, ыуы йырылған быуа ише, хәбәрҙе алдыра ғына: ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә быларҙы оҙата килгән улдарының эш урынын да, өс бүлмәле фатирҙа йәшәүҙәрен дә, күп йылдар сабый ыҙ зарығыуҙарын да, хатта ауылдағы ҡаҙҙарының баҫырға ятып, ыйырҙарының еленләүенә ҡәҙәр белергә өлгөрҙө.

Тағы шуға иғтибар итте: был икәү шул тиклем дә пар килгән, мөләйем әбей, олпат бабай тышҡы ҡиәфәттәре менән генә түгел, үҙҙәрен тотошо менән дә бербере ен тулыландыралар, тышҡы тап килеү эске бөтөнлөккә барып ялғана төҫлө. Былар әйберҙәренән тыш ситлек менән ниндәйҙер ҡош та тотоп ингәйнеләр. Гөлбаныу өҫкө әндерәгә урынлаштырылған нәмәгә ҡарап аңлатма биреүҙе кәрәк тапты:

– Килен бүләк итте... Хаҡы ла көнбайыш тәңкә е менән иҫәпләнә икән, беҙҙең аҡсаға әүерелдер әң, үтә лә ҡыйбат, ти, ғибрәт... Бутты өйҙә тауыҡ-маҙар бөткән...

Бүләк ҡарттарҙың күңеленә хуш килмәгәнлеге иҙелә.

Ярым ҡараңғы вагон эсенә бәләкәй станцияларҙан йә ҡаршы яҡҡа сапҡан поездарҙан атылған яҡтылыҡ кинәт бәреп инә лә нур телдәре купе эсен ҡабаланҡар алан ялай алып юҡҡа сыға. Шул мәл теге ситлектәге ҡуналҡа ында бәүелеп ойоған ҡоштоң да күҙҙәре бер аҙға ғына баҙлап китә. Йоҡламай, уның да күңеле болоҡ оу, урынында түгел, тимәк.

Стенаға арҡа ын терәп тубыҡтарын ҡосаҡлаған Фәриҙә ҡорғаны асыҡ тәҙрә аша ҡараңғылыҡҡа төбәлде.

Бар донъя төн юрғанына уранып иҙерәй. Ҡараңғыла йоҡлау тере заттың быуаттар буйы аңына еңгән ғәҙәте. Шулай кәрәк, шулай тейеш. Көн – эш, төн – йоҡооҙҙар өсөн хәсрәт, ҡылған эшеңә ба а биреү мәле. Уның да бит күңеле болоҡ оу, булмышын ауыр уйҙар баҫҡан, хәсрәттән йәне өҙгөләнә. Поезд кире өйөнә елдерә. Ә бит ул ҡайтмаҫ өсөн киткәйне түгелме? Үҙеңдән ҡасып булмай икән дә ба а... Булмай!..

Йоҡлай алмай ыҙаланған Гөлбаныу ҡарсыҡ түшәгендә ауыр, йәп еҙ әйләнде лә өҫтә ятҡан ҡартына ярым бышылдап үҙ ҡатты:

—Ҡарт, йоҡламай ындыр ҙа?

– Йоҡлайым. – Риза ыҙ мығырҙау ишетелде. – ин дә башҡаларға ял бир!

– Алаҡайҙы әйтәм, беҙ китерҙән әүәл йыуынын упсым йоҡарткайны. Быҙаулап ҡуйма ын, тим.

– Улай а машинисҡа барып әйт, поезды ашыҡтыр ын.

– Эй, ила ым, ғүмерең буйы ере ҡыландың, кәңәш-төңәшкә эшкинмәнең.

– Ете төн урта ында ниндәй кәңәш ул тағы, йоҡла! – Бабай бышылдап яуапла а ла, тауышы ҡырыҫ ҡына.

– инә ҡал а, донъяндың тотош аҫты өҫкә кил ә лә, иҫең китмәҫ. Бибиғәйшә ту-

*Нәгеҙ – ысын мәғәнә е, дөрөҫө.

ра ында үҙ башла ам, шундуҡ элеп алыр инең, биллә и...

– Илле йыл элекке тарихты аҡтарма инде, бытбылдыҡ!

– Аҡтармаҫҡа ни, үткәндә теге, арғы осҡа ҡунаҡҡа китешләй, беҙҙең эргәнән аллы-гөллө кейенеп ҡыйпаңлата баҫып үтеп киткән булды...

– Етте, йоҡла!

– Йоҡланым, төштәр күрә башланым! – Әбей үпкәләгәндәй тынып ҡалды ла үҙ алдына өйләнде. – Баҫырға ятҡан Ҡупшыны әйтәм, Бибиғәйшәгә оҡшап ҡыйпандаҡ, урынында ултырып сыҙамай, йоморҡаларын ыуындырып сығып китмә ен, тим. Былай Зәлифә киленгә ҡат-ҡат әйткәйнем дә ул, ҡолағына эл ә...

Йоҡо аралаш аташыуға тартым әрепләшеү осланды. Тағы тынлыҡ урынлашты. Бары вагон тәгәрмәстәре генә ҡорос рельстарҙы бер өҙлөк өҙ сүкей: «Тғыр... туҡ...Тғыр...туҡ...» Әйтер ең дә, яуап ыҙ ораўҙар өҙлөк өҙ йөрәген ҡаға... «Яуу-апп ююҡҡ!.. Яуу-а-апп ю-юҡ-ҡҡ!..»

«Гөлбаныу ҡарсыҡ менән Фәтхи бабай, өлкән булыуҙарына ҡарамаҫтан, бәхетле, үҙ донъяларын ҡайғыртып, көндәлек мәшәкәттәрҙән йәм-тәм табып йәшәй... Ә ул кем уң? Йәшәр ерен тапмай, бәхетен юғалтып, оянан-ояға осҡан кәкүк... Әле бына бер ғаилә енән ҡасып, икенсе енә ҡайтып барыуы. Уны нисек ҡаршыларҙар? Кәрим менән Ғәзим вокзалға төшөрмө? Ғәжәп, уңғы сиккә еткәндә ире ин дә мин өйләште. Ҡайт, көтәбеҙ, ти. Әйтер ең, ял йортона барған да шунан ҡайтып килеүе...”

Ашығып сапҡан поезд ымаҡ, хәтер йомғағы ары үтелде.

2

ЗАГС майҙансығында еңел машиналар теҙелгән, байрамса кейенгән халыҡ мыжғый. әммә е никах тантана ына йыйылған. Таныштары, дуҫтары шул тиклем дә күп микән ни? Ҡай ыларын тәүләп күреүе, танышлыҡ кимәлендә генә төҫмөрләгәндәре лә етерлек. Ә тегеләр күптәнге яҡын дуҫтарҙай йүгереп килә алып ҡосаҡтарына ҡыҫа, гөлләмәләр бүләк итә. Ә Кәримде ҡара! Нисегерәк еренә еткереп ҡуҫтарланған бит әле: өҫтөндә аҡ ыл костюм, ҡыҙыл күлдәк, муйынында ҡарағусҡыл галстук. Сәстәре лә актерҙарҙыҡылай ҡабартып лакка ҡатырылған. Ҡатынҡыҙға тартым ылыу йөҙ айҙай балҡый, йылмая, уңға- улға боролоп әр сәләмгә яуаплай, бере е лә иғтибарҙан ситтә ҡалмай. Премьеранан уң сәхнәгә алҡыштарға ирәйеп баш эйергә сыҡҡан артист тейер ең! Ҡатын-ҡыҙҙың күбе е, хатта ирҙәренә эйәреп килгәндәре, уларға оҡланыу аша көнләшеп ҡарай. «Әйҙә көнләш ендәр, бөгөндән ошо сибәр егет уның ире буласаҡ...»

Майҙанды яңғыратып Мендельсон маршы уйнап ебәргәйне, шуны ғына көткән ҡунаҡтар ҡырғараҡ тартылды. Халыҡ теҙелгән уҡмаҡ осонда торҙо ла ҡалды. Дәртле көй аҫтында асыҡ ишекле залға үттеләр. Тантаналы мәл. Яурыны аша алыу таҫма тартҡан тулы кәүҙәле, сал сәсле ҡатын трибуна артына баҫып ятлап бөткән нотоғон өйләне лә рәсми йола ҡанунын аҡлап мөрәжәғәт итте:

– Фәриҙә Сәғитова, еҙ үҙ теләгегеҙ менән Кәрим Юлдашбаевҡа...

Тулҡынланыуҙан тыны ҡыҫылды, күҙ алдары ҡараңғыланды. Йөрәген өшәндергес уй ярып үтте: «Нимә эшләйем? Ниндәй аҙымға барам! Мин бит уны яратмайым! Яратмаған кеше менән нисек йәшәрмен? Үҙемде лә, буласаҡ иремде лә алдайым түгелме? Былай ярамай, хәҙер үк баш тартырға кәрәк!..»

Тынсыу ауаны күкрәктәре тулғансы уланы ла ауыҙын асып теге яуап көткән ҡатынға текәлде. Ни ғиллә, теле аңҡауына йәбешкән, ауыҙынан үҙ генә түгел, өн дә сығыра алмай. Кибеп барған тамағын ҡырғандай итте.

Никахты теркәүсе, көтә биргәс, тынлыҡты боҙоп, ораўын ҡабатланы:

– Фәриҙә Сәғитова, еҙ...

Ҡунаҡтар ара ынан сәрелдәк тауыш ишетелде:

— Шундай шәп кейәүҙе эләктергәс, шатлығынан телдән ҡалған ул!

Шаяртыу тоҙ оҙораҡ килеп сыҡ а ла, геүелдәтеп көлөп ебәрҙеләр. Ниндәйҙер ир яҡлап маташты:

– Ә кәләше уң, кәләше, ыу ыҙ ҡалаҡка алып йотмалы! Ике е лә бынамын тигән!

«Юҡ, былай ярамай... Бөтә е лә хәл ителгән, артҡа сигенерлек түгел... Ошоғаса өҙә уғырға ине... Хәҙер уң инде, уң!..»

Барлыҡ ихтыярын туплап ике генә үҙ ығып сығарҙы:

– Эйе, ризамын...

Гөрләтеп ҡул сабылды, кеме елер «ура» ҡысҡырҙы, шампан шешәләре шартлап атылды.

– Үҙ ба а ын белә шул кәләше, белә. Ризалығын бирмәй күпме зарыҡтырҙы! – Баяғы мәрәкәсел ир уны күтәрмәләүен белде.

Туй ҡыҙғандан-ҡыҙа. Ҡаты үксәләр ресторан иҙәнен төйөп бейей, тирләгән ҡатын-ҡыҙ ҡыҙмаса ирҙәренә тағылып көй ыңғайына бәүелә, шунан күңел асыусылар бер аҙ ҡапҡылап алалар ҙа ауыҙҙарына ниндәй көй килә шуны уҙырға керешәләр, йәш-елкенсәк биләгән өҫтәлдәр тирә ендәге шау-шыу хаҡында әйтә е лә түгел. «Нимәгә шул ҡәҙәре ҡыуаналар? Шашып байрам итер өсөн ниндәй сәбәп бар уң? Унының бәхет еҙ тормошоноң башы бит был. Хәйер, унда кемдең ни эше, әммә е ашарға-эсергә килгән, уларға туйға алғандың хаҡын сығарырға кәрәк». Кәрим яғына ирпелде. Ә ул күктең етенсе ҡатында йөҙә! Шулай булмай тағы, туй башланғас та ата ы, үҙ алып, дәрәжәле баҫты ла, улы менән килененен ҡотлағандан аҙаҡ, йәштәргә ҡала үҙәгенән дүрт бүлмәле фатир бүләк итеүе хаҡында иғлан итте. Бөгөнгө шарттарҙа был иҫ киткес йомартлыҡ ине. Хәленән дә килә, мөмкинселектәре лә бар шул: билдәле трестың генераль директор урынбаҫары. Шунда уҡ баш экономист вазифа ында эшләүсе Кәримдең әйтеүенә ҡарағанда, бөгөн-иртән төп хужа кресло ына ултырыуы ихтимал. Ҡунаҡтар ҙа бере е икенсе енән ҡалышмаҫҡа тырышты. Шулай итеп, уларҙы бүләктәргә күмеп ташланылар. Институтта бергә уҡыған яҡын әхирәттәрен иҫәпкә алмағанда, уның яғынан башҡа килеүселәр юҡ. Кем генә кил ен, балалар йортонда тәрбиәләнде, әле медицина академия ының өсөнсө курсында уҡый.

Танышыуҙары көтмәгәндә әм сәйерерәк килеп сыҡты. Курсташ ҡыҙы менән ял көнө парктағы эскәмйәләрҙең бере ендә ял итәләр ине, эргәләренә ике егет килә алып етте. Йәштәргә нимә, үҙ үҙгә ялғанды, шаярып-көлөп өйләшеп алды ла киттеләр. уңынан егеттәр ҡыҙҙарҙы ятаҡтарына тиклем оҙатып ҡуйҙы. Иртәгә- ен уҡыу корпусынан сыҡ а, күтәрмәлә кисәге егеттәрҙең бере е кемделер көтөп улай-былай йөрөштөрә. Артыҡ иҫе китмәне, кисә иптәше ошо егеткә оҡшарға тырышып ҡыйшаңдай ине бит, быны ы ла килә алып еткән. Егет сығыусыны абайлағас йәнәшәләп төштө лә баҙнат ыҙ ғына үҙ башланы: «Кисә бергә ял иткәйнек...» — «Бәлки». Өҙөп яуап бирҙе лә ауалы ирпелеп, текә баҫып ары атланы. Егет аман эйәрә: йә йүнләп өйләшмәй, йә тороп ҡалмай. «Быҙау. Әсә енең бер иркә малайылыр». Иртәгә ен тағы килде егет, тағы... Уға ни ҡыҙыҡ, артынан сабыулаусы бар, ҡыуырға сәбәп табылғансы йөрө өн әйҙә, аҙаҡ ҡарар. Тәү танышҡандағы уйы юшҡа сыҡты: Кәрим ғаиләлә яңғыҙ ғына малай икән. Ҡыйыу ыҙлығына килгәндә, ул уның алдында йыш ҡына юғалып ҡал а ла, башҡа осраҡта ҡыйыу, хатта кәрәк саҡта үткер, ни ти әң дә ҡалала үҫкән. Ә Фәриҙә егеттең уға йүнәлтелгән ҡыраға ыҙ ҡылығын үҙ файҙа ына ҡайырҙы, дилбегәне ҡулына алды ла үҙ көйөнә бейетә генә.

Шаулы тантана уң ғына тамамланды. Туйға төшкән аҫҡысты тотоп фатирҙа-

рына киттеләр. Унда ингәс телдән ҡалды: фатир еренә еткереп йы азландырылып, бөтә кәрәк-яраҡтар атып алынғайны: тәҙрәләргә затлы ҡорғандар эленгән, залда йомшаҡ диван, ҡәнәфиҙәр, иҙәндә ҡабарып ятҡан келәм; ванна бүлмә ен асып ебәргәйне, ундағы элгескә йомшаҡ халат, таҫтамал элеп, тумбочка өҫтөнә шампундар, төрлө кремдар ҡуйырға ла онотмағандар. Йоҡо бүлмә е үҙе бер хан арайы инде.

— Былар...кемдеке? — тип иҫе китеп бышылданы Фәриҙә.

— инеке, шунан минеке, ҡәҙерлем... — Кәрим уны ҡосаҡлап, муйынына ирендәрен тейҙерҙе.

ыуыҭҡыстан ут алып эсте лә йоҡо бүлмә енә йүнәлде, шунан сисенеп ташлап, түшәк йәйергә керешеп китте. Бүлмәгә яҡынлаған аяҡ тауыштарын ишеткәс ҡәтғи бойорҙо:

— Инмәй тор, сисенгәнмен, үҙем саҡырырмын!

Түшәккә ятҡас, Кәрим уны үҙенә тартты ла ирендәренән, биттәренән, муйынынан шашып үбергә тотондо. Иркәләүҙәрҙән аҙға ғына аңын юйҙы, әммә унғы мәлдә мейе ен аныҡ уй ярып үтте: «Мин бит яратмайым, ҡыҙ сафлығын уға бирәйемме?..» Өҫтөнә ҡапланған ауыр кәүҙәне көслөк менән ситкә этте лә асыуын көскә йотоп бүлеп-бүлеп әйтте:

— Ғәфү ит...йәме, бөгөн түгел, иртәгә...

— Ошо көндө күпме көттөм. Беҙ бергә, тағы ни кәрәк?

— Иртәгә, тинем бит!

Арты менән боролған Фәриҙә күҙҙәрен сытырҙатып йомдо.

Иртәгә, ти ә лә, вәғәҙәләгәне иртәгә енә лә, унан ары ла, бер аҙна үткәс тә үтәлмәне. Шулай ҙа ире кәйефле күренергә тырышып йөрөп ятҡан була: йылмайып эшенә сығып китә, гөлләмә тотоп ҡайтып инә, элеккеләй яратып ҡарай, ауыҙынан сыҡҡан әр бойороҡто үтәргә әҙер. «Хужа ынан туҡмалған тоғро этме ни, өрмәй ҙә, иркәләнергә лә ҡыймай...» Улар бит рәсми рәүештә никахтарын теркәгән. Шулай булғас, ниңә тормоштарының йәмен ебәрергә? Бер яҡтан уйлап ҡара ан, был — мәғәнә еҙлек. Аҡ атҡа атланған принц килмәҫе билдәле. Ул — ир ҡатыны, донъя, йорт мәшәҡәттәрен ҡайғыртырға бурыслы. Ә өйҙә ул арҡырыны буйға шылдырып алмай. Ҙур фатирҙы көн айын ауыҙынан бер үҙе сыҡмаған хеҙмәтсе ҡатын килеп күләгәләй тауыш-тын ыҙ ҡыймылдап йыйыштыра ла шыпырт ҡына сығып та ыҙа. Йәйге каникулда ял иткәнгә уң ғына йоҡонан тора ла күбектәре ҡабарған ваннала рәхәтләнә, шунан сәғәттәр буйы көҙгө алдында биҙәнгәндән аҙаҡ ҡала урамдарын, магазиндарҙы ҡыҙырырға сығып китә, ҡайтҡас, уйҙайып төшөп китап уҡырға керешә. Ирен шулай диванда йәйелгән килеш ҡаршы ала. Теге е риза ыҙ үҙ әйт әсе, йөҙөн боҙ асы! Бер аҙҙан был тормош уны ялҡытты, ялҡытыу ғына түгел, игеҙәктәй оҡшаш көндәр теңкә енә тейә башланы. Күпме былай ҡыялырға мөмкин, шатлыҡтар күңелен елкендермәй, көйөнөстәр ҙә ер өҫтөнән ҡабалан йүгергән болот күләгә еләй генә. Элек, ҡыҙ сағында, аҡса етмәү, әр тиненде иҫәпләп тотоу үҙенә күрә кинәнес булған икән дә ба а! Маҡсат ыҙ урамдар ҡыҙыра, үҙе осраған яңғыҙ егеттәрҙе күҙләп уҙа. Ул эҙләгән, көткән берҙән-бере ошо түгелме? Шулай битараф ҡиәфәттә атлай, ә эсендә үҙенә ҡарата арыуы ҡайнай.

Ҡай ылай аҙғын, боҙоҡ йәнле, ирле көйө башҡаларға күҙ ала. Оят. Ни айәт, бер көн яңғыҙы ҡалғас, магазиндарҙан кәрәкле аҙыҡ-түлек атып алып ҡайтып, ихласлап бешеренә-төшөрөнә башланы. Кискә ҡарай өҫтәл әҙер ине инде. Кәрим ғәжәпләнеүҙән телдән ҡалды башта, шунан уны күтәреп алып әйләндерергә кереште. Шул килеш барып түшәккә тәгәрәнеләр... уңынан әллә ауыртыуҙан, әллә ҡыҙлыҡ осоронан ҡатынлыҡҡа күсеү арауығы емерелеүҙе күтәрә алмай түгелеп

иларға тотондо, бер яҡ ситтә аңҡы-тиңке килеп, ҡара тиргә батып тырпырап ятҡан ире йәштән еүешләнгән биттәренән үбеп йыуатҡан булды...

Оҙаҡламай ауырға ҡалды. Был яңылыҡтан ҡыуанырға ла, ҡайғырырға ла белмәне. Әсә буласаҡ! Ниндәйерәк тойғо кисерә икән әсәй булған кеше? Ул бит ҡырыҫ шарттарҙа тәрбиәләнеп үҫкән. Хәтерендә, балалар йортонда нишләптер ҡурсаҡтар аҙ була торғайны, булғандары ла иҫкереп, йышылып, ҡойтоланып бөткән. Бер саҡ тикшереү менән килгән түрә ҡулына ҙур, күҙҙәң яуын алырлыҡ ҡурсаҡ тотоп килде. Бигерәк тә матур ине шул уйынсыҡ: ары бөҙрә сәстәре ҡабарған, зәңгәр күҙҙәре ысын кешенекеләй ҡарайҙар, аушайт аң, йомолалар, турайт аң, асылалар хатта. Кис етеү менән тиҫтер ҡыҙҙары ара ында шул бүләк өсөн тере талаш сыҡты. Тәтәйҙе төрлө яҡка тартҡылай торғас, ботарлап ташланылар. уңынан илай-илай ялғарға маташ алар ҙа, бер ни ҙә килеп сыҡманы, уйынсыҡ ямаҡай, зәғиф ҡарасҡыға әүерелгәйне. Бына униң үҙ бала ы тыуасаҡ. Ул ҡай ылайыраҡ булыр? Бала бит мөхәббәттән яралманы, өйөү емеше түгел... Ни генә ти әң дә, үҙ ғәзизе, уны ул яратасаҡ, ҡәҙерләйәсәк, ҡурсыясаҡ. Йөрәген ярып сыҡҡан йәнде бер кем менән дә тартҡылап бүлешмәйәсәк. Бына ул тыуыр ҙа, бары ы ла үҙ яйына ҡайтыр. Кәрим дә күтәренкелек кисереп йөрөй, өй эсен бала бағыу, кәрәк-яраҡтары менән тултырып ташланы. Борсолорлоҡ ис кенә лә сәбәп тапмай, ҡайны ы институттағы мәшәҡәттәрен алдан уҡ хәстәрләп ҡуйҙы: артыҡ көсөргәнмәй генә имтихандарын тапшырҙы, диплом ала ы ғына ҡалды.

Мәле еткәс тулғаҡ тотоп кис ауырый башлағайны, иртән таң ыҙылыуға малайы тыуҙы. Ауырынан бушанғас, тәне еңеләйҙе... әм йәне ҡәҙерле нәмә ен юғалтҡандай әсенеп иңрәне. Бер нисә сәғәттән эргә енә аҡ биләүгә төрөлгән йомарсаҡты килтерҙеләр. Ташып тулышҡан күкрәген уймаҡ ауыҙға тигеҙгәйне, бала ҡом оҙланып урырға тотондо. Ҡытығы килеүҙән бигерәк, аңлата алмаҫлыҡ әсәлек ләззәте алыуҙан саҡ ҡысҡырып ебәрмәне. Тиҙҙән малайы туйҙы ла теле менән имсәк осон этеп сығарып башын ситкә ҡайырҙы. «Миңә оҡшап үҙ үҙләнеп наҙлана. Ҡара, танауы, ҡолаҡ япраҡтарына ҡәҙәр уныҡы. Тик бына малай. Ә ул, үҙенә иш итеп, тегге саҡтағы балалар йортондағы ҡурсаҡтай ҡыҙҙы теләгәйне...» Оҙаҡ ҡына улының йөҙөнән иренә оҡшаш яҡтар эҙләне, мәгәр таба алманы, шуға улы уның өсөн үтә лә ҡәҙерле булып китте. Бала ында уның ҡаны аға, йәнендә уның рухы йәшәй.

Ғаиләләренең ишәйеүе Кәрим өсөн оло бер ваҡиғаға әүерелде, эшенән ашығып ҡайтып инә лә бишек тирә ендә мәш килә, улын ҡулынан төшөрмәй, кәрәк саҡта остай, йүргәгенә саҡлы алмаштыра. Был хәл Фәриҙәнең асыуын ҡабарта ғына, ул тырт та мырт баҫып килеп баланы тартып ала ла күҙҙәрен асыулы ялтырата: «Бала бағыу ир кешенең шөғөлө түгел!» Ире асыуланыуҙы иркәләү итеп ҡабул итә:«Саҡҡа ғына миңә бир инде, ну, бер генә минутҡа, ҡәҙерлем, ә?» Ә ул я иллаfamous сыпраңлай бирә: «Бар, кит эргәмдән». Тауышы ҡоростай сыңлай, ҡырыҫ. Яңғыҙы саҡта уйға ҡала, нишләп ул шул тиклем дә асыулы, нимә етмәй, әммә е бар, донъялары түңәрәк. Ҡәнәғәт еҙлек тойғо о тормошҡа сыҡҡансы былайтып йәнен кимермәй ине лә ба а. Йәшәү мәғәнә е мөхәббәтле көн итеүҙәлер, моғайын. Ә уларҙың тормошон йылытҡан, бөтөн иткән шул хис-тойғо юҡ.

***

Ғәзим хәҙер апаруҡ ҙурайҙы. Ата-әсә ен генә түгел, ҡартәсәй-ҡартата ын таный, улар килеп инеү менән мәрйендәй тештәрен йылтыратып, ауыҙын ҙур асып көлөп-йылмайып ҡаршы ала. Тегеләре күктең етенсе ҡатында, ни алып ни бирерҙәрен белмәйҙәр.

Ҡунаҡтарҙы оҙатҡас, диванға ҡырын ятып гәзит-журналдар аҡтарырға тотондо, Кәрим ғәҙәттәгесә Ғәзим менән иҙәндәге келәм өҫтөндә аунай, уны бар тип тә

белмәйҙәр. Сыр-сыу килгән был икәүҙе ситтән көнсөл күҙәтте-күҙәтте лә ирендәрен үпкәсел тур айтып, улына ҡулын уҙҙы:

– Ғәзимчик, кил әле әсәйгә!

Малай башын ата ының күкрәгенә йәшерҙе.

– Кемгә әйтәләр, кил!

Теге е ата ынан айырылырға уйламай ҙа. Был хәл Кәрим өсөн ҡыуаныс ҡына. – Улым ата ын ярата! Атайҙы ярата ыңмы? Ярата шул, ана бит, тотош кәүҙә е менән ылашҡан!

Уға шул хәл етә ҡалды, ҡулындағы журналды атып бәрҙе лә, ишекте ҡаҡлыҡтыра ябып, йоҡо бүлмә енә сығып китте. Ире көтөлмәгән хәлдән баҙап ҡалды, шунан ғәйепле кешеләй артынан инде:

– Дорогая, нимә эшләй ең? Шаярттыҡ, ну, пошутили. Беҙ икебеҙ ҙә ине яратабыҙ. Правда!

– Яратмай ығыҙ, яратмай ығыҙ, уны әллә ҡасандан белеп йөрөйөм. Мин был фатирҙа артыҡ!

– Ни өйләй ең ин? Улай түгел. Ғәзим, әсәйеңә бар әле. – Атай кеше улын көсләп тиерлек уның яғына этте. Теге е, зә әр янған күҙҙәрҙән, ялбыраған сәстәрҙән ип енеп, шарылдап илап ебәрҙе.

Ошо тәм еҙләшеү йөрәгенә шырауҙай ҡаҙалды. Шырау ҙа бит ҡаҙала ла улҡыйулҡый үл йыйырға тотона. Уларҙың мөнәсәбәттәре лә шуға тартым, ары былай дауам ит ә, йыйылып килгән асыу, үпкә, күрәлмаусанлыҡ, нәфрәт шешенә әүреләр ҙә бер килеп ытылыр. Ары көтөргә, кисектерергә ярамай. Ҡасып-боçоп юлға төйнәнә башланы. Хәйер, иркенләп йыйынырға мөмкин, ире былай ҙа көндәр буйы эштә, шулай ҙа был шөғөлөн уғрылай ҡыланып башҡарҙы. Әйберҙәрен берәмтәләп дәү спорт сумка ына тынҡыслай ҙа шанҡығандай ултырғысҡа сүгә. «Нимә эшләй ул?..Ҡайҙа ҡаса? Етеш тормоштан туйып икереүеме, әллә маңлайына яҙған яҙмышты ҡыуып йөрәк еүеме?»

Ете төн урта ында түшәгенән аяҡтарын алындырҙы ла билдә еҙлеккә төбәлде. Оҙаҡ ерәйҙе ҡымшанмай. Ҡаршылыҡлы уйҙарҙан булмышы ҡап-уртаға ярылғандай, мейе ен бер фекер быраулай, йөрәген икенсе теләк елкетә, йәне тәнендә урын тапмай үр әләнә. Ҡайырылып йоҡлап ятҡан иренә текәлде. Ул устарын сикә е аçтына ҡуйып рәхәтләнеп йоҡлай. Ваҡыт-ваҡыт ирендәрен сәпелдәтеп ала. Әйтер ең дә, күкрәк өтөнә туйған бәпес бер хәсрәт еҙ сәңгелдәгендә маҙрай. Аҡ тулы биттәрендә аҡал-мыйыҡ ишараты беленер-беленмәç кенә, ҡара ҡыйғас ҡаштары туғарлана биреп юғарыға сөйөлгәндәр. Балауыҙҙан әүәләгәндәй матур танауы нишләптер тотош йөҙҙән айырылып остайған, сит кешенекен килтереп ылағандармы ни! Уң яҡ сикә ендәге тары бөртөгөндәй ҡара миңе ул мөрхәт енмәгән йөҙгә ҡәтғи, кире ҡаҡмаçлыҡ нөктә ҡуйғандай ҡалҡып күренә. ылыу, ләкин ят йөҙ. Нишләп шуны элегерәк күрмәгән? Күрҙе, иғтибар итте, тик уңғы мәлдә, туй алдынан... Хәҙер шул ек ендергес ыҙаттар, күҙгә төшкән дегәнәктәй, аҙым айын ҡарашына төртөлә, күҙҙәрен ҡыра, сыҙарлыҡ әмәле ҡалманы.

аҡ ҡына торҙо ла улы йоҡлаған бүлмәгә ҡарай атланы. Ул бәләкәй карауатын тултырып ҡоласын ташлап йоҡлап ята. Уға оҡшаған бигерәк, уйған да ҡаплаған. Тотош бүлмә балаға ғына хас хуш еç менән тулған. Күҙҙәрен йомоп ирек еҙҙән шул еçте ҡом оҙланып еçкәргә тотондо. «Ҡай ылай итеп бала ын ташлап китер?.. Улы көн айын йоҡо онан уяныр ҙа мамыҡтай йомро ҡулдары менән күҙҙәрен ыуа-ыуа уны таптырыр. Улының ебәктәй йомшаҡ сәстәрен, оро күҙҙәрен, бәрхәттәй тәнен, тәненән аңҡыған ошо еçте ағыныр бит. Айырым-айырым ғына ағынмаç, тотошлайы менән ағыныр, юҡ ыныр. Бында ҡалды ла икән, ти, әлегә – Ғәзим генә, ғаиләләре тағы арт а, ҡай ылайтыр? Кәримде яратмай бит, яратмай. Яратма-

уы хәҙер күрә алмауға әүерелә бара. Ҡайҡая биреп ултырыуы, ҡабаланмай, тоноҡ тауыш менән өйләшеүе, арҡыры баҫып атлап йөрөүе, хатта тәм-томдо ләззәтләнеп, ҡабыҡ кимергән ҡуяндай ауыҙын мөйтәңләтеп ашауына ҡәҙәр оҡшатмай... Сикә енә сабып ебәреүҙән саҡ тыйыла, шуға өҫтәл артынан тороп китә лә сәбәп еҙгә сыпраңларға тотона. Ә бит тупаҫ мөғәмәләгә сәбәп юҡ. Уйҙарының ҡабаттан иренә килеп ялғаныуына эсе күм ене, ҡулына улының осраҡлы килеп эләккән уйынсығын атып бәрҙе лә үр әләнеп бүлмәне үрле-ҡырлы кәлепләргә кереште. Ары былай йәшәргә, бында ҡалырға ярамай! Ғәзиме? Уны ҡай ылайтыр? Бынау уйынсыҡтай еңел генә ситкә быраҡтыра алмай ҙа инде... Нимә эшләргә, ни ҡылырға?..»

Карауатҡа яҡынланы, улын үрелеп алырға онолғайны, ҡулы кинәт хәл еҙләнеп, сыбыртҡылай алынып төштө. Бармаҡтарын зымбырҙап ауыртҡансы йоҙроҡҡа йомарланы: «Хәл итте, хәҙер, кисекмәҫтән китә. Көн яҡты ында быны ул эшләй алмаясаҡ, әле ике е лә бер ни ҙә белмәй тыныс ҡына йоҡлайҙар. Улын, бик телә ә лә, үҙе менән билдә еҙлеккә алып китә алмай. Ваҡытлыса. Шәхси тормошон яйға алғас килеп алыр...»

Залға сығып утты ҡабыҙҙы, шыпырт ҡыланып шифоньер эсенә йәшергән сумка ын тартып сығарҙы, плащын кейҙе, башына косынка ын ябынды, шул арала көҙгөгә күҙ атырға ла онотманы. Унан уға йөҙө йонсоу, яурындары алынҡы ҡатын ҡарай ине. Әҙерләнеп бөттө, шикелле. Сумка ын аяҡтары ара ына ҡуйып, диванға ултырҙы. Йоҡо бүлмә енә ҡабаттан сыҡманы, Ғәзименең бүлмә ишегенә ҡарамаҫҡа тырышты, ул яҡҡа ирпел ә, ниәтенән кире үреләсәк. Сумочка ынан авторучка килтереп сығарҙы ла журнал өҫтәлендә ятҡан гәзиттең ситенә сыймаҡланы: «Китәм. Ғәфү ит әм дөрөҫ аңларға тырыш... Үҙ ишеңде табыр ың әм матур йәшәр ең, мин быға ышанам. ин бәхеткә лайыҡ кеше. Бер генә үтенесем бар: Ғәзимде ярат, етем ерәтмә. Эҙләмә, таба алмаҫ ың!» Торлағы менән хушлашып, битараф ҡарашын тағы ла бер тапҡыр зал буйлап йүгертте...

3

Мәскәү уны ҡырыҫ, төм өрәп ҡаршы алды. Килеү менән быҫҡаҡ ямғыр яуа башлағайны, әле туҡтарға уйламай ҙа. Тотош күк йөҙөн ауыр ҡурғаш болоттар ҡаплап алған. Бөләңгертлектән йән иҙелә, күңел иңрәй. Август урталары ғына булыуға ҡарамаҫтан, тротуар ҡырлатып үҫкән ағастарға беленеп ары ҡунған. Улар ҙа еүеш- алҡындан тәлгәштәрен аҫҡа алындырғандар, ел иҫ ә йәшәйештәренә зарланғандай дәррәү шаулап алалар ҙа тағы баштарын түбән эйәләр. Фәриҙә ҡунаҡхананың тәҙрә төбөнә ултыра ла урамда мыжғышҡан халыҡты, оло юлдан ағылған машиналарҙы күҙәтә. Кешеләр ҡайҙалыр ашыға, тимәк, барыр ерҙәре, көткән яҡындары бар. Ҡырмыҫҡа иләүен хәтерләткән ҡалала ул ғына яңғыҙ. Кәрәк еҙ, онотолған кеше. Хәҙер үк ятып үл, берәү белмәйәсәк, берәү ҡайғырып иламаясаҡ. Шул тиклем дә яңғыҙлыҡ булыр икән...Килгәндең икенсе көнөндә үк үткәндәренән ҡотолорға, артҡа сигенергә күпер ҡалдырырға теләмәй, телефон карта ын форточканан тышҡа ырғытты. Яҡындарының, таныштарының номерҙарын аҡлаған, тиҫтәләгән элемтә, мәғлүмәт ептәре менән араларын бәйләгән бармаҡ башындай ғына ҡатырға киҫәге киҫкен елгә эйәреп өйрөлөп-өйрөлөп юғарыға сойорғоно ла ҡайҙалыр осоп китте. «Ошоғаса шылтыратыуҙарға яуап бирмәй ине, хәҙер эҙлә әләр ҙә таба алмаясаҡтар. Ә ул үҙе башлап шылтыратмаҫ, нисек тә сыҙар». Шулай ҙа бер көнө телефон-автомат эргә енән үтешләй аяҡтары үҙҙәренән үҙҙәре шул яҡҡа ҡарай тартып өйөнөң номерын йыйҙы. Белә, трубканы ире аласаҡ, тик шул мәлдә Ғәзименең тауышы ишетелеп ҡалмаҫмы? Тик өмөтләнеп ҡәҙерле тауышты аңды а ла, трубканы ҡалҡытыусы булманы. Хәҙер малайы өҫ-

тәлгә ултыртмалы рамдағы фотонан уға үпкәләгәндәй итеп ҡарай... Ғәзиз бала ын ташлап сығып китергә көс тапҡас ул шул тиклем дә бәғер еҙ микән ни?! Әллә ҡатылыҡ, ми ырбан ыҙлыҡ балалар йортоноң тәрбиә еме? Унда ла уны иркәләүсе, наҙлаусы, яҡлаусы, ҡурсалаусы булманы. Ғаилә йылы ын, ҡотон белмәй үҫте. Хәҙер килеп үҙе иҫән- ау килеш бала ын етем ерәтә... Башы тубалдай ҡатты инде.

Кис еткәс кейенде лә икенсе ҡаттағы буфетҡа төштө. Тамағына аш үтмәй. Барыбер ҙә тәғәмләнергә кәрәк. Шулай тейеш. Сиратҡа баҫҡан бер нисәүҙе иҫәпкә алмағанда, буфетта артыҡ кеше күренмәй. Сиратын еткереп алырын алды ла стена ҡырына барып ултырып ҡарашын ямғыр тамсылары арҡҡан тәҙрәгә йүнәлтте.

– Можно, тут не занято? – Ҡолағы төбөндә тиерлек ҡалын, шул уҡ ваҡытта баҫалҡы тауыш ишетелде. Тертләгәндәй ҡайырылды. Эргә ендә тороҡ яғалы свитер кейгән ялбыр сәсле аҡалтай баҫып тора.

– Тут свободных столов много.

– Ә мин еҙҙең янда ултырырға теләйем! – Башҡортсалап яуаплаған ир батмусындағы тәрилкәләрҙе өҫтәлгә урынлаштырырға кереште. Баш ҡала ынлы башҡалала үҙ телен ишеткәнгә аптыраңҡырап ҡал а ла, үҙен тиҙ ҡулға алды: «Илгиҙәрҙәр, мажара артынан ҡыуыусылар бөткәнме донъяла, шуларҙың бере елер. Хәҙер яйын тура килтереп бәйләнә башлар...» Ир ихласлап ашай, эргә ендә ҡатынҡыҙ барлығын онотто ла шикелле.

Ҡаршы ындағы иргә иҙҙермәҫкә тырышып керпек остарын сәнсте лә тертләгәндәй итте. «Туҡта-туҡта быны ҡайҙалыр күрҙе бит ул, яҡындан күрҙе, йөҙө шул тиклем дә таныш... Тик ҡайҙа, әм ҡасан?» Хәтерләй алманы. Бәлки, башҡортса өндәшкәнгә арбалғандыр ҙа яҡынлыҡ эҙләүелер. Тәрилкәләрен йыя башлағайны, аҡалтай йөҙөн нурландырып уға ирәбе ҡараны:

– Ә мин еҙҙе беләм, Өфө ҡыҙы!

– Ә мин еҙҙе, ғәфү итегеҙ, юҡ!

– Иҫләгеҙ әле: Ағиҙел яры, пляж, ары сәсле ҡыҙ әм еҙ. Көнө буйы мин картина яҙҙым, ә еҙ ҡояшта ҡыҙындығыҙ, ыу индегеҙ. Кис етеп ҡайтырға йыйынғас о- ранығыҙ: «Картинағыҙ ҡасан әҙер була?» — «Бер аҙнанан. еҙҙе ҡайҙан табырға?» — «Эҙләгән кеше әр ваҡыт таба!» Ысынлап та, эҙләп ҡараным, тик миллионлы ҡалала ҡай ылайтып тапмаҡ кәрәк! Хәйер, осраттым тағы ла бер тапҡыр, кис, Салауат әйкәле янында, әммә ул саҡта яңғыҙ түгел инегеҙ, минең дә парым бар ине.

– Ҡыҙыҡ. Ә мин ысынлап та таныманым, бына хәҙер әйткәсегеҙ, иҫләнем.

– Әйҙәгеҙ, танышайыҡ: Тан ыҡ.

Ғәжәпләнгәндәй төбәлеүҙе күргән аҡалтай аңлатыуҙы кәрәк тапты:

– Атай менән әсәй өйләнешкәс оҙаҡ балалары булмаған, шунан уларҙы зарынтизар көттөрөп мин тыуғанмын. Шунан, сәйерерәк ишетел ә лә, Тан ыҡ тигән дә ҡуйғандар. Byндағы халыҡ өсөн мин бары Толик.

– Мин — Фәриҙә Юлдашбаева. Ауылсараҡ яңғыраған исем. Кем ҡушҡандыр, белмәйем, балалар йортонда үҫтем. Иҫ белгәндә шунда инем. унғараҡ, атаәсәйемде эҙләп ҡара ам да, таба алманым, улар ҙа ауылдан булғандарҙыр, тип фаразларға ғына ҡала. – Яҡын кеше енә серен өйләгәндәй асылды ла киттесе.

– Исемегеҙ иҫ китмәле матур, Фә-ри-ҙә! Унан ҡояш наҙы, йылылыҡ бөркөлә төҫлө!

– еҙ рәссам ғына түгел, шағир ҙа икән! Ҡай ылай матур өйләп ташланығыҙ. Ялғанла ағыҙ ҙа, үҙҙәрегеҙгә нишләптер ышанам!

– Ялғанламайым! Аллам аҡла ын! Әпәкәй алдында ант итәм!

– Шулай уҡмы?! Улай а, ышандырҙығыҙ минең исемем донъяла иң матуры икәнде.

– Исемегеҙ генә түгел, үҙегеҙ ҙә!

— Была быны ы артыҡ. — Таныш түгел кешегә саманан тыш илгәҙәкләнеп китеүенә унай ыҙланған Фәриҙә бүлдерә алды. — Ғәфү итегеҙ, миңә ҡайтырға кәрәк. Табындаш булыуығыҙ өсөн рәхмәт. Хушығыҙ!

аҡалтай ҙа ҡуҙғалды:

— Машина менән килдем, бәлки, еҙҙе оҙатып ҡуйырғалыр?

— Борсолмағыҙ, миңә йыраҡҡа түгел.

— Шулай ҙа. Өфөлә юғалтҡан ҡыҙҙы шаулы Мәскәүҙә юғалтып ҡуймаҫмынмы?

— Юғалт ағыҙ ҙа үкенесле түгел.

— Бәйләнсек ҡыланыуым өсөн ғәфү үтенәм, ҡайҙа йәшәй егеҙ?

— Ошонда. ау булығыҙ.

Ҡабаланып асыҡ ишектән коридорға сыҡты. Ҡайырылманы. Ҡайырыл а, Таныҡтың йөҙөнән йылы саткыларҙың йүгереп үтеүен, оро күҙҙәрҙең осҡонланып китеүен күрер ине.

Номерына инеп бикләнде, бини ая ваҡыт трюмо ҡаршы ында онотолоп ултырҙы, бармаҡ осо менән ҡыйғас ҡаштарына, янып барған бит алмаларына, сәс бөҙрәләренә ҡағылды ла көҙгөләге ишенә мөрәжәғәт итте: “Әлегә ин ир-ат иғтибарын йәлеп итерлек ең икән әле!” Теге е ғәйепле кешеләй башын эйҙе. «Дөрөҫ унай ыҙлана ың, яттарға ым ыныуҙан ни файҙа? ин бит бала әсә е, ир ҡатыны».Үҙен үҙе шулай битәрләне лә тумбочка өҫтөндә ятҡан ялтырауыҡ тышлы китапты алып түшәгенә уҙылды, тик арзан мөхәббәт мажараларына ҡоролған әҫәр башына инмәне. Ҡулындағын ситкә алды ла утты үндерҙе. Түшәгендә әйләнгелә ә лә, йоҡлап китә алманы. Теге аҡалтай өйкөмлө йылмая биреп күҙҙәре алдына килә лә баҫа. Әҙәм бала ы шулай яратылған инде: әр ваҡыт нимәлер көтә, нимәгәлер өмөт итә. Хыялдары ҡомдан эшләнгән арайҙай ишелеп төшкән хәлдә лә, тырышып-тырмашып яңы ын әүәләргә тотона, уға бар тырышлығын ҡушып, дәртен, көс-дарманын ала. Была ул да үткәндәрен үҙ ҡулдары менән емереп, киләсәк көндәренә ышанып алыҫ баш ҡалаға килде. Көткәндәре аҡланырмы? Билдә еҙ. Тормош даръя ына батып барыусы ла алам осмотона йәбешеп ҡотолоп ҡалырға маташа. Бында килгәс танышҡан тәүге кеше е ошо аҡалтай булды — баш ҡаланың бер ваҡытта ла тынмаған ығы-зығы ында осраҡлы ғына уға килеп юлыҡҡан алам киҫәге, юҡ, саң бөртөгө. Ҡай ы ере менән ылыҡтырҙы уң ул уны? Ылыҡтырғандыр, юғи ә, әле уның хаҡында уйлап ятмаҫ ине. Нимә тине әле: «Исемегеҙҙән ҡояш наҙы, йылылыҡ бөркөлә!» Кәрим уға бер тапҡыр бул а ла шундай үҙҙәр әйттеме икән? Әйткәндер бәлки, тик нишләптер хәтерендә ҡалмаған. үҙҙәр бөтә е лә бер иш әйтелә, тик уның кем тарафынан әйтелеүе мө им. Шуғалыр ҙа аҡалтайҙың әйткәндәре күңелен иләҫләндереп ебәргәндер. Былай төҫ-башы ҡатын-ҡыҙ иғтибарын йәлеп итерлек түгел: суҡыш ымаҡ аҫҡа кәксәйеберәк торған танау, ас сикәле биттәр, ослайыбыраҡ күренгән эйәк. Моғайын, шул етеш еҙлектәрен йәшерер өсөн аҡал-мыйыҡ ебәргәндер. Тотош фиғелен ҙур, оро күҙҙәре йәмләй. Унан өҙлөк өҙ яҡтылыҡ, өйкөмлөлөк, ми ырбанлыҡ ирпелә төҫлө. Тағы ҡай ылай башҡортса өйләшә! Тыуған ерендән йыраҡлашҡан айын, үҙ телең ҡәҙерлерәк була бара, әллә шул яғы менән үҙенә арбанымы? Тан - ыҡ. Исеме шулай ине бит әле. Исеме ят булғанға иҫенән сыҡмайҙыр, бәлки.

Нишләп өҙлөк өҙ уның хаҡында уйлай әле, бер өҫтәл артында 10—15 минут сама ы ғына әңгәмәләштеләр бары. Башҡа бер ваҡытта ла осрашмаясаҡтар.

«Ос-раш-ма-я-саҡ-быҙҙ...Тан ыҡҡҡ...» Күҙ ҡабаҡтары ауырайҙы, ул, тыныс йоҡо теләгәндәй, малайының фото ына ҡараны.

Ә улы, мине оноттондамы ни тигәндәй, уға рәнйеп текәлгәйне...

Иртәгә ен иртә менән түшәгенән ниндәйҙер еңеллек тойоп килеп торҙо ла душ аҫтына баҫып йыуынып алғас, көҙгө алдына ултырып ентекләп биҙәнергә тотон-

до, шунан документтарын сумочка ына алып, йүгерә-атлай сығыу яғына йүнәлде. Бүлмәлә саҡта ҡыйыу, тәүәккәл ҡылан а ла, өҙлөк өҙ ҡайҙалыр ашыҡҡан халыҡ ара ына барып ингәс, юғалынҡырап ҡалды. Ҡай ылай йүгерешәләр, уны күрмәйҙәр ҙә хатта. Кемгә кәрәге бар? Бер кемгә лә! Унын ымаҡ эш, баш осона ҡыйыҡ даулап йөрөүселәрҙән бында быуа быуырлыҡ.

Мәскәүҙе ҡыҙырыу үтә лә ауыр әм өҙөмтә еҙ шөғөл икән дә ба а, килгәндән алып эш эҙләй, таба алмай. Әле лә төшкә саҡлы мөрәжәғәт иткән ерҙәрҙә йүнләп тыңлаусы табылманы.Тыңлағанға алышып ҡыланалар шунда, ә йөҙҙәре битараф, уйҙары ситтә. Тик кискә ҡарай ғына бер дауахананың кадрҙар бүлеге начальнигы ҡыҙыҡ ынғандай итте лә йәшәр ере юҡлығын ишеткәс: «Беҙгә педиатрҙар кәрәк тә ул, тик йәшәргә урын тәҡдим итә алмайбыҙ, унын өсөн баш ҡала прописка ы кәрәк»,— тип өмөтөн үрҙе.

Арып-талып ҡунаҡхана фойе ына килеп ингәйне, администратор ҡатын туҡтатты:

– Юлдашбаева, Вас можно на минуточку?

Үҙенең фамилия ын ишетеүгә ғәжәпләнеп ултырғысына йәйелгән туптай тумалаҡ, быжыр битле, ирендәрен килеш еҙ итеп асыҡ ҡыҙыл төҫкә буяған ҡатынға ҡараны:

– Да... слушаю...

– Вам оставили картину.

– Извините, я тут никого не знаю.

– Вы из 505 комнаты? – Администратор номерҙар, фамилиялар теҙмә ен компьютер экранынан барланы ла ҡағыҙға төрөлгән рамды унын алдына ҡуйҙы. – Да, это Вам! Еще вот записка.

– Спасибо...

Бүлмә енә ингәс, иҫен йыя алмай аңҡы-тиңке килде, ғәҙәтенә әүерелә барған хәрәкәт, тумбочка өҫтөндәге фотоға ирпелә е урынға, картинаны стенаға өйәне лә ашығып ҡағыҙ киҫәгенә текәлде:

« еҙҙе оҙаҡ көттөм. Ары ҡала алмайым, тағы ла ике сәғәттән Берлинға осам, унда беҙҙең картиналар күргәҙмә е асыла. Быны теге ваҡыт, ҡояшлы Өфөлә яҙғайным. Шуны бүләк итәм. Минең өсөн бик тә ҡәҙерле картина ул. Тағы ла бер үтенесем бар... Юғалма!

Тан ыҡбай».

Әллә көтөлмәгән хат киҫәгенә ҡыуанып, әллә ят исемде тағы ла бер тапҡыр уҡыуына кинәнеп селтерәтеп көлөп ебәрҙе:

– ин Тан ыҡ ҡына түгел, Тан ыҡбай икән ең! Был донъяла ундай шәп исем бары индә генәләр. Тан- ыҡ-бай! Тан ыҡтарға бай, тимәк! – Аяҡ кейемдәрен елкеп ырғытып, ҡоластарын йәйеп түшәгенә ҡоланы. Бөгөнгө арыуҙары, борсолоуҙары, эстән яныуҙары ыпырып алғандай юҡҡа сыҡҡайны.

Бер килке шулай онотолғас, үрелеп, аҡ ҡына, мөғжизә көткәндәй картина төрөлгән ҡағыҙҙы ыҙырҙы, ыҙырҙы ла күргәне тәьҫиренә арбалды.

Күк йөҙөндә туҙышып йөҙгән болоттарҙай аҡ күлдәк кейгән омғол буйлы ҡыҙ ҡая ситенә баҫҡан да алыҫтарға төбәлгән. Ҡая тигәне лә аҡ суйыр таштан хасил икән. Сөм-ҡара, үрелмәгән сәстәрҙе, киң күлдәк итәктәрен талғын ел өйөп тартҡылай. ылыу йөҙ ила илыҡтан тулышҡан, күҙҙәрҙә асылмаҫ сер төйнәлгән, ҡыйғас ҡаштар ораулы сөйөлгәндәр. Ҡайҙа ҡарай был ҡыҙ? Бәй, алыҫта, шаулы тулҡындар аръяғында аҡ ыл ер киҫәге төҫмөрләнә икән дә. Төҫмөрләнеп кенә ҡалмай, нурҙарҙан туҡылып балҡый. Уны йәйғор күпере ҡайыған.

Картинаның мөйөшөнә: «Хыял утрауы» тип яҙылған, йәнә бәләкәй генә

хәрефтәр менән «Тан ыҡбай Аҡсурин» тип тә өҫтәлгән.

— Рәхмәт... — тип әҫәрләнеп шыбырҙаны, йөрәге күкрәгеп дөбөрҙәтеп, яр ып тибә, керпектәре осона шатлыҡ йәштәре эленгән. Була бит шундай кешеләр, аҙ ғына ваҡыт эсендә онотолмаҫлыҡ булып хәтергә уйылалар, күҙгә бәрелеп бармаған ҡылыҡтары, эштәре менән үҙҙәрен яраттыра, юҡ, үҙҙәренә мөкиббән ғашиҡ иттерә беләләр. Был да шундайҙар затынандыр.

Аҙнаның өс көнөн ҡоштай осоп үткәрҙе, гүйә, аяҡтары ер өҫтөнән атламай, оса төҫлө. Көндәр буйы эш эҙләп таба алма а ла, артыҡ борсолманы, был мәшәҡәтте лә шулай кәрәккәнгә генә башҡарҙы. Бүлмә ендә «Хыял утрауы», уйына кинәт кенә Тан ыҡ килеп төшә лә, донъя ы теүәл кешеләй бәхетле йылмайып ебәрә. «Бер күреүҙә ғашиҡ булыу тигәндәре ошо микән әллә? Булмаҫ, булыуы мөмкин түгел!» Бәйләнсек, иләҫ-миләҫ уйҙарҙы башынан ҡыуырға тырыша, тик файҙаыҙ... Бына ул Германиянан ҡайтып төшөр ҙә тура ҡунаҡханаға килер. Шунан аңлашырҙар ҙа бергә, бик бәхетле итеп йәшәй башларҙар. Эше лә табылыр, тормошо ла яйға алыныр. Ошонан аҙаҡ яҙмышҡа ышанма инде: башта ул уларҙы Ағиҙел ярында осраштырған, шунан хистәренең тәрәнлеген ынар өсөн бында, Мәскәүгә, алып килгән. Улар бит бары күҙ асып йомған арала ғына бергә булдылар... Уйлап ҡара аң, бер-береңде табыр, яҡынлыҡты тойор өсөн шул арауыҡ та етә икән. Ул уны тапты, хәҙер бер ҡасан да айырылмаясаҡ. Таптым, ти ҙә ул, әллә, кире енсә, Тан ыҡ уны эҙләгәнме?

Хәҙер иртән сығырҙан алда администратор эргә енә бара ла сәғәт нисәлә ҡайтырын хәбәр итә. Тан ыҡ килеп көтөр-көтөр ҙә йәнә оҙайлы командировка ына юлланыр төҫлө. Тағы күпме көтөргә мөмкин?

Кис түшәгенә сумды ла татлы хыялдарына бирелгәйне генә, күрше номерҙа бала илауын ишетеп, тетрәнеп китте, кинәт ал ыу күлдәген алдырып, көтмәгәндә фанилыҡҡа ҡайтарып гона лы ергә баҫтырҙылармы ни! «Ошо мәлдә Ғәзиме ни эшләй икән? Йоҡлаймы, әллә уны ағынып илаймы... Ә ул, йәш ҡыҙҙай, ҡыҫыр бәхеткә ым ынып, ят ирҙе көтәүелләй. Ни тиклем елбәҙәклек! Ул бит әсә! Иң элек ғәзиз бала ын ҡайғыртырға бурыслы түгелме? Ҡай ылай ҙа ҡаты бәғерле, ми ырбан ыҙ, выждан ыҙ...» Ә күрше бүлмәләге ыҡтау дауам итте. Фәриҙә, итәгенә ут ҡапҡандай, сәбәләнеп ырғып торҙо, ҡорғанды тартып тәҙрә ҡаршы ына барып баҫты. Тәҙрә яңағына тер әкләнеп оҙаҡ торҙо еңгәҙәп. Бер аҙҙан: «Улым, Ғәзимем...»— тип иңрәне лә түгелеп илап ебәрҙе.

Бер аҙна тигәндә ҡайтып төштө Тан ыҡ. Фәриҙә ғәҙәтенсә төшкө ашты буфетта ашаны ла әҙерәк ял итеп алыу уйы менән бүлмә енә күтәрелгәйне, тумбочка өҫтөндәге телефон зыңғырланы. Көтөлмәгән хәлгә аптырап ҡалды, номерҙы бутағандарҙыр, тип аҡ ҡына трубканы ҡалҡытҡайны, администраторҙың тауышы ишетелде: « Вас внизу ждут».

«Тан ыҡ!» Ҡай ылыр мәлгә баҙап ҡалды. Китсе, онотмаған, килгән бит әле. Хәҙер аҫҡа төшөр ҙә эргә енә барыр, нимә тура ында өйләшерҙәр? Улар бит бөтөнләй ят кешеләр, бүлешер яңылыҡтары, серҙәре юҡ. ынын ҡатырып ҡәнәфигә еңде лә тынып ҡалды. Теге ғазаплы төн иҫенә килеп төштө. Әллә төшмәҫкә лә ҡуйырғамы? уңлаған мөхәббәт уйыны нимәгә әм кемгә кәрәк?! Былай ярамай, кешене көттөрөп ҡуйыу — тәрбиә еҙлек, әҙәп еҙлек. Бер аҙ әңгәмәләшерҙәр ҙә, ике е ике яҡҡа китер. Бары шул ғына.

Баҫҡыстан төшөп килешләй Тан ыҡты шундуҡ абайланы, ана, майҙансыҡтың ҡап урта ында әйберҙәрен аяҡ аҫтына ҡуйып, ярпайып баҫып тора. Ул да күрҙе, күрҙе лә күптәнге танышын ҡаршылағандай ҡулын болғаны:

— аумы, Фәриҙә! — Йүгерә-атлай эргә енә килде лә, күркәм раузалар гөлләмәен тотторғас, битенән үбеп алды. Көтөлмәгән мөғәмәләнән ғәфү үтенгәндәй өҫтәне. — аумы, яҡташ!

– аумы ығыҙ. – Теге е тулҡынланыуын йәшереп, йөҙөн үҙгәреш еҙ ҡалдырҙы ла, ниңә ваҡыт ыҙ йөрөй өң, тигәндәйерәк ҡиәфәт алды.

– Бына ҡайтып килеш әле, Германиянан. – Күрше енә йомошҡа инеп сыҡҡан кешеләй, ғәҙәти өйләнде Тан ыҡ. – Бына, еҙҙе күрәйем, тип боролдом.

– Нисек йөрөп ҡайттығыҙ?

– Бик уңышлы. Европа ла Европа тип ауыҙ ыуыбыҙҙы ҡоротабыҙ, минә ҡал а, иҫ китмәле бер ни ҙә тапманым. Кире енсә, уларға беҙҙән өйрәнергә кәрәк. Авангард йүнәлешендә эшләгән картиналарыбыҙға иҫтәре кит ә, пейзаждарыбыҙ хайран итте. Ер йөҙөндә ундай ожмахҡа тиң мөйөштәр ҙә бар икән, тиҙәр. Тағы ла саҡырҙылар. Был юлы Римға. Живопись үҙәге Италияға, Рафаэль, Леонардо да Винчи, Микеланджело ижад иткән ергә. Унда барғанда икеләтә әҙерлек кәрәк буласаҡ. Үҙем хаҡында ла үҙем хаҡында, бында нисек йәшәнегеҙ?

– Насар, тип зарлана, шәп, тип маҡтана алмайым.

– Әйҙәгеҙ, бары ын да яҡшыға юрайыҡ. – Кәйефе күтәренке Тан ыҡ илтифатыҙ тыңланы әллә, үҙенекен теҙҙе. – еҙҙе бөгөн кис ресторанға саҡырырға мөмкинме?

– Ниндәй тантана хөрмәтенә?

– Тантана тип, тәьҫораттар алып сит илдә йөрөп ҡайтылды, тағы беҙ яҡташтарҙың өйләшер уртаҡ темалары ла барҙыр.

– Ғәфү итегеҙ, бара алмайым. Эштәрем күп.

– Беҙ бит эштән уң, оҙаҡ та ултырмабыҙ.

– Барыбер. Хушығыҙ. – Фәриҙә инеү яғына йүнәлде лә боролоп әйтте, – Сәскәләр өсөн рәхмәт.

Теге е айырылырға теләмәй ҡабаланды:

– Бәйләнсек кешеләй ҡылан ам, кисерегеҙ. Шулай ҙа визиткамды алығыҙ. Мәскәү күҙ йәштәренә ышанмай, ул ҙур ҡала, бәлки, ярҙамым кәрәгер. Шылтыратығыҙ...

Үтенес яуап ыҙ ҡалды, осло тағалар таш баҫҡыстарҙы сүкеп юғарыға күтәрелде.

Эш эҙләп тағы ла аҙна сама ы ваҡыт үтте. Ҡайҙа ғына бар а ла, ҡырҡ ылтау табалар. Алырға теләмәүҙәренең төп сәбәбе – прописканың юҡлығы. Аҡса ы ла бөтөү яғына бара. Былай дауам ит ә, бер тин еҙ урамда тороп ҡаласаҡ. Әгәр Тан ыҡҡа мөрәжәғәт ит ә, моғайын, ярҙам итер ине, ни ти әң дә – ул бындағы кеше.

Шул мәл, уйын ҡеуәтләгәндәй, телефон шылтыраны:

– аумы ығыҙ! – Трубкала таныш тауыш. – Дөрөҫөн генә әйткәндә, сәбәп тә юҡ, былай ғына, сәбәп еҙ генә шылтыратырға иттем. Туҡта, мин әйтәм, яҡташтың хәлен беләйем әле.

– аумы ығыҙ. Яҡшы. – Фәриҙә ҡыуанып кит ә лә, рыя ҡыланып, шатлығын йәшерҙе.

– Тыуған яҡты ағындыралыр? Унан киткәнемә әллә күпме ваҡыт үтте, барыбер йыш иҫкә төшә.

– ағындыра инде.

– Улай а, минең бер тәҡдимем бар.

– Ниндәйерәк тәҡдим икән ул?

– Бында, шәхси коллекциямда, Башҡортостанға бағышланған байтаҡ картиналар бар. Шуларҙы ҡарарға саҡырам. Бәлки, аҙаҡтан фекерегеҙҙе лә әйтер егеҙ. Мәҫәлән, сит-ят кеше беҙҙең тыуған ер, унын кешеләре хаҡында нимә әйтә ала, шулай түгелме?

– Ҡиммәтле иҫкәрмәләр я ай алмамдыр, мин бит сәнғәт өлкә енән алыҫ. өнәрем – педиатр.

– Кире енсә, аҡ халатлылар йырға-моңға, шиғриәткә, ғөмүмән мәҙәниәткә

ғашиҡ кешеләр.

– Улай а, ризамын, – шулай ҙа сигенерлек арауыҡ ҡалдырҙы, – тик оҙаҡҡа түгел.

– Көтөгөҙ, хәҙер килеп етәм!

Ҡабаланып кейенә башланы ла, көҙгө ҡаршы ына баҫып төҫ-башына күҙ алғас, уйынан кире ҡайтты. Нишләп осрашыуға барған йәш ҡыҙҙай ҡуҫтарлана? айлана торғас, джинсы салбарға әм аҡ футболкаға туҡталды, аяҡтарына килешле кроссовкалар ҡатты, көн аяҙға ултырыуына ҡарамаҫтан, беләгенә плащын элде. Көҙгө ҡаршы ына ултырып беленер-беленмәҫ биҙәнде, ҡолаҡ ырттарына хушбый ышҡыны, сығыр алдынан ҡояштан аҡлағыс ҡара күҙлек кейҙе.

Тан ыҡ ҡунаҡхананың фойе ында көтә ине инде. Ул үткәндәге кейемендә: бөҙрә сәстәре таралып төшкән, аҡал-мыйығы ла тырпайыңҡырап күренә, кәүҙә торошонда шамтырлыҡ* иҙелә. «Башҡорт бала ы тип кем әйт ен инде быны? Торғаны замана берәҙәге... Үҙем уң, үҙем...» Фәриҙә бойондороҡ оҙ ҡиәфәттә атлай, үҙе шулай уйлай.

– Хәйерле көн! – Уға ҡаршы йүгерә-атлай яҡынлаған Тан ыҡ килешле итеп етәкләй алып алды. – Киттекме?

Иномарканың эсе уңайлы, еләҫ. Машина тауыш ыҙ ғына ҡуҙғалып киткәс, салон эсенә талғын башҡорт көйө ағылды:

*Үҙең генә белгән юлдар менән*
*Төштәремә килеп керә ең...*

– еҙгә бер орау бирергә мөмкинме?

– Берҙе генә түгел. орағыҙ.

– Башҡортса матур өйләшә егеҙ, өҫтәүенә, беҙҙең көйҙәрҙе тыңлай ығыҙ, еҙ бит ауылда тәрбиәләнмәгән егеҙ?

– Бында бер ниндәй ҙә сер юҡ. Атай-әсәйем ауылдан сыҡҡан кешеләр ине. Шуға телем дә башҡортса асылды, өйҙә әр ваҡыт башҡорт китаптары, гәзит-журналдары, башҡорт көйҙәре яҙылған кассеталар булды. Аралашыуыбыҙ ҙа үҙебеҙсә, ауылса. Өҫтәүенә, каникул ет ә, атайым-әсәйем ауылдарға фольклор экспедиция ына сығып китә, мине ауылдағы ҡартатайым, ҡартәсәйем ҡарамағына оҙаталар. Көҙ, уҡыу еткәнсе. Башҡортлоҡ шулай енде. Тәбиғәткә яҡынлығым да мине рәссам иткәндер, бәлки.

– Улай а, еҙ Өфөнән?

– Эйе.

– Ҡайтып йөрөй өгөҙҙөр?

– Ҡайта торғайным. Хәҙер атай-әсәй юҡ инде... Автокатастрофаға юлығып, бер төптән киттеләр. Ул саҡта сәнғәт институтының уңғы курсында уҡый инем. Күп кенә картиналар яҙырға ла өлгөргәйнем. Улар Мәскәү рәссамдарын ҡыҙыҡындырҙы. Саҡырғастары, оҙаҡ баш ватмай киттем дә барҙым. Хәҙер ҡайтҡылайым, тик ижади командировкаларға, кемгәлер төбәп түгел. Ҡартатай менән ҡартәсәй ҙә күптән гүр эйәләре.

– Улай икән... Ә ҡайҙа эшләй егеҙ?

– Ирекле рәссам. Шулай ҙа башҡалар ише эшкә барып ҡайтыу кәрәклеген иҫәпкә алып, Рәссамдар союзында эшләйем. Бына килеп тә еттек. – Машина башҡаларынан айырылып ҡалҡҡан йорт янында туҡтаны. – Ошонда, ун өсөнсө ҡатта, йәшәйем: торлағымдың бер яғы — оҫтахана, икенсе яғында йоҡо бүлмә е.

– Оҫтаханағыҙ айырым түгелме ни? Ҡатынығыҙ ни тиер?

– Минең сиам бесәйем әм бик күп картиналарым бар. Байлығым – шулар.

Элекке алынған йорт булғанғамы, фатир эсе артыҡ иркен түгел, тар туннелде

---

**Шамтыр – бөхтәлектең етешмәүе, әрпешлек.*

хәтерләткән ярым ҡараңғы ишек төбө залға алып сыға, улаҡай яҡта – аш бүлмә е, ҡаршыла – зал. Уң яҡтағы ишек ябыҡ, уны ы, моғайын, йоҡо бүлмә елер. Кроссовкаларын алған Фәриҙә зал яғына ыңғайлағайны, ҡайҙандыр килеп сыҡҡан ҡоромдай ҡара бесәй уның юлын ҡыйып үтте лә, күҙҙәрен хәтәр ялтлатып, аш бүлмә е яғына шылды.

– Был ниндәй тәрбиә еҙлек, ҡунаҡ тәүге тапҡыр килә, ә ин уны асыулы ҡаршылай ың! – Хужа бесәйен шулай шелтәләп алды ла, төпкө яҡҡа үтеп, төрлө буяҡтар менән тулы ултырғысты бушатҡас, уны ең ырты менән ыпырып, урын тәҡдим итте. – Бына ошонда уңайлап урынлашығыҙ. Мин хәҙер. – Стеналарға ҡатлап өйәгән картиналарын теүәлләп соҡона ла башланы. Ҡунаҡ ҡыҙыҡ ынып фатирҙы байҡаны.

Зал ысынлап та оҫтахананы хәтерләтә: тәҙрә төбөнә, иҙәнгә эреле-ваҡлы, аллыгөллө буяҡ кәнсирҙәре ҡуйылған, бихисап тюбиктар вайран килеп сәсрәп яталар, бил быуарынан ҡырҡылған ыра ауыттарында суҡтары өҫ яҡҡа ҡаратып тығылған иҫәп еҙ-хисап ыҙ бумалалар тырпайған. Стеналарға сәселгән буяҡ тамсылары йондоҙло күк йөҙөн хәтерләтә. Ҡаршы яҡ стенаға мольберт өйәлгән, унда ярты-лаш яҙылған ниндәйҙер картина, картина эргә ендәге тәпәш өҫтәл өҫтөндә төпсөктәр тулған кәнсир ауыты күренә, иҙәнгә тәмәке көлө ибелгән.Тағы фатирға еллә теп тә бөтмәҫлек ыҫ еңгән. Фәриҙә танауын йыйырғайны, уның хәлен аңлаған хужа балконға сыҡҡан ишекте асып ҡуйҙы ла ҡоласын йәйеп мольбертҡа, теге эшенә яҡынланы:

– Был әлегә киндергә буяҡ булып төшә башлаған идея. ыҙма, эскиз... Күккә ашҡан таш йорттар, ҡорос күперҙәр, тимер юлдар, ғөмүмән, дәү тимер-томорҙар ҡоршауы фонында бөгөнгө көндөң арыған, талсыҡҡан кеше е күренә. Беҙ уны ҡайғыртмайбыҙ, уның хаҡында бөтөнләй онотҡанбыҙ. Ҡара, ул бер яҡ ситтә, бахыр ҡиәфәтендә баҫҡан. Беҙҙең төп хыял – киләсәккә, сит галактикаға юл алыу, сәфәр ҡылыу. Күрә еңме, тимер юлдар йы анға ҡарай йүнәлгән, ҡорос күпер ҙә шул яҡҡа ҡарай тартылған. Бынау күп ҡатлы йорттарҙың шәүлә е кешегә яҡынлашып килә. Тиҙҙән кеше лә ошо цивилизация шәүлә е менән бергә буталасаҡ, юҡҡа сығасаҡ. Ике донъяны контрастлыҡ айырып тора: алҡын ҡаяны хәтерләткән йорттар, төрмә рәшәткә е рәүешендә эшләнгән ҡорос күпер, игеҙәяҡ ымаҡ донъяны ҡармаған тимер юлдар әм ыуалырға, юғалырға әҙер көңгөрт кеше шәүлә е. Дөйөм алғанда, авангард стилендәге фәлсәфәүи әйбер. – Эргә ендәге әҙер картиналарҙы берәм-берәм алға ҡуйҙы. – Был — Шүлгән мәмерйә е эргә енән төшөрөлгән Ағиҙел йылға ы, быны ы – Арҡайым. Картина «Тыуған ер аҡсылары» тип атала. Уның мәғәнә е шунда: тәү ҡараштa ғәҙәти тәбиғәт күренеше ымаҡ ҡабул ителгән картинаға иғтибарлап ҡара аң, Арҡайымды мәғрур тауҙар уратып алған. Улар уны сит-ят күҙҙәрҙән, ел-дауылдарҙан аҡлай төҫлө. Ысын аҡсылар, ҡалҡан кеүек баҫҡандар бит улар...

Күпселек әйберҙәр тәбиғәт күренештәренә арналған. Шуларҙы ҡарап хайран ҡалды Фәриҙә. Ябай кеше был матурлыҡты күрмәй үтеп китер ине, ә Тан ыҡ уларҙы тотоп алған да киндергә төшөргән.

– Иҫ китмәле... Тыуған яҡҡа ҡайтып урағандай булдым.

– Ошо картиналарҙың ҡай ыны ы оҡшай? Тик ихлас, йәшермәй әйт.

– Бөтә е лә матур.

– Шул матурҙар ара ынан күңеленә ятҡаны?

– Бынау «Моң оулыҡ» тип аталғаны бигерәк шәп.

Рәссам йәнләнеп китте:

– Насар тәнҡитсемен, ти ең, ә күҙҙәрең осло, иҙгер. Бөтә эштәрем дә үҙем өсөн ҡәҙерле, шулай ҙа ошо картина ысынлап та уңышлы сыҡты. Әле студент саҡта яҙ

көнө кәмәләрҙә аҡмар йылға ы буйлап йөҙҙөк. Ярға сығып, ялға туҡтағайныҡ, яҡындағы ауыл малайҙары беҙҙе уратып алды. Сыр-сыу киләләр, кәмәлә йөрөтөп алып кил әле, тип ялыналар. Уларға ни, ҡыҙыҡ. Араларында ошо малай ҙа бар ине. Башҡаларға эйәреп килгән дә бер яҡ ситкә баҫҡан. Яҡынларға ҡыймай. Эргә енә барҙым да аптырап текәлдем – малайҙың тотош фиғеле моң оулыҡ, күҙҙәрендә ағыш. Шунда уҡ ҡулыма альбом бите, ҡәләм эләктерә алдым. « ине төшөрәйемме?» — тим. Яурындарын йыйыра, миңә барыбер, йәнә е. Эшкә керештем. Юлдаштарым тамаҡ ялғап, бер аҙ ял итеп алдылар ҙа, эңергә ҡәҙәр үтә е байтаҡ, тип ҡабаландыралар. Ә эш яңы башланып ҡына тора. «Егеттәр,– тим,– мин ары йөҙмәйем, ошонда ҡалам. Эҙләгәнемде таптым, шикелле». « ин нимә, арыраҡ ожмахтай тәбиғәт, үкенер ең уңынан». «Хәл иттем. Ҡалам, егеттәр». Ауылға барып, бер әбейгә фатирға төшөп, шул малайҙы өс көн рәсемгә төшөрҙөм. Уның тура ында фатир хужабикә е лә әллә күпме өйләне. Уға моң оуланырға сәбәп бар икән. Шул сәфәрҙә тыуған картина инде ул. Эскиздарын ҡағыҙға төшөрөп алып ҡайтҡас, бында киндерҙә эшләүе артыҡ мәшәҡәт булманы.

Шулай әңгәмәләшеп апаруҡ ултырып ташланылар. Фәриҙә урынынан ҡалҡты:

—Саҡырыуығыҙға рәхмәт, миңә ҡайтырға ваҡыт.

— еҙҙе улай ғына ебәрмәйем. Хәҙер үк кафеға йә берәй ресторанға барабыҙ, шунан уң ғына хушлашырбыҙ.

– Улар ҡалып тор он, әҙер түгелмен.

– Әҙерлек кәрәкмәй ҙә, еҙ былай ҙа сибәр, гүзәл!

– Бара алмайым, зин ар, дөрөҫ аңлағыҙ.

– Улай а, кофе, миндә шәп кофе бар! Рәхим итегеҙ аш бүлмә енә. Тик ундағы тәртип еҙлекте күреп тәнҡитләмәгеҙ, йәме. Берәҙәк тормошо...

– Кофе, улай а. Ҡунаҡ бул аң тыйнаҡ бул, тиҙәр, тәнҡитләмәм.

Аш бүлмә ендәге ултырғысҡа йәйелгән бесәй, уларҙы күргәс, тағы ла иҙәнгә икерҙе лә зал яғына ыпыртты.

– Ят ына. Йәнә көнсөл тоҡомдан.

Өҫтәлгә емеш-еләкле ваза, ҡаплы кәнфит, печенье, ыуытҡыстан май ҡуйылды. Кофе шәп ине. Ләззәтләнеп эсемлек тәмләгән, донъя ы теүәл кешеләй ҡыланған Тан ыҡты йылмайып күҙәтте Фәриҙә. Ул да быны тойҙо шикелле, ауытындағы эсемлекте уртлағас, хәстәрлекле ораны:

— Инеп, күҙлегегеҙҙе алғас уҡ, шуны абайланым: еҙҙә лә моң оулыҡ бар. Ни булды? Бәлки, мин берәй нисек ярҙам итә алырмын?

– Кәрәкмәй. Бына әйберҙәремде төйнәйем дә ҡайтам кире.

– Йомоштарығыҙҙы теүәлләп бөткән егеҙҙер, улай а?

– Бөттө, тип, эш эҙләп килгәйнем бында. Таба алманым. Бөтә урында ла прописка таптыралар.

– Мәскәүгә килеп төпләнеү еңелдән түгел.

– Шулай икән шул.

Тан ыҡ уйланғандай итте:

– Әле генә ҡырҡа вәғәҙә бирә алмайым, шулай ҙа тырышып ҡарармын. Таныш табип бар-барлыҡҡа. Ябай түгел, дауахананың баш табибы. Бәлки, уға педиаторҙар кәрәктер...

– Ҡала алмайым, юллыҡ ҡына аҡсам ҡалды, урынлашҡан хәлдә лә бер ай самаы үҙ иҫәбемә йәшәргә тура киләсәк.

– Уны ы... ваҡ мәсьәлә.

– Ышанып, эш юлламаҡсы ығыҙ, минең турала бер ни ҙә белмәй егеҙ, бәлки, бер аҙғынмындыр.

– Улай а, мин Бармалей! – Йорт хужа ы рәхәтләнеп көлөп ебәрҙе. – еҙ ҙә бит әле пиратҡа эйәреп килеп, уның шикле, сүп-сар тулы фатирында ултыра ығыҙ.

Тағы ла бер нисә көндән ауырлыҡ ыҙ эшкә урынлашты, ятаҡтан, тарыраҡ бул а ла, үҙенә айырым бүлмә алды. Башкөллө мәшәҡәттәргә сумды. Иртәнге алтынан сығып китә лә кис арып-талып ҡайтып инә, инә лә түшәгенә ауа. Өфөнө мегаполис тип атау үтә лә шартлы икән, бындағы шау-шыу, урамдағы, йәмәғәт транспортындағы этке-төрткө бар көсөн ала. Эшкә барып ҡайтыуға ла өс сәғәт самаы ваҡыт кәрәк. Тан ыҡҡа килгәндә, ярҙам итеүенә ылтанып әр еҙләшмәне, шулай ҙа даими уғылып хәлен белешеп торҙо, хатта алыҫ Италияға киткәс тә бер нисә тапҡыр шылтыратырға форсат тапты. Ә инде унан ҡайтып төшөү менән тура дауаханаға барҙы. Кис бергә ял иттеләр, әм... Фәриҙә Тан ыҡтың фатирында ҡуна ҡалды, иртәгә ен әйберҙәрен алып уға күсенде. Был ғәҙәти, шулай булырға тейеш кеүек, ығы-зығы ыҙ башҡарылды. Күсенергә әйберен төйнәгән мәлдә улының фото ына ҡарамаҫҡа тырышты, ул ғына ла түгел, күҙ йәшерергә теләгәндәй, сумаҙанының иң төбөнә йәшерҙе...

Китек тормошо түңәрәкләнде ымаҡ: эргә ендә уны яратҡан, уны хөрмәт иткән ире бар. Ул үҙе лә ҡайтырға ашҡынып ҡына тора. өйөү тигәнең иң әүәл йән әм күңел бөтөнлөгө, яҡынынды үҙ еҙ аңлау, бер-береңде күрергә ынтылыуҙыр, моғайын. Йәшәүҙәренең тәүге көнөнән үк үҙе хаҡында өйләне, Тан ыҡ хаҡында ла белде: Мәскәүгә килгәс, рус ҡыҙына өйләнгән, тик бер йылдан уң бала табыу йортонда ҡатынын да, тыуасаҡ сабыйын да юғалтҡан. Шунан бирле яңғыҙы икән.

Йән яратҡан кешең янында ҡыуыш та ожмахтай, тигәндәй, Фәриҙәгә ярты ын оҫтахана билəгән йорт та үтә яҡын. Бында килгәс торлаҡҡа яңы тәртип, бөхтәлек өҫтәлде. Хәҙер унан тәмәке ыҫы түгел, тәмле аш еҫе аңҡый, ҡот бөркөлә. Тик нимәгә генә тотон а ла, күңеле тыныс түгел нишләтер, йөрәк аҫтын нимәлер әрнетеп ҡыра төҫлө. Сәбәбен үҙе лә аҙағынаса төшөнөп етмәй.

Әле бына төн урта ы ауышҡан, ул рәхәтләнеп йоҡлаған иренең күкрәгенә башын алған да күҙҙәрен шар асып түшәмгә текәлгән. Уйҙары сыуалышлы, йәнендә аңлашылып бөтмәгән хәүеф. Көтмәгәндә аҫҡы ҡатта сабый илауы ишетелде. Мыжып башлаған бала торған айын яр ый бара, яр ый бара. Нишләп уны әүрәтмәйҙәр, әллә, әүрәт әләр ҙә, туҡтар яйы юҡмы?

«Уны өҙлөк өҙ бала илауы эҙәрлекләй, тегендә ҡунаҡханала, ары дауаханала — көндәлек эшендә, әле килеп бында... Нимә хаҡында иҫкәртә уң улар?»

Торҙо, ҡорғандарҙы тартып, тәҙрә ҡаршы ына барып баҫты. Йоҡоноң ни икәнен белмәгән ҡала, ут диңгеҙенә күмелеп, ҡорт күсендәй геүләй, оло юлдан елгән машиналар күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә аҡҡан йылғаны хәтерләтә. Ҡарашын көнсығышҡа йүнәлтте. Унда, алыҫта офоҡ ситендә, башҡаларҙан айырылып, беленер-беленмәҫ йондоҙ тимгелләнә. Шул яҡта бит Ғәзиме, берҙән-бере. Бында килгәс ул уны бер минутҡа ла хәтеренән сығарманы. Ҡунаҡханала, шунан ятаҡта йәшәгәнендә улының теге фоторәсеменән айырылманы, Тан ыҡ менән йәшәй башлағастар ҡәҙерле нәмә дауаханалағы эш өҫтәленә күсте. Алтын ырлы рам эсенән бөҙрәләнгән йомшаҡ сәстәрен туҙҙырып, бәхетле йылмайып баҡҡан улы тормошона йылылыҡ, яҡтылыҡ, йәшәүенә мәғәнә бирә төҫлө. Тан ыҡҡа күр әтмәне уны, күр әткән хәлдә лә бер ни ҙә әйтмәҫ, риза ыҙлығын белдермәҫ ине. Барыбер улы унығ өсөн ят. Ят. Ғәзимен ныҡ ағынды, әммә былай, әлеге мәлдәгеләй үҙәгенең өҙөлгәне юҡ ине әле. Тимәк, шик-шөб әнең нигеҙендә бала ын юҡ ыныуы ята. Әлеге ыҡтау шул быуылған хәсрәтен йырып ебәрҙе.

Сикә ен ҡайнар йәштәре бешерҙе. Ул тауышланмай оҙаҡ иланы. Бөтә булмышы, күңеле инрәй. Күрше бүлмәләге бала ҡай ылай ҙа йәнен телгеләй... «Балам, ғәфү ит, алдында ғәйеплемен, ғәйепле генә түгел — гона лы. Тик нимә эшләй ала инем?.. Мин бит ине билдә еҙлеккә үҙем менән алып китә алманым...»

Ул бини ая ваҡыт таш балбалдай урынында ерәйгәс, шәүләләй ҡыймылдап кире түшәгенә барып ятты ла алҡындан өшөгән бахыр бесәй бала ылай урынында йомарланды.

Иртәнге сәй янында йәшерергә тырыш а ла, Тан ыҡ унының кәйеф еҙлеген күрҙе:

– Берәй хәл булдымы әллә?

– Булманы.

– Улай а, нишләп күҙҙәрең ҡыҙарған?

– Зарар юҡ, бары насар йоҡланым ғына. Үтә ул...

– Иртәгә шәмбе, театрға йә киноға барып әйләнербеҙ, ә? Ял да иткән юҡ.

– Әлләсе, беҙҙең замандағылай кино күр әтәләр микән? Онотола бара бит кинотеатр төшөнсә е.

– Бар әлегә кинотеатрҙар. Тик башлыса унда совет киноларын күр әтәләр әм тамашасылары ла шул осор кешеләре. Ул кинолар бөгөн ысынлап та алтын фонды тәшкил итә.

– Ярай уң.

Кинонан ял итеп түгел, кире енсә, күңеле болоҡ оп ҡайтты. Бында, фатирҙарына «Моң оулыҡ» картина ы ҡуйылған, әле ҡарап ҡайтҡан фильмы Сыңғыҙ Айытматовтың «Аҡ пароход»ы... Беренсе енән моң оу ҡарашлы үҫмер ҡарай, икенсе ендә – тылсымға ышаныусан малайҙың фажиғәле яҙмышы.

Кинонан ҡайтышлай ҙа, фатирҙарына ҡайтып ингәс тә үҙен тарҡау тотто. Бөтөнләй шымтая, йә бирелгән орауҙарға төшөнөп етмәгәндәй аңшайып ҡарай. Түшәккә ятыу менән иренә ыртын ҡуйып аташа-баҫлыға йоҡлап та китте.

...Төшөнә әрем, шайтан таяғы баҫҡан ҙур ялан инде. Ҡара күлдәк кейеп шул яландың үләнен сабып йөрөй. Юнылмаған аплы, йүнләп тапалмаған салғы ы йәнен ура, аҡтыҡҡы көсөн ала. Сабынлыҡ ҡырында сурайған ҡоромдай таш өҫтөнә ҡунаҡлаған ҡара бесәй, йәшел күҙҙәрен баҙлатып, унының ыҙаланыуын күҙәтә. Ул тырыша, эше генә ырамай. Сабылған әремдәр, шайтан таяҡтары – йығылыу менән кире ҡалҡып, оторо ҡотороп үҫә бирәләр. Сүп-сар кәмемәй, киреенсә, арта ғына бара, шуғалырмы ҡый үләне тирбәлгән ялан да киңәйә, ҙурая. Бына йәнасыҡҡа ҡоласын киреп киҙәнгәйне генә, үлән ара ында Ғәзимен күрҙе. Улы, салғынан аҡланырға теләгәндәй, йөҙөн ҡушусланы...

– Аййй!!! – Уяна алмай аҙапланып ҡул ырты менән тирләгән маңлайын, еүеш сикә ен ыпырҙы. Тыңланды. Күршеләгә бала уянып илай икән. Нишләп тымыҙмайҙар уны? Ауыр ҡарашы менән ярым ҡараңғы йоҡо бүлмә ен байҡаны. Бәй, ана мөйөшкә Ғәзиме баҫҡан да туп-тура ҡарап уны күҙәтә. Күҙҙәрен дә йоммай. Йөҙөндә әрнеү, йәбер, ыҙланыу, хәсрәт бер юлы ярылып күренә... Иғтибарлап тексәйҙе. Шул, үҙе. Ғәзиме. Улына ынтылырға итә, булдыра алмай, тотош тәне тымбаҙаған, ҡулдары хәрәкәт еҙ. Күҙҙәрен йомдо ла бар тырышлығын туплап, башын уңға- улға борғосланы, яҙырға теләп ойоған ҡул бармаҡтарын йыбырлатты. Зи ене ысынбарлыҡҡа ҡайтты. Ҡабаттан мөйөшкә ҡараны. Шул арала малайының ыны төн ҡараңғылығында ireп юғалғайны. Тамағы төбөнән саҡырыу өнө ығылды:

– Балам, ин ҡайҙа юғалдың? Кил...

Йоҡонан илергән ире, башта бер нәмә лә аңламағандай, ҡулдары менән тирәяғын әрмәне, шунан унының яурындарынан ҡосаҡланы:

– Кемде саҡырҙың ул? Әллә аташып уяндыңмы?

– Улымды, Ғәзимемде, ағындым... Тәҡәтем ҡалманы...– Фәриҙә улҡылдап иренә ыйынды.

– Мин дә уны иҙенә инем, тик үҙеңдең башлап әйтеренде көттөм. Былай ҙа беҙҙең мөнәсәбәттәр ныҡлы түгел – ирендән законлы айырылмаған ың, малайың

унда. Ҡайтып иҫәп-хисабыңды өҙөп, бында пропискаға торорға ла ваҡыт. Минең дуҫымдың да гел генә баш табип вазифа ында эшләмәҫе билдәле. Барыбер бер ҡасан прописка талап итәсәктәр. ине юғалтыуҙан ҡурҡам, шуға ирендән законлы айырылып, малайыңды бында алып кил әң, бары ы ла яйға алыныр...

— инең былай әйтеренде көтөп йөрөй инем.

— Ҡайтып кил.

— Йә. — Фәриҙә түшәккә ятты ла танауын көслө яурынға терәне.

Наҙ көҫәгән ир шул ыңғайы ыйынып ҡатынын ҡосағына ҡыҫты, аҡалмыйыҡтар башта сәстәрҙе тараны, ары биттәрҙе ҡытыҡланы, шунан түштәрҙе еңелсә ыҙырҙы...

— Әллә миңә лә ҡыҙ табып бирә еңме? Ҡурсаҡтай, иңә генә оҡшаған ҡыҙый?

— ине яратам. Ысынлап яратам. Ошоғаса ундай тойғоно кисергәнем булманы. Белә еңме, ҡасан ғашиҡ булдым? Теге ваҡыт «Моң оулыҡ» картина ы хаҡында өйләгәнеңдә. ине шул яңғыҙ, моң оу малай фиғелеңдә күрҙем...

— Ә мин ине тәү күргәндән алып... — Ҡыҙыша барған Тан ыҡ, иркәләүен дауам итеп, яр ыулы бышылданы. — Тотош, тәнеңдең әр күҙәнәгенә саҡлы яратам...

— Ҡыҙ табып бир, ти еңме? Тик ул Ғәзимем булмаясаҡ бит! Ул беҙҙең икебеҙҙең мөхәббәттән яраласаҡ... Әллә алыҫта булғанға, улымды шул тиклем ағынаммы, әллә икенсе сәбәпме... Белмәйем...

— Бәлки, тәүге ирендән булғанға ҡәҙерлелер? — Шул арала яр ыуы үрелергә өлгөргән ир тәү тапҡыр тупаҫ ораны ла эргә енә салҡан әйләнеп ятты.

— Мине дөрөҫ аңламаның!

— Аңланым, бары ын да аңланым. Иртәгә бара ы ерҙәрем күп, иңә лә эшкә, йоҡлайыҡ...

Ошо кистән уң мөнәсәбәттәренә алҡынлыҡ йүгерҙе, иҙҙермәҫкә тырыш алар ҙа, элеккеләй иғтибарлы, ирәбе ҡал алар ҙа, араларына күҙгә күренмәҫ боҙ шаршау тартылдымы ни, әңгәмәләре лә элеккеләй берегеп бармай, күҙҙәрендә үпкәләү шәүлә е. Иренең, ҡайтып кил, тигән тәкдиме шулай, бары өйләшеү кимәлендә ҡалды, уның тағы ла «улың, бәлки, теге ирендән булғанға ҡәҙерлелер», тип әйткәндәре хәтеренә уйылды, ана шулар уны бәйләп тота, ары нимә бул а ла эшләргә мөмкинселек бирмәй.

Иртән эшкә китер алдынан Тан ыҡ, эскән сынаяғын шылдыра бир ә лә, тороп китергә ашыҡманы:

— Ары былай йәшәргә ярамай, бер-беребеҙҙән бөтөнләй биҙеүебеҙ ихтимал.

Ҡашаяҡ йыуа башлаған Фәриҙә, шөғөлөн ҡуйып, өҫтәл артына килеп ултырҙы ла ынамсыл текәлде:

— Что предлагаешь? — Русса бирелгән ораү ҡоро әм рәсми ишетелде.

— Үткәндә әйткәндәремде тағы ҡабатлайым: әгәр ярат аң, минең менән бергә ҡалырға телә әң, ирендән айырыл. Ғәзимде лә бында алып кил. Уны үҙ улым ымаҡ яратырмын. Бәхетле кеше — ғаиләлә генә бәхетле була ала. Үҙең күреп тораың, йәшәүебеҙ ҙә, бәхетебеҙ ҙә ярты-йорто.

— ин ысынлап әйтә еңме, Тан ыҡ, минең менән, Ғәзим менән бергә йәшәргә теләй еңме?

— Әлбиттә! — Аяғүрә баҫҡан ир шатлыҡтан быуын ыҙланып ҡалған ҡатынын ҡосаҡланы, йөҙөн уның ҡуйы сәстәренә йәшерҙе.

Фәриҙә эшенән ике көнгә ебәреүҙәрен орап ғариза ҡалдырҙы ла ҡойондай өйөрөлөп юлға йыйына башланы: аэропортҡа барып ике тарафҡа ла билеттар алды, тура өйөнә ҡайтып төшә алмаҫы билдәле, «Ағиҙел» ҡунаҡхана ына шылтыратып, урын хәстәрләне. Яурындарын баҫҡан ауыр йөктән арындымы ни, әйтер ең, ул ошоға тиклем сисә алмаған ауыр мәсьәләне бер ултырыуҙа хәл итте.

4

Башҡа юлаусыларға эйәреп аэропорт майҙансығына сыҡҡан Фәриҙә ҡалаға йүнәлеүсе автобусҡа инеп ултырҙы ла, телефонын сығарып, Кәримдең номерын йыйҙы.

Теге оста ҡырыҫ тауыш ишетелде:

— Алло!

— Кәрим...привет! — Ары ни әйтергә белмәй, хистәренә быуылып туҡтап ҡалды.

— аумы! — Теге оста оҙайлы пауза.

— Хәлдәрең нисек?

— После всего этого спрашиваешь? Иҫ китмәле шәп!

— Безгә өйләшергә ине.

— Кәрәкме икән?

«Хәҙер трубканы ташлаясаҡ!»

— Беҙгә аңлашырға кәрәк.

— Нимә тура ында?

— Бөтә ен дә телефон аша өйләп булмай. «Ағиҙел» ҡунаҡхана ына кил әле. Үтенәм!..

— Нейтральная зона, значит? Аңлашылды... Бөгөн бара алмайым.

— Улай а, иртәгә, ҡунаҡхананың ресторанына... — Ни тиклем генә ағын а ла, Ғәзимде лә алып кил, тип әйтергә баҙнат итмәне, ул барҙа өйләшә-аңлаша алмаясаҡтар. — Килер еңме?

Яуап урынына ҡыҫҡа гудоктар ишетелде.

Билдәләнгән ваҡытҡа ресторанға инде лә ҡабаланып ҡарашын тотош залдан йүгертте. Күңелен ҡурҡыу ип ендерә: «Кил ә генә ярар ине! Әгәр килмә ә?..» Түрҙе биләп тыныс ҡына гәпләшкән өс-дүрт ирҙе иҫәпкә алмағанда, ресторан буш тиерлек. Төп яҡтағы өҫтәл артында Кәримде күрҙе. Күрҙе лә бер аҙға ғына юғала биреп ҡалды: ирек еҙҙән сәстәрен төҙәтештерҙе, күлдәк итәген тарткыланы.

Кәрим килешле ҡара костюмда, галстукта, аҡ күлдәк кейеп алған, рәсми килешеү төҙөргә килгән парламентер тиер ең. Ул да уны абайланы, мәгәр таш ындай ҡатып ултырыуында булды.

Фәриҙә ышаныс ыҙ аҙымдар менән яҡынланы ла көсәнеп йылмайҙы:

— аумы? ин әр ваҡыттағыса пунктуаль.

— Мин шулай тәрбиәләнгәнмен. — Теге е урынынан ҡалҡып ултырырға ярҙамлашты.

Оҙайлы пауза. Алдан әҙерләп килгән үҙҙәр онотолдо. Кәримгә ирпелде. Ә ул бойондороҡ оҙ ҡиәфәттә ҡайҡайған, ҡарашы әллә ҡайҙа, билдә еҙлеккә төбәлгән. Фырт, эре ҡылан а ла, өҫ-башында, бит-йөҙөндә ҡатын-ҡыҙ хәстәре етмәгән әрпешлек иҙелә: костюм кейерҙән алда щеткаланмаған, аҡ күлдәктең дә яға сите керләнгән, гел ыҫпай йөрөткән сәстәре лә өҙрәйгән, тулы биттәре еңеп, тартылып киткән. Ир-егеткә әр ваҡыт ҡатын-ҡыҙ бағыуы кәрәк шул, шулай булма а, ҡарау етмәгән мал ише мөҙөрөп баралар. Ни айәт, ни өсөн бында килгәнлеген иҫенә төшөрөп, беренсе ораuын бирҙе:

— Ғәзим нисек?

Кәрим, өжүмгә йыйынғандай, кәүҙә ен алға ташлап, күҙҙәрен сетерәйтте:

— Әсәй кеше малайын ҡайғыртамы? Иҫ китмәле драматизм!

— Ирония урын ыҙ, үтенәм, тыныс ҡына өйләшәйек. — Битәрләүҙән, этеп алып барған уҫал-саялыҡтан аҡланырға теләп, артҡа тартылғандай итте.

— Мин тыныс. Үтә лә тыныс. еҙҙе иғтибар менән тыңлайым!

— Ғәзим нисек, тинем?

— Арыу йәшәйме, тип орамаҡсы ыңмы? Сағыштырмаса... Баланы әйбәт итеп

тәрбиәләүҙең төп юлы – уны иң элек бәхетле итеү. Бәхет төшөнсә енең тәүшарты – тулы ғаилә. Ә беҙҙең ғаиләне күреп тора ың.

– ин философ.

– Ни хәл итә ең, тормош мәжбүр итә. Ҡоро өҫтәл артында ултырыу килешмәй бит, нимә ашайбыҙ?

– Миңә ут ҡына кәрәк.

– Ә минең араҡы эскем килә. Тик руль артындамын, ҡыҙғаныс. Әйҙә, инеңсә бул ын.

Официант килтергән утты уртлаған Фәриҙә, тыныс ҡалырға тырышып, дауам итте:

– Кәрим, мин ине бер ҡасан да насар кешегә иҫәпләмәнем, үҙем дә тоғро ҡатын булырға тырыштым... Тик эш унда түгел... Беҙгә айырылырға кәрәк... Мин шуның өсөн ҡайттым... Айырылырға рөхсәт бир...

– уң, киткәндә рөхсәт ораманың түгелме? Юғалғаныңа ла нисә ай. Шулай йәшәү иңә оҡшамаймы ни?

— Официаль айырылышайыҡ. Миңә бер ни ҙә кәрәкмәй... Мөлкәтеңә лә дәғүә итмәйем. Айырылырға рөхсәт ит, йәнә Ғәзимемде бир...

– Ғәзим? Ул иңә кем ул?

– Уҫаллашма!

– Ҡасып сығып китеп йөрө-йөрө лә ҡайтып улыңды таптыр, имеш. Ошоға тиклем униң нисек йәшәүе менән, исма ам, бер тапҡыр бул а ла ҡыҙыҡ ындыңмы?

– Ҡай ы әсә бала ын онота икән?!

– Әсә...Йәнең юҡ инең!

– Улай тимә, Кәрим...

Ары ялғап китә алмай үҙ еҙ шымтайҙылар. Кәрим тәмәке тоҡандырып, тәрән урып тартырға кереште.

– Тартмай инең бит. Килешмәй.

– Тартам да, иҫергәнсе араҡы ла эсә алам. Өйрәндем.

– ин бит улың өсөн яуаплы, бөтә яҡтан да уға өлгө булырға тейеш ең.

– Белә ең кил ә, ата-әсә булараҡ, беҙ икебеҙ ҙә яуаплы униң алдында!

– Аңлайым...

– Их, нимә аңлай ың ин! – Ҡул ырты ауаны ҡыйҙы, яртылаш тартылған тәмәке көл ауытына тызып үндерелде. Тағы ауыр тынлыҡ.

– Үткәндәрҙе кире ҡайтарыу мөмкин түгел, шулай булғас, бер-беребеҙҙе ғазапламай, бары ын да тыныс ҡына хәл итәйек.

Кәрим кәүҙә ен турайтты:

– Ғәфү ит, айырылырға рөхсәт бирә алмайым. Әгәр бик телә əң, быны үҙең бер яҡлы ғына хәл итә ала ың. Ғәзимгә лә өмөт итмә, ул — минең улым!

– Бала иң тәүҙә әсәйҙеке. Ҡай ы судҡа мөрәжәғәт ит әм дә, мине яҡлаясаҡтар!

– Әҙәпле ҡылан аң да, судлашырға ла яйың бармы ни әле? Браво! Әйҙә, судлаш. Тик шуны хәтереңдән сығарма: бөгөн ин кем? Ҡайҙа эшләй ең, йәшәй ең? Прописка ыҙ йүнле эш, йылы ҡыйыҡ таба алғанмын ти еңме, көн итә еңдер подвалда, осраҡлы берәй бомж йә берәҙәк менән.

– Улай мыҫҡылларға хаҡың юҡ!

– Ярай, мыҫҡылламайым, ғәфү ит... Ғәзимде бирмәйем. Ул тейешле шарттарҙа үҫергә тейеш. Только я могу обеспечить его будущее! Бары мин генә! Эшкә китергә ваҡыт, хуш! – Кинәт ҡалҡҡан Кәрим ултырғысын ҡабаланып төҙәтте лә сығыу яғына йүнәлде.

Көтөлмәгән хәлдән баҙап ҡалған Фәриҙә, залдағыларҙы аптыратып, өҙәләнеп ҡысҡырҙы:

– Ғәзим ҡайҙа, Кәрим? Ғәзимем ҡайҙа? Мин бит уға күстәнәстәр, уйынсыҡтар

алып ҡайттым!..

– Машинала! – Ябылған ишектә уңғы үҙҙәр ҡыҫылып ҡалды.

– Нишләп бығаса әйтмәнең! Тороп тор, бер минутҡа, зин ар... – Эләгә-йығыла алға ташланды.

Машина кинәт ҡуҙғалып китте лә урамдан елгән башҡа машиналар ағымына барып ҡушылды. Шул арала алғы ултырғыста уға ынтылған ҡәҙерле ынды, йәнә тәҙрә быяла ына терәлгән биттәрҙе, бәләкәс устарҙы абайлап өлгөрҙө.

5

Ҡайтҡас, ире унынң нисек йөрөп ҡайтыуы менән ҡыҙыҡ ынманы. Былай ҙа ҡанаттары ҡайырылған ҡоштай йөрөгәнен күргәнгә, яра ына тоҙ алырға теләмәгәндер.

Элеккеләй йәшәп алып киттеләр. Иртә таң менән ҡабаланып иртәнге сәйҙе эсәләр ҙә ике е ике яҡҡа эшкә ашығалар. Кис ҡайтышлай берәй кафеға уғылып киске ашты ашайҙар, шунан фатирҙарына ҡайталар. Бында ла Тан ыҡты яҙа башлаған картина ы көтә. Фәриҙә и ә ҡатын-ҡыҙ мәшәҡәттәре менән мәшғүл: йыуа, үтекләй, йыйыштыра, аш бүлмә ендә ауыт- аба шылтырата. Ҡай ы ваҡыт ҡулына китап алып уҡырға керешеп китә йә ҡыҙыҡ ынып зал урта ына ҡуйылған мольбертҡа төбәлә.

Ирен эш өҫтөндә күҙәтеү мауыҡтырғыс: йөҙө ил амлы кисерештәрҙән яҡтырған, күҙҙәре осҡонланған, яҫы ҡаштары бирелгән ораауына яуап көткәндәй берсә төйөлөп, берсә яҙылып китәләр. Ул бумала ын ҡуя ла, ситкәрәк китеп, ижадына ба а биргәндәй, картина ын ынамсыл байҡай, унан ҡал а уны янына саҡырып бәхәсләшкәндәй аңлатырға тотона. Шулай ҙа күп ваҡыт Фәриҙә иғтибарҙан ситтә ҡала. Ә унынң уйҙары ос оҙ-ҡырый ыҙ.

Бына йәне теләгән кешене осратты. Ул уны ярата. Ныҡ ярата. Шуға көндөҙ, эш мәлендә, юҡтан сәбәп табып, шылтыратып ала. Теге остан яғымлы үҙ ишет ә, күңеле ҡанатланып, эше ырап киткәндәй, борсоулы тауышын ишет ә, кәйефе китә. Яратҡан ҡатынға өйөү- өйөлөүҙән башҡа тағы ни кәрәк? Нишләп уң ул сағында йәне тыныс түгел, йөрәген ҡара бесәй тырнай? Үткәндә китап биттәрен аҡтарғанда «өйҙә бәхетле кеше генә үҙен башҡа урында ла бәхетле итеп тоя» тигән юлдарҙы уҡығайны. Унынса, был аҙ. Бәхет өсөн тағы ла яратҡан кешенден яуап тойғолары ла кәрәктер. Ире уны ярата ла, яратмай ҙа ымаҡ. Ижадҡа мөкиббән кешенең йөрәгендә башҡа хистәргә урын ҡаламы икән? Ана бит, унынң эргәлә генә икәнлеген дә абайламай, ғашиҡ кеше енә ҡарағандай, йән еҙ киндергә төбәлгән. Үҙе ижад иткән таш ын Галатеяға йән өрөргә талпынған Кипр рәссамы Пигмалион тиер ең!.. Тағы бәхет өсөн өйөүендең емеш биреүе лә кәрәктер. Ә мөхәббәт емеше – бала. Уларҙың балалары юҡ. Булмаҫтыр ҙа... Әле бына ярты йыл сама ы бергә йәшәйҙәр — Фәриҙә үҙендә үҙгәреш иҙмәй. Был хаҡта теге саҡ бер тапҡыр тоҡанып киткәндән аҙаҡ Тан ыҡ та үҙ ҡуҙғатып бармай. Бәлки, уға бала кәрәкмәйҙер ҙә. Ул бит Өфөнән йөрөп ҡайтҡас ошоғаса эшендә аҡлаған Ғәзименең фото үрәтен алып ҡайтып өҫтәлгә ҡуйҙы. Тан ыҡ уға бер тапҡыр ирпелеп ҡарап, кем ул, ти әсе! Хәҙер шул фото уларҙың араларын айырғандай, сик буйындағы иҫкәртеү бағана ылай, өҫтәлдең ҡап урта ында тора...

Ярты төн ауышҡас, түбәнге ҡаттағы илау тауышына иҫкәнеп уянып китте лә, тороп ултырып, ҡулдары менән ҡолаҡтарын томаланы. Файҙа ыҙ. Тамаҡ төбөн ярып сыҡҡан ыҡтау аман да асыҡ ишетелә. Фәриҙә ҡурҡа-ҡурҡа уң яҡтағы мөйөшкә төбәлде әм ҡатты ла ҡалды. Унда йөҙҙәрен ҡушуслап тағы Ғәзиме ыҡтай ҙа ба а. Төшө менән өнө буталыуымы унынң, әллә аҡылдан шашыуымы? Улы тағы килгән, был юлы уны айырым-асыҡ төҫмөрләй, шәүлә ен күрә, тауышына ҡәҙәр ишетә...

– Балам, үтенәм, зин ар, илама!.. Тан ыҡ, утты ҡабыҙ әле!

Бүлмә эсе яҡтырҙы. Мөйөштә бесәй ултыра ине. Ул тағы ла бер тапҡыр күҙҙәрен уҫал баҙлатты ла сығып ыҙҙы.

– Әллә нишләп аташып уяндымсы... Тағы бынау бала нисәнсе көн тыммай.

Бүлмә ишеген япҡан Тан ыҡ эргә енә килеп ултырҙы:

–Ул өләсә е ҡарамағына ҡалдырылған ташландыҡ; күкрәк өтө таптырамы, әллә әсә ен ағынамы, белмәҫ ең. Кисә шул хаҡта күрше апай әсенеп өйләп торҙо.

– Нисек әсә е ташлаған, йәлләмәйенсәме? Ул бит – яңы тыуған сабый?

– Уларҙың бәләкәйе-ҙуры булмай. Улар бары ы ла бала...

– Нимә? – Яуапты бөтә тәрәнлегендә төшөн ә лә, икенсерәкте ишетергә теләгән Фәриҙә күҙҙәрен ҙур асып шаңҡып текәлде лә кинәт йөҙтүбән ҡапланды. Ире уны йыуатманы, орау билдә ендәй бөгөләп тынып ҡалды.

Иртәнге сәй мәлендә өҙә-йыртa өйләшеп алдылар:

– Санкт-Петербургтағы танышымдың күргәҙмә е асыла бөгөн, барып килергә ине шунда. Иртәгә кис ҡайтырмын.

– Хәйерле юл, матурлап йөрөп, ял итеп ҡайт...

– Бәлки, бергәләп...

– Юҡ- юҡ, минең бит эшем бар, былай ҙа үткәндә Өфөгә орап киттем. Ҡабат-ҡабат уңай ыҙ...

– Үҙең ҡара... Бәлки, оҙата барыр ың?

– Башта юлға әҙерләнәйек, шунан дауаханаға уғылып иҫкәртербеҙ ҙә...

Аэропортҡа бер сәғәт алдан килделәр ҙә, көтөү залына үтеп, ултырғыстарҙың бере енә суҡайҙылар.

– Фәриҙә, төкөр донъя ына, ултырайыҡ та китәйек бергә...

– Ярамай, әйттем бит, бында ҡалам...

– Беҙ инең менән хушлашабыҙ төҫлө...

– Улай тимә...

Уңғансы рейсҡа саҡырҙылар. Ишек ауыҙында туҡталдылар.

– Ошонда хушлашайыҡ, Тан ыҡ...

Ир уны ҡосағына алды ла ҡайнар бышылданы:

– Мин ине яратам, Фәриҙәм!

– Мин дә...

Быяла ишек ябылды. Ике е ике донъяла тороп ҡалдылар ымаҡ...

Самолет яй ғына урынынан ҡуҙғалды ла, тиҙлеген арттыра барып, юғарыға күтәрелде, шунан бәләкәйләнгәндән-бәләкәйләнә барып асманда* иреп юғалды. Әйтер ең, күҙҙе ҡамаштырырлыҡ төп өҙ яҙғы күктә дәү самолет, уның эсендәге бихисап юлаусылар булмаған да. Юғарыла зәңгәр сатыр ҙа өйкөмләнеп йөҙгән аҡ болоттар ғына бар...

Аэропорттан сығып автобус туҡталышына йүнәлгәйне генә, кеҫә телефоны шылтыраны. Фәриҙә үҙ алдына йылмайып ҡуйҙы: «Күккә яңы күтәрелде, ағынырға ла өлгөргән...»

Трубкала Ғәзимдең илау тауышы ишетелде:

– Ҡасан ҡайта ың, әсәй, атайым көн айын иртәгә ҡайта, ти, ин аман да юҡың...

– Балам, бәпесем, ин?.. – Көтөлмәгән хәлдән ары ни әйтергә лә белмәне. – Атайыңа трубканы бир әле?.. Кәрим, ни эшләүең был?

Иренең ғәйепле тауышы ишетелде:

– Ҡай ылай итәйем... Ошоғаса онотоп ҡалдырған беретыңды еҫкәп йоҡлай ине, үткәндә ине күргәс, тынғылыҡ бөттө...

– Номерымды ҡайҙан таптың?

---

**Асман – күк йөҙө, күк.*

— уңғы тапҡыр шылтыратыуыңды аҡлағайным, Ғәзим, шылтырат әсәйгә, тип ...

Мейе ен йәшен тиҙлегендәге уй ярҙы:

«Тимәк, улы ла теге бала ише төндәрен илай... Әгәр бөгөн ҡайтма а, башҡаса ис ҡасан ҡайта алмаясаҡ... Ул Ғәзим еҙ аҡылдан яҙасаҡ...Нишләргә, нишләргә?..»

— Тәҡәтем ҡалманы, әгәр ҡабул ит әгеҙ — ҡайтам... Бөгөн поезға ултырам...

Трубкала яңынан илау ишетелде:

— Ҡайт, әсәй, беҙ ине ағындыҡ... Ҡайт!..

6

Йоҡонан уң ғына уянған Фәриҙә, урынынан ҡабаланмай ғына ҡалҡып, күҙҙәрен ыуа-ыуа, тәҙрә аша поезд артынан сапҡан сауҡалыҡтарҙы, бил быуарынан яҙғы ыуға батып ап- ары бөрөләрен бүрттергән талдарҙы, яңы ғына ҡарҙан әрселгән тәпәш ҡалҡыулыҡтарҙы берауыҡ күҙәтте лә яурыны аша таҫтамал алып килеп ингән Гөлбаныуҙы сәләмләне:

— Хәйерле иртә!

— Хәйерле иртә, балаҡайым, уяндыңмы? — Әллә ҡасан уҡ юл төйөнсөктәрен урынлаштырып ҡуйған ҡарсыҡ, еүеш йөҙөн таҫтамал менән ҡорота-ҡорота, эркет гөбө өләй кәүҙә ен урынына ялпаштырҙы. — Үҙебеҙҙең ерҙәргә яҡынлашабыҙ бит, шуға алдан әҙерләнеүең хәйерле.

— Иртәрәк йыйынған ың түгелме, инәй, киске ен генә Өфөгә етәбеҙ.

Ҡарсыҡ бирешергә теләмәне:

— Көн тыуҙы инде күптән, таң менән кис — күҙ асып йомған ара. Ә бына аҙыҡтүлекте, аҙым айын кәрәк башҡа ын ҡул аҫтында ҡалдырҙым, хәҙер тәғәмләнеп алырбыҙ, бабайың сәй хәстәрләп ҡайнар ыу артынан китте.

— Сәйҙе бында, купеға, килтерәләр ул, инәй.

— Уларҙың аҡсаға атылған ҡаралай сәйенең ни йәме лә, ни тәме. Бисмилла ыҙ, тә әрәт еҙ бешерелгән аҙыҡтан бәрәкәт ҡаса. Сәйҙе вагондың бер башынан икенсе енә еткергәнсе ыуынып та бөтә, ә ул ауыҙҙы ғына түгел, йәнде лә ҡайнарландыр ын! Тегендә Мәскәүҙәге килен өҫтәл тултырып әллә нимәләр бешереп-төшөрөп ташлай, иллә ашҡаҙанға йоҡмай гурыт ризығы, әйләнгәнсе-тулғанғансы асыҡтыра ла ҡуя. Өйҙә ни, Алаҡайҙың ҡуйы өтө алынған сәйҙе емереп ебәр әң, йоғомо-ҡеүәте, иңә әйтәйем, көнө буйына етә.

Уңғансы ҡулына термос тотҡан Фәтхи бабай күренде. Ул да алпыш ҡаштарын ирәбе яҙылдырып ихлас лауылданы:

— Ҡыҙым, нисек йоҡланың?

— Арыу, олатай.

— Йәш кешегә арыуҙыр ҙа, тик мин генә йоҡоноң рәт-сүрәтен тойманым. Өйҙәге ҡаҙ мамығынан я алған күпмәне ҡайҙан ала ың! — үҙгә әүәҫ Гөлбаныуҙың ҡыҫылып ултырған көнө.

— Түшәнер-яҫтанырыңды юлға артмаҡлап сыҡ, тинем түгелме, тыңламаның. — Фәтхи бабай, шуҡ йылмайып, мыйыҡ остарын семетте.

— Көзекләргә алай ҙа мин бармын, юғи ә кемгә бәйләнер инең. — Ундай шаяртыуҙарға күнеккән ҡарсыҡ әйтелгәндәрҙе хаялы* кисерҙе лә, сымыры ҡыланып, табын әҙерләргә керешеп китте, шул арала кире ҡаҡҡы ыҙ күр әтмә ен бирергә лә өлгөрҙө:

— Ҡыҙым, бар, битеңде сай ҙа Хоҙай ебәргәнгә етешербеҙ.

Фәтхи әбейенең эргә енән урын алды ла йыйырсыҡтар сыбарлаған маңлайын ҡул ырты менән ыпырҙы:

— Ҡарсыҡ, ин йылы әндерәлә йоҡлай алманым, ти ең, ҡырҡ икенсе йылдың

ноябрь айында беҙҙе тауар вагондарына тейәп Сталинградҡа оҙаттылар. Ятып түгел, ултырып өшөнөрлөк, електәрҙе зымбырлатҡан алҡын; иҙәнгә алам йәйгәндәр, тишек-тошоҡтарҙан ел үтәнән-үтә уға, өҫтәүенә йүнләп ашарға бирмәйҙәр, фашист самолеттары ҡара таңдан өҫкә бомбалар ырғыта. Составты туҡтатыу тура ында уйлап та ҡараусы юҡ, ундай күр әтмә бирергә бере енең дә башы икәү түгел, Сталиндың «Бер аҙым да сигенмәҫкә!» тигән 227-се бойороғон үтәргә кәрәк. Әйткәндәй, ул аҙағынаса уйланып етмәгән бойороҡ бик күп аҫыл егеттәрҙе харап итте. Бына беҙҙең рота командиры арыҫлан йөрәкле ине, шуны ҡурҡаҡлыҡта ғәйепләп хәрби трибуналға бирҙеләр. Унын ҡа арман яугир икәнен белә тороп, бере е яҡлап сыҡ асы!? Бына ҡай ылай аяу ыҙ ине заманалар... — Бабайҙың төҫ өҙ күҙҙәре бер аҙға уйсанландылар. — Тимер юлға бомба төш ә, тиҙ арала төҙәтәләр ҙә, ары ҡуҙғалабыҙ. Көнө бөтмә ә, үлмәй икән кеше, шулайтып, туп-тура фронтҡа барып индек...

Был тарихты күп тапҡыр ишеткәнгәлер, Гөлбаныу ҡылъяйманы ла, ҡартын ҡабаландырҙы:

— Хәбәр бутҡа ы бешергәнсе, бар, сығып тор, белек еҙ, ҡыҙымдың кейенә алмай аҙапланғанын күрә ең.

Теге е тыңлаулы бала ише ишек артында юғалғас, ҡарты башлағанды дауам итте ҡарсыҡ:

— Ҡуй инде, күрҙе олатайың, күрҙе нужаны. Йәш саҡта уң, ҡай ылайыраҡ ут егет ине! Знамы бә леүән ине: ул буй- ын ти еңме, ул төҫ-баш ти еңме, ул егәрлелек ти еңме — ауылдың бар ҡыҙҙары уға ғашиҡ, теге айыҫҡан Бибиғәйшә бигерәк тә. Бөгөн дә бит уны осрат а, күҙҙәрен тупайтып ҡарай ымаҡ. Әллә көнләгәнгә шулай тойоламы икән, ҡыҙым, ә? — Яулыҡ сите менән ауыҙын ҡаплап кеткелдәне. — Шул мираууай егеттең күҙе миңә төштө бит, остаңлаҡ Бибиғәйшәгә түгел. Бына ғәжәп! Шул хәлде аңлатып ҡара, ғишыҡ-мишыҡ тигәне Алланың әшкәртеүелер, моғайын, йән тартыуылыр, яҙмыш бүләгелер. өйөшөп туя алмай йөрөгәнебеҙҙә уғыш сыҡты. Өйләнеп кит, тип инәл әм дә, тыңламаны: шә ит була ҡал ам, тол ҡалмаҫ ың, имен-аман ҡайт ам, никахлашырға өлгөрөрбөҙ, тине. Ҡайтып төштө был ҡырҡ дүртенсе йылдың көҙөндә өйәк тә тире, иңә әйтәйем, йәҙрә үпкә ен үтәләй тишеп үткән, ҡан төкөрә лә ҡан ҡоҫа. “Ирегеҙ фронтта хәбәр еҙ юғалды” тип ҡара ҡағыҙ алған йылы әсәйем дә ҡар аҫтында ҡышлаған ашлыҡтан бешерелгән икмәкте ашап яҡты донъя менән хушлашты, ә мин, йәш булғанғалыр, бирешмәй тере ҡалып яңғыҙым көн итә инем. Ҡайтып баш-күҙ алышҡас, яусы ебәреп тормай, ҡәйнә була ы кешем үҙе килеп өйләшеп-килеште лә йоманан уң бата* уҡыттылар ҙа ҡушылдыҡ инде. Ҡушылдыҡ тиеүен дә ташҡа үлсәйем, арыҡ арҡаларҙы терәшеп көңгөр-ҡаңғыр өйләшеп таң аттырҙыҡ. Ҡайны йортона алып барырлыҡ бирнә-таҫтарым да юҡ ине хатта. Шул хәлдә лә үтә бәхетле инек.

Үпкә сиренә бит иң әүәл ҡымыҙ кәрәк, ә уны ҡайҙан тапмаҡ, бөтә ат-бейә фронтҡа оҙатылған, ҡалғандары ла көнө-төнө колхоз эшендә. Кәзә өтө эсереп дауаланыҡ олатайынды. Нығынды, шунан колхоз эшенә сығып китте. уғыш бөткәс, умартасылыҡты башлап ебәргәйне районда, пинсейәгә сыҡҡансы шунда йөрөнө. Мәскәү хәтле Мәскәүгә күргәҙмәгә саҡырып, алтын миҙал тағып ҡайтарҙылар. Шулай эш өйәр кеше олатайың, ау ғына була күр ен. Хәҙер Хоҙай Тәғәләнән, әхирәткә икебеҙҙе бер төптән алып кит, тип бер генә нимәне орайым. Тормошҡа килгәндә, Аллаға шөкөр, донъябыҙ, мал-тыуарыбыҙ бар, бер улыбыҙ Мәскәүҙә, ҙур уҡыуҙы бөтөрөп шунда ҡалды, өлкәне ауылда уҡытыусы, беҙҙе ыртыбыҙҙан ҡарап, хужалығыбыҙҙы бөтәйтә-хәстәрләй. Киленебеҙ ҙә медпунктта

**Хаялы — әҙәпле.*
**Бата — ата-әсәнән алынған фатиха.*

филшер, сырхап кит әк, йүгерә алып килеп етә.

Табын артында Фәриҙә Гөлбаныу менән Фәтхи бабайға ҡарап уларҙың бер-бере енә булған йылы, наҙлы мөнәсәбәттәренә оҡланып та, бер аҙ көнләшә биреп тә ултырҙы. Әле генә Гөлбаныу инә е мөхәббәт хаҡында ҡай ылай ҙа тәрән мәғәнәле үҙ әйтте: « өйөү ул – яҙмыш бүләге». Ә бала? Йөрәкте ярып сыҡҡан бала йәнендең ярты ылыр. Уға булған өйөү башҡа бөтә тойғоларҙан да көслөрәк, бөйөгөрәк... Юҡҡамы ни яҙмыш бүләгенән ваз кисеп, бала ы хаҡына яратмаған иренә ҡайтып бара. Уны, елбәҙәк күбәләкте, өйҙә нисегерәк ҡабул итерҙәр? Ғәзиме муйынына килеп аҫылыныр, ебәктәй йомшаҡ сәстәре менән биттәрен ҡытыҡлар. Кәрим? Ире ҡабул итерме, хыянатты кисерә алырмы? Ғәфү итер, сөнки ире уны ярата, быны Фәриҙә яҡшы белә. Ары нисек йәшәрҙәр?

Ҡарашы өҫкө әндерәгә күсерелгән ситлеккә төштө. Ҡош әллә йоҡом орай, әллә бойоға, әллә битарафлығына ғарҡ булып күҙҙәрен йомған да ептәргә беркетелгән кетәгендә бәүелә. Ары унын көн итеүе лә ошо ҡоштоҡона оҡшап ҡаласаҡ. Затлы ситлеккә бикләнгән тормош...

Өн өҙ кисерештәрҙе үҙенсә аңлаған Гөлбаныу, алдындағы шәшкеләге сәйен емереп ҡуйғас, үҙ ҡатты:

– Ҡыҙым, төпсөнә был, тип уйлама берүк, орайым әле: еҙ ятажлы йортта көн итә егеҙме ул?

– Эйе.

– Бәс, әләйгәс ҡош-ҡорт та юҡтыр әле өйөгөҙҙә?

– Иҫендән сығарҙыңдамы ни, ҡарсыҡ, ҡыҙым, фатирҙа бер өйөр итеп күркә аҫырайбыҙ, тигәйне лә кисә.

Фәриҙә йор үҙле бабайҙың мәрәкәләүенә пырх итеп көлөп ебәрҙе. Гөлбаныу ҡарсыҡ үпкәләүен белдерҙе:

– Ай ошоно, кисә әйтелгән хәбәрҙе бөгөн оноторға мине армаҡ ти еңме әллә? Таш йортта тереклек аҫырап булмағанын беләм мин.

– Өйөбөҙҙә ҙур аквариум бар. – Фәриҙә, көлөп ебәреүенә үкенгәндәй, әйтә алды.

– Башҡа йән эйә е юҡ, тимәк? Әйтерем шул, ҡыҙым: ал ин ошо ҡошто. Бүләкте бүләк итмә әләр ҙә – ҡабул ит. Ауылда ни ҡылырбыҙ унын менән? Зарыҡҡан ҡошҡа ҡарап бошаланғансы, үҙ ҡош-ҡортоңдо бағып ҡыуаныуың артыҡ.

– Бына быны ын әйбәт әйттең, ҡарсыҡ, ситлеккә бикләнгән ҡошто тотоп бөтә ауылды ҡаратып, хайран итеп ҡайтып инсәле. Ҡала ерендә генә ул быяла ауытта балыҡ, ситлектә ҡош аҫрау күнегелгән күренеш.

Фәриҙә аптырабыраҡ ҡалды:

– Әлләсе, уйламағанда... Килешер микән?

– Бик тә килешер. Бабайың да, мин дә ысын күңелдән бүләк итәбеҙ. Ошолай бергәләп килеүебеҙҙең иҫтәлеге итеп ҡабул ит...

– Затлы тигәйнегеҙ бит, ундай ҡиммәтле нәмәне ҡабул итә алмайым, уңай ыҙ.

– Шә әр халҡы өсөн затлы, беҙҙең сама бизмәнендә бер йүнле шешәк* ҡаҙға ла торош оҙ. Хәл иттек, ала ың, ҡыҙым.

Өфө вокзалына етер-етмәҫтән, күршеләрен ғәжәпләндереп, Фәриҙә йыйынырға кереште, үҙе аҡланғандай аңлатты:

– Ҡайтҡас та ашығыс бара ы ерем бар. Әйберҙәрҙе өйҙә ҡалдырам да.

Ысынында и ә алсаҡ, татыу күршеләренең күҙенә артыҡ салынмай ғына китергә ине иҫәбе. Ул вокзалда ҡаршылауға иҫәп тотмай. Килгән хәлдә лә, ире ҡосағына алмаҫ: алҡын өйләшеү, рыя мөғәмәлә. Ҡасҡалаҡҡа лайыҡ мөнәсәбәт. Ошоларҙы күршеләре күреп ҡал а ни уйлар?

Гөлбаныу ҡарсыҡ ысынлап хафаға ҡалды:

– Китсе, ҡыҙым, инән шыпа айырыла ы килмәйсе. Ҡайтып, улай-былай итеп,

эштәреңде яйла ла кейәү бала менән беҙгә, ауылға, ҡунаҡҡа кил. Кейәүҙә еңдер бит?

– Эйе. Малайыбыҙ үҫеп килә.

– Әләйгәс, бик мәслихәт. Күмәкләп килә егеҙ ҙә төшә егеҙ инде. Олатаң арыҡ уйып ебәрер, күрше-күләнгә ҡунаҡ күр әтербеҙ, шулай бит, ҡарт?

– Знамы, шулай. Беҙҙең ауыл баш ҡаланан ике сәғәтлек кенә юл, Йәнбирҙе тигән ауыл. Автобустары ла көнөнә әллә нисә тапҡыр елтерәтеп килеп әйләнә. Бара ығыҙ ҙа, Яндырай Фәтхи ҡайҙа йәшәй, ти әгеҙ, эте лә, бете лә төртөп күр әтер.

– Иң башта инең ише егәрле бул ындар әле, янып тор ондар, шунан ҡушамат тағырҙар. Фәтхи олатайға киләбеҙ, ти әң дә еткән. – Ҡарсыҡ ҡартын яҡланы.

Ҡыҙарынып китте: «Ҡай ылай оят... Ә мин ҡасып сығырға йыйынам... Уларҙы саҡыра ла алмайым. Хәйер, ҡайҙа саҡырырға?..»

– Бары ы өсөн дә рәхмәт еҙгә, хушығыҙ... – Поездың тиҙлеге әкренләнә барыуын тойған Фәриҙә сығыу яғына ынтылды.

Вокзал ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тыҡҡандай ҡайнай. Кеме елер вокзалға йүнәлә, бәғзеләр трамвай, автобус туҡталышына ашыға, йылғыр таксистар машиналары яғына әйҙүкләй. Ҡаршы алыусылар бихисап. Шулар ара ынан таныш тауыш йәнен өттө:

– Әсәй!!!

– Ғәзим, улым! – Үҙенә ҡаршы йүгергән малайын ҡосҡан Фәриҙә быуын ыҙланып асфальтҡа сүкте.

7

Оҙон төн таңға ауышҡан мәл. Ҡала уттарының тәҙрә аша арҡҡан арғылт нурҙарын иҫәпкә алмағанда, ҡараңғы әле. Күҙҙәренә тамсы ла йоҡо ҡунмай нишләптер. Башында уйҙар ҙа сыуалмай, аныҡ ҡына төйнәгән фекере лә юҡ. Күңеле бупбуш. Тәне йән еҙ ҡурсаҡтай. Ҡыҙыҡ. Ҡулдарын тағанлап ҡалҡты ла, карауаттан аяҡтарын алындырып, йомшаҡ шипатайҙар ҡатты. Наҙ тан ыҡлағандан аҙаҡ теләгәнен татып тынысланған ире арҡа ын ҡуйған да рәхәтләнеп мышнай бирә. Бөләңгертлек аша унын ҡырлас танауы асыҡ күренә, йоҡа ирендәре тәрән улыш алған айын дерелдәй биреп ҡуя. «Ҡыуыҡлы айғолаҡтарын ҡабартып баҡылдаған тәлмәрйен тиер ең... Ағастай ҡатып, тырпырап ятты, йәндәре түгел, тәндәре ҡушылды бары... Унын алҡынлығын тойманы ла шикелле. Нәфсе ен ҡайғыртып, ҡабалан-ҡар алан ләҙҙәт алды ла ҡанға туйған өлөктәй ситкә шылды. Бәғер еҙ йән!..»

Вокзалда ла ят кешеләрҙәй иҫәнләштеләр ҙә, сумка ын артҡы багажникка урынлаштырғас, ҡуҙғалып киттеләр. «Бер киҫелгән икмәк кире ялғанмай» тип дөрөҫ әйткәндәр икән, йәнәш киләләр, тик үҙҙәре берекмәй, ҡараштары битараф. Әйтер ең дә, осраҡлы таксиға ағып китеп барыуы. Ғәзимдең генә донъя ы теүәл, сыр-сыу килә, бер ата ына үҙ ҡуша, бер әсә енә төбәп ниҙер орай.

Фатирға ҡайтып ингәс, киске табын йүнәтергә аш бүлмә енә үтте. Ғәжәп, ул киткәндән алып бер ни ҙә үҙгәрмәгән ымаҡ.

Аш та тамаҡҡа таштай үтте. Йоҡларға теләмәй йүгергеләгән Ғәзимде көсләп тиерлек йоҡларға алдылар ҙа залда йәнәш ултырып ерәйҙеләр. Алҡымына тығылған төйөрҙө йоторға тырышҡандай, тамағын ҡырған Кәрим үҙ башланы:

– Минең нишләп ҡайтарырға теләгәнемде белә ең, Ғәзим генә түгел, мин дә... ин киткәс, яңыса йәшәп ҡарарға маташып ҡараным, тик килеп сыҡмай... Эш ишемде таба алмағандан түгел, күңелгә ятҡандары юҡ. Мин ине кисерәм, Ғәзим хаҡына әм... – Яндырайланып ҡулын елтәне. – Тағы ла ни өсөн икәнен үҙең белә ең! Ташлап сығып китер бул аң, килеп тә, күренеп тә йөрөмә башҡаса, ғәфү

---

**Шешәк – ике йәшлек инә ҡаҙ.*

итмәйәсәкмен, бел уны! Мин иңә төрлөсә әүәләргә ҡамыр ҙа, эшкинмәгән боламыҡ та түгел.

Йәнен сара ыҙлаған хистәрҙе еңеп, көскә әйтте:

– Мин тырышырмын, Кәрим... Яҡшы әсәй, тоғро ҡатын булырға...

Ире ырғып торҙо ла, уны ла ҡалҡытып, күҙҙәренә ораулы төбәлеп тура ҡараны:

– Бер ни ҙә булмағандай йәшәп ҡарайыҡ әле, Фәриҙә, ә?

– Мин... мин тырышырмын...

Ҡулдары менән яурынбаштарын ҡосоп бер килке бәүелде, шунан иңенә ебәк халатын алды ла балкон яғына ыңғайланы. Сыҡҡас, тәҙрәне асып ебәрҙе. Танауына алҡынса, саф ауа бәрелде. Күҙҙәре ултырғысҡа ҡуйылған теге ситлеккә төштө. Ҡайтҡас та уны шунда урынлаштырғайны.

– Привет! Нишләп йоҡламай ың? – Ҡараңғыла ла күҙҙәре күк елләнеп баҙлаған мәхлүккә мөрәжәғәт итте. – Яңы ергә өйрәнеүе ауырмы, әллә ситлегең тармы?

Ҡош, тештәрен шығырҙатҡандай, шыҡырыҡлап ҡуйҙы.

– Аңлайым. иңә лә ҡыйын. Бар, ирекҡә сығып йәшәп ҡара.– Ситлектең ишеген асты. Теге е ҡымшанманы ла.

– Ҡурҡма. Урам яҡтыртылған бит. Бар, ос. Тиҙҙән таң атыр. Бар, бар!

Ҡош ҡыймай ғына ситлек ярығына ҡарай шылды ла, ҡапыл тышҡа ташланып, пырылдап осоп китте.

– Бына шулай. Бәлки, үҙ аллы оҙаҡ та йәшәмәҫ ең, ғүмерең буйы ситлектә ыҙаланғансы бер мәл генә иректе тойоп ҡал!..

Кире залға сыҡты ла малайының йоҡо бүлмә енә инде. Улы уның беретын ике ҡуллап ҡыҫҡан да рәхәтләнеп йоҡлап ята. Күңеле бөтөн уның: ата ы ла, әсә е лә янында. Кисә нимә тигәйне әле? «Әсәй, мине башҡаса ташлап китмә!» Күҙҙәренә өмөт менән төбәлеп орағайны: «Китмәҫ ең бит?!» Нимә тип кенә яуап бир ен, ғәйепле кешеләй башын эйгәйне. аҡ ҡына малайының ҡулындағын алып, ситкә алды:

– Хәҙер был нәмә кәрәкмәй инде иңә, ысын әсәйең ҡайтты бит...

Сисенмәй кире түшәгенә яҡкайны, әүелйеп китте лә төшөнә Тан ыҡ инде. Ул ап-аҡ ҡаяға аяҡтарын кирә баҫҡан да ихлас йылмайып ҡул болғай, уны саҡыра: «Бында кил, бында яҡты, йылы!..»— ти. Иләҫләнеп уянып китте. Тәҙрәләргә аран яҡтылыҡ ойотҡо о ҡунған. Тыны тарыҡҡас, барып балкон ишеген асып ебәрҙе. Күҙе ситлеккә төштө. Муйынын эскә тартып бөршәйгән ҡош урынында ине. Фәриҙә тубыҡланды ла үҙе генә ишетелерлек итеп бышылданы:

– Мин дә ҡалам... Улым, инең хаҡыңа ҡалам... Тик үтенәм, мөхәббәтем, төштәремә кермә... Төштәремә кермә!..

# ӘҘӘБИ МИРАҪ ӘМ ӘҘӘБИӘТ ТАРИХЫ

Башҡорт әҙәбиәт ғилемендә уңғы ваҡыттарҙа, әҙәбиәт тарихына бәйле “боронғо”, “боронғолоҡ” төшөнсә е унда аман да әле үҙ урынын табып бөтә алмай ымағыраҡ, тигән фекерҙәр ишетелеп ҡалды. Шул уҡ ваҡытта әҙәбиәтебеҙ тарихын билдәле бер осорҙарға бүлеп йөрөтөүгә күнеккән дә кеүек инек. Беҙҙеңсә, ул донъя тарих фәне ҡаҙаныштары күҙлегенән, урындағы тарихи шарттарҙан сығып, үҙенең шулай хәл ителеүен тапҡайны.

Донъя әҙәбиәте тарихына килгәндә, уны осорҙарға бүлеп йөрөтөүҙең үҙ тарихы бар. Көнсығыш илдәрен өйрәнеү буйынса танылған ғалим, шәрҡиәтсе Н. Конрадтың раҫлауынса, был тарих фәненә “урта быуаттар” терминының килеп инеүенә бәйле. Уны XV быуатта Европа халыҡтары ҡуллана башлай. Был улар өсөн үҙҙәре йәшәгән осорҙоң, йәғни Яңы замандың, Европа халыҡтары тормошонда тотҡан урынын асыҡлау өсөн кәрәк була. Шул заман ғалимдары фекеренсә, бынан алдағы осорҙар менән ошо Яңы заман ара ында үҙенә генә хас тотош бер дәүер ята. Ул үҙенән алдағы борон заман менән әлеге дәүерҙе бер үк ваҡытта айырып та, бәйләп тә тора. Шулай итеп, Европаның тарих фәнендә өс терминдан торған триада хасил була: борон заман – урта быуаттар – яңы заман. Әммә шуны ы: ул саҡта “урта быуаттар” термины бары Европа илдәре әм халыҡтары тарихы сиктәрендә генә өйрәнелә.

Артабан тарих фәнендә боронғо мираҫтың Көнбайыш тарихы өсөн генә түгел, Көнсығыш тарихы өсөн дә берҙәй үк ә әмиәткә эйә икәнлеге асыҡлана, шул нигеҙҙә урта быуаттар тарихы бөтә донъя күләмендәге дөйөм күренеш булараҡ танылыу таба. Ул Көнсығышта ла, Көнбайышта ла феодаль мөнәсәбәттәрҙең аяҡҡа баҫыу әм нығыныу осоро менән билдәләнә. Ә боронғо замандар и ә – ҡол биләүселек ҡоролошо хөкөм өргән дәүер. Әҙәбиәт тарихы ла шуға ярашлы үҙенең билдәле бер осорҙарын кисерә, боронғо әм урта быуаттар әҙәбиәтенә айырыла.

Әлбиттә, башҡорт әҙәбиәте тарихын да осорҙарға бүлеп йөрөтөү донъя тарих фәнендә ҡабул ителән ошо шарттарҙан ситтә ҡала алмай. Ләкин был әле телгә алынған триаданы: “борон заман – урта быуаттар – яңы заман” төшөнсәләрен туранан-тура уға күсереү кәрәклеген аңлатмай. Шулай ҙа, әгәр башҡорт әҙәбиәтенең дә үҙ триада ы бар икәнлеген таныйбыҙ икән, ул саҡта беҙ уның тарихы хаҡында шул күҙлектән сығып хөкөм йөрөтөргә

*Зиннур Әхмәҙи улы Нурғәлин 1928 йылдың 4 октябрендә Әбйәлил районының Ташбулат ауылында тыуған. Темәс педучилище ын, Магнитогорск, Силәбе litинституттарын тамамлай. “Заман әм герой” (1975), “Идея берҙәмлеге юлында” (1979) “Билдәлелек яҡты ында” (1992), “Замандарҙан заманға” , “Мәңге бергә”, “Тарих хәҡиҡәте”, “Артылыштарҙан артылыштарға” (2008) әм башҡа китаптар авторы. Ғалимды 80 йәше менән ихлас күңелдән ҡотлап, уҡыусыларға уның мәҡәлә ен тәҡдим итәбеҙ.*

мәжбүр булабыҙ. ис шик еҙ, хәҙер инде яңы заман, урта быуаттар әҙәбиәтенә ҡағылышлы күп кенә мәсьәләләргә асыҡлыҡ индерелгән. Ә бына “боронғо әҙәбиәт” төшөнсә е байтаҡ ҡына ораyҙарға яуап көтә ымаҡ.

Профессор Роберт Байымовтың “Башҡортостан” гәзитендә баҫылған “Боронғо башҡорт әҙәбиәте йәки уны бөтәйтеп буламы?” исемле мәҡәлә е (2005 йыл, 5 декабрь) тап шул хаҡта ине. Авторҙың “Ағиҙел” журналында (2006 йыл, № 9) донъя күргән мәҡәлә е лә “Башҡорт әҙәбиәте әм уның боронғо сығанаҡтары” тип аталғайны. Ғалим “боронғо” төшөнсә е сиктәрен атап ҡына күр әтмә ә лә, дөйөм алғанда әҙәбиәттәге боронғолоҡ сифаттарын асыҡлау офоҡтарын етди киңәйтте.

Шуны ла иҫтә тоторға кәрәктер: Н. Конрад, тарих фәне ҡаҙаныштарына таянып, боронғолоҡто ҡол биләүселек ҡоролошо дәүере менән сикләй. Ул Ф. Энгельстың “вместе с возвышением Константинополя и паденем Рима заканчивается Древность” тигән үҙҙәрен килтерә. Аңлашылыуынса, башҡорт әҙәбиәтенең боронғо о, ғөмүмән, башҡорт йәмғиәте хаҡында былдай күҙлектән уй йөрөтөү ис тә дөрөҫ булмаҫ ине. Шуның өҫтөнә ҡол биләүселек йәмғиәтенән феодаль ҡоролошҡа күсеү – үҙе тотош бер дәүерҙе биләгән оҙайлы процесс. Шуның өсөн беҙгә башҡорт әҙәбиәтенең боронғо- он күҙаллауҙа икенсе бер шарттарға бәйле юллау кәрәктер. Бер үк ваҡытта беҙ башҡорт әҙәбиәтенең быуаттар төпкөлөнән килгән бәйләнеше булған Урта Азия әм Иран әҙәбиәттәре тарихынан да ситләшә алмайбыҙ. Ысынлап та, әгәр башҡорт әҙәбиәте триада ында боронғолоҡ сылбыры ла бар икән, ул саҡта инде беҙ мотлаҡ шулай эшләргә тейеш булып сығабыҙ ҙа.

Тарихсылар раҫлағанса, Иранда ҡол биләүселек ҡоролошо емерелеп, сасанидтарҙың дәүләте төҙөлөүе беҙҙең эраның III быуатына ҡарай. Урта Азияла ла Ҡушан ҡол биләүселек батшалығы V быуатта йәшәүҙән туҡтай, феодаль мөнәсәбәттәр көскә инә башлай. Шулай итеп, Иран әм Урта Азия тарихы өсөн боронғо заман III–V быуаттарҙа тамамлана, уларҙың боронғо о шуға ҡәҙәр булған дәүерҙәргә ҡарай булып сыға. Әле беҙ ошоға бәйләнешле дөйөм төрки әм фарсы әҙәбиәттәре ғаилә ендә торған башҡорт әҙәбиәтенең “боронғо” он шул замандарға ҡайтарып ҡалдырыу хаҡында ни бул а ла әйтергә йыйынмайбыҙ. Шулай ҙа “боронғо” терминын ҡулланғанда уйланырға урын бар ымаҡ.

Профессор Р. Байымов “Ағиҙел” журналындағы үрҙә телгә алынған хеҙмәтендә: “Авеста” менән Арҡайымдағы тура килеүҙәр ис тә осраҡлы түгел, ә Урал иленең Иран менән бәйләнештәре ис юғы Зороастризм замандарынан уҡ (беҙҙең эраға тиклемге X–VII быуаттарҙан) килеүе тура ында өйләй”,– тип күр әтә. Ошонан сығып, ғалим: “Авеста”ның “Вивдевдат” тигән китабында үрәтләнгән Вар нығытма ы менән Арҡайым ҡаласығының шик еҙ оҡшашлыҡтар (уртаҡлыҡтары) беҙҙең алға тағы бер мө им ораy ҡуя: был уртаҡлыҡтар әҙәбиәт, мәҙәниәт, рухи ҡомартҡылар юҫығында ла, шулай уҡ боронғо булған”Урал батыр” эпосында күҙәтелмәйме? Был әҫәрҙә үрәтләнгән ваҡиғалар хаҡында ул: “Улар беҙҙең эраға саҡлы VIII-VII меңйыллыҡтар булған боронғо таш быуаттан (полеолиттан) яңы таш быуатҡа (мезолитҡа) күсеү осорон сағылдыра бул а кәрәк”, – тигән ҡараштa тора.

Ошолай фекер иткәндә “борон заман – урта быуаттар – яңы заман” триада ының тәүге е булған борон замандың башҡорт әҙәбиәте тарихына мөнәсәбәттә уны беҙҙең эраға ҡәҙәрге замандарға алып төшөп китә икәне аңлашыла, әлбиттә. Уның башы кәмендә “Урал батыр” эпосы тыуған дәүергә ҡайтып ҡала ала, тип тә уй йөрөтөргә була.

Беҙҙеңсә, матбуғатта боронғо башҡорт әҙәбиәтен “бөтәйтеү” хаҡында бар-

ған өйләшеү борон замандың башланғыс этабы менән уңғы этабы ара ында-ғы эске бәйләнеште бер хронологик тәртипкә килтереү, системаға алыу тура-ында бара бул а кәрәк. Уны хәл итеү юлдары, бәлки, байтаҡтыр ҙа. Шулай ҙа улар ара ында иң мө имдәре лә юҡ түгелдер. Беҙҙең уйыбыҙса, профессор Марат Зәйнуллиндың “Ватандаш” журналында баҫылған “Башҡорт халҡының ғорурлығы” исемле мәҡәлә ендә (2006 йыл) күтәрелгән мәсьәлә был йә әттән үтә актуаль. Мәҡәлә киң билдәле ғалим-тюрколог Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың тыуыуына 95 йыл тулыу уңайы менән донъя күргән. Автор, рус тел ғалимы академик Л. В. Щербаның әҙәби тел хаҡындағы фекеренә таянып, әҙәбиәт тарихын өйрәнеүҙә үтә лә мө им булған бер концептуаль ҡарашты иҫкә төшөрә. Академик әр бер яҙма телде әҙәби тел итеп таны а ла, әҙәби телдең мотлаҡ яҙма тел булыуы шарт түгел, тигән ҡарашты яҡлаған. Ул әҙәби тел менән яҙма телде бутарға ярамағанлығын әйткән. Л. Щерба ораторлыҡ телмәренең, халыҡ ижадының төрлө жанрҙары, йырҙар, әкиәттәр, көләмәстәр .б. телдәренең әҙәби телгә ҡарауын раҫлай. “Ошо ҡарашҡа нигеҙләнеп, Жәлил Кейекбаев, башҡорт халыҡ ижады әҫәрҙәре – әҙәби телдең өйләү форма ы, тигән фекергә килә. Был башҡорт филология ы өсөн принципиаль яңы ҡараш булды”, – тип күр әтә профессор М. Зәйнуллин.

ис шик еҙ, ул башҡорт әҙәбиәте тарихын өйрәнеүгә бәйле мө им ә әмиәткә эйә булған асышҡа тиң яңылыҡ тип ба аланырға хаҡлы ығымта була. Белеүебеҙсә, уҙған быуатта оҙаҡ йылдар башҡорт әҙәби теленең булыуы инҡар итеп киленде. Фольклор башҡорт халҡының берҙән-бер әҙәби мираҫы итеп танил а ла, әҙәби телгә уның мөнәсәбәте юҡ, тип аналды,башҡорт әҙәби теле булмағас, уның әҙәбиәте лә юҡ, тип раҫланды. Шуға күрә халыҡ ижады әҫәрҙәрен әҙәби телдең өйләү форма ы итеп таныу башҡорт әҙәбиәте тарихының офоҡтарын киңәйтеүгә, алда әйтелгәнсә, “бөтәйтеүгә”, йәғни милли йә әттән уның үҙенә генә хас үҙенсәлекле жанрҙар иҫәбенә байытыуға юл асыусы мө им бер аҙым булды, тип ба алау ҙа хата булмаҫ ине.

“Башҡорт әҙәбиәте антология ы”ның беренсе томына яҙылған баш үҙҙә лә беҙ әҙәби әҫәрҙәрҙең ике формала ижад ителеүе әм йәшәүе хаҡындағы раҫлауға осрайбыҙ. Дөрөҫ, бында ауыҙ-тел әҙәбиәте күҙ уңында тотола. Әммә иң мө име: был юлы ла әҙәби телдең яҙма тел генә булмауы раҫлана әм шуның менән башҡорт әҙәбиәте тарихын “бөтәйтеү” тарафында дөйөм бер ығымта я ала. “Шуға күрә... исемдәре билдәле башҡорт йырауҙары әм сәсәндәренең ижадын да әҙәбиәтебеҙ тарихының ауыҙ-тел әҙәбиәте рәүешендә йәшәгән күренеше итеп ҡарайбыҙ. Тимәк, әҙәби мираҫыбыҙҙың ике төрлө йәшәү форма ы булған кеүек, уның халыҡтың өйләү теленә ҡоролған әҙәби теле лә, төрки телдәре нигеҙендә ойошҡан яҙма төрки теле лә бар тигән үҙ”, – тип яҙа баш үҙ авторҙары. Шулай итеп, үрҙә әйтелгәнсә, халыҡ ижады әҫәрҙәренең дә телен әҙәби телдең өйләү форма ы итеп таныуға бер аҙым ғына ҡала. Ғәмәлдә и ә “халыҡтың өйләү теленә ҡоролған әҙәби теле лә” тигән төшөнсә үҙе үк шундай ығымтаға килеүҙе аңлата булырға тейештер ҙә.

Ошо хәл ауыҙ-тел әҙәбиәте менән бер үк дәрәжәлә халыҡ ижадын да әҙәбиәтебеҙҙең шундай ук йәшәү күренеше рәүешендә ҡарауға юл аса ымаҡ. Бындай осраҡта уның туранан-тура “Урал батыр” эпосына ла ҡағыла икәнлеге аңлашыла, әлбиттә. Шуға күрә башҡорт әҙәбиәтенең боронғо осорона ҡараған әҙәби ҡомартҡыларҙы ошо юлда эҙләү өҙөмтәле булыр. Халыҡ ижады жанрҙары менән бер рәттән, уның образдар система ын аныҡлау ҙа әҙәбиәтебеҙ хронология ының генизисын асыҡлауҙа мө им урын тоталыр,

тип уйланыла. Беҙҙеңсә, мәҫәлән, арыҫлан образы халыҡ хәтерен ялғап тороусы мәңгелек образдарҙың бере е рәүешендә ҡаралырға хаҡлылыр. Булма а, Ш. Бабичтың ике шиғырын ғына иҫкә төшөрәйек. Ул “Башҡортостан” исемле шиғырында тыуған еренең, ата-баба ының бөйөклөгән йәнлектәр батша ы бөйөклөгөндә күрә, “шунда тыуған, шунда үҫкән башҡорт тигән арыҫлан”– тип данлай. “Тупраҡ” шиғырында ул үҙ халҡының батырлығын “ҡурҡыу белмәҫ арыҫлан” ажарлығына тиңләй. Бер нисә быуатҡа тарихҡа төпкәрәк үт әк, беҙ был образ менән “Ҡуҙыйкүрпәс” әм“Алдар әм Зө рә” эпостарында осрашабыҙ. Ошолай башҡорт әҙәбиәте тарихының яңы заман осоронан урта быуаттарға кире күсеп, шунан йәнә төпкәрәк сигенеп, боронғо заманға килеп сыҡкас, беҙ тағы ла арыҫлан образына тап булабыҙ. Был юлы инде уны “Урал батыр” эпосында күрәбеҙ.

Бында йәнә шуны ы мө им: арыҫлан образы башҡорт әҙәбиәте тарихының өс осоронда өс ында үрәтләнә. Шул уҡ ваҡытта ул – халыҡ тормошоноң шул осорға ғына хас мө им бер билдә е: “Урал батыр” эпосында ул – ҡулға эйәләштерелгән йәнлек, унар менге е (…Арыҫланыңа менә алмай, унарыңа сыға алмай…), “Ҡуҙыйкүрпәс” менән “Алдар әм Зө рә” эпостарында и ә уның тире е – унарсылыҡ кәсебенең бер төрө. Ш. Бабич шиғырҙарында инде ул – тыуған ил, тыуған тупраҡ даны, уның өсөн утка- ыуға инергә әҙер булыу. “Урал батыр” эпосындағы ир-егетлекте арыҫлан исеме менән тиңләү, бәлки, ошолай халыҡ менталитетының үҙ тыуған иленә, Ватанына мөнәсәбәтенең мө им бер компонентына әүерелеп, үҙенең ошолай художестволы хәл ителешен тапкандыр.

Иғтибар итәйек: эпоста Урал Аҡбуҙатҡа менеп, булат ҡылыс тотҡан хәлдә Шүлгән күлен уртлау ҡеүә енә эйә булғандан уң да ир-егетлекте үҙе ҡасандыр менеп йөрөгән арыҫлан менән тиңләүе Бабич ижадында килеп үҙ сағылышын тапкандай була.

*Улдарым, тыңлаң, еҙгә әйтәм,*
*Тыңла, илем, иңә әйтәм:*
*Ир-арыҫлан бул аң да,*
*Илдә йөрөп, ил күрмәй,*
*Тубығыңдан ҡан килмәй,*
*Йөрәгең батыр була алмаҫ.*

Хатта “Башҡортостан” шиғыры “Урал батыр” эпосын бөгөнгөгә килтереп бәйләп ҡуйғандай ҙа була. Шағир: “Башҡортостан баҡса ы – арыҫландар торған ер; Арыҫландар баба ы – ҡа армандар йөрөгән ер. Шунда тыуған, шунда үҫкән башҡорт тигән арыҫлан” тип, әйтер ең, “Урал батыр” эпосындағы ваҡиғаларҙы үрәтләй, арыҫланға атланып донья ҡурсалауға сыҡҡан Уралды күҙ уңында тота.

Йәнә тағы ла шул: ошо сағыштырыу ара ында күпме быуаттар ята. Ә арыҫлан образы өҙләк өҙ халыҡ хәтерендә быуындан-быуынға күсә килә.

*Ыласын ғына ҡоштоң, ай, бала ы*
*Бауҙа ғына тыуып, бауҙа үҫә.*
*Егет кенә тигән ир-арыҫлан*
*Яуға ғына барып, яуҙа үлә.*

“Урал батыр” эпосында ла, ошо халыҡ йырында ла тыуған ил, тыуған тупраҡты ҡурғаусылар “Ир-арыҫлан” образында күҙалланыуы ғәжәп түгелме ни?!

*Арыҫлан булыр, ай, арыҫлан бала ы,*
*Юлбарыҫ булыр, ай, юлбарыҫ бала ы.*

*Тыуған илен  аҡлап яуға китер*
*Яҡшы ғына ата бала ы.*

Эпостағы “ир-арыҫлан бул аң да, илдә йөрөп ил күрмәй, илең өсөн көн түкмәй, йөрәгең батыр була алмаҫ” тигән юлдар әлеге халыҡ йырына ауаздаш була алмаймы ни?

Хатта Байыҡ Айҙар сәсән дә үҙенең ҡартлығында арыҫлан образын иҫкә алмай ҡала алмай.

*Асыуҙа ҡайнап сыныҡҡан,*
*Уралда аунап ереккән,*
*Ҡан ыраған арыҫландай*
*Ҡан ырап йөрөгән ҡартымын!*

Ошолай башҡорт әҙәбиәтенең оҙон тарихи юлында унын  әр жанрында тиерлек арыҫлан образы төрлө  ынында үҙен иҫкә төшөрә килә. Уҙған быуат башында яҙылған “Ватан ҡа армандары” пьеса ында 1812 йылғы Ватан  уғышынан еңеү менән ҡайтыусыларҙы ауыл халҡы ошондай маҡтау-дан  үҙҙәре менән ҡаршылай.

***Вәликәй.*** *Шулай, французлдарҙы Мәскәүҙән осортоп ҡайттыҡ тиген?*

***Солтанҡай.*** *…французлар йүгереүҙән бушаманылар.*

***Ҡармыш.*** *Әйҙәгеҙ әле, арыҫландар, өҙҙөрөп ебәрегеҙ әле.*

Ҡайтыусылар “Любизар”ҙы йырлап бөткәс, Ҡармыш йәнә уларға: “Бына рәхмәт арыҫландарға, бына рәхмәт”, – тип маҡтау  үҙҙәре әйтә.  уғыштан ҡайтыусы егеттәрҙең бере енә, алдан килешелгәнсә, унын ҡыҙын биреү хаҡында телгә алғас, Ҡармыш ҡарт, шундай арыҫландарға ла бирмәгәс, ул ҡыҙҙар нимәгә, дүрт ҡыҙым бул а, дүрте ен дә бирер инем әле, тип дәртләнеп китә.

Беҙҙеңсә, башҡорт әҙәбиәте тарихы өс дәүерен үҙ башынан кисергәндә лә, унда традициялар күсәгилешлеге тоторо̆кло ҡала. Халыҡ тормошоноң өс тарихи осорон арыҫлан образы бәйләп тора, тип раҫларға урын бар  ымаҡ. Зороастризм – мәжүсилек – мосолманлыҡ  ыҙығы аша үткән рухи күсәгилешлек әллә ниндәй ҡаршылыҡлы күренештәр килтереп тыуҙырмай кеүек. Ошо күсәгилешлек урта быуаттарҙа ислам нығына барған дәүерҙә Ҡол Ғәлиҙең “Ҡиссаи “Йософ поэма ы юғарылығына сыға. Мәжүсилек башлыса халыҡ ижадында  аҡланып килеүен дауам итә (“Ҡиссаи Йософ” үҙен  иҙҙереп ала). “Урал батыр” эпосының “Авеста” менән ауаздашлығын таныу уларҙың икәү ен бер осорға – боронғо дәүергә ҡайтарып ҡалдырыуы аңлашыла.

Беҙҙең ҡарашса, мәжүсилек  ыҙығында үҙ осороноң асыҡлығы менән төрки халыҡтарының уртаҡ мираҫы Орхон-Йәнәсәй яҙмалары айырым урын тота. Унда Күлтәгин ҡағандың батырлыҡтары тасуир ителә. Ул Соғди ерҙәрендә ислам ғәскәрҙәренә ҡаршы  уғыш алып бара. Был – ғәрәптәрҙең Бохара, Сәмәрҡанд ҡалаларын баҫып алғанға ҡәҙәре булған ваҡиға. Ул шулай уҡ башҡорттарҙың ислам динен ҡабул иткәнгә тиклем ике быуат алда булған хәл, шул динде индергән көстәргә ҡаршы көрәш көндәре. Әммә был әле мәжүсилек менән исламдың ғүмергә шул  уғыш хәлендә ҡалыуы булмай. Халыҡ ижады уларҙың  әр ике енә үҙ ҡуйынында урын таба. Әҙәби телдең ике төрлө формала йәшәү мөмкинлеге мәжүсилек  ыҙатының әҙәби мираҫҡа ҡарар ижад өлгөләрендә  аҡланып килеүенең бер сәбәпсе е була. Шунын менән бергә Н. Конрад күҙаллаған тарих фәне триада ында Орхон-Йәнәсәй яҙмалары урта быуаттарға ҡарарға тейешле әҙәби мираҫ булып сыға. Әгәр беҙ ижад ителеү осоро менән “Ҡиссаи Йософ” поэма ын да ошо рәткә ҡуйып ҡарарға мәжбүр булабыҙ икән, ул саҡта Н. Конрад  үҙ алып барған триада система ының төҙөклөгө боҙола. Сөнки ул урта быуаттар тарихының нигеҙен

унда диндең әм сиркәүҙең (шулай уҡ мәсеттең) айырым роль уйнауына таянып ҡора. Тап бына ошо дәүерҙә будда әм христиан диндәре, ислам донъя күләмендәге диндәргә әүерелә. Уларҙың тәүге икәү е боронғо замандарҙан йәшәп кил ә лә, ошо дәүерҙә генә шундай йоғонтоға эйә була ине. Ислам и ә урта быуаттарҙа ғына нигеҙлән ә лә, тиҙ арала шулай уҡ донъя күләмендәге танылыуға өлгәшә. Уларҙың өсәү е лә ошондай ҡеүәтле көскә әүерелә алыуы менән йәмғиәттә феодаль мөнәсәбәттәрҙең өҫтөнлөк алыуына бурыслы. Ошо йә әттән ислам диненең Урта Азияға үтеп инеүенә ҡаршылыҡ күр әтеү ваҡиғалары ла үрәтләнгән Орхон-Йәнәсәй яҙмалары Н. Конрад триада ының хронологик сиктәрен боҙғандай була. Сөнки улар үҙенең ижад ителеү осоро менән урта быуаттарға, йәғни VIII быуатҡа ҡарай, Күлтәгин ҡаған 731 йылда вафат була. Уға әйкәл ҡуйҙырған Билге ҡаған 734 йыл донъянан китә, Н. Конрад и ә Урта Азияла әм Иранда урта быуаттарҙың башланыуын III– V быуаттар менән билдәләй. Шул сәбәпле Орхон-Йәнәсәй яҙмаларына ҡараған Күлтәгин ташы урта быуаттар урта ына ҡараған яҙма ҡомартҡылар рәтендә булып сыға. Шулай итеп, донъя тарих фәне күҙлегенән ул боронғо яҙма ҡомартҡылар хоҡуғынан мәхрүм ителгәндәй була.

ис үҙ еҙ, замандарҙан замандарға күсеү, замандар алмашыныуы – ул тәбиғи үҫеш булғанда, ҡағиҙә булараҡ, оҙайлы процесс. Урта быуаттар үҙе лә яңы заманға күсеүҙең шундай уҡ ябай булмаған фазаларын кисерә. Н. Конрад хатта уның хронологик сиктәрен дә билдәләп ҡуйғандай. “Концом “средних веков” для гуманистов Средней Азии и Ирана была эпоха газневидского возрождения”, – тип яҙа ул. Был инде – Фирҙәүсиҙең “Ша намә” әҫәренең ижад ителеү йылдары. Зәки Вәлиди үҙенең “Төрк әм татар тарихы” исемле китабында (Н. Конрадтан ярты быуат элек әле) урта быуаттарҙан яңы заманға күсеү барышында күҙәтелгән “Возрождение” тип атап йөрөтөлгән дәүергә үҙ ба а ын биргән була. Дөрөҫ, был төшөнсә тарих фәненә XVI быуат урталарында, атап әйткәндә, 1550 йылдан башлап ҡулланыуға инә. Ул Ренессанс төшөнсә енең синонимы рәүешендә ҡабул ителә. Н. Конрад бер урында: “Ренессанс – промежуточная эпоха: между средневековьем, как последняя эпоха в истории народностей, и новым временем, как первой эпохой в истории нации” тигән аңлатма бирә. Икенсе урында ул: “Расцвет литературы считается одним из самых выразительных симптомов Возрождения в Италии и других странах Европы, затронутых Ренессанским явлением”, – тип раҫлай.

Зәки Вәлиди был терминдарҙы үҙенең әҫәрендә файҙаланма а ла, ғәмәлдә урта быуаттарҙың уңғы фаза ының асылын дөрөҫ күрә алған. Был йә әттән ул Н. Конрад юғарылығынан фекер йөрөтә, егерме йәштәр тирә ендә йәш тарихсының ошолай урта быуаттар аҙағында Көнсығыш әҙәбиәте кисергән тәрән үҙгәрештәрҙе үҙ аңы аша үткәрә алыу әләтлеге бөгөн беҙҙе оҡландырмай ҡалмай, әлбиттә.

Зәки Вәлиди үрҙә телгә алынған китабында: “Иран шағиры Фирҙәүси Мәхмүт шәрәфенә үҙенең “Ша намә” исемле мәңгелек әҫәрен яҙҙы”, – тип күр әтә. Шунан алда ул әҫәр арнап яҙылған шәхестең үҙенә ба а бирә: “Мәхмүт Ғәзнәүи үҙенең ғәҙеллеге, ислам диненә, ғалимдарға, мәҙәниәткә иткән хеҙмәте менән бик мәш үрҙер”. Зәки Вәлиди Ғәзнәүиҙәрҙең Иран әм Ғәрәп ерҙәренә күсеп килгән төркиҙәр ара ында төркилек рухын уятыуҙа ғәйәт мө им роль уйнауын билдәләй. Мәхмүт и ә Ғәзнәүи мәмләкәтенең солтаны була. Был дәүләт баш ҡала ы Ғәзнә исеме менән шулай тип йөрөтөлгән. Бөгөн ул – Афғанстандың бер ҡала ы.

“Эпоха газневидского возрождения” тип уй йөрөткәндә, Н. Конрад иң элек Фирҙәүсиҙең “Ша намә” тигән төп әҫәрен күҙ уңында тотҡан булырға тейеш. Сөнки ул, әйтелгәненсә, ренессанс күренешен Италияла әм Европа

илдәрендә әҙәбиәттең сәскә атыуы менән бәйләй. Зәки Вәлиди ҙә шул осорға ба а биргәндә әҙәбиәт әм тел мәсьәләләрен иғтибар үҙәгендә тота, уның был өлкәлә Н. Конрадҡа ҡарағанда күпкә мәғлүмәтлерәк икәне күренә. “Солтан Мәхмүт фарсыса шиғырҙар өйләне. арайында иран шағирҙары тулы булыр ине. Ирандың иң ҙур милли шағиры Фирҙәүсиҙең тулы ынса Ирандың милли риүәйәттәренән, әкиәттәренән торған “Ша намә” енә солтан Мәхмүт бихисап алтындар сарыф итте”, – тип яҙа ул.

Беленеүенсә, “Ша намә” ижад ителгәндә XI быуат барған була. Н. Конрад Низами менән Руставелиҙы ла Ренессанстың сәскә атҡан осоронa, йәғни XII быуатҡа ҡараған яҙыусылар рәтенә ҡуйып йөрөтә. “Ҡиссаи Йософ” поэма ының да шул дәүерҙә ижад ителеүен иҫкә төшөрөп үтеү мотлаҡ кәрәктер, моғайын. Сөнки ул, уның дөйөм төрки ҡомартҡы булыуын күҙ уңында тотҡанда ла, башҡорт әҙәбиәте тарихында урта быуаттарҙан яңы замандарға күсеү осорондағы традициялар күсәгилешлегенә үҙ билдә ен алыр әҙәби күренеш булды. “Ҡол Ғәлиҙең “Ҡиссаи Йософ” әҫәре башҡорт халҡының күңел түренә инеп, уның поэтик ижадында “Йософ менән Зөләйха” тигән теҙмә әм сәсмә ҡиссалар, Йософ менән Зөләйханы ҡушҡан йырҙар, бәйеттәр, тапҡыр үҙҙәр булып тамырланған”, – тип яҙа “Башҡорт әҙәбиәте антологияы”нда уны төҙөүсе ғалимдар Ғайса Хөсәйенов менән Миңлеғәле Нәҙерғолов.

Ошолай итеп, “Ҡиссаи Йософ” поэмаы, “Урал батыр” эпосы ымаҡ уҡ, башҡорт әҙәбиәте тарихын быуаттар аша атлап үтеп, уның бөгөнгө өнә килеп ҡушыла. Эпостағы Урал батыр образы менән Йософ араындағы урталыҡ, уны бер ыҙыҡта ғына күргәндә, был әҫәрҙәрҙе быуаттар аша яҡынлаштырыусы төп ыҙат рәүешендә ҡаралырға хаҡлылыр. “Ҡиссаи Йософ” геройы Низами, Руставели менән Науаи геройҙарынан айырмалы, ниндәйҙер мәжнүнгә – мөхәббәт ҡолона әүерелеп аҡылын юғалтҡан берәү түгел. Уға әхлаҡи сафлыҡ, тоғролоҡ, ғәҙеллек, ғәфү итә белеү кеүек иң юғары сифаттар хас. Халыҡ мәнфәғәтен бөтә донъяуи ҡиммәттәрҙән өҫтөн күреү сифаты Урал батыр образының әҙәбиәттәге урынын билдәләгән ымаҡ, Йософҡа ла хас ошо сифат әҫәрҙең ба а ын күтәрә. Бәлки, башҡорт әҙәбиәте тарихының бер-бере енән нык айырылған ике ҙур дәүеренә – боронғо она әм урта быуаттарға – ҡараған ошо ике әҫәр араындағы уртаҡлыҡ үҙ геройҙарының ошо сифаттарында үҙен табалыр ҙа уларҙы бер әҙәбиәт тарихы эсендә берләштереп торалыр. Әҙәбиәтебеҙҙә традициялар күсәгилешлеге хаҡында үҙ барғанда, ихтимал, ошо ике әҫәр араындағы эске бәйләнеште шул тарафтарҙа эҙләргә кәрәк булалыр. Башҡорт әҙәбиәте тарихындағы Ренессанс күренеше, әгәр беҙ Көнсығыш әҙәбиәтенә бәйле шул хаҡта уйларға теләйбеҙ икән, бәлки, “Урал батыр” эпосындағы боронғолоҡ “Ҡиссаи Йософ”та уларҙың төп геройҙары характерындағы уртаҡ ыҙаттарҙа табыла.

Йомғаҡлап шуны әйтергә була: беҙ башҡорт әҙәбиәте триадаын хронологик бер системаға килтереүҙә әҙәби мираҫыбыҙҙың ике төрлө йәшәү формаы, әҙәби телдең яҙма тел генә булмауы хаҡындағы ҡараш мөим роль уйнар ине, тигән фекерҙә ҡалабыҙ.

**Зиннур НУРҒӘЛИН,**
**филология фәндәре докторы.**

# ТӘБИҒӘТ ЙЫРСЫ Ы

*(Рим Ахмедовҡа 75 йәш)*



Баҡсала күрше генә йәшә әк тә, унының менән ирәк осрашырға тура килә. Хәтфә инглиз газоны йәйелгән иркен баҡсаындағы ирәк ағастар, таныш булмаған үҫемлектәр үк бында түтәлдәр өҫтөндә көнө-төнө бил бөккән ябай баҡсасы йәшәмәгәнлеген күр әтеп тора. Хужа ының кемлеген белгәс, Рим Ахмедовтың китаптарын йотлоғоп уҡығаным иҫкә төштө. Тәбиғәт менән кешене бер-бере енән айырмай, уртаҡ бер төшөнсә хасил иткән ҡыҫҡа әм аңлайышлы хикәйәләр ине улар. Күпселектә хикәйәләү беренсе заттан алып барылғас, был яҙыусы тик үҙе тура ында, үҙе менән булған ваҡиғалар хаҡында өйләй, тигән фекер ҡалды. Шуға унының менән әңгәмәнең башында уҡ ошо хаҡта орамай булдыра алманым.

**– Рим Билалович, беренсе заттан яҙылған әҫәрҙәрҙе уҡыусы автобиографик тип ҡарарға өйрәнгән. еҙҙең яҙғандарҙа, бигерәк тә “Одолень-трава” китабында дауалау сараларын нисек ҡулланыуығыҙҙы аңлатҡанда, тап шулай ҙа ымаҡ. Ә был хәҡиҡәткә ни ҡәҙәр тап килә?**

– Дамир, белә ең бит: бер яҙыусы ла үҙ башынан ғына үткәндәрҙе хикәйәләп ултырмай. Ул – ижади процесс, уйҙырмалар ҙа, дөйөмләштереүҙәр ҙә, ишеткән-күргәндәр ҙә, кисергәндәр ҙә бергә тупланып, художестволы әҫәр килеп сыға. Бәлки, әле йәшәгән ғүмерем кимәленән ҡарағанда, мин бигүк күп тә яҙмағанмындыр. Әммә миңә тормошта бер нәмә лә еңел генә бирелмәне. Мин ижад уҡмағымды мәктәптә уҡығанда уҡ шиғриәттән башлағайным, 1953 йылда Мәскәүгә Әҙәбиәт институтына ла Башҡортостандан тәүге ҡарлуғастар сафында шиғырҙар шәлкеме менән барып керҙем.

Хикәйәләргә, ғөмүмән, прозаға күсеүемә баш ҡалала танышҡан рус әҙәбиәте классиктары Константин Симонов, Михаил Светлов, Константин Паустовский, Борис Пастернак йоғонто я анылар. Улар менән аралашыу тәьҫиренән институтта яҙылған “Мейес” тигән хикәйәм, юғары ба алан а ла, совет ысынбарлығына тап килмәй, тип табылды әм ун туғыҙ йыл үткәс кенә донъя күрә алды. Артабанғы әҫәрҙәремдең дә яҙмышы шулайыраҡ килеп сыҡты.

**– Хәҙерге йылдарығыҙ заман күҙлегенән көлкө генә итеп иҫләрлектер инде: ишетеүемсә, еҙ институт тамамлағас та, диплом яҡлай алмай, Мәскәүҙә эшкә ҡалырға мәжбүр булған ығыҙ?**

– Ул замандың, системаның ижад кеше енә нисек баҫым я ауын еҙ күҙ алдына ла килтерә алмай ығыҙ. Эйе, мин биш йыл буйына институтта Сталин премия ынан уң икенсе аналған Грибоедов премия ын алып уҡыным. Сталиндыҡын Роберт Рождественский ала ине. Пастернактың “Доктор Живаго” ын беҙ ҡульяҙма-

ла килеш уҡыныҡ. Яҙыусылар союзынан сығарғанда Борис Полевой уны “әҙәбиәттәге власовсы” тип атаған. Беҙ ҙә, йәштәр, Пастернакты тәнҡитләгән хатҡа ҡул ҡуйырға тейеш инек. Әммә курстағы 150 кешенән өсәү е генә риза булды. Минең диплом әҫәрем дә “соцреализм юҡ” тигән ба а менән кире ҡағылды. Үҙәк телевидениела таныштар бар ине, шунда сценарийҙар яҙып эшләй башланым. Ул тапшырыуҙар Өфөгә лә килеп етә торғайны, шуға 1963 йылда Өфөгә әйләнеп ҡайтҡас, Башҡортостан телевидение ында ихлас ҡабул иттеләр.

**— еҙҙең хикәйәләрегеҙ ҡыҫҡа күләмле, әммә тос, тәрән мәғәнәле әм шул уҡ ваҡытта ябай булыуы менән хәтерҙә ҡала...**

— Мин телде, үҙ тәмен тоя алмауға ис ҡасан зарланманым. Шуға ла күпселек ваҡытым башҡорт әҫәрҙәрен руссаға тәржемә итеп үткәндер ҙә. Әсәйем татар-башҡорт мәктәбендә (ул йылдарҙа мәктәптәр шулай атала ине) уҡытты. 1938 йылда үткән халыҡ иҫәбен алыу ваҡытында мине, биш йәшлек баланы, “грамоталы” тип яҙғандар. Туған телемде яҡшы беләм, әммә миңә рус телендә ижад итергә насип итте. Телдең нескәлектәрен белеү яҙыусы өсөн бик мө им. үҙ бит — беҙҙең өсөн төҙөлөш материалы. Хикәйә яҙғанда үҙҙәрҙе кирбес ымаҡ теҙә ең. Ә кирбестәр, белә ең, төрлө була. Хәтерлә ән, ҡасандыр Өфөләге “Йондоҙ” кинотеатрын шартлатырға маташҡайнылар. Килеп сыҡманы. Ә хәҙер ҡай ы бер өйҙәрҙән кирбес үҙенән-үҙе ҡойолоп тора. Шулай уҡ хәҙер үҙҙең дә ҡәҙере китеп тора. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, рус телен дә әр, мат, сленг, сит үҙҙәр баҫып китте. Мин олатайымдың нисек өйрәткәнен әле лә иҫләйем. “Иҫегеҙҙә тотоғоҙ, — тигән ул, — туған телегеҙ — еҙҙең тамырҙарығыҙҙағы ҡайнар ҡан ымаҡ. Әммә рус телен еҙ белергә тейеш егеҙ, сөнки шун ыҙ ауылдан сыға алмаясаҡ ығыҙ...”

**— Ундай күренештәр бер беҙҙең заманға ғына хас түгелдер. әр тел дә үҫеш юлында үҙгәрештәр кисерә бит: яңылыҡтарға юлыға, үҙҙәр иләк аша үтә тора, хатта асылдарын да үҙгәрткеләй, онотолоп әм юғалып та ҡуя...**

— Ә бит беҙ әҙәбиәттең юғары кимәле тип анаған классикала насар әҫәрҙәр юҡ. Уларҙы уҡыған айын яңыса, үҙеңсә аса ың. Шуның өсөн бер әҫәр ҙә өҫтөнмөҫтөн яҙылырға тейеш түгел. әр нәмә лә күп ҡатлы була. Уны “юлдар ара ы” тип тә атайҙар, эске мәғәнә лә — аңлатмалары күп. Ләкин бала саҡта уҡыған әҫәрҙе оло кеше бөтөнләй икенсе төрлө ҡабул итә. Әҙәбиәттә иң мө име — ихласлыҡ, таҙа намыҫ. Я алмалыҡты ҡабул итмәй ул. Күңеле йырлама а, ҡошто көсләп айратып буламы?..

**— Бына минең ҡулымда еҙҙең яңы ғына “табанан төшкән” “Мое разноцветье” китабы. Унда баш үҙҙә еҙ “Ҡай ы бер әҫәрҙәремде бөгөнгө уҡыусы ауыр ҡабул итер” тип яҙа ығыҙ. Был нимә: алдан уҡ уҡыусыны әҙерләүме, әллә мөмкинлек булғанда ҡасандыр тулы ынса баҫылмай ҡалған әҫәрҙәрҙе лә сығарып ҡалырға тырышыуымы?**

— Ҡай ы әҫәрендең ниндәй яҙмышҡа дусар булырын әйтеүе ҡыйын. Пастернак та бит беҙ йәшереп уҡыған китабы өсөн Нобель премия ын сит илдә алды. Әммә мин конъюктура өсөн сюжет ҡороп, уҡыусыға яраҡлашып ултырманым. Нисек бар — шулай ҡабул ит ендәр.

**— Рим Билалович, еҙ яҙыусы өсөн ятыраҡ булған үлән менән дауалау шөғөлөнә нисек килдегеҙ? Әҙәбиәт институты, телевидение, тәржемәләр әм... табип өнәре — сәйерерәк түгелме? Үҙегеҙ өсөн генә шөғөлләнеүҙе аңлап булыр ине әле, тик еҙҙең пациенттар ара ында бик билдәле кешеләр бар, өҫтәүенә — “Одолень-трава” китабы... Ә бит тәбиғәт менән бәйле әҫәрҙәрҙә генә геройҙарыңды заман талабына, уҡыусы конъюктура ына тап килтереп ултырырға кәрәкмәй, ул әр кемгә аңлашыла...**

— Мин йәштән балыҡ тоторға яраттым. Ана шунда тәбиғәтте аңларға, уның серҙәрен асырға өйрәнә ең дә инде. Үләндәр ярҙамында дауалауға мин яйлап килдем, оҙаҡ йылдар тәжрибә е ул. Махсус рәүештә шөғөлләнмәнем, кешеләр апты-

раған көндән, бер-береһенән ишетеп килеп таба торғайнылар, ә мин көсөмдән килгәнсә ярҙам итергә тырыштым. Илдең төрлө мөйөштәренән эҙләп килеп сығаһынелар. Күберәк – онкология сирҙәре менән, сөнки тап шул ауырыуҙар традицион медицина өсөн ауырлыҡтар тыуҙыра. “Одолень-трава”, “Растения – наши друзья и недруги” китаптары ана шул күп йыллыҡ тәжрибә емештәре ул. Икенсенәндә мин уҡыусыны дарыу үләндәренең кире яҡтары менән дә таныштырам. Сөнки һәр үлән организмға ыңғай ғына түгел, кире тәьҫир итеүе лә ихтимал. Хәҙер дауалау менән шөғөлләнмәйем инде, тик һаман да эҙләп килеүселәр табылып тора.

**– Осрашырға өйләшкәндә, еҙ яңы повесть тамамлауығыҙ хаҡында әйткәйнегеҙ. Сер булмаһа, ул нимә тураһында?**

– “Промельки” – “Саҡкылар” китабын повесть-хроника тип тә атап булыр ине. Асылда ул – үҙем, заманым, замандаштарым тураһында. Әҫәр өс өлөштән торасаҡ. Тәүгеһе “Беҙ әле балалар” тип атала. Икенсеһендә – “Беҙ балалар түгел инде” тигәнендә үҙ эштәре өсөн яуаплылыҡ тойған быуын тураһында һүҙ бара. Өсөнсөһө иһә “Беҙҙең балаларыбыҙ бар” тип аталып, унда бөгөнгө тормош, иртәгәһе көн өсөн борсолоу ҡыҙыл һыҙыҡ булып үтер, тип уйлайым.

**– Рим Билалович, еҙҙең тағы ла бер шөғөлөгөҙ – тәржемә өлкәһе тураһында ныҡлап иҫкә алмаһыҡ...**

– Ике телде лә белеүем тәржемәлә ныҡ ярҙам итте. Һин дә тәржемәләр менән шөғөлләнәһең, беләһең бит, тәржемә ул бер яҡлы эш түгел. Ул иң беренсе нәүбәттә ике авторҙың хеҙмәттәшлеге булырға тейеш. Башҡортса яҙылған әҫәрҙе “подстрочник” аша механик рәүештә генә руссаға ауҙарып ултырыу әҫәрҙе боҙор, күп етеш еҙлектәргә килтерер ине. Мәҫәлән, Ғәли Ибраһимовтың “Кинйә” романын эшләгәндә байтаҡ үҙгәрештәр, өҫтәмәләр индерергә тура килде. Хатта ҡайһы бер тарихи факттарҙың боҙоп күрһәтелеүенә юлыҡтым, үҙенә аңлатып, яңынан эшләргә тура килде. Шул уҡ ваҡытта тәржемә менән шөғөлләнеү тәржемәсе өсөн дә бик файҙалы: ҡайһы бер үҙҙәрҙең уйламаған яғы асылып китә, тел байый. Йәл, бөгөн тәржемә менән шөғөлләнеүселәр һирәк. Уны күберәк аҡса эшләү сараһы тип кенә ҡабул итәләр. Ә әҙәбиәтте яңы әҫәр менән байытыу, бер халыҡтың мәҙәниәтенә икенсеһен алып килеүҙәр һуң?..

**– Осрашыуға килгәнсе, Рим Билалович, еҙҙең исемгә яҙылған бик күп рәхмәт хаттары, рецензиялар, ба алар менән танышырға тура килгәйне. Унда ябай кешеләр ҙә, әҙәбиәт әһелдәре лә бар, сирҙәренән ҡотолғандар айырыуса күп. Бер орауҙы алдан уҡ бирге килгәйне: еҙ, Әҙәбиәт институтына шиғырҙар менән барып кергән кеше, шиғриәтте ниңә оноттоғоҙ һуң? Әллә йәш саҡта шиғыр яҙыу, олоғая килә башҡа жанрҙарға күсеү – тәбиғи күренеш, күңелдең бер сифатымы?**

– Улай тимәҫ инем. Шиғырҙар әле лә яҙылып тора ул, күңел торошона ҡарап. Бая уҡ әйткәйнем бит – көсләп яҙа торған холҡом юҡ. Шулай ҙа кешелектә шулай ҡабул ителгән бит: проза әҫәрҙәре күберәк һәм күләмлерәк килеп сыға, ә шиғырҙар, юғарыраҡ булһа ла, әҙерәк яҙыла.

**Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ әңгәмәләште.**

# ОЛО БААҒА ЛАЙЫҠ ИЖАД

*(Әсғәт Мирза итовтың тыуыуына 80 йыл)*



Үтеп киткән XX быуаттың икенсе ярты ында, бигерәк тә 60—70-се йылдарҙа, башҡорт әҙәбиәте тарихта бер ҡасан да булмағанса киҫкен яңырыу осоро кисерҙе. Әҙәбиәттең граждандыҡ рухы көсәйҙе, космосты үҙләштереү ижади фекер даирә ен дә киңәйтте, сифат үҙгәрешенә килтерҙе. Сәхнәгә өр-яңы жанр формалары дилогия, трилогиялар, трагедиялар килде, традицион булғандары ла йылдам яңырыу юлынан китте. Башҡорт әҙәбиәте ил, айырым үрнәктәре хатта донъя кимәленә сыҡты. Милли рухиәттең күмәк көс әм талант менән түшәлгән яңы үҫеш баҫҡысы ине, шикелле, был.

Әҙәбиәттең яңы юғарылыҡҡа күтәрелеүенә хеҙмәт иткән яҙыусылар бик күп. Шуларҙың бере е — күренекле драматург, йәмәғәт эшмәкәре Әсғәт Мирза итов. Ул 1928 йылдың 13 сентябрендә Башҡортостандың Туймазы районы Бикмәт ауылында тыуған. Ошо уҡ районның Ҡандра урта мәктәбендә уҡый. Уны бик йәшләй театр сәнғәте ныҡ ҡыҙыҡ ындыра. Шуға ла 1945 йылда ул Өфө театр училище ына бара әм профессиональ белем ала. 1948—1949 йылдарҙа Йомағужа, Ауырғазы колхоз-совхоз театрҙарында актер әм режиссер вазифаларын башҡара. Күрә ең, ошо ваҡытта уҡ Ә. Мирза итовты тик башҡарыусы, актер ролдәре генә ҡәнәғәтләндермәй — ул үҙе лә сәхнә әҫәрҙәре яҙып ҡарай.

“Әсғәт Мирза итовтың тәүге әҙәби тәжрибәләре мәктәптә уҡыған саҡта уҡ башлана,— тип яҙа был турала драматург ижадын монографик планда тикшергән билдәле шағир әм ғалим Ғилемдар Рамазанов.— 1944 йылдың 23 февралендә Ҡандра тимер юлсылар клубында уның “Йәш партизан” исемле тәүге пьеса ы ҡуйыла, төп ролде автор үҙе башҡара. әр башлап яҙыусыға хас булғанса, шиғырҙар ҙа яҙа.

1946 йылда, театр училище ында уҡығанда, абаҡташы Сабир Зәйнуллин менән бергә Ә. Мирза итов “Бөйөк дуҫлыҡ” исемле пьеса яҙа. Был әҫәр 1947 йылда үткәрелгән йәш яҙыусылар конференция ында Сәғит Агиш тарафынан маҡтап телгә алын а ла, сәхнәгә ҡуйылмай ҡала”.

1950—1953 йылдарҙа ғәскәри хеҙмәттә йөрөү, күрә ең, Әсғәт Мирза итов яҙмышына ла иҙелерлек үҙгәрештәр индерә. Ул Өфөгә ҡайта әм Башҡорт дәүләт академия драма театрының әҙәби бүлек мөдире булып урынлаша. Ошонан алып Ә. Мирза итовтың йәш сағынан уҡ килгән актерлыҡ менән авторлыҡ башланғыстарынан әҙәби ижадҡа ынтылыу тамам өлгөрөп етә. 1954—1957 йылдарҙа ул “Ҡыҙыл таң” гәзите, унан “Ағиҙел” журналы редакцияларында әҙәби хеҙмәткәр булып эшләй. Был вазифалар ҙа, ис шик еҙ, Ә. Мирза итовтың ижад юлы үҙенсәлектәре әм уңыштары менән бәйле.

1958—1960 йылдарҙа ул Мәскәүҙә СССР Яҙыусылар союзы эргә ендәге Юғары әҙәби курстарҙа уҡый, бер үк ваҡытта М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтын тамамлай. Ошо уҡ йылдарҙа ул үҙенең сәхнәгә ҡуйылыр тәүге әҫәрҙәрен дә яҙа. Заманы өсөн популяр темаға — йылғыр ҡуллы сауҙа хеҙмәткәрҙәре — район потребителдәр йәмғиәтендәге кире күренештәрҙе фашлауға арналған “Тымыҡ күл” (1954) исемле сатирик пьеса яҙа. Оҙаҡламай әҫәр Башҡорт академия драма театры сәхнә ендә ҡуйыла. 1955 йылда сәхнә күргән “Боҙҙар аҡтарылғанда” тигән икенсе драма ында Ә. Мирза итов яңы проблема — МТС хеҙмәткәрҙәре Миҙхәт Батталов менән Булат Ғайсаров образдары аша намыҫ әм намыҫ ыҙлыҡ, фиҙаҡәр хеҙмәт әм карьеристлыҡ кеүек тәрән драматик ҡаршылыҡтарға ҡоролған социаль-әхлаҡи мәсьәләләр күтәрә. Был мәсьәләләрҙең киң социаль әм көнкүреш панорама ында, йәмғиәттең төрлө ҡатлам әм тармаҡтарын дөйөмләштереүсе образдар (Булат —МТС-тың баш инженеры; Миҙхәт, Ғайса, Юлдаш — механизаторҙар; Туңғатаров — МТС директоры; За иҙә — агроном; Батырйән — аҡ аҡал; фән кешеләре, профессор .б.) аша асылыуы бигерәк тә мө им.

Әсғәт Мирза итовтың әҙип, драматург булып өлгөрөп етеүен күр әткән тәүге әҫәре, — моғайын, 1957 йылда ижад ителгән “Утлы өйөрмә” драма ылыр. Ундағы ҡаршылыҡтар был юлы тағы ла киңерәк әм киҫкенерәк , драма конфликты йәмғиәт үҫешендәге ҡапма-ҡаршы ике донъя алышыуына нигеҙләнгән.

“Утлы өйөрмә” драма ы Башҡортостандағы Граждандар уғышы осорон әм осорона ярашлы донъяның маңлайға маңлай килеп ҡап уртаға бүленеүен, синфи ҡаршылыҡтарҙың, социаль трагедияның, хатта, ғаилә эсенә, ҡәрҙәшлек мөнәсәбәттәренә үтеп инеүен үрәтләй. Әҫәр үҙәгендә Искәндәр Байтирәков әм уның берҙәм ғаилә енең инҡилап дауылдарында төрлө идеологик тарафтарға тарҡалып, аҙашып, юл сатында ҡалыуы, ошо арҡала трагик ваҡиғаларға дусар булыуы тасуирлана. Искәндәр Байтирәков үҙе ғүмер буйы фабрикант Ҡарасуриндың хеҙмәтсе е булып йөрөгән. Шуға ул инҡилап килтергән “тигеҙлек”кә, әлбиттә, башта шатлана, тәбрик итә. “Тигеҙлек”тең тик үҙҙә генә икәнен аңламай, хаталана. Бай мөлкәтен ҡотҡарам тип, ул физик яҡтан ғәрип булып ҡала. Ошондай оло юғалтыуҙар бәрәбәренә, тик үлем алдынан ғына Искәндәр Байтирәков үҙенең яңылышлыҡтарына, алданыуына төшөнә. Ғаилә фажиғә е бигерәк тә Искәндәр Байтирәковтың улдары — Ильяс менән Айтуған образдарында үткер ынлана. Өлкәне Ильяс — большевик, инҡилап эштәренә йәне-тәне менән бирелгән кеше. Ә Айтуған, кире енсә, ғәскәрҙәр сафында уғыша, сотник. Улар бер-бере ен туған булараҡ ҡына түгел, шәхес рәүешендә лә ныҡ хөрмәт итәләр. Әммә ҡәрҙәшлек, туғанлыҡ ептәренән социаль-сәйәси ынтылыштар көслөрәк булып сыға. Ильяс менән Айтуғандың әм уларҙың бөтә ғаилә енең фажиғә е лә шунда. Айтуған да, ата ы Искәндәр ымаҡ уҡ, үҙ хаталарын уңлап аңлай.

Образ характерҙарының ошондай эволюция ында, әлбиттә, замана идеология ы тәьҫире лә юҡ түгелдер. Шуның менән бергә, драматургтың Искәндәр Байтирәков ғаилә е ағзалары, йәнә большевик Денисов, ҡыҙыл партизан Низамов, алдат Федорчук, шулай уҡ ҡаршы яҡ лагерь кешеләре Ҡарасурин бай, поручик Зинкевич, милләтсе Мәхмүди, атлыҡ йән Айсин кеүектәр йөҙөндә утлы инҡилап өйөрмә ендәге төрлө социаль ҡатламдарҙың тәғәйен урындарын, улар аша осорҙоң бик тә ҡатмарлы, сетерекле әм көсөргәнешле эске тәбиғәтен ярай ы тулы аса алыуын күрмәү мөмкин түгел. Ә. Мирза итовтың “Утлы өйөрмә” драма ы шул йылдарҙа уҡ тәнҡиттә Граждандар уғышы осорон сағылдырған иң әйбәт әҫәр тип танылды, күп кенә телдәргә тәржемә ителде, Мәскәүҙә “Искусство” нәшриәтендә илдең сәхнә репертуарҙары өсөн урыҫса ла баҫылып сыҡты.

Әлбиттә, “Утлы өйөрмә” Ә. Мирза итовтың тарихи темаға яҙылған берҙән-бер әҫәре түгел. 1972 йылда ул “Бәхтегәрәй” пьеса ында ошо уҡ темаға мөрәжәғәт итә-сәк. “Бәхтегәрәй” драма ы ниндәйҙер кимәлдә “Утлы өйөрмә”нең дауамы ымаҡ та ҡабул ителә. Әҫәр үҙәгендә яу ҡыры түгел, башлыса сәйәси бәрелештәр тора. Төрлө идеологик платформалы, төрлө ҡарашлы персонаждар ара ында Бәх-тегәрәй Шәфиев, әлбиттә, ҡаҡшамаҫ большевик, яңы йәмғиәт төҙөүгә бар булмы-шын биреүсе булараҡ үрәтләнә. Башҡа персонаждар, булып ятҡан ваҡиғалар тик уның күҙлеге аша ба алана. Шуға ла Зәки Вәлидов, Рыҫҡолов, Ишмырҙин кеүек милли хәрәкәт етәкселәре уның өсөн — өр өгән буржуаз-милләтселәр, ә улар ар-тынан барыусылар — ваҡытлыса хата юлға баҫҡандар. Замана ының ошондай тенденциоз ҡараштары сағылыуы менән бер рәттән, әҫәрҙә осорҙоң ҡырҡыу ҡар-шылыҡтарының сағыу яҡтыртылыуын да билдәләп үтергә кәрәк.

“Утлы өйөрмә” Ә. Мирза итовтың драматургия өлкә ендәге эшмәкәрлегенең ысын мәғәнә ендә өлгөргәнлек баҫҡысы булғандыр, моғайын. Ошонан уң йыл айын тиерлек ул осорҙа сәхнә күрке булырҙай, ә иң мө име, замана ы өсөн бик ак-туаль темаларға арналған “Әсәйемдең сал сәстәре” (1960), “Ауыл күренештәре” (1962), “Күршеләр” (1962), “Гөл баҡса ы” (1965), “ алдат улы” (1966), “Әсәләр көтәләр улдарын” (1975) кеүек пьесалары яҙыла. Уларҙың күбе е ҙур уңыш менән Башҡортостан, Татарстан, Ҡырғыҙстан сәхнәләрендә бара.

Әйтергә кәрәк, Ә. Мирза итов әҫәрҙәрендә уғыш әм тыныс тормош, социаль әм көнкүреш, үткән әм хәҙерге көн мәсьәләләре әр саҡ бер-бере енә бәйләнеп, үрелеп килде. Замананың ғәҙеллек әм яуызлыҡ, юғары рухиәт әм әхлаҡ ыҙлыҡ талаптары ла ошо нигеҙҙә үрәтләнде. 60—70-се йылдар башҡорт әҙәбиәтендә, бигерәк тә драматургия ында киң ҡолас алды был йүнәлеш. Унда, башлыса, көнкүреш ваҡиғаларын үрәтләү аша әхлаҡи тәрбиә мәсьәләләренә күберәк иғти-бар бирелә ине.

Тәрбиә мәсьәләләре, быуындар мөнәсәбәте Ә. Мирза итовтың “Әсәйемдең сал сәстәре” (1960) драма ында айырыуса эҙмә-эҙлекле, үткер ҡуйыла. Кем ул, ниндәй уйҙар менән йәшәй әҫәрҙең төп геройы Йондоҙ исемле, яңы ғына малай-лыҡтан сыҡҡан үҫмер егет? Ул да, ошо йылдар барса совет әҙәбиәтендә сағылған-са, быуындары ла нығынып өлгөрмәгән, кешеләргә, тормош асылына аныҡ ҡа-рашы булмаған, әммә үҙҙәрен “ер кендеге” анаусы “алтын йәштәр” затынан, имеш. Әммә йәмғиәт ошондай кешеләр өсөн дә көрәшә. Бер яҡта алдынғы ҡа-рашлы, ғәҙел рухлы көстәр тор а, икенсе яҡта — Гоша, Зизи, Дина кеүек рухи йә әттән меҫкен, буш ҡыуыҡ әтрәғәләмдәр. Ваҡытлыса ошондай әрәмтамаҡтар йоғонто она бирелгән Йондоҙ ҙа тайғаҡ юлға баҫа, енәйәтсе була яҙа. Шуның менән бергә, Йондоҙ, әлбиттә, енәйәтсе түгел, автор үрәтләгәнсә, ул ғәмәлдә— асыҡ күңелле, ғәҙел кеше, хыянатсылыҡты, ике йөҙлөлөктө, карьера артынан ҡыуыусыларҙы күрә алмай. Бына ошо ыҙаттар егеткә йәмғиәттә үҙ урынын та-бырға ярҙам итә лә инде.

Әлбиттә, “Әсәйемдең сал сәстәре” драма ында ла совет осорона, бигерәк тә у-ғыштан уңғы йылдарға хас замана идеология ы — йәштәрҙең ҡалаға китеп, юға-ры уҡыу йорттарына уҡырға инеүҙәренә йә и ә сәнғәт юғарылыҡтарына ынтылы-уҙарына ҡырын ҡараш үткәреү, уның урынына ҙур төҙөлөштәргә, завод-фабри-каларға эшкә барыу, яҙмышыңды иген баҫыуҙарынан эҙләү идея ы сағылмай ҡалманы. Йондоҙ ҙа күпмелер ваҡыт медицина институтында уҡый. Ләкин, йәнә е, үҙенән әйбәт табип сыҡмауын төшөнгәс, уҡыуын ташлап, заводҡа эшкә китә. Был йә әттән Ә. Мирза итовтың Гоша, Зизи, бигерәк тә карьеризм сиренә инеп батҡан комсорг Байсар кеүек замана әрәмтамаҡтарын йәмғиәттең сәләмәт тәнендәге ваҡытлыса осраҡлы йәм еҙ таптар рәүешендә генә күр әтмәксе. Ләкин,

уйла аң, был күренештәр шул заманда уҡ бөрөләнә башлаған тарҡалыуҙың, СССР тигән йәмғиәт нигеҙҙәренең юҡҡа сыға, “совет кеше е” концепция ының әхлаҡи, рухи йә эттән дә емерелә барыуының башы булманымы икән? Был осорҙа Ә. Бикчәнтәевтың “Ожмах вәғәҙә итмәйем” романы, М. Кәримдең “Йырланмаған йыр” драма ы кеүек әҫәрҙәрҙең донъя күреүе лә ошоно раҫламаймы ни? Был йә эттән Ә. Мирза итовтың ысын ҡаҙанышы шунда: ул әле был күренештәрҙең тыуа ғына башлаған осоронда уларҙы иҙгер тотоп алған, художестволы үрәтләү юғарылығына күтәргән. Шуның менән киләсәк быуындарҙы, йәмғиәтте иҫкәртә алған. Йондоҙ яҙмышы башҡаларға ла әсе тормош абаҡтарын татыу, кеше булып ҡалыу юлдарын күр әтә.

Шәхес әм йәмғиәт, аталар әм балалар, киләсәк быуынды ата-баба васыятына тоғро итеп тәрбиәләү, алдынғы әхлаҡ өсөн көрәш мәсьәләләре Ә. Мирза итовтың “ алдат улы”, “Ғүмер ике килмәй”, “Әсәләр көтәләр улдарын”, “Күршеләр” драмаларында ла киҫкен ҡуйылаҫаҡ.

“Күршеләр” (1962) драма ы был яҡтан бик үҙенсәлекле. Унда алғы планға шәхси әм ижтимағи мәнфәғәттәр, уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәре, ижади хеҙмәт әм потребителлек мәсьәләләре ярай ы үткер ҡуйылған. Үҙәктә ике образ — ике күрше — заводта цех начальнигы булып эшләүсе Рамазан әм ошонда уҡ оҙаҡ йылдар намыҫлы хеҙмәт күр әткән, әммә уңыраҡ бер аҙ ма ая, тәкәбберләнә башлаған ҡарт мастер Аҡназар.

Әҫәр сюжетындағы ҡаршылыҡтар ҡуйырып китеүенә цех начальнигы Рамазандың ҡарт мастер Аҡназарҙың юбилейын заводта үткәреүгә ҡаршы сығыуы сәбәпсе була. Аҡназар уҙаман, билдәле, ныҡ үпкәләй күрше енә, хатта ғүмер буйы эшләгән заводына эшкә йөрөүҙән дә туҡтай. Ләкин эш өйәр, намыҫлы мастер ҡул ҡаушарып ҡына өйҙә ултыра алмай. Йорт тирә ендә эш ҡырып йөрөүҙән ялыҡҡас, балта эшенә тотона. Оҫта оҫта инде, әйтер ең, юғары класлы фабрикаларҙа эшләнгән, ҡойоп ҡуйғандай нәфис шкафтар, комодтар, ултырғыстар, башҡа шундай кәрәкле йы аздар эшләп ташлай.

Әммә, әр эштең ике яғы була тигәндәй, Аҡназарҙың ошо әләтенән уның ҡатыны аша мещан әхлаҡлы Әхтәри менән Гәү әриә файҙаланмаҡсы, “оҙон аҡса” эшләп алмаҡсы. Әхтәри өйрәтеүе буйынса, Гәү әриә әм уның еңле е Хөрмә ҡарт мастер эшләгән әлеге әйберҙәрҙе баҙарға сығарып ата. Аҡназар и ә, намыҫлы эшсенән мещанлыҡ аҙлығына бата башлауын, алып атар, аҡса ҡолона әүерелә барыуын, “кем арба ына ултырыуын” аңлап, тәүге ҡат ныҡ ғәрләнә, асыуынан хатта әле генә үҙе яратып я аған нәмәләрен дә тураҡлап ташлай.

Ләкин, мебель тураҡлаған ымаҡ, үҙендәге кирелекте шулай еңел генә емереп ташлай алмай әле Аҡназар. Рамазанға асыуын уның улы Ғаязға күсерә, үҙ итеп, хөрмәт итеп, дипломын тотоп кәңәшләшергә тип килгән йәш егеткә илтифат ыҙлыҡ күр әтә, башҡа кешеләрҙән дә ситләшеп, йомолоп йәшәүен дауам итә. Ләкин ынылыш мәле Аҡназарҙа ла була барыбер. Был бигерәк тә завод директоры менән местком председателенең цех начальнигы Рамазанға яла яғырға тырышыуҙары әм ошо эштә хатта Аҡназарҙы ла файҙаланырға маташыуҙары эпизодында асыҡ күренә. Ғүмер баҡый намыҫлы хеҙмәт менән йәшәгән Аҡназарҙа ғәҙеллек тойғо о еңә, күрше ен яҡлап яла яғыусыларҙы фаш итә, берҙән-бер дөрөҫ юлды айлай.

Драматург заманының ыңғай сифаттарын цех начальнигы, Аҡназарҙың күрше е Рамазан образында туплаған. Рамазан эштә лә, өйҙә лә күршеләренә ҡарата әр саҡ ғәҙел, иғтибарлы, шул уҡ ваҡытта принципиаль дә. Тура үҙле, башҡаларҙың етеш еҙлектәрен йәшереп ярам аҡланмай, хәҡиҡәтте кешенең йөҙөнә ҡарап әйтә, ғүмерлек дуҫы, күрше е Аҡназар менән дә ошо арҡала үҙгә килә. Ләкин ул

асыу аҡламай, Аҡназарға ла, күрше енең үҙенә асыулы икәнен күрә тор а ла, әр саҡ иғтибарлы, уға ышаныс менән ҡарай. Ижади хеҙмәт әм потребителлек, шәхси мәнфәғәт әм ижтимағи бурыс ҡаршылыҡтары, мещанлыҡ әм гражданлыҡ позициялары бәрелештәре ана шундай тормошсан, заманы өсөн тәбиғи ваҡиға-ситуациялар аша хәл ителә.

1975 йылда ижад ителгән "Әсәләр көтәләр улдарын" драма ы — художество камиллығы, үрәтләнгән ваҡиғаларҙың эмоциональ тәьҫир көсө, тарихи а әңе, йыйнаҡ ойошторолошо йә әтенән, ис шик еҙ, яҙыусының иң уңышлы әҫәрҙәренең бере е. Драмала Бөйөк Ватан уғышы тема ы үҙенсәлекле психологик тәрәнлек менән асылған. Әҫәрҙәге төп ваҡиғалар, әлбиттә, бөгөнгө көндә бара. Әммә уғыштың трагик эҙемтәләре хәҙер ҙә йәшәүҙән туҡтамаған. Шуға үткән тарихи ваҡиғалар ҙа бөгөнгө көн талаптары аша ба алана. Төрлө геройҙар яҙмышында күр әтелә был: элекке әм хәҙерге колхоз рәйестәре Фәруҡша менән Тайфур, күпте күргән, күпте кисергән аҡ аҡал Исламғәле, фашист әсирлегендә тамуҡ ғазаптарын үткән рәссам Ғилмияр әм уғыш ҡырында ятып ҡалған улдарын ағынып, уларҙың ҡайтырына аман өмөттәрен өҙмәгән әсәләр Сафура, Шәфиға, Бибисара, Хафаса... Әсәләрҙең дә, уларҙың әләк булған балаларының да, ил кисергән уртаҡ яҙмыштары менән бергә, әр ҡай ы ының үҙ тарихы, үҙенсәлекле тормош юлы. Әйтәйек, Хафаса улы Мирсәлим үҙенең ғәзиз йәнен бик күп фашист танкыларын юҡ итеү бәрәбәренә фиҙа ҡыл а, етмеш йәшлек уҡытыусы Сафура әбейҙең улы Яхъя ынауҙарҙы күтәрә алмай, иленә хыянат ҡыла. Бына ошо ваҡиғалар, үҙенсәлектәр бөгөнгөнө лә формалаштыра, әсәләр әм балалар яҙмыштарын бергә бәйләй, ҡатмарлы тарихи күренештәрҙең асылын аңларға ярҙам итә. Драма әҙәбиәт өйөүселәр тарафынан ысынбарлыҡты, тарихи үҫеште юғары художестволы әм күп яҡлы үрәтләгән уңышлы әҫәр тип табылды әм Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ына лайыҡ булды. Ғөмүмән, "Әсәйемдең сал сәстәре", "Әсәләр көтәләр улдарын" әҫәрҙәрендәгесә, аталар әм балалар мөнәсәбәттәрен, был мөнәсәбәттәрҙең күсәгилешлеген, шул иҫәптән әсә, ғөмүмән, уғыш йылдарының рухи, физик ауырлыҡтарын тулы ынса үҙ иңдәрендә күтәргән фиҙаҡәр ҡатын-ҡыҙҙарҙың тулы ҡанлы, сағыу образдарын тыуҙырыу — Әсғәт Мирза итов ижадының мө им бер ыҙаты ла ул.

Әҙип башҡа халыҡтар әҙәбиәтенә лә иғтибарлы булды, әйбәт үрнәктәрен башҡортсаға ла ауҙарҙы, пропагандаланы. В. Гюго, М. Шолохов, В. Малюгин, Ю. Чепурин кеүек яҙыусыларҙың ижад үрнәктәре менән башҡорт уҡыусы ы нәҡ Ә. Мирза итов тәржемә ендә танышты.

Әсғәт Мәсғүт улы Мирза итовтың ижады әм ижтимағи эшмәкәрлеге хаҡлы рәүештә илебеҙҙең юғары ба а ын алды. Ул Башҡорт АССР-ы Юғары Советы депутаты әм Рәйесе булып айланды; республика комсомолының Ғәлимов Сәләм әм Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияларына лайыҡ булды. Шулай уҡ ике тапҡыр Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ (1971, 1978), Халыҡтар дуҫлығы (1984) ордендары менән наградланды. Хеҙмәтенә күрә — дәрәжә е. Фиҙаҡәр хеҙмәт, талант әм яуаплылыҡ менән яуланған үрҙәр былар. Әсғәт Мирза итовтың ижады ла — башҡорт совет әҙәбиәте тип аталған бөйөк хазинагөлләмәнең сағыу бер биҙәге. Оло ба аға лайыҡ был ижад яҡлауға әм аҡлауға, шулай уҡ тәрбиә система ында файҙаланыуға ла мохтаж.

**Роберт БАЙЫМОВ.**

# ОЛПАТ ӘМ ЯҠТЫ ШӘХЕС ИНЕ...

*Үткәндәрҙән иҫтәлеккә*
*Ултыртығыҙ аҡ ҡайын.*

**Әсғәт МИРЗА ИТОВ.**

Беҙҙең баҡса башында, ырҙын артында, бихисап сәскәләр менән сыбарланған-биҙәлгән сиҙәмлек-болонлоҡ бар ине. Йәй көнө, көтөү ҡайтып, әсәйҙәр ыйырҙарҙың тәмле-шифалы өтөн ауғас, малҡайҙарҙы ҡараңғы төшкәнгә тиклем ашатырға (“ ыйыр аҡларға”) шунда алып сығабыҙ. “ ыйыр аҡлау” “ат аҡлау”ҙан ҡайтышыраҡ бул а ла, уның да үҙ ләззәт-рәхәте, икенсе төрлө әйткәндә, романтика ы бар. Беҙҙең остағы әбей-бабайҙарҙың, бала-сағаның күбе е шунда була. Китә уйын-көлкө, йыр-бейеү — “киске уйын!” Түҙеп кенә тор! Ҡыҫҡа ы, үҙе бер ожмах-йәннәт мөйөшө инде!

Бер мәл шул йәннәт мөйөшө ҡосағында, ҙур-ҙур цистерналар, бихисап тимер мискәләр килтереп, “Заправка” я анылар. Нимә генә юҡ унда: бензин, солярка, кәрәсин, солидол... Ә еҫкәйҙәре! аҫыған йомортҡа ла унан ҡалышалыр... Ҡыҫҡа ы, әлеге йәннәт ҡултығының йәме китте: еләктәр кипте, сәскәләр бөттө, ыйырҙар ҙа ул төбәктән биҙҙе. Шул вәхшилеккә рәнйеп әм ғәҙел еҙлеккә түҙә алмайынса, мин бер шаршаулыҡ пьеса яҙҙым, әм уны класташ-синыфташтарым менән мәктәп сәхнә ендә дәррәү-дәрт әм асыу- ыҙланыу менән илай-илай уйнаныҡ (был беҙҙең самими бала саҡ менән хушлашыуыбыҙ ине). Был миңә ниндәйҙер сихри көс-дәрт, дарман бирҙе. әм мин ауыл ярлылары, көтөүселәр, фәҡирҙәр, етем-толдар — ғәҙел еҙлек тура ында өс шаршаулыҡ (!) драма яҙырға булдым (сәбәбе ниҙәлер — белмәйем, әммә шуны ы хаҡ: баҡ аң, көтөүселәр, ғәриптәр әм ата хәйерсе-фәҡирҙәр төп халыҡтан ситтәрәк — әр урамдың осонда, ауыл ситендә төпләнеп көн күрәләр). Ҡыҫҡа ы, мин ғәҙел еҙлек тура ында тетрәндергес пьеса яҙырға тейешмен! Был инде бер шаршаулыҡ пьеса йә и ә скетч түгел, шаҡтай белем әм тәжрибә талап итә. Пьесалар уҡыған, спектаклдәр ҡараған бар ҙа ул, хатта үҙебеҙ ҡуйған әм уйнаған саҡтар ҙа бар әле. Шуны ын да өҫтәйек: элек клубта ауыл йәштәре әм уҡытыусылар тамашаларҙы йыш ҡуя, уларҙы ҡарарға ауыл халҡы эркелеп-урғылып йөрөй ине. Әлбиттә, клубта спектакль ҡуйған көн “әртистәр” өсөн дә, ауыл халҡы өсөн дә үҙе бер ҙур байрам була торғайны.

Мин тәүәккәлләнем: өс шаршаулыҡ пьесаны яҙасаҡмын! Башҡалар быуылып-быуылып илап уҡырлыҡ әм спектаклен ыҡтап-иңрәп ҡарарлыҡ итеп яҙасаҡмын! Тик бына белем әм тәжрибә яғы ғына, әйткәнемсә, самалыраҡ. Был мәсьәләне хәл итеүҙең туп-тура юлын таптым инде мин: “Әҙәбиәт теория ы” тигән китап ебәреүен орап Башҡортостан Яҙыусылар

союзының әҙәби консультанты Әсғәт Мирзаитовҡа елле генә хат яҙып ебәрҙем. Ул унда Мәскәүҙә Юғары әҙәби курстарҙы, бер үк ваҡытта М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтын тамамлаған эшләй башлаған. Ана шул изге-серле-сихырлы китапты энә енән ебенә тиклем уҡып сыҡам, әр хәрефен әм үҙен ыйыр кеүек ҡабат-ҡабат көйшә әм, шул яҙмалағы ҡөҙрәти көс менән әҙәбиәт донъя ының ете ҡатламын аҡтарып, аҫтын өҫкә килтерәсәкмен. Бына шунан уң тыуасаҡ ул өс шаршаулыҡ шедевр!

Икеләнмәнем дә, ҡыйын ынманым да: ни ти әң дә беҙ — яҡташтар: ул — Бикмәттән, мин — Сәрәндән. Әсғәт ағайҙы күргәнем дә, хатта үҙ өндәшкәнем дә бар. Ҡайҙамы? Сәрәндә! Уның яҡын туғаны Сажидә апай Сәрәндә йәшәй бит. Әсғәт ағай менән Сажидә апайҙың әсәләре бер туған…

…1962 йылдың йәмле-нурлы июнь айы иртә е. Әсәй менән икәү, салғыларыбыҙҙы тотоп, йәйәүләп Ирмәш-Балтай яҡтарына бесән сабырға китеп барабыҙ. Әкрен генә иртәнге еңелсә- алҡынса томан күтәрелә. Юлыбыҙ киң, ҙур аҡлан аша үтә. Унда 4 ир-ат ҡайырып бесән саба. Урман ситендә, тағанда, аҡ яулыҡ әм аҡ алъяпҡыс бәйләгән бер өйкөмлө апай, талғын ғына йырлай-йырлай, мәтрүшкәле-еләкле сәй ҡайната. Ҡаҙанда итле урпа ҡайнай. Аш менән сәйҙең хуш еҫе тирә-йүнгә таралған. Төтөн, иртәнге өркөү томан кеүек, барлыҡ болонға йәйелгән.

Әсәй усаҡ янында иртәнге аш хәстәрләп йөрөүсе Сажидә апай менән йәнгә еңерлек итеп ихлас иҫәнләште.

— Миңйы ан, бына минең Өфөләге яҙыусы энем ошо була инде. Бөгөн төнгөлөккә ауылға ҡайтып торманыҡ. Әсғәт энем дә, Әүхәт улым да саф ауала ҡыуышта йоҡланылар…

Ул арала бесәнселәр ҙә салғыларын ағас ботағына элеп, табынға йыйылды. Бә леүән кеүек таҙа ир, ҡул-биттәрен йыуа-йыуа, әйтеп алды:

— Ожмах түре бит был, Сажидә апай. Болон тулы еләк, мәтрүшкә, бөтнөк, әллә ниндәй сәскәләр. Салғы менән елтәнергә лә ҡыйын ындыра… Иртәнге ысыҡта, ҡоштар айрағанда, тәбиғәт уянғанда бесән сабыу — үҙе бер ләззәт, тәнгә сихәт бит ул. Дөрөҫ өйләйемме, Әүхәт энем…

Әсғәт ағайға ҡарап оҡланып туя алманым мин ул саҡта. Тере әйкәл инде бына! Ә тауышы — Левитандыҡы! Урман, аҡлан-болондар яңғырап тора. Ул оҫта скульптор мәрмәрҙән соҡоп-киртеп әм юнып эшләгән кеүек етди-талапсан әм бер аҙ ҡырыҫ йөҙлө, ҙур башлы, мө абәт буй- ынлы, оҙон-төҙ кәүҙәле ир-ат. Унан ҡеүәтле көс-энергия, зирәклек әм аҡыллылыҡ, эшлеклелек, етдилек бөркөлөп тора. Ул әр саҡ абруйлы, үтә талапсан, олпат булды. Мораль кодекс, моғайын, унан алып яҙылғандыр…

Сажидә апай, Әсғәт әм Әүхәт ағайҙар беҙҙе ифрат тәмле итле аш әм мәтрүшкәле-еләкле сәй менән ыйлап оҙаттылар. Бына шулай “таныштым” мин Әсғәт ағай менән…

Бер аҙҙан Башҡортостан Яҙыусылар союзынан — Әсғәт ағай Мирзаитовтан почта открытка ы алдым. Унда түбәндәге үҙҙәр ифрат матур, тыйнаҡ почерк менән яҙылғайны:

*“Замир туған!*

*Яҙыусы булырға теләйем, тигән хатығыҙҙы алдым. Яҡшы теләк. Ләкин яҡшы теләк менән генә яҙыусы булып булмай бит. “Әҙәбиәт теория ы” уҡып ҡына ла яҙыусы булып булмай. Ҡыҙыҡ хәл бит, туғанҡай, талант кәрәк. Йырсыға — тауыш кәрәк булған кеүек. Та-*

*ланттың барлығын-юҡлығын белеү өсөн яҙып ҡарарға кәрәк. Яҙып ҡарағыҙ. Ебәрегеҙ. Уҡырбыҙ. Бына шул хәҙергә.*

*Тормошоғоҙҙа уңыштар теләйем. Әлегә хушығыҙ.*

Әсғәт МИРЗАИТОВ.
05.08.1963”.

Был иҫтәлекле открытка бөгөнгө көндә лә минең бай архивта аҡлана. Уға — 45 “йәш”!

Миңә, ҡулыма яңы ғына ҡәләм алған аҡыллы баш йәш үҫмергә (имеш, мин “Ленинский путь” — “Ленин юлы” ҡала-район гәзитенең штаттан тыш хәбәрсе е!), шул аҡыллы кәңәште тоторға кәрәк тә бит, юҡ шул. Әсғәт ағайға ҡайнар баштан, яр ыу йөрәктән тетмә ен тетеп, антын әйттереп, яуап хаты яҙып ебәрҙем (мин ғүмерем буйы, тиҫкәре булма ам да, үҙ үҙле булдым, артҡа сигенеүҙе белмәнем, шуның арҡа ында күпме әсе урпалар емерҙем, күпме ғазаптар кисерҙем, бихисап язалар алдым): имеш, яҡташым Әсғәт Мирза итов, танылған драматург бул а ла, кишер ҙә белмәй икән. Башта әҙәбиәт теория ын ыу кеүек эсергә кәрәк, шунан ғына ҡулға ҡәләм алырға, юғары сифатлы, күренекле әҫәрҙәр ижад итергә була. Ана, мәктәптә лә сабыйға башта “Әлифба”ны төшөндөрәләр, шунан уң ғына уҡырға-яҙырға өйрәтәләр... Ҡыҫҡа ы, утаным ғына Әсғәт ағайҙың гөл баҡса ын!..

Аңлашыла инде, мин ул өс шаршаулы пьесаны яҙманым, дөрөҫөрәге, яртылаш яҙҙым да ташланым. Өҫтәүенә, бала саҡтан уҡ яратып-онотолоп, яҡты хыялдарға сумып уҡыған сәхнә әҫәрҙәрен уҡыуҙан биҙҙем, бары тик яратып-бирелеп спектаклдәр генә ҡарарға күнектем. Башҡорт дәүләт университетында уҡығанда әҙәбиәт теория ын рус әм татар телдәрендә әр күҙәнәгемә еңерлек итеп, ыу ынды ҡайтарыу өсөн шифалы ыу урынына услап-услап йоттом, әммә бер генә йүнле- аллы әҙәби әҫәр ижад итә алманым (талант менән әләт етмәгәндер, күрә ең). Әсғәт ағай мең-мең тапҡырҙар хаҡлы булған икән...

Башҡорт дәүләт университетындағы бер әҙәби-музыкаль кисәлә Әсғәт ағай менән йөҙгә-йөҙ осраштым. Ҡыйын ынып, ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына үҙемдең ҡайҙан әм кем булыуымды әйттем, мәғәнә еҙ хатым өсөн ғәфү үтендем (юҡ ти әң дә, бер аҙ аҡыл, тамсылап ҡына бул а ла, йыйыла-ултыра башлаған икән әле). Ул мине көслө ҡулдары менән иңбашымдан ҡыҫып ҡосаҡлап алды:

— Рәхмәт, яҡташ! Эт урынына үгеп миңә хат яҙған егет ин була ыңмы ни инде ул?! Дәү үҫкән ең, минең буйы булған ың. Уҡырға кереп дөрөҫ эшләгән ең. Молодец! Бер ҡасан да, бер кемдән дә ҡурҡып йәшәргә ярамай. Ҡурҡытырға ла кәрәкмәй. Аҡыллы, тәрбиәле булырға кәрәк...

уңыраҡ яҡташым Әсғәт ағай менән ирәк-мирәк кенә бул а ла осрашырға тура килә ине. Ул, шаяртып әм яратып, шул хат ҡисса ын иҫкә төшөрөргә ярата ине...

***

Сәрән башланғыс әм Арыҫланбәк игеҙ йыллыҡ мәктәптәрен тамамлағас, мин уҡыуымды Ҡандралағы 2-се татар урта мәктәбендә дауам итергә булдым (Ҡандра менән Сәрән ара ы — 8 саҡрым, йәй көндәрендә әр көн велосипедта үтәбеҙ был араны, ҡышын интернатта йәшәп уҡыйбыҙ). Татар теле әм әҙәбиәте уҡытыусы ы Бикә Хәләф ҡыҙы Мөфтиева (ул әҙәби

түңәрәкте лә етәкләй ине) беренсе дәресендә үк беҙҙең ушты алды, зиенде таратты: был мәктәптә күренекле шәхестәр — драматург Әсғәт Мирзаитов, композитор Әкрәм Дауытов, шағир Муса Сиражи, прозаик Наил Ҡотдосов белем алғандар.

Китте эштәр худҡа: республика әм ҡала-район гәзиттәрендә бер-бер артлы хәбәрнамәләрем әм мәҡәләләрем донъя күрә. Өҫтәүенә, бер хикәйәм “Башҡортостан пионеры” гәзите үткәргән конкурста еңеп сыҡҡан, редакциянан, бүләк итеп, тиҫтәнән артыҡ автографлы китап ебәргәндәр. Мәктәп директоры Ҡасим Мирзаян улы Ишкилдин уны, ҙурлап, линейкала тантаналы рәүештә тапшырҙы.

1965 йылдың май айында мәктәпкә драматург Әсғәт Мирзаитов үҙе килде, ҙур залда унның менән ифрат ҡыҙыҡлы әм йылы осрашыу булды. Ул ҙур әм онотолмаҫлыҡ байрамға әйләнде...

Ҡандра биҫтәенә әҙиптең кендеге береккән. Әсғәт, әсәе бик йәшләй вафат булғас әм атаы Мәсғүт, балдыҙына өйләнеп, Урта Азия яҡтарына “бәхет эҙләп”сығып киткәс (ата менән ул бары тик 1966 йылда ғына яңынан осраша), Сания әбеендә тәрбиәләнә (Әсғәт уны “инәкәй” тип йөрөтә). Етмәә, бала сағы ауыр уғыш йылдарына тура килә. “Мин тәрбиәгә алған бала булып түгел, ә унның үҙ балаы булып үҫтем,— тип хәтерләй Ә. Мирзаитов.— Сания инәкәйем ирҙәрсә тәбиғәтле, бер аҙ ҡырыҫ холоҡло була ла, бик ғәҙел кеше ине. Ғәҙеллекте ҡамсы менән яҡлаған сағы ла булды, әммә миңә тырнаҡ менән дә сиртмәне. Ҡырыҫ тәбиғәте ауыр тормош өҙөмтәелер: ул Беренсе донъя уғышы алдынан дүрт ҡыҙ бала менән тол ҡалған... Мин унның ял иткән ваҡытын хәтерләмәйем. Ул, оло йәштә булыуға ҡарамаҫтан, еҥ ыҙғанып колхозда эшләне. Эштең еңелен эҙләмәне, ир-ат менән рәттән көн күрҙе. Шуғалыр ҙа ул ауылдың ихтирамлы кешеләре araында йөрөнө, йыйылыштарҙа йәки аш- ыуҙа урыны түрҙә булды... Инәкәйем 1945 йылдың 22 майында вафат булды...”

Әсғәт Мирзаитовтың тәүге әҙәби тәжрибәләре Ҡандралағы 2-се урта мәктәптә уҡығанда башлана (әйтергә кәрәк, мәктәп дирекцияы, поселок әм ҡала, район хакимиәттәре башлыҡтары, әлеге мәктәпкә Әсғәт Мирзаитов исемен биреүҙе үтенеп, Башҡортостан Мәғариф министрлығына бынан 10 йыл элек рәсми рәүештә мөрәжәғәт иткәндәр, кәрәкле ҡағыҙҙарҙы тултырып илтеп тапшырғандар ине, әммә ләкин мәсьәләнең бөгөнгә тиклем хәл ителгәне юҡ). Башта шиғырҙар яҙа әм тәржемә итә, ҡайы берҙәре Ҡандра район гәзитендә донъя күрә. Ә 1944 йылдың 23 февралендә Ҡандра тимер юлсылар клубында унның “Йәш партизан” исемле пьесаы ҡуйыла, төп ролде автор үҙе башҡара...

Күренекле драматург, дәүләт әм йәмәғәт эшмәкәре, “Ағиҙел” журналының баш мөхәррире, Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараы рәйесе, СССР Яҙыусылар союзы идараы секретары, Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Рәйесе булып эшләгән, Башҡортостандың Ғ. Сәләм әм Салауат Юлаев исемендәге премиялары лауреаты Әсғәт Мирзаитов Ҡандралағы мосолмандар зыяратында ерләнгән (ул 1989 йылдың 11 ноябрендә ҡаты ауырыуҙан вафат булды), унның ҡәбер ташында хатта фотоүрәте лә юҡ. Унның тормош иптәше Зилә ханым да (Ауырғазы ҡыҙы, ғүмере буйы врач булып эшләне) 2007 йылда вафат булды әм ире менән йәнәш ерләнде. Тупраҡтары еңел-йомшаҡ әм урындары ожмах-йәннәттең түрендә булын.

Амин!

Әйтергә кәрәк, Әсғәт Мирза итовтың әр әҫәренең башҡорт драматургияында үҙ урыны бар. Улар бары ы ла тормошсан: “Боҙҙар аҡтарылғанда”, “Утлы өйөрмә”, “Әсәйемдең сал сәстәре”, “Күршеләр”, “ алдат улы”, “Ауыл күренештәре”, “Гөл баҡса ы”, “Бәхтегәрәй”, “Ғүмер ике килмәй”, “Әсәләр көтәләр улдарын”. Минең ҡарашҡа, Башҡортостан Яҙыусылар союзының Әсғәт Мирза итов етәкселек иткән 15 йылы — ижади ойошманың алтын осоро! Ниндәй генә саралар үткәрелмәгән унда!

Ә шул олуғ әм яҡты шәхестең исемен мәңгеләштереү буйынса нимәләр эшләнде уң? Бер нәмә лә! Әҙиптең вафатына оҙаҡламай ике тиҫтә йыл туласаҡ, ә ҡәбер ташында аман фоторәсеме лә юҡ. Оят бит! Әле драматургтың Өфө ҡала ы Карл Маркс урамындағы йортона иҫтәлекле мәрмәр таҡтаташ ҡуйылды-ҡуйылыуын, әммә уны ы ла — Туймазы ҡала-район хакимиәте аҡса ына.

Әсғәт Мирза итовтың исемен мәңгеләштереү өсөн нимәләр эшләргә кәрәк уң?

1. Уның исемен:
   - Туймазы татар дәүләт драма театрына;
   - Өфөләге, Туймазылағы, Ҡандралағы берәр урамға;
   - Ҡандралағы 2-се урта мәктәпкә бирергә.

2. Бикмәт ауылында әм Ҡандраның 2-се урта мәктәбендә мемориаль таҡтаташ ҡуйырға.

3. Өфөлә, Ҡандрала әм Бикмәттә драматургтың йорт-музейын булдырырға.

4. Ҡандра зыяратындағы ҡәберенә әйкәл ҡуйырға.

5. Әсғәт Мирза итов тура ында иҫтәлектәр китабы, үҙенең айланма әҫәрҙәр йыйынтығын сығарырға.

6. Драматургтар ара ында Әсғәт Мирза итов исемендәге премия булдырырға.

7. Юбилей кисә ен Өфөлә — Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында, Туймазыла — татар дәүләт драма театрында үткәрергә.

**Замир НИЗАМЕТДИНОВ,**
**журналист.**

*Тарих яҙыу өлкә ендә кире ҡаҡҡы ыҙ факттар менән бергә уны теркәгән кешенең шәхси ҡарашы ла урын алғылай. Был тарихсының ҡай ы ҡәүемгә, уның ниндәй ҡатламына ҡарауына, интеллектына әм, әлбиттә, объективлығына бәйле. Шул уҡ ваҡытта сит халыҡ тарихын яҙған кешенең объективлыҡ менән бик иҫәпләшеп бөтмәүе лә ихтимал. Фекерҙе дәлилләү өсөн совет осоронда башҡорт халҡының тарихын үрәтләүгә мөрәжәғәт итеү ҙә етә. Йәнә е, башҡорттарҙың яҙма ы, ҡалалары, дәүләте булмаған. Бер үҙ менән әйткәндә, совет власы ихтыяр ҡуйма а, башҡорттарҙың дәүләтселеге әле лә булмаҫ ине. Билдәле, быndай тарихты башҡорт белгестәре яҙманы. Ул элекке идеология ҡалыптарында яралып, ҡай ы берәүҙәрҙең был "тарих"ҡа теге йә был сәбәптәр арҡа ында йәки уҡыр рәүештә эйәреүе хәҙер бер кемгә лә сер түгел.*

*Бәхеткә күрә, уңғы йылдарҙа тарихсылар был "асыш"тарҙы шик аҫтына алып, уларҙың ысынбарлыҡҡа тап килмәүе, ғәмәлдә башҡорт халҡының сығышы бик боронғо, уның үҙ ҡалалары, дәүләтселеге, иҫке төрки телендә яҙма ы булыуы тура ында байтаҡ кире ҡаҡҡы ыҙ әм төҙөк мәғлүмәттәр баҫтырып сығарҙы. Өфө ҡала ына нигеҙ алыныуҙың да, яңы ҡараштарҙан сығып ҡарағанда, рәсми сәйәсәт менән тап килмәүе тәбиғи, сөнки рәсми сәйәсәткә уңлау хас.*

*Башҡорт тарихсыларының яңы быуыны Өфө ҡала ының барлыҡҡа килеүен XVI быуат йәки башҡорт ырыуҙарының Мәскәү дәүләтенә ҡушылғандан уңғы осор менән бәйләүгә ҡаршы сығып, Өфөнөң бынан 1,5 мең йылдар элек нигеҙләнеүен ниндәйҙер дәрәжәлә "Өфө-II" ҡаласығында табылған факттар менән иҫбат итеүенә ҡарамаҫтан, рәсми даирәләр фекеренсә, баш ҡалаға 450 йыл да юҡ әле.*

*Әлбиттә, бер үк мәсьәләгә тарих күҙлегенән ике ҡараштың булыуы мөмкин түгел. Йәмәғәтселектең, рәсми органдарҙың уның бере енә туҡталыуы мотлаҡ. Журнал уҡыусыларға тәҡдим ителгән түбәндәге яҙмаларҙа әүәҫкәр тарихсы Р. Вахитов Өфөнөң барлыҡҡа килеүен XVI быуат урта ы менән түгел, ә уға тиклемге күптәнге осор менән билдәләй әм үҙ дәлилдәрен килтерә.*

# Өфөгә нигеҙ  алыныу: мифтар  әм ысынбарлыҡ

Совет тарихсылары башҡорт халҡының яңы тарихҡа тиклемге йәшәү рәүешен күскенселек концепция ы менән бәйләне. Шул концепцияны көсәйтеү өсөн улар, борон башҡорттарҙың ҡалалары булмаған, тигән ялған фекер үткәреүҙән дә тартынманы. Имеш, Өфө ҡала ына нигеҙ 1574 йылда ғына  әм урыҫтар тарафынан  алынған. Ә бына хәҙерге баш ҡаланың көньяҡ өлөшөндә табылып, тикшерелгән археологик ҡомартҡылар бында кешеләрҙең таш быуаттан уҡ йәшәгәнен дәлилләй. Ҡариҙел тамағындағы ярымутрау боронғо кешеләр өсөн ифрат уңайлы төйәк булған. Ике киң йылға, – Ҡариҙел  әм Ағиҙел–уларҙың бейек текә ярҙары бында йәшәгән кешеләрҙе дошмандарҙың көтмәгәндә  өжүм итеүенән ҡурсалап торған.

Бында бронза дәүерендә лә кешеләр тереклек иткән, ә тимер дәүере башланыу менән улар тәүге ҡаласыҡтарға нигеҙ  алған. Өфө-I тип аталғаны әлеге "Йәшел сауҡалыҡ" шифахана ы тирә ендә урынлашып, Ҡариҙел йылға ының уң ярындағы текә морондо биләгән. Ул ҡаласыҡтың өс яғында текә битләү бул а,  өҙәк яғы тупраҡтан өйөлгән ур  әм 97 метрлы соҡор менән  аҡланған. Ур өҫтөнә бүрәнә ҡойма ҡуйылған булған. Был ҡаласыҡ тура ында тәүге мәғлүмәтте XVIII быуатта билдәле сәйәхәтсе П. Паллас яҙып ҡалдырған. Археологтар шундай уҡ ҡаласыҡтарҙы Өфөнөң Салауат Юлаев  әйкәле торған ерендә, Ағиҙел йылға ы буйлап "Воронки" электр транспорты туҡталышында ла тапты.

Хәҙерге Өфө урынлашҡан майҙан урта быуаттар башында, әле Башҡортостан Мәскәү дәүләтенә ҡушылмаҫ элек, бигерәк тә әүҙем үҙләштерелә. Әлеге Пушкин  әм Воровский урамдары сатында ошо осорға ҡараған ҙур ҡаласыҡ Өфө-II табылды. Өфө ярымутрауында кешеләрҙең оҙаҡ ваҡыттар дауамында  әм даими йәшәүен бындағы күп  анлы ҡәберлектәр ҙә дәлилләй. Улар ара ында Башҡортостан медицина университеты ихата ында, Мосолмандар зыяратында табылған таш төрбәләр  әм ҡурғандар тарих, археология өсөн айырыуса ҡыҙыҡлы.

Иң боронғо сығанаҡтарҙың бере е–1154 йылғы ғәрәп сәйәхәтсе е Иҙриси карта ында Ағиҙел менән Ҡариҙел ҡушылған урында ҡала билдә е бар. XIV быуат башында башҡорттарҙың Алтын Урҙа составында милли мөхтәриәткә нигеҙләнгән Баскардия тигән дәүләте булыуы билдәле. Ул дәүләттә мосолман хакимы булып, идара итеү аппараты ла эшләгән. Тимәк, хөкөм итеү, я аҡ йыйыу, почта  әм башҡа хеҙмәттәр урынлашҡан административ үҙәк ролен үтәгән. Был осор Үзбәк хан дәүерендә Алтын Урҙала сауҙа сәскә атып, ҡалалар барлыҡҡа килеү йылдарына тура килә. Был ҡалалар Европанан килгән сауҙагәр, миссионер  әм сәйәхәтселәргә билдәле булып, улар ошо ҡалаларҙы карталарына теркәп ҡуйған.

XIV быуаттың икенсе ярты ынан башлап ағалы-энеле Пициганоларҙың (1367)  әм Авраам Креекстың (1377) боронғо карталарында Кама йылға ы буйында Паскерти (Паскатир, Башҡорт)  әм Сәғәтин тип билдәләнгән башҡорт ҡалалары күр әтелә. Г. Меркатор карта ында (1554) Башҡорт (Паскерти) ҡала ы Ағиҙел  әм Ҡариҙел ҡушылған урында аныҡ билдәлән ә, Сәғәтин Ҡариҙел йылға ы үрендә теркәлгән. Күренеүенсә, урта быуат баштарында уҡ карталарҙа Өфө ҡала ы урынлашҡан ерҙе Ҡариҙел (артабан–Өфө) тамағы менән бәйләгәндәр. Тәүҙәрәк был ҡала ошонда йәшәгән халыҡ исеме менән Паскерти, йәғни Башҡорт тип күр әтелә. Ләкин был хәҡиҡәткә тап килмәй, башҡорт халҡы ул замандарҙа  ҙур территорияны биләгән. Дөрөҫө –  уңынан ҡала атама ының Өфө йылға ы менән бәйләнгәне. Йылға исеме ҡала атама ына нигеҙ була.

Ә “Өфө” үҙе нимә аңлата уң? Йылға исемдәре йыш ҡына төрлө телдәрҙә ыу, дым, ысыҡ, йылға мәғәнә ендәге үҙҙәр менән бәйле. Дим—дым, Ыҡ—ысыҡ, Йүрүҙән—йур—шәп ағымлы, Үҙән—йылға, Эҫем—мал уғара торған урын, Иҙел—ҙур йылға, Ағиҙел—аҡ иҙел (урыҫса ы ла шунан—Белая). Ҡариҙел—ҡара (төньяҡ) иҙел, төрки халыҡтар биргән исем. Унын буйҙарында йәшәгән боронғо фин-уғыр халыҡтары был йылғаны “Өпө”, “Упе” тип атаған. Улар телендә “Упе” йылға үҙенән килеп сыҡҡан, “упҡын” үҙе шуға тамырҙаш. Иҫке карталарҙа, мәҫәлән, Н. Самсондың 1688 йылғы Рәсәй карта ында, был йылғаның исеме “Уппа” тип теркәлгән. Өфө йылға ының уң ярындағы ерҙәрҙә төрки-фин сығышлы Өпәй ырыуы башҡорттары йәшәүе билдәле.

Ә хәҙер сәйәсәт йоғонто она ҡағылмаған бер боронғо документҡа иғтибар итәйек. Ул—“Ҙур ыҙма китабы” (Книга Большому Чертежу). Беренсе тапҡыр Рәсәй карта ын төҙөргә 1598 йылда ынтылып ҡарайҙар, икенсе ендә—1627 йылда. Үкенескә ҡаршы, ул карталар аҡланмаған. “ ыҙмаға...” ҡараған “Китап”тың “Волга йылға ы” бүлегендә шундай юлдар бар: “...ә Белая Воложкала (Ағиҙел”дә —**Р.В.**) Кама йылға ынан 120 саҡрымда Өфө ҡала ы, ә ҡаланан аҫта Белая Воложкаға Өфө йылға ы ҡоя”. Шулай итеп, XIV быуаттағы тәүге Европа карталарындағы кеүек үк, уңыраҡ төҙөлгән Рәсәй карталарында ла Өфө ҡала ы урынлашҡан ер Өфө йылға ы тамағында күр әтелгән. Боронғо картограф та Өфө ҡала ынан түбәндәрәк Ағиҙел йылға ына Өфө йылға ының ҡушылыуы тура ында яҙып ҡалдырған. Тимәк, борондан уҡ Өфө ҡала ы Өфө йылға ының тамағы өҫтөндә хәҙер Иҫке Өфө тип аталып йөрөтөлгән ерҙә урынлашҡан. Бында 1505 йылда Ҡазан ханы тарафынан ҡуйылған Өфө кенәзе Ҡара Килембәт йәшәгән. Хан бойороғо менән ул ошонан Ҡазан ханлығының мөстәҡиллеге өсөн атыулашыу маҡсатында урыҫ батша ы Иван III Васильевичҡа барған. уңынан Өфө ҡала ы нуғай хандары хакимлығы аҫтында ҡала.

XIX быуат аҙағында Өфө ҡала ының башлығы Д. Волков “Өфө ҡала ы тарихы буйынса материалдар” тигән хеҙмәт ҡалдырған. Ҡаланың Рәсәйгә тиклемге осоро тура ында ул былай тип яҙа: “Был ҡаланың уңғы хакимы Түрә Бабату Клюсов (дөрөҫө “Түрә баба—Түкләс”—**Р.В.**) исемле нуғай ханы булып, бында бары тик ҡыш айҙарында йәшәгән, ә йәйҙәрен Өфөнән 50 саҡрым тирә ендә Дим йылға ы буйлап күсенеп йөрөгән”. Волковтың ошо мәғлүмәтенән күренеүенсә, Өфө ҡала ы башҡортттарҙың Мәскәү дәүләтенә ҡушылыуына тиклем, нуғай ханы Түкләс осоронда ла, уға тиклемге дәүерҙәрҙә лә үҙ урынында булған, сөнки нуғай ханы Түкләс Өфөнөң урыҫтарға тиклемге уңғы ханы, тип телгә алына. Тимәк, ҡаланың нуғай ханына тиклем дә башлыҡтары булған.

Шулай итеп, урыҫ батша ы Иван Грозный Ҡазанды алғанға әм башҡорттарҙың Мәскәү дәүләтенә ҡушылыуына тиклем 200 йыл элек үк Өфө йылға ының текә ярында Өфө ҡала ы булып, Алтын Урҙа дәүләтендә башҡорттарҙың административ үҙәге ролен үтәгән. Урҙа тарҡалғандан уң Өфөлә Ҡазан ханлығы вәкиленең хеҙмәттәре, уңынан нуғай хандары урынлашҡан. Әммә рәсми сығанаҡтарға тоғролоҡ аҡларға тырышҡан тарихсыларыбыҙ ул замандағы ҡаланы белмәмеш-күрмәмешкә алышып, Санкт-Петербург академигы, элек Өфөлә йәшәгән П. Пекарскийҙың ҡалаға нигеҙ 1586 йылда ғына алыныуы тура ындағы мәғлүмәтен бер үҙ еҙ ышанып ҡабул итте. Пекарскийҙың был мәғлүмәте Мәскәүҙең нуғайҙар менән 1586 йылдағы дипломатик хатлашыуына нигеҙләнгән. Шул йылдың яҙында нуғай ханы Урус урыҫтарҙың “...Өфө йылға ында, тағы ла Увелкала, тағы ла амарҙа, тағы ла Белая Воложкала” дүрт ҡала алыныуы тура ында яҙған. Ул батшаға былай тип асыу белдерә: “Был ҡалаларҙы дуҫлыҡ өсөн түгел, яуыз ниәт менән ҡорған ың...”

Бында үҙ Өфө йылға ы үрендәге урыҫтарға 1399 йылдан бирле билдәле булған Сәғәтин ҡала ындағы ҡәлғә әм Ағиҙел буйында Өфө ҡала ы янында урыҫтар тарафынан төҙөлгән нығытма тура ында бара. Был башҡорт ҡалаларының урыҫтар килеүҙән байтаҡ элегерәк башҡорт ерендә булыуын тарихсылар ныҡлап йәшерә килә. Өфө ҡала ының урыҫтар тарафынан алыныуы тура ындағы мифты улар бар хәйлә-оҫталығын биреп яҡларға тырышты. Ошо йә эттән абруйлы тарихсы Ә. Усмановтың фекере бигерәк тә үҙ-үҙен фашлай: “Добровольное присоединение Башкирии к Русскому государству” тигән китабында ул былай тип яҙа: “Өфө” атама ы ҡала төҙөлгән ваҡытта, йәғни 1574 йылда, йәи ә 1586 йылда барлыҡҡа килмәгән; ул XVI быуат башында уҡ иҫкә алына”. Хөрмәтле тарихсыбыҙ Өфө ҡала ына нигеҙ алыныуҙың урыҫ версия ын иҫбатлайым тип, шул тиклем буталып бөткән ки, хатта ҡаланың атама ы ҡала төҙөлгәнгә тиклем 70-80 йыл элгәрерәк барлыҡҡа килеүе тура ында яҙып ебәргән. Бының булыуы мөмкин түгел! И. Ниғмәтуллина ла үҙенең “Иҫке Өфө” тигән хеҙмәтендә ҡалабыҙҙың нигеҙләнеүен алдараҡ барлыҡҡа килгән атама ы тура ындағы ялғанды күсереп яҙмаҫ ине. Әгәр XVI быуат башында ҡаланың исеме булған икән, тимәк, батша Иван Грозный тыумаҫтан алда уҡ ҡала ла булған.

Ә. Усмановтың иҫкә алынған хеҙмәтендә Өфө ҡала ы тарихын яҡтыртыуҙың тағы ла бер ҡыҙыҡлы әм иҫәпкә алырлыҡ нескәлеге бар. XVI быуат башында башҡорттарҙың Ҡазан ханлығы хакимлығы аҫтында йәшәүе тарихын хикәйәләгәндә, ул бер нисә тапҡыр Өфөнө иҫкә алып, бында нуғай ханы Аҡназарҙың булыуы тура ында яҙ а ла, Өфөнө бер тапҡыр ҙа “ҡала” тип атамай. Ысынлап та, исеме бар, ә ҡала үҙе юҡ! Был шәүлә–ҡала түгел. Был Өфө ҡала ына нигеҙ башҡортттарҙың Мәскәүгә ҡушылыуынан уң алыныуы тура ындағы миф.

Әлеге китаптың Өфөнө нигеҙләүгә арналған бүлегендә был миф ҡыҫҡаса ошолай нарыҡлана: “Буласаҡ Өфө ҡала ының нигеҙен 1574 – 1586 йылдарҙа төҙөлгән “Кремль” тәшкил иткән. Ул Сутолока йылға ы Ағиҙелгә ҡойған урында, унының уң яҡ ярындағы бейек морондоң көньяҡ өлөшөн биләп торған”. Был урын әм йылға тәүҙә “Суколака” тип аталып, башҡортса “ ыу ҡолағы” үҙенән килеп сыҡҡан. Күрә ең, йылға Ағиҙелгә түгел, ә ҡасандыр бында булған йылға ҡултығына, йәғни ыу ҡолағына ҡойған. Бында электән үк пристань булыуы ошоно уҡ йөпләп тора. Бындағы “Кремль”гә нигеҙ алынғанға тиклем үк Европала ошо урында ҡала булғанлығын белеп, картаға төшөрөп ҡуйғандар. Ә беҙҙең тарихсыларыбыҙ европалыларҙан уң 600 йыл үткәс тә ошо турала яҙырға батырсылыҡ итмәй. уңғы йылдарға тиклем тиерлек карталарҙа Башҡортостаныбыҙҙы, унының ҡалаларын күреү мөмкинлеге булманы. Ә бының өсөн әллә ниндәй ҡыйынлыҡтар ҙа юҡ ине бит. Рәсәйҙә XIX быуат аҙағында ошо карталар тура ында белә әм яҙалар бит. 50 йыл элек был турала Татарстан тарихсылары ла хәбәрҙар ине. Әйтергә кәрәк, Татарстанда Ҡазан ханлығы буйынса сыҡҡан китап, карталарҙа урыҫтар Ҡазанды алғандан күпкә әүәлерәк, кәмендә XV быуат урталарынан бирле, Ағиҙел әм Өфө йылғалары ҡушылған урында ҡала булыуы билдәләнә. Тик беҙҙең баш ҡалабыҙҙа ғына Ҡазандың ҡолауынан уң 22 йыл үткәс кенә Өфөгә урыҫтар тарафынан нигеҙ алыныуы тура ында ярам аҡланып тәкрарлауҙы дауам итәләр.

Революцияға тиклемге тарихи хеҙмәттәрҙә, мәҫәлән, Н. Карамзиндың “История государства Российского” тигән китабында Өфө ҡала ы Иван Грозный нигеҙләгән ҡалалар иҫәбендә телгә алынмай. Карамзин былай тип яҙа: “Ошо батшалыҡ итеү осорондағы маҡтауға лайыҡ эштәр иҫәбенә сиктәребеҙ именлеге өсөн байтаҡ ҡалалар төҙөүҙе индерергә мөмкин. Иҫкә алынған Лайыш,

Чебоксар, Козмодемьянск, Болхов, Орел әм башҡа ҡәлғәләрҙән тыш, Донков, Епифан, Венев, Чернь, Кокшажск, Тетюши, Алатырь, Арзамас ҡалаларына Иоанн нигеҙ алды". Башҡортостанда боронғо карталар тыйылғайны. Бары тик уңғы ваҡытта башҡорт халҡының күсмә тормошта йәшәү концепция ы әм Өфөгә нигеҙ алыныуҙың урыҫ версия ы авторҙары был донъянан киткәс кенә беҙ А. Псянчиндың "Башҡортостан боронғо карталарҙа" тигән китабын күрә алдыҡ. Ә шулай ҙа 1574 йылда Сутолоканың уң ярында Иван Нагойҙың стрелецтары нимә төҙөгән уң? Өфөгә оҡшатып, йылға исемен биреп әйткәндә, ләкин Өфөнән айырыу өсөн ул "Сутолокоград" тип аталырға тейеш булған ошо "Кремль" ниҙән ғибәрәт булған икән?

Был нығытма–дөйөм майҙаны 1,2 гектар булған дүртмөйөш. Стеналарының оҙонлоғо–440 метр булып, улар имән бүрәнәләрҙән торған. Нығытма ла имәндән буралған өс башня булып, ике е ат менән үтеп йөрөү, бере е йәйәүлеләр өсөн тәғәйенләнгән.

Ә хәҙер "Өфө тарихы"на күҙ алып, ошо 1,2 гектарҙа нәмәләр урынлашҡанын ҡарайыҡ. Күрә ең, ошо Сутолокоградҡа ниндәйҙер мө абәтлек бирергә теләптер инде, уның авторҙары Кремлдә собор сиркәүе, дары мөгәрәптәре, ашлыҡ келәттәре, воевода өйө, приказ ыҙма ы, төрмә, ҡаҙна әм сиркәүгә ҡараған башҡа биналар тура ында яҙа. Иң билдәле кешеләр өсөн дә ошонда өйҙәр алынған: йәнә е, тыныс ваҡытта улар үҙ ауылдарында йәшә ә, йәнә е, хәүеф тыуғанда ошо ҡәлғәгә инеп йәшеренер. Стена менән уратып алынған 1,2 гектар ерҙе нәмә менәндер сағыштырып ҡарау яҡшыраҡ булыр. Ҡәҙимге ауыл өйө ихата ының, мәҫәлән, 30 сутыйлап картуф баҡса ы бул а, өй, мунса урыны, емеш-еләк баҡсаына 10 сутый ер кәрәк. Бөтә е–40 сутый. Тимәк, 1,2 гектар майҙанға ошондай өс хужалыҡ урынлаша ала. Юғарыла анап үтелгән биналарҙы ошо тиклем урында нисек ыйҙырмаҡ кәрәк? Был ҡолаҡҡа яҡмай. Былар бары ы ла Сутолока ярҙарында стрелецтар төҙөгәнден ба а ын арттырыр өсөн уйлап сығарылған.

Ошоға бәйле XX быуаттың 50-се йылдары иҫкә төшә. 1941–1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан уғышы емереклектәренән илебеҙ саҡ-саҡ ҡалҡынып килгән ваҡыт. Крәҫтиән йортона ҙур алымдар йөкмәтелгән. Ауыл халҡы дәүләткә ит, йөн, йомортҡа тапшыра. әр бер райондың үҙенең әҙерләүҙәр контора ы булып, улар тап ошондай 1,2 гектар биләне. Бейек ҡойма менән уратылып алынған, уның өҫтөнән тимерсыбыҡ уҙылған. Мөйөштәрендәге вышкаларҙа аҡсылар тора. Ике ҡапҡа ының бере е, контора эргә ендәге е, төп инеү урыны бул а, ылауҙар сығып йөрөй торғаны артҡы яҡта була торғайны. Ошо территорияла, административ бинанан тыш, келәттәр, ат арайы, башҡа арайҙар, бәҙрәф тә булды. Сутолока йылға ы ярында Иван Нагой стрелецтары тап ошондай әҙерләүҙәр контора ы төҙөгән дә инде.

"Кремль" тип ололап аталған был нығытма ҙур булмаған административ үҙәк булып, я аҡ йыйыу әм уны ылау менән Ҡазанға, йә тура Мәскәүгә оҙатыу өсөн тәғәйенләнгән. Уны төҙөү 1572 йылда Ҡазан тарафында көслө бола сығыуҙан уң башлана. Ҡырым ханы Дәүләтгәрәй менән берләшергә үҙ ҡуйышҡан татарҙар, сирмештәр баш күтәреп, Рәсәйҙән айырымланырға тырыша. Мәскәүҙе баҫып алып яндырғандан уң Дәүләтгәрәй Иван батшанан Ҡазан менән Әстерханды үҙенә биреүҙе талап итә. 1572 йылдың көҙөндә Иван Ҡазанға ғәскәр ебәрә, әммә Дәүләтгәрәй ҡаланы яуларға килмәй. Бер йылдан уң баярҙар И. Мстиславский, Н. Романов-Захарзин, И. Шереметьев .б. етәкселегендә көсәйтелгән урыҫ армия ы Муром ҡала ына йүнәлә. Бола тын а ла, хәл ышаныслы булмай. Был хәлдә Рәсәйҙең көнсығыш сиктәрен нығытыу, башҡорттарҙан я аҡ йыйыуҙы болалы

Ҡазандан тыныс Өфөгә күсереү маҡсатҡа ярашлы була. Тап ошо ваҡытта арҙаҡлы баярҙар ҡулы аҫтында уҡсылар Муромдан Өфө ҡала ына килә әм Өфө йылға ы үрендәге Сәғәтин ҡала ына (урыҫ йылъяҙмаларында–Жукотин. **Р.В**.) йүнәлә лә инде. Улар бында үҙҙәренең нығытма пункттарын–форттар төҙөй.

Башҡорттар Өфө ҡәлғә ен бер ни тиклем ваҡыт “Имәнҡала” тип йөрөтә. Әлбиттә, әр ҙур нәмә бәләкәйҙән башлан а ла, Сутолокоградты Өфө ҡала ының башланғысы тип әйтеп булмай. Дөрөҫөрәге, электән бында булған ҡалаға йәнәш алынған ошо нығытманан Өфө ҡала ында әм Башҡортостанда урыҫ батша ы хакимлығы башланған. Әгәр ҙә ысынлап та Ағиҙелдең ошо бөгөлөндә яңы ҡалаға нигеҙ алынған бул а, ул “Өфө” тип түгел, ә “Бельск”, “Прибельск” йәки “Белорецк” тип аталыр ине. XVIII быуатта 1,2 гектар ерҙә төҙөлгән Кремлде түгел, ә стеналары 4 метр бейеклегендәге, әр урамының башында алты ҡапҡалы ҙур ҡәлғәне күргән П. Рычков ошо хаҡта ғәжәпләнеп яҙып ҡалдырған: “Өфө ҡала ы атама ының яңы ҡушылмаған булыуы, ә электән булғанының яңыртылыуы тура ында тоҫмалларға мөмкин... Өфө йылға ынан ике тапҡыр ҙурыраҡ булған Ағиҙел өҫтөндә төҙөлгән ҡаланы ошо йылғаға ҡуйған Өфө исеме менән атауҙан бер мәғәнә лә булмаҫ ине”.

Әлбиттә, Рычковтың Өфө ҡала ы бында ҡәлғә төҙөлгәнгә тиклем үк булғанлығы тура ындағы мәғлүмәте тарихсыларҙа Өфөнөң урыҫ стрелецтары тарафынан нигеҙләнеүен иҫбатлау өсөн билдәле ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Ҡара менән аҡҡа яҙылғанды балта менән генә сабып ташлап булмай шул. Шунан уң бер нимә икенсе е менән алмаштырып ҡарала башлай. Йәнә е, бында кешеләр йәшәгән урын бул а ла, ҡала түгел, ә “Шайтан ҡаласығы” тип аталған боронғо емереклектәр, ҡәлғә стена ы, ур ҡалдыҡтары ғына булған, имеш. Был “иҫ киткес идея”- ның да авторы тарихсы Ә. Усманов. Әммә ул үҙ-үҙенә ҡаршы килә, сөнки Ҡазан ханы тарафынан ҡуйылған Өфө кенәзе Ҡара Килембәт 1505 йылда ошо харабалар ара ында йәшәгән булып сыға. Шул да мәғлүм бул ын: боронғо ҡаласыҡ ҡалдыҡтары картаға төшөрөлмәй, ә Өфө ҡала ы 1367, 1377, 1554 йылдарҙағы Европа карталарында урын алған. Өфө ҡала ын нигеҙләүҙең урыҫ версия ын хөрмәтле тарихсыларыбыҙҙың ошо ҡулай ыҙ алымы ла ҡотҡара алмай.

Ә башҡортттарҙың Өфө ҡәлғә е төҙөүгә ҡарата позиция ы тура ында бына нимәләр әйтергә мөмкин. Башҡортостандың Мәскәү дәүләтенә ҡушылып, Рәсәй барлыҡҡа килеүенә ҡарамаҫтан, Нуғай әм Себер хандары башҡорттарҙы үҙҙәренә я аҡ түләүселәр итеп ҡарап, уларҙы талау маҡсатында яу сабыуҙан туҡтамай. Шул арҡала беҙҙең тарих фәнендә башҡорттарҙың, үҙҙәрен тынғы ыҙ күршеләренән ҡурсалау өсөн, урыҫ хөкүмәтенә бында хәрби гарнизонлы ҡәлғә төҙөүҙе орап мөрәжәғәт итеүе тура ында тағы бер миф барлыҡҡа килгән. Ул “оло ағай”ҙың “ҡусты”лар, йәғни урыҫ халҡының бәләкәй халыҡтар өсөн ҡотҡарыусы ролен уйнауы тура ында фекер йөрөтөүгә тап килә. Шуға өҫтәп, был миф башҡорт халҡының күскенселек концепция ына ярашлы булып, Мәскәү дәүләтенә ҡушылғанға тиклем, имеш, башҡортттарҙың үҙ ҡала әм ауылдары булмаған, тигән фекерҙе ҡеүәтләй.

Әлбиттә, Өфө ҡала ының урыҫ стрелецтары тарафынан башҡорттарҙың үтенесе буйынса төҙөлөүе тура ындағы тезисты бер Ә. Усманов ҡына яҡламай. Билдәле археолог В. Иванов “...1573 йылда башҡорттар батша Иван Грозныйға үҙ ерҙәрендә ҡала төҙөүҙе орап мөрәжәғәт итә”,–тип яҙа. Артабан былай тип өҫтәй: “Башҡорттарҙың теләгенә яуап итеп, батша 1560 йылда дворян Иван Артемьевты Башҡортостанға яңы ҡала өсөн урын ҡарап табырға ебәрә”. Беҙ ҡапсыҡта ятмай шул. В. Иванов фекеренсә, батша Артемьевты башҡорттарҙың

теләген үтәргә 1560 йылда ебәргән, ә башҡорттар унан уң 13 йыл үткәс мөрәжәғәт иткән?! Быға нисек ышанмаҡ кәрәк?

XVI быуаттың 50-се йылдары аҙағында башҡорттарҙың Мәскәү дәүләтенә ҡушылыуы өҙөмтә ендә яңы дәүләт—Рәсәй барлыҡҡа килә. Тәбиғи әм айыҡ фекергә ярашлы, Рәсәй батша ының тәүге аҙымдары урындарҙа дәүләт органдарын булдырыу, унда үҙе тәғәйенләгән кешеләрҙе ебәреү, я аҡ йыйыуҙы ойоштороу менән бәйле була. Алтын Урҙала ла шулай була, Иван Грозный ҙа шуға ынтыла. Тап шул маҡсатта ул Иван Артемьев алдына “острог”, “сторожка”, йәғни нығытылған әм аҡлаулы административ үҙәк төҙөү урынын билдәләү бурысын ҡуя ла инде. Батша Иван Васильевич, ҡай ы бер “тарихсы”лар раҫлауынса, башҡорттарҙың тыныс тормошон аҡлауҙы үҙ өҫтөнә алыуҙы, моғайын, уйламаған да. Ҡазанды баҫҡан саҡта башҡорттарҙың хәрби булдыҡлылығын күргән батша килешеү буйынса уларға Рәсәйҙең көнсығыш әм көньяҡ-көнсығыш сиктәрен нуғайҙар, Себер татарҙары өжүменән ҡурсалау бурысын йөкмәтә. Ливон ордены әм Польша менән туҡтау ыҙ уғыш алып барған Рәсәй батша ының көнбайышта хәл ителмәгән проблемалары ла етерлек була. Башҡорттарҙы ҡурсалау маҡсатында урыҫ стрелецтарының Өфө ҡала ын төҙөүе тура ындағы матур әкиәт өйләүсе тарихсыларыбыҙ Өфө ҡәлғә е әм уның гарнизоны Кама йылға ынан Тубыл әм Иртыш йылғалары тарафтарына тиклемге киң ерҙе биләп йәшәгән башҡорттарҙы нисек яҡлай әм аҡлай алыуын иҫбатлап ҡарарға ла баҙнат итә алманы.

Был ҡарашты артабанғы тарих ағышы бөтөнләйгә юҡҡа сығарҙы. Өфө ҡала ында ҡәлғә төҙөлдө, гарнизон булдырылды, әммә Себер, Нуғай хандары баҫҡынсыларының, уңға табан ҡалмыҡ әм казактарҙың башҡорттарға йыш ҡына өжүм итеп тороуына ҡарамаҫтан, урыҫ гарнизоны Башҡортостан тарихында бер генә тапҡыр бул а ла ерле халыҡты яҡлап сыҡманы. Башҡорттарға ҡәлғә тик бер нәмә—ошондағы дәүләт органдарына туранан-тура я аҡ түләү өсөн кәрәк ине, сөнки уларҙың я аҡ йыйыусылары үҙҙәренең вазифа ын әр саҡта ла халыҡты алдау өсөн файҙаланған.

Я аҡ илтеү өсөн Ҡазан алыҫ әм уңай ыҙ була. Тарҡаулыҡ осоронда я аҡты башҡорттар үҙҙәре йыйып, Ҡазанға алып барырға, ылауҙарҙы аҡларға, дәүләт ҡаҙна ына тапшырырға тейеш була. Был улар өсөн бик тә уңай ыҙ булып, төрлө буталсыҡтарға әм боҙоҡлоҡтарға килтерә. Башҡорттар яңы дәүләт алдындағы бурысын намыҫ менән үтәргә тырыша, я аҡ түләгәнлектәре тура ында документтарын аҡлап тота, сөнки был уларға батша хөкүмәтенең килешеү шарттарын үтәүҙе, иң мө име, аҫабалыҡ хоҡуғын аҡлауҙы талап итергә мөмкинлек бирә. Тик шуның арҡа ында ғына улар үҙ ерҙәренең бер өлөшөн ҡәлғә төҙөү, уның эргә ендә дәүләт хеҙмәтен башҡарыусыларҙы урынлаштырыу өсөн бирергә ризалаша.

Өфө ҡала ындағы ҡәлғә батша хөкүмәтенә кәрәк була. Үҙ тарихының башынан уҡ ул беҙҙең яҡтарҙа Рәсәйҙең колониаль сәйәсәте терәгенә әүерелә. Былдай ҡәлғәләр әм остроггар XVI—XVII быуаттарҙа бигерәк тә Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында ямғырҙан уң сыҡҡан бәшмәктәрҙәй ҡалҡа. Бында сауҙагәр Строгановтар Уралды әм Себерҙе баҫып алыуҙы башлай. Башҡорттар, ҡаршылашып, ихтилалдар ойоштора. Тап шул саҡта уларҙы баҫтырыу өсөн Өфөнән язалау отрядтары сығарыла башлай. Был — тарихи ысынбарлыҡ.

**Радик ВАХИТОВ.**

# ИЛ АЗАМАТЫ

*Мө абәт кәүҙәле, бөркөт ҡарашлы, үтә ихлас, ҡай ы берҙә хатта балалар кеүек бер ҡатлы ине Әҙ әм Исҡужин ағай. Бөйөк ил азаматы ла, мәш үр ҡурайсы ла, үҙ илен әм халҡын сик еҙ өйөүсе патриот та, талантлы педагог та бергә йәшәй ине унда.*

*Мин Өфөләге 1-се Башҡорт интернат-мәктәбендә уҡығанда ул беҙҙең класс тәрбиәсе е булды. Берәй тарих йә легенда өйлә енме, халҡыбыҙҙың берәй атаҡлы йырын башҡар ынмы, бирелеп ҡурай тарт ынмы — донъя ын онотор ине. Ағайҙың бәйәнен өҙөргә баҙнат итмәйенсә, төшкө йә киске ашҡа уңлаған саҡтарыбыҙ ҙа әҙ булманы. Уның ҡарауы, ул әр беребеҙҙең күңеленә милли рух саҡты ы алды, йөрәктәребеҙгә башҡорт булыу менән ғорурланыу тойғо о өҫтәне. Ошоноң өсөн генә лә уны остаз тип атарға хаҡлыбыҙ.*

*Ул осорҙа, 60-сы йылдар аҙағы — 70-се йылдар башында, башҡорт халыҡ йырҙарына, айырыуса ҡурай, ҡумыҙ кеүек милли музыка ҡоралдарыбыҙға иғтибар кәмене. Хатта сәхнәләргә лә анаулы ғына бер нисә оҫтабыҙ сығыр ине. Бына шундай дәүерҙә халыҡ өсөн, ҡурай өсөн, киләсәк быуын өсөн яуаплылыҡты кисәге хәрби летчик, ябай халыҡ вәкиле, педагог өнәренә саҡ ылығыусы кеше — Әҙ әм Исҡужин үҙ иңдәренә алды. алмаҡ, хатта килеш еҙерәк хәрәкәтле ағайыбыҙҙың шул ваҡыттағы уңғанлығына, тынғы ыҙлығына, аҡыллылығына хәҙер килеп хайран ҡалам. Беҙ, балалар, уның нисек янып, нисек ажарланып йөрөгәнен, әлбиттә, аңлап бөтмәгәнбеҙ. Интернатта, тағы бер нисә урында йәш ҡурайсылар менән шөғөлләнә, тынғы ыҙ тәрбиәсе вазифа ында эшләй, ситтән тороп Башҡорт дәүләт университетында уҡый, үҙенең балалары үҫеп килә, ситтән ҡайтҡас, ғаилә хәлдәре лә еңелдән түгел.*

*Бына шундай кеше, ысын патриот ине Әҙ әм ағайыбыҙ. Күптәр уны аңлап та бөтмәгәндер, хәйер, ул быға мохтаж да булманы. Үсәшкән кешеләре арҡа ында бәләләргә ҡалып бөттө, әммә ғәҙеллек барыбер еңеп сыҡты.*

*Әҙ әм ағайҙың яҙмалары эҙмә-эҙлекле генә түгел. Уларҙы яҡындары, дуҫ-иштәре, фекерҙәштәре нығыраҡ аңлап уҡыр. Төрлө редакцияларҙа йөрөп, яҙмалар "Ағиҙел" журналына килеп юлыҡты. Улар шулай уҡ айырым китап булып та донъя күрергә йөрөй.*

*еҙҙең иғтибарға Әҙ әм Исҡужин яҙмаларының журнал варианты тәҡдим ителә. Әйткәндәй, ошо йылда ағайға 75 йәш тулған булыр ине.*

**Рәмил ЙӘНБӘК.**

Әҙ әм
ИСҠУЖИН

# ЯҘМЫШНАМӘ

## Бала сағым

Атайым, башҡа ауыл кешеләре кеүек үк, малсылыҡ менән шөғөлләнгән. Уның "суфый", "мөйәтсе" тигән ҡушаматтары ҡалды. Бер йәй мөйәт үреп ултыра ине, янына барып: "Атай, шәкәр бир әле",— тигәйнем, бер үҙ ҙә өндәшмәне. Шул ораууым өсөн артабан ныҡ үкендем, сөнки атайым больницала ятҡанда, шәфҡәт туташы килеп, мине алып китте. Атайымдың карауаты янындағы тумбочкала ике телем икмәк, дүрт-биш шаҡмаҡ шәкәр ята ине. Атайым ым менән шуларҙы алырға ҡушты. Шәфҡәт туташы минә шәкәрҙәрҙе алып бирҙе лә: "Бар ҡайт, йәме",— тип ишектән сығарып ебәрҙе.

Мин ҡайтып еткәнсе, атайым үлеп тә ҡуйған. Март ҡарын кисеп барып, атайҙы ерләнеләр. Нисек шунда барып, ҡәберен ҡосаҡлап илап йоҡлап киткәнмендер, иҫемдә юҡ. Иштуған ағай алып ҡайтты. Иртәгә енә Ғәбдрәшит ағайыбыҙ мине үҙе эшләгән магазинға килтерҙе. Унда ағай-апайҙар пластинкалар уйнатып, моңлана-дәртләнә ине. уңыраҡ мин был көйҙәрҙең "Урал", "Буранбай", "Сәлимәкәй", "Зөлхизә", "Ерән ҡашҡа" икәнен белдем.

1935 йылда мине Мөхтәр ағайым уҡырға алып барҙы. Йәшем етмәгәс, яртынсы (элек шундай синыф та бар ине) синыфҡа алдылар әм, күп тә үтмәй, беренсегә күсерҙеләр. Мәктәп директоры Абдрахман Сәғитов ағай ҙа, уҡытыусыларҙы йыйып, патефонда халыҡ йырҙарын тыңлата торғайны. Ситтәрәк тороп, мин дә тыңланым.

Яҙ көнө ауыл эргә ендәге Яғалса тауы итәгендә абантуй үткәрҙеләр. Халыҡ күп, сит ауылдарҙан да арбаларына мискә менән ҡымыҙ, арыҡ тейәп килеп еткәндәр. Арба тәртәләрен күтәреп бәйләп, балаҫ алып, күләгә кеүек нәмә я ағандар, арыҡ түшкәләрен элеп ҡуйғандар. Бер төркөм ағайҙар ыбайлы малайҙарҙы, ат сабыштырырға була, Яғалса аръяғына алып китте. Кемдәрҙер йүгерешеүгә әҙерләнә, ә майҙанда көрәш бара. Әбүбәкер хәҙрәт — баш судья, уның өсөн мөнбәр кеүек нәмә эшләп ҡуйғандар. Ығы-зығы, шау-шыу, ҡысҡырышыу, маҡтауҙар яңғырай:

— ай- ай! Ниндәй көс, та ыл!

— Үҙебеҙҙең егет бит ул. Еңмәй ҡуямы ни!

Ярышты ба алап, кемгә йылҡы малы, кемгә арыҡ тейешлеген әйтеп торалар. Көрәште йомғаҡлағас, йыр-бейеү башланды.

— Мәжит ағай йырла ын! — тигән тауыштар ишетелде.

"Аҡ аҡ ҡола"ны йырлап, бүләккә Ленин бюсын эләктергәс, Мәжит йырсы: "Быны биргәнсе, бер "ярты" бир әләр", — тип йылмая. Уға ҡаршы: "Юҡ, ағай, улай тимә. Был бит Ленин, апҡайтып ултыртып ҡуй, "ярты"ны уны хәҙер табабыҙ", — тиҙәр.

Кисен дә күрше тирә-яҡта йырлаштылар, бейештеләр. Ҡурай тарттылар. Таулылар ара ында унең башлығы ҡурайсы, йырсы әм тарихсы Әбүбәкер хәҙрәт булды. Исҡужиндарҙан күптәр ҡурайсы, йырсы булған. Әбдрәхим ағай хатта Башҡорт дәүләт филармония ы сәхнә ендә йырлаған. Әбүбәкер хәҙрәт етәкселегендәге төркөм 1925 йылда, Мәскәүгә барып, башҡорт халҡының тормош-көнкүрешен,

сәнғәтен күр әтеп ҡайтҡан. Әбдрәхим ағайҙы уңынан, милләтселектә ғәйепләп, ҡулға алғандар әм атып үлтергәндәр.

Кәлимулла ағайҙы алып киткәндәрен үҙем күрҙем. Шул уҡ төндө Әбдрәхим, Сәфәр .б. ағайҙарҙы ла ҡулға алғандар. Бере е лә әйләнеп ҡайтманы. Мөхәмәҙи ағай ғына, тома уҡыр булыу арҡа ында, ҡулға алынманы. Аҙаҡ буранда аҙашып үлеп ҡалғаны ишетелде. Ул да өйҙән өйгә йөрөп ҡурай тарта ине. Уның әсә е Мәфтуха инәй, бөксәйеп, таяҡҡа таянып йөрөүгә ҡарамаҫтан, бер ҡасан да күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәне, хәбәр өйләп, бәйет, мөнәжәттәр әйтеп, аят уҡып, тәсбих тартып йөрөүен белде.

Әсәйем дә нәҡ шулай булды. Үлер алдынан әхирәтенә: “Алла ы Тәғәлә бары ын да ҡабул иткән бул а, ҡылған ғәмәлдәрем күп булды. Алла бир ә, теге донъяла осрашырбыҙ әле”,— тип өйләнде. Васыят итеп әсәйем түбәндәгеләрҙе яҙҙырҙы:

— Китаптарым кәштәлә шул көйө ят ын. Килгән кеше уҡы ын да урынына ал ын. Анау ҡара тышлы китапты Нуретдингә бирегеҙ. Ғәтиәт кейәү шулай ҡушҡайны (Нуретдинден ата ы Ғәтиәт Түбә ауылында мулла булды.— **Ә. И.**).

Әсәйем васыятында мәсеткә бирелергә тейешле китаптар ҙа әйтелә. Ә аҡ кейеҙ мәсет иҙәненә түшәлергә тейеш .б. Әйтер ең дә, ул күрше ауылға бер аҙнаға ғына ҡунаҡҡа киткән.

Бына шулай итеп мин таулылар ара ы башҡорттарының ҡурай, йыр-моң, бәйет-мөнәжәт, ҡайғы-хәсрәттәрен емереп- еңдереп үҫкәнмен. Бала саҡта ошо үҙебеҙҙең аранан башҡа ерҙә кешеләр йәшәгәнен белмәй ҙә, уйламай ҙа инем.

1936 йылда Ырымбур ҡала ындағы Каруан арайҙа урынлашҡан педагогия училище ы беҙгә күсте. Ҡара урман аша ағылып, арбаға тейәлгән мөлкәттәре менән Талашты аръяғындағы ҙур ҡалҡыулыҡтағы өс ҡатлы бина янына туҡталғандарын үҙем дә күрҙем. Ошо йорттоң 1939 йылда бер төндә янып бөтөүенә лә ша итмын. Педучилище күсенгәс, ауылыбыҙ йәнләнеп, донъяуи хәстәрлектәр, уйҙар икенсе йүнәлеш алғандар, ти әң дә була. Клубтарында концерт, пьесалар ҡуйыла, уҡыу йылы тамамланыуға абантуйҙар үткәрелә. Миңә инде донъялағы иң аҡыллы кешеләр ошонда йыйылған, донъяның үҙәге беҙҙең ауылда ымаҡ тойола. Педучилищеның директоры Әсҡәт ағай Ғәлимов бик абруйлы, мө абәт кеше, уның хәләл ефете Мәрйәм апай ҙа өйкөмлө, сибәр, ыҫпай, әҙәпле кешеләр булды. Математиканан дәрес биреүсе был апай әле лә уҡытыусы ҡатын-ҡыҙҙың өлгө ө булып күҙ алдымда тора.

Мәрйәм апайҙың Әсҡәт ағайҙы уғышҡа оҙатҡаны ла хәтерҙә. Көҙ ине. Тарантасҡа ултырған Әсҡәт ағай, Ирәндек яғына үтешләй, колхоз станы янында туҡтап, халыҡ менән хушлашты. Бер көн Мәрйәм апай дәрестән сығып китте. Мин, өйгә ҡайтышлай, уның ҡай ы ҡапҡаға инергә белмәйенсә йөрөгәнен күрҙем дә өйөнә илтеп ҡуйҙым. Ул мине таныманы ла. Баҡ аң, Әсҡәт ағайҙың үлеүе тура ында “ҡара ҡағыҙ” алған икән.

Педучилище клубында Камил ағай Ғәлимовтың скрипкала “Каруан арай”ҙы уйнағанын, Гөлшат апай Измайлованың “ ибелә сәсәк”те йырлағанын ишетеп хайран ҡалып, өн өҙ ултырҙым. Зәйнәп апай Зөбәйерованың пианинола “Ҡа арман кантон”ды башҡарғанын тыңлап оҡландым.

1937 йылда көҙөн, ауылға Өфөнән белгестәр килгән, йыр тыңлайҙар, тигән хәбәр таралды. Клуб манара ы бысылған элекке мәсеттә урынлашҡайны. Тамаша ҡарарға мин дә барҙым. Сәхнәлә бик матур күк ел костюм кейгән, муйынына оҙон аҡ шарф алған ағай, йөрөп, кешеләрҙең йырлағанын яҙып ала. Мин уны уңынан, моғайын, Ғәзиз Әлмөхәмәтов булғандыр, тип ығымта я ап ҡуйҙым.

Өфө, Баймаҡ драма театрҙары артистары беҙҙең ауылда йыш булды. Спектакль башланыр алдынан Әхмәтов, Рәхмәтуллин, Сөләймәнов, Сарбаев ағайҙар ҡурай уйнаны. “Тормош йыры” пьеса ын ҡуйғанда Сарбаев ағай йырланы, халыҡ ила-

шып ултырҙы. Мин дә иланым.

Баймаҡ театрынан Ғәшүрә апай Ирназарованың йырлағанын күп тапҡыр ишетеп хайран ҡала торғайным. 1944 йылда Ғәшүрә апайҙың ҡусты ы бер аяғын Сталинград янында уғышта юғалтҡан Сәйғәфәр ағай Талашты ферма ы мөдире булып эшләне, ә мин иҫәпсе инем. Ғәшүрә апайҙың урман яңғыратып яр ып-яр ып йырлауы әле лә хәтеремдә, сөнки ундай йырҙы ғүмеремдә ишеткән-күргән булманы.

1941 йылдың октябрендә Ғәйзулла ағай Сөләймәновта лобогрейка өйрәүсе аттарҙы ҡыуып йөрөнөм. Ул көн дә йоҡлар алдынан салҡан ятҡан килеш ҡурай уйнай торғайны. Та ир ауылынан Әхмәтғариф ағай, Зөфәр еҙнәйҙәр йыш ҡына беҙҙең янға килеп ҡурай тартыр булды. Атлы дивизияла хеҙмәт итеп ҡайтҡан Ситдиҡ ағай Әүәлбаев клубҡа яҡын ғына йәшәне. Йөн гимнастерка-салбар, шпорлы итек кейеп, билен яҫы ҡайыш менән быуып йөрөй торғайны. Клубта “тел еҙ” кино күр әт әләр, шуны уҡып, башҡортсаға тәржемә итеп ултырҙы.

Дүртенсе класта Ситдиҡ ағай беҙҙе йыр дәресенән уҡытты. Чапаев, Щорс тура- ында йырҙарҙы көр тауыш менән йырлап күр әтеп, йырларға өйрәтте. Ситдиҡ ағай көслө ҡурайсы, йырсы булды. Кистәрен өйҙәре янында ҡурай тартып, йырлап ултыр а, алыҫтарға ишетелер ине. Уның улы Мэлс әле Өфөлә йәшәй, ауыл хужалығы фәндәре кандидаты, ата ына оҡшап, баянда уйнай, йырлай. Мэлс ата ын күрмәне, сөнки Ситдиҡ ағайҙы уғышҡа тиклем үк ҡайҙалыр уҡырға ебәргәйнеләр, шунан ул башҡаса ауылға ҡайта алманы, үле хәбәре килде.

Ситдиҡ ағайҙың бер туған еңле е әҙиә апай ҙа бик матур йырсы булды. әр ваҡыт орап йырлата торғайнылар. Мөбинә, Сәмиға, Әсмә, Та ира еңгәйҙәр ҙә моңло тауышҡа эйә ине. Мөбинә еңгәй Сәфәр ағай ҡулға алынғандан уң сығарған йырҙарын әр саҡ зарланып, илап йырланы. Улар күп мөнәжәт, бәйеттәр белде. 1986 йылды ҡышҡы каникулға ҡайтып йырҙарын яҙҙырып алырға ине лә — булманы, илай ҙа ҡуялар.

Зәйнәп еңгәй менән Әбүзәр ағай беҙҙең атай иҫән саҡта уҡ ялға ҡайтып йөрөнөләр. Ағай Ҡазанда кавалерия училище ында белем алып, Та ир Күсимов кеүек командир булған. Полк менән етәкселек итеүгә саҡлы үрләтелеп, Польшаға ингәс әләк булған. Зәйнәп еңгәй дүрт бала ы менән уғыш башланғас та ҡайтып төштө, әле Баймаҡта йәшәйҙәр. оҡланғыс көслө, моңло тауыш менән йырлау өҫтәүенә, ул оҫта бейеүсе лә булды. абантуйҙарҙа йырлап, бейеп беренселекте ал а, мәжлестәрҙә лә унан оҫта тамада юҡ ине.

1948 йылдың декабрендә хәрби хеҙмәткә алынғанда, мин Зәйнәп еңгәйҙәр фатирына уғылып киттем. Әбүзәр ағайҙың пуляларҙан тишкеләнгән ордендар тағылған кителе элеүле тора. Унан өҫтәрәк — портреты. Шунда мин, бер ҡурай ҡалдырып, әрмеләргә табан юл алдым. Ирәндекте артылғанда йөк машина ында аяғөҫтө баҫып “Төйәләҫ”те йырламай түҙә алманым:

*Үлемдәргә генә миҫал икән*
*Тыуған илде ташлап китеүе...*

1998 йылдың август аҙағында тағы ла Баймаҡҡа юл төшөп, тағы ла Зәйнәп еңгәйҙең хәлен белеп сыҡтым. 84 йәштә икән. Әле лә бейейем, ти. Үлер алдынан башҡорт халыҡ яҙыусы ы Зәйнәб Биишева: “Минең бер әхирәтем бар, Зәйнәп Әминева, Баймаҡта тора”, — тип әйткән икән. Яҙыусының көндәрен үткәргәндә, мәктәпкә саҡырҙылар, шунда бейенем, бүләк бирҙеләр, тип өйләне.

... Ауылға төнөн генә ҡайтып төштөм. Бишле шәм яҡты ында әле генә сәй эсеүҙе тамамлағандар. Әсәйем мине күреү менән “Әстәғәфирулла!” — тип ҡысҡырып ебәрҙе. Китте ығы-зығы. Күршеләгә ағай, ҡусты, еңгәй, апайҙарҙы саҡырып, ҡунаҡ күр әтә башланылар. Бер саҡ мин тороп баҫам да “Әрме”не йырлай башлайым:

*Әрмеләрҙә йөрөп сәс еткерҙем.*

*Сәскенәйем етте үрмәгә.*
*Хаҡ Тәғәлә миңә ҡушҡан икән*
*Тыуған өйҙө ҡайтып күрмәгә...*

Йырлап бөтөрәм дә: “Бына күрҙегеҙме, мин ниндәй?”— тигәндәй ма айып, ҡәнәғәт әм ғорур ҡиәфәттә туғандарыма ҡарап торам. Ә Ирғәле еҙнәйебеҙ көлә, ҡулъяулығы менән күҙҙәрен өртә. Ирғәле еҙнәй оҙон мыйыҡлы, көслө, мыҡты кәүҙәле, эшкә бик шәп кеше. Бер көндә 15 күбә бесән сабыу, тау хәтле утын ҡырҡыу, мал уйып, тиҙ генә тунап элеп ҡуйыу Ирғәле еҙнәй өсөн бер ни тормай. Аҙнаға бер ат йәки ыйыр уйып атып, урынына икенсе мал тергеҙеп ҡуйма а, үҙен кешегә анамай. Ирғәле еҙнәй Берлинға йәйәүләп етеп, күп ордендар тағып ҡайтҡан.

Бына Мота ар ағайыбыҙ ултыра, Ирғәле еҙнәйҙең ҡайнаға ы. Оҫта ҡуллы, эшсән кеше. Шуҡ, шаян, шаярмайса йөрөмәҫ, хәбәр өйләмәҫ. Мәжлестәгеләр бер-бере ен яҡшы белә. Был юлы бары ы ла миңә төбәлгәндәр. Яңыраҡ ҡына ошо тирәлә йөрөгән малай әрмиәгә китә лә хәрби осоусы булып ҡайта. Ҡыҙыҡ та а. Ултыра хәрби формала ялтырап. Дөрөҫ, мин ул саҡта икенсе төрлөрәк уйлаған-мындыр. Ә был фекер ошо юлдарҙы яҙғанда килә.

уғыштан уң мин Исҡужиндарҙан иң оло о булып ҡалдым. Етем балалар, емерек йорт-ҡуралар, аслыҡ, бик ауырлыҡ менән уҡыуға йөрөүҙәр. Эшкә яраҡлыларҙы колхозға буштан-буш, ас-яланғас эшләргә сығаралар. Әсәйҙәрҙе и ә хәлдән тайырлыҡ итеп эшләтәләр. Апай, еңгәй, инәй, балалар ҡайғырырға, иларға белмәгәндәй булды. Яңғыҙ инәйҙәр үлеп бөттө, иҫәндәре аҡылдан яҙҙы. Бер инәй Шырҙы йылға ы ярында тороп: “Ғиниәт, балам, кил! Ана тораң да инде, кил, балам, кил”, — тип ҡулдарын оноп аҙарына ла тора торғайны.

Минең турала ла, ауырыйҙыр был, тип әйтеүселәр булған. Шулай аптырап- ыҙланып йөрөгәндә, колхозда бушҡа ыҙалап йөрөмә ендәр тип, ҡустыларҙы Магнитогорскиға ФЗО-ға ебәреп бөттөм. Ҡайтышлай-китешләй, уларҙың ятаҡтарына уғылып, хәл-әхүәл белешәм, ҡурайҙа уйнайым, рухтарын күтәрергә тырышам. Таҡы-тоҡо, ас-яланғас алтынсы класҡа еткәндәрме икән? Ул заманда ни китап юҡ, башҡа нәмәләр тура ында уйларға ла түгел. Бер нәмә лә уҡымағандар, хыялдарында — шул өмөт кенә. Уйҙарында ни хәтлем ыҙа сиктергән ауыл! Атай, ағайҙарын улар иҫләмәй ҙә, күңелдәрендә — бер әсәй.

Минең бер туған ҡустым әле мәсеттә мәзин вазифа ын үтәй, өс улы юғары белемле табип, ейән-ейәнсәрҙәре үҫеп килә. Килендәре матур, уҡымышлы.

Магнитогорск эшселәр синыфы ара ында ятаҡта йәшәп аяҡҡа баҫтырылған балалар. Мин, оло Исҡужин булараҡ, уйланыу-хәстәрлектәрем арыу ғына өҙөмтә биргән, тип уйлайым. Үҙемдең дә яҙмышым Хоҙай ҡулында бит инде, нишләмәк кәрәк?

Имтихандар тапшырып, педучилищены тамамларға кәрәк. Тана, быҙауҙары менән өс ыйыр, 25—30 баш арыҡ-кәзә, 70 сутый картуф, кишер, йәшелсә, уған, кәбеҫтә — бөтә ен дә эш итергән кәрәк. Өҫтәүенә, бөтә мөлкәтенде атып ебәр әң дә түләп бөтөрә алмаҫлыҡ өс йыл ярымлыҡ налог алдылар. Баймаҡҡа 50 саҡрым, иртә китеп, кис ҡайтам. Биш тапҡыр юллауға өс йыллығынан арындым. Көҙ дүрт атымдың бере ен тартып алып иген ташыусы Ғәйнетдингә бирҙеләр. Уның арыҡ атын алмай киткәйнем, йөрөгән ерендә туғарылған да бүреләр ботарлап киткән.

Тана уйып итен аттым да ҙур сумаҙанға аҙыҡ-түлек тейәп Өфөгә берәй уҡыу йортоноң физика-математика факультетына уҡырға инермен тип киттем. Сумаҙанды ятаҡта йәшәүсе фронтовик яҡташтарымдың карауаты аҫтына ҡуйҙым да үҙем тимер юл вокзалында йоҡлап йөрөйөм. Бер саҡ, ҡара ам, сумаҙан буп-буш, яҡташтарым урлап ашап бөтөргән. Баҙарҙан алып ашап йөрөй торғас, аҡса ла

бөттө. Уҡырға алыныуым тура ында справка алдым да ситтән тороп уҡырмын тип, Магнитогорскиҙағы педагогия институтына барып урынлаштым. Ауылға ҡайт ам, фронтта хәбәр еҙ юғалған ағайым йөрөп ята. Бай ҡайтҡан, матур кейенгән, күкрәгендә орден-миҙалдары, көлгәндә тештәре ялтырай. Хатта өс пистолеты, бер тоҡсай патрондары ла бар.

... Бер көн ҡапҡа янында бүрәнәләрҙә ултыра инек, Ирғәле еҙнә килде. Ағайым: “Берлинда саҡта совет алдаттары янына бер аҡ сәсле немец ҡарты килгән дә руссалап “Башкиры нет?” тип орағас, миңә ебәргәндәр”,— тип өйләй башланы. “ ин ҡай ы ауылдан?”— тип башҡортса орай был. “Темәстән” тим. “Ирғәле тереме?”— ти был. “Белмәйем, – мин әйтәм,– уғыш бит”. “Ҡайтҡас, тере бул а, сәләм әйтер ең”,— ти немец ҡарты”.

Ирғәле еҙнәй 1921 йылда бер әсир немецты ат менән Ырымбурға алып барып поезға ултыртып ебәреүен иҫкә алды. Әсир алдаттар, Темәстә йәшәп, Түбә руднигына ағас әҙерләгән икән. Ауылда йәшәргә ҡалғандарын уғыштан алда уҡ ҡулға алып бөтөрөп, бары ы ла ғәйеп булғандар.

Ағайым, Әкрәм, үҙенсә уғышта ниндәй мажара күреп иҫән ҡалыуын оҙаҡ итеп тасуирланы, Берлинда ул полк командирының ҡатынына нимә кәрәк, шуны ташып йөрөгән икән.

1946 йыл насар килде, аслыҡ булды. Окопта, ыуҙа ятып ауырыуға абышҡан ағайҙар ныҡ интекте, ҡай ы берҙәре үҙ теләге менән күп эсеп үлергә мәжбүр булды. Егеттәр ыйыры, сепараторы, теген машина ы булған ҡатындарға өйләнгеләне. Урман, тауҙар ара ындағы халыҡ бөтә ауылы менән ҡырыла, тип өйләйҙәр ине. Астан шешенгән кешеләр булған нәмә ен арзан ғына хаҡҡа аҙыҡ-түлеккә алмаштырырға мәжбүр булды.

Яҙын минең бер ыйырҙы уйып атып, Рәшит ағай менән Ырымбурға ат алырға киттек. Ниәт — ат менән эшләп кәсеп итеү. Ат атып алғас арыҡташ станция ына ҡарап тимер юл буйлап киттек. Көн бик йылы, ҡар иреп, йылғалар таша башланы. арыҡташҡа мең бәлә менән көскә килеп еттек. Атты туғарҙыҡ та, санасбруйҙарҙы бер башҡорт ағайына биреп, атты аҡмар аша интегә-интегә сығарҙыҡ. Унан ары мин атты етәкләп — Иҫәнғол ауылына, ағайым поезға китте.

Айыулы ауылы янында мин саҡ үлемдән ҡотолоп ҡалдым. Боҙ емерелеп, ат менән бергә ыуға сумдыҡ. Ярай әле, ыу айыраҡ булған. Башҡорттар килеп, икебеҙҙе лә арҡан менән өйрәп алдылар. Аҡ аҡаллы бер ағайҙың өйөндә атымды ашатып, үҙем дә кибендем, тамаҡ ялғаным. Бик тә әйбәт башҡорттар булып сыҡты хужалар. Ике көн тороп, тоҡсайымда бер нисә пачка сәй бар ине, шуларҙы биреп ҡыуандырҙым да, юлға сыҡтым.

Бер көн шулай бәләкәй санаға көнбағыш ығынты ы тейәгән бер ағай менән апайҙы ҡыуып еттем. Арығандар, хәл еҙҙәр. Ағай әйтә: “Ҡустым, зин ар, сананы атыңдың ҡойроғона таҡ инде. Ауылыбыҙ, ана, алыҫ түгел. Беҙҙә ял итер ең дә иртәгә китер ең”, — тип инәлә. уғыштан яраланып ҡайтҡан оҙон ғына ябыҡ башҡорт ағай. Йәлләп, риза булдым. Сәлих ауылы икән. Килеп, көнбағыш ығынты ы менән сәй эсеп, атты эсереп ашарға биргәс, ишек төбөндәге бер эскәмйәгә уҙылып яттым да йоҡлап киткәнмен. Тауышҡа уянып киттем: “Ҡуй! Теймә, әрәм итмә әйбәт егтте!” Хужабикә, мине уйырға ниәтләнгән ағайҙы ебәрмәй көрәшә икән. Апай, мин ишет ен типтер инде, тауышын сығарыбыраҡ өйләшә.

Мин аңланым да тороп сыға башланым. Ағай: “Ҡайҙа бараң?” — ти. Мин: “Атты уғарам”, — тим. “Бая ғына уғарҙың бит”,– ти был. Мин әйберҙәремде алдым да, ҡараңғыла шәре кисеп, юлға сыҡтым. Төнө буйы барып, ҡояш ҡалҡҡас, бер кәбән төбөнә ятып йоҡлап киткәнмен. Уян ам, ҡояш күктә ине. Атлай торғас, кискә табан Мораҡ ауылына барып еттем. Кузьменко ауылы янындағы күперҙе саҡ сығып өлгөргәйнем, шатыр-шотор ташҡын ыу килеп етеп, күперҙе ағыҙып

алып та китте.

Ятып түҙеп булмай, өшөтә. Аптырағас, юлға төшөп, бер тауға үрмәләй башланым. Таң атыуға бер бәләкәй генә ауылға килеп етеп, остағы өйгә ин әм, ике малай ҡул тирмәне менән ниҙер тарта. “Әсәйегеҙ ҡайҙа?”, — тим. Өндәшмәйҙәр, күрә ең, өйләшерлек хәлдәре лә юҡ. Йүкә ҡабығы тартып ултыралар икән. Кире сыҡтым. Өй тирәләй бер нәмә лә ҡалдырмай яғылған. Башҡа өйҙәрҙә лә шундай уҡ хәл.

Юл буйлап киттем. Тып-тын. Кеше йәки эт-бесәй тауыштары ишетелмәй. 10 —15 саҡрым атлағас, бер ҙур ғына ауылға килеп индем. “Юлдыбай” тинеләр. Ошонда йәшәгән Зәйнәп Аҡбирҙина менән педучилищела уҡығанды иҫкә төшөрөп, уның ҡайҙа торғанын ораным. Зәйнәптең апа ы мәктәп директоры икән. Уларға барып, йыуынып, баллап сәй эстем. Интернатта эшләгән саҡта Зәйнәп улын алтынсы класҡа килтергәйне, ярҙам йөҙөнән мин ул малайҙы ҡарашырға тырышҡайным да, булманы, ҡасып ҡайтып киткән. Зәйнәптәрҙә мунса ла төшөрҙөләр. Ике көн ял иткәс, хушлашып, тағы юлға сыҡтым.

Кисен Ыуары тигән ауылда бер ағай бик яҡшы ҡабул итте. Ул ауыл татарҙары бик теремек, алсаҡ, дәрт-дарманлы булып тойолдо. Иртән яҡшылап юл өйрәтеп, юлға бесән, икмәк биреп оҙатып ҡалдылар. Ҡараңғы төшөүгә Йылайырға килеп етеп төҙөк кенә өйҙә туҡтаным. Ишек янындағы топчанда тәҙрә яғына башымды ҡуйып ятҡайным. Бер саҡ ҡапҡа асылды ла урамға кемдер инде. Хужабикә болдорға сығып: “Он еще не спит”, — тигәс, мин былар атымды урларға итә икән тип, йөкмәнеп, урам буйлап киттем.

Ҡараңғы. Бәләкәй генә утҡа табан атланым. Ул магазин булып сыҡты. Ҡара-уылсы ына хәлде аңлатып, төндө шунда үткәрҙем. Икенсе Этҡол ауылына етәрәк бер ауылда туҡтап, атты эсереп бесәнгә ҡуштым да берәүҙән өт атып алып эсеп, йоҡларға яттым. Тор ам, атым ята уҙылып, башын ҡалҡытырға итә лә, хәленән килмәй. Күҙҙәре быялана башлаған. Үлмәҫтән алда тип, муйынынан салып ебәрҙем. Тире енә итте төрөп, эс-бауырын, баш-тояғын өй хужа ына бирҙем дә тағы юлға сыҡтым.

Этҡолдо үтеп, Ҡолсора ауылында йоҡлап, үҙебеҙҙең Темәскә яҡынлаш ам, Шырҙы йылға ы сығырлыҡ түгел. Йөҙөп сығырға тура килде. Ҡайтып ин әм, әсәйем аптырап китте. Күлдәк-ыштанды алмаштырҙым да юрған аҫтына сумдым. Бер ыйыр яңы ғына быҙаулаған икән, әсәйем өт эсерҙе. 16 көн буйы 450 саҡрым лыс ыу быйма менән юл йөрөү ғазабы, аслыҡ тамам бөлдөрөп, миңә ары төҫ инә башлаған. Күршеләр, оҙаҡҡа бармаҫ инде был, тигән. Күп йылдар үткәс, ошо хәлде әм аттың йығылып үлеүен өйләгәйнем, ағайым, аттың ҡойроғона сана таҡмаҫҡа ине, аттың күтәне өҙөлгән дә шуға үлгән ул, тине. Мин, теге үҙемде уя яҙған ағайҙы йәлләп хата эшләгәнемде аңланым да — уң ине. Үҙем дә, атты йәлләп, менмәйенсә, шыйыҡ ҡар кисеп, йәйәү атлаған булам.

...Нисә көн ятҡанмындыр, белмәйем, яңы ауған өт, мәтрүшкә, тағы әллә нәмәләр эсеп, бер аҙҙан йөрөй башланым. Майҙың нисә ендәлер ағайым мине хәрбиҙәрсә кейендереп, хром итек кейҙереп, Магнитогорскиға алып китергә булды. Ике ҙур ауыр сумаҙан күтәреп, юлға сыҡтыҡ. Ә унда аслыҡтан интеккән яугирҙар, машиналарға тейәлеп, Сибай аръяғына, Яйыҡ яҡтарына башаҡ йыйырға китеп бара. Ирәндек, Сибай аша үтеп, Березовка ауылына етәрәк ҡап-ҡара янған баҫыуҙа яртылаш янған башаҡ йыйып йөрөгән байтаҡ фронтовикты күрҙек. Йөҙҙәре ҡара ҡором, күкрәктәрендә орден-миҙалдар, ауыҙҙарын ас алар, тештәре ялтырап күренә. Улар ара ында Зәйнетдин ағайыбыҙҙы күреп, бер аҙ “балауыҙ ығып” алдыҡ. Ағай Сибайға килеп еткән дә, ауылда хәлдәр хөрт икәнен белеп, ошонда килеп сыҡҡан. Бер ҡаҙаҡҡа самандан йорт алырға өйләшкән дә, бер үҙе

генә булғас, башлай алмай тора икән.

Зәйнетдин ағай беҙҙе үҙе урынлашҡан ҡаҙаҡтарҙың мунса ына алып килде. Башаҡ йыйып бер тоҡҡа тултырғас, саманға тотондоҡ. Уны тамамлағас, эш хаҡына иген алып бүлештек. Артабан сумаҙандағы, ағайым Берлиндан алып ҡайтҡан ҡатын-ҡыҙ кейемдәрен атырға булдыҡ. атырға тип инде, бойҙайға алмаштырабыҙ. Ҡыҙҙарға кейем- алым оҡшай, әммә әсәләре бик ҡарап, алдырмаҫҡа тырыша. Урыҫ халҡы бында бай йәшәй, малдары күп, ыйырҙары ҡотло. аран булмағандары шунда уҡ бойҙайын да сығара, тамаҡты ла ыйлап ебәрә.

Шулай итеп, беҙ ауылға иң байы булып, дүрт тоҡ иген менән ҡайтып төштөк. Был ваҡытҡа ыйырҙар быҙаулап бөткәйне. Күп итеп картуф ултырттыҡ, кишер, уған сәстек.

абантуйҙар ҙа етте. Мин шәбәйеп китеп, көрәш, арҡан тартышыу, тоҡ уғышыуҙа ҡатнаша башланым. Армияға китер алдынан өс йыл көрәш, тоҡ уғышыуҙа беренсе урынды алып йөрөнөм. Ҡурайҙа уйнап йырлауҙа ла миңә тиң кеше булманы, сөнки ярышырға кеше е лә юҡ ине.

Армияла ла шулай булды. Подольск ҡала ында классик көрәш буйынса, бер ниндәй разряд булма а ла, дивизия чемпионы булдым. Монино ҡала ына округ олимпиада ына ебәргәйнеләр ҙә, унда дүрт кешене еңдем, ә өсө өнә, тәжрибәле, профессиональ көрәшселәргә, та ыл етеңкерәмәне. Шулар ара ынан Ванин тигәндәрен бер-ике айҙан киножурналда күр әттеләр, ул Берлинда халыҡ-ара йәштәр фестивалендә ҡатнашты.

Белорет районы Әүжән ҡасаба ынан Суздальцев тигән минән мыҡтыраҡ кәүҙәле, тәкәббер, башҡорттарҙы яратмаған берәү миңә: “Давай бороться”, — тип бәйләнде бит. Ул гел генә “башкир, конокрад” тип мине мыҫҡыллап йөрөй торғайны. Казармала тегене бер алым менән күтәрҙем дә иҙәнгә уҡтым. Носилка менән санчасҡа алып киткәйнеләр, берәр ай ятҡандыр. Унының ҡарауы, артабан бер ҡасан да мине мыҫҡылларға батырсылыҡ итмәне.

Умань ҡала ына осоусылар училище ына килгәс, хәрби дәрәжәм сержант булғанлыҡтан старшина итеп тәғәйенләнеләр. Араларында таҙа кәүҙәле берәү ис бер тыңламай маташа. “Пошел отсюда! Генералов видали, не то что сержантов”,— ти был. Бер көн оҙонлоҡҡа икерә торған спорт майҙанына алып килдем дә, еҙ көрәшә торогоҙ, ә мин өҫтө алмаштырып киләм, тип китеп барҙым. Улар алыша-алыша арығас килдем дә теге әзмәүергә: “Давай бороться”, — тинем. Тегене интектереп, хәлдән тайҙырып алып ҡуйҙым. Иртәнге физзарядка ваҡытында теге ҡыбырлай ҙа алмай. Ҡабат бер ҡасан да, “давай бороться” тимәне.

... Әзербайжанда Мингечаур ҡала ында осорға өйрәнәбеҙ. Рота киске ашҡа китеп бара. Бағана башындағы репродукторҙан Мәғәфүр Хисмәтуллин “Урал”ды йырлай, Ғата Сөләймәнов — ҡурайҙа. Минең эргәнән барған Степанов исемле егет бер ҡулына шәкәр менән печенье алынған токсай тотҡан. “Вон твои башкиры плачут”, — ти бит был. Мин “Где?” тигән булдым да юрамал тер әгем менән тегенең тоҡсайын ҡомло юлға бәреп төшөрҙөм. Ә үҙем “Вай, извини, нечаянно”, тигән булып теге ҡомло печеньеларҙы тегенең тоҡсайына тултырам.

Беләм, үс алырға йыйына был. Иртәгә ен: “Әйҙә, кер йыуырға барайыҡ”, — ти. Киттек. Юлда бамбук ымаҡ бер ҡаты таяҡ алдым да, йылғаға еткәс, ҡомға тығып ҡуйҙым. Ә үҙем кер йыуған булып ултырам. Тегеләр килеп бәйләнә башлағас, торҙом да: “Кто еще шаг сделает, тот там останется лежать”, — тим. “Ах, ты еще угрожаешь?”,— ти былар. Таяҡты урып алғайным, ҡаса башланылар. Степанов тағы ла төшкө аш ваҡытында мине, борсаҡ бутҡа ын, кеше тиҙәге ашай ың, тип ҡоҫторорға уйлағайны ла, кире енсә, тегенең үҙен ерәндереп ҡоҫторҙом.

Подольскиҙа бер гәзиттән фотохәбәрсе килгән дә самолеттар янында политин-

формация барышын төшөрөргә булды. Комсорг тигән бер нәмәкәй беҙҙе, дүрт башҡортто, үҙенең яғына ҡаратып тубыҡландырып төшөрөргә маташа. Мин: “Пошли, башкиры никогда на колени не вставали”, — тинем дә иптәштәрҙе алып киттем. Тегеләр ауыҙ асып тороп ҡалды. Ә төнөн старшина мине уятты ла “особый отдел”ға алып килде. Унда ултырған майор: “ ин беҙгә ярҙам итергә тейеш ең”,— тине лә эскадрильялағыларға характеристика яҙырға ҡушты. “Ундай әләтем юҡ”,— тим. “Тыуған илде яратмай ыңмы ни?”– тип орай. “Яратам,— тим, — тик характеристика бирә алмайым”. “Шулай ҙа берәй нәмә иҙ әң, хәбәр ит”, — тип тороп ҡалды майор. Арыу ғына фә ем алдым. Бер кис силғау киптергән урында берәү Сталин менән Суворовты сағыштырып ултырғайны. Алып киттеләр ҙә, шунан ғәйеп булды.

1947 йылда Йомаш ауылы мәктәбенә физика менән математиканы уҡытырға ебәрҙеләр. Өлгәшмәгән, өйгә эште эшләмәгән балаларға “икеле” ҡуймайым, дәрестән алып ҡалып эшләтәм. Эшләмәйенсә ҡайтыу юҡ, асыҡ а ла, ҡояш байы а ла, тигәндәй. Үҙем дә ас бит инде. Балаларҙы ҡурай уйнарға, йырларға өйрәтергә тырышам. Байрамдарҙа, сәхнәгә хор сығарып, “Ерән ҡашҡа атҡайым”ды башҡарабыҙ. Скрипкасы Алсынбаев ағай — балаларҙың ул яғынан, мин уңынан баҫам.

Бер саҡ шулдай ағайым Юлдыбайҙа комбайнсылар курсына китте. Мин, өйгә иген алып ҡайтырға була, ат егеп барғайным, 70 саҡрымды ат бер тәүлек тигәндәй атланы ла ҡуйҙы. Икенсе юлы саңғы менән барырға булдым. Ике бот ашлыҡ йөкмәп килә инем, Муллаҡай ауылына етәрәк алда ҡарасҡы кеүек нәмә күренә башланы. Өйгә етә башлағанда тегене ҡыуып еттем. Ул Таулыҡайҙың уҡытыусы ы Шәүрә апай булып сыҡты. Ике бот иген йөкмәп 30 саҡрымдан Рауил ҡусты ы менән Рауза еңле енә алып ҡайтып килә икән. Мине күргәс: “Үҙемдең ҡустым икән, ә мин ҡурҡып ҡасам да ҡасам”, — тип илап ебәрҙе.

Шәүрә апай, атайымдың бер туған ҡусты ы Кәлимулла ағайҙың ҡыҙы, матур йырлай торғайны. Ғөмүмән, йыр ыҙ торманы ул. Бесән эшләгәндә ҡыҙҙар менән арып ҡайталар ҙа, ҡыуыштағы хуш еҫле бесәнгә ауып, йыр башлайҙар. Бер саҡ шулай мин таулылар ара ынан Әхтәм тигән кешенең ҡыуышы янына ҡыуыш ҡорғайным, теге, тағы ла ял итергә бирмәйҙәр икән тип, миңә уғып та ебәрҙе. Мин, ос әнәге алып, ҡаршы торорға иткәйнем, теге ҡыуышына инеп ҡасты. Апайҙар, күмәкләп сығып, Әхтәмде әрләнеләр. уғыштан ҡайтманы был ағай, китеү менән әләк булды.

Шулай бер ап- ары башлы урыҫ мине, ат эҙләп йөрөгәндә, ҡулына ике таш тотоп: "Вот я сейчас тебя убью",— тип ташланғайны, битенә йүгән менән бәреп ҡастым. Ул да уғышта үлеп ҡалды. Ә бер Колька тигәне, мин балыҡ тотоп ултырғанда, күтәреп алып ыуға бәргәйне. Трудармиянан күтәртеп ҡайтып килгәндә, беҙҙекеләр күреп ҡалып, өт эсереп үлемдән ҡотҡарҙы. Аяҡҡа баҫты Колька, мурҙа үреп балыҡ тота, ау ала башланы. Бер мәл ау-мурҙалар алғанын ҡарап тороп, ярға сығарып тапаныҡ, өҙгөләнек. Йәнә е, үс алдыҡ.

## Тыуған ауылым, туғандарым

Башҡорт халҡының XX быуат башындағы күтәрелеше, Өфө, Стәрлетамаҡ, Ырымбур ҡалалары менән бер рәттән, данлыҡлы Темәстә лә башлана. Ауыл аҡтарҙың да, ҡыҙылдарҙың да даими иғтибар үҙәгендә була.

Мин иҫ белә башлағанда, ауыл халҡында оло афәт килтергән янғындарҙан уң була торған кәйеф ине. Алла ы Тәғәлә мине “Таулылар ара ы” башҡорттарының фажиғәле яҙмышҡа дусар булып, яҡты донъя менән хушлашып, баҡыйлыҡҡа күсеүен, уларҙан ҡалған етем балалар, инәй, еңгәйҙәрҙең илау- ыҡтауын күреп, әрнеп- ыҙланып, минән әллә ни ҡалмай ҡартая барған балаларына әсе тарихты

еткер ен, тип фани донъяға тыуҙырғандыр, ахыры. Тәүҙә “кулактар”, уңынан “халыҡ дошмандары” тип ҡулға алынып, Себергә оҙатылған, уғыштарҙа әләк булған ағайҙар, филармонияла йырлап йөрөп тә, “халыҡ дошманы ҡыҙы” исемен күтәрә алмай Матрай ауылына күсенергә мәжбүр булған Әсмә апай, “Таулылар ара ы” башы, даны тирә-яҡҡа таралған, шәхес культы осоронда аҡылдан яҙып донъя ҡуйған Әбүбәкер хәҙрәт әм башҡа бик күптәр үҙҙәренән уң ниҙәр булғанын белмәй.

Ауыл халҡының өйләшендә яҡын-тирәләге ер- ыу атамалары, күрше ауылдарҙың исемдәре менән бер рәттән, “Себер”, “ өргөн”, “колхоз”, “совхоз”, “сәүит бала ы”, “аҡтар”, “ҡыҙылдар”, “Зәки Вәлиди”, “Муса Мортазин”, “йот йылы”, “шә иттәр зыяраты” тигән үҙҙәр ныҡлы урын алғайны. Намаҙ исемдәре, дини йолалар, ырымдар, дини дәрәжәләр, “мөнбәр”, “манара”, “мәсет” кеүек үҙҙәр ярай ы ғына ҡулланылышта ине.

Шырҙы әм Талашты йылғалары, урман-тауҙар буйлап ағып килеп, Рапат тауы моронында ҡушылып, бер аҙ тау итәге буйлап барғас, аҡмарға ҡоя. Был ике йылға ҡушылған урында “Насип быуа ы”, Талашты буйлап уҙылған ҡабаҡ бөткән ерҙә “Насип тирмәне” әм матур ғына йорто бар ине. Ҡабаҡ буйлап, аралыҡ ҡалдырып төҙөлгән бөхтә генә йорттар күренә. Ә ҡалҡыулыҡ урта ына өс ҡатлы бик матур өй алғандар. Уның тирәләй, әсә ен ырып алған себештәр ымаҡ, башҡа йорттар, дөйөм ятаҡтар теҙелгән, мө абәт клуб та бар. Был йорттарға 1936 йылда Ырымбурҙан күсенеп килеп, педагогия техникумы урынлашты.

Талашты буйлап өҫтәрәк “Нурмөхәмәт быуа ы” әм “Нурмөхәмәт тирмәне” булған. Шырҙы буйында ла, унан ары ҡалҡыулыҡ буйлап та күркәм генә йорттар күренә. Әммә улар буш, хужалары — дәртле, милли рухлы, эшсән, уҡымышлы, сәнғәт өйөүсе “Таулылар ара ы” башҡорттары — өргәнгә оҙатылған. Алыҫ Черемхово ҡала ынан хаттар килгеләп торған, бигерәк тә, Әбүбәкер хәҙрәттең ҡыҙы Зөләйха апай йыш яҙған. Әбүбәкер хәҙрәт 1925 йылда Мәскәү янында үткәрелгән күргәҙмәлә башҡорт халҡының тормошон күр әтеүселәрҙең бере е булған. Ҡурайсы З. Әхмәтов, йырсы Әбдрәхим Иҫҡужин, Күсей ауылынан бейеүсе Ишбирҙин ағайҙар булған. Был турала гәзиттәрҙә мәҡәләләр булды. Билдәле журналист Р. Насиров та яҙып сыҡты. Күргәҙмәлә төшкән үрәттә аҙаҡ Сибайға ҡайтып йәшәгән Зөләйха апай ҙа бар. “Башҡортостан” гәзитендә “Ғилмияза” йыры тура ында мәҡәлә е лә баҫылғайны. өргөнгә ебәрелеүселәр йорттарында (хужа булып, күҙ-ҡолаҡ булып тор он, типме икән) берәй ен ҡалдырып киткәндәр бул а кәрәк. Бер апай әр саҡ Талашты аръяғындағы ҡалҡыулыҡта әрнеп- ыҙланып, күҙҙәрҙән йәш эркелерлек итеп зарлы-моңло йыр уҙып йөрөр ине.

өргөндәгеләргә ҡайтырға рөхсәт ителгәс, Насип олатай ғына ғаилә е менән ҡайтып төштө, башҡалар, ни өсөндөр, тыуған яҡтарына тартылманы. 1936 йылдар тирә е булғандыр, аҙ ғына ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, теге йорттар, тирмәндәр юҡ ине инде. Быуалар ҙа, үҙҙәренең тәүге киәфәттәрен юғалтып, юҡҡа сыға башланы. Ул саҡта йылға буйҙары тал, муйыл, ерек ағастарынан торған йырып үтке еҙ урман менән ҡапланғайны. Йылға ара ындағы ҡамышлы күлдәрҙә ҡыр өйрәктәре бәпкәләрен эйәртеп йөҙөп йөрөй. Билбыуарҙан үҫкән үләндең тығыҙлығы хайран ҡалырлыҡ — күҙҙәрен шул тирәне генә сабып, тиҫтәләрсә кәбән ултырталар ине. Урмандарҙа ҡош-ҡорт, кейек, йылғаларҙа балыҡ күп осор булды. Насип олатай ғына “тыуған яғым” тип ағынып ҡайтып, яңылышып ҡуйҙы. Талашты буйында шамбылыҡ ултыртып, шул кәсебе менән берәй йыл йәшәгәндерме-юҡмы, 1937 йылда ҡабаттан ҡулға алынып, башҡаса хәбәр-хәтере булманы. Оло улын Баймаҡҡа саҡыртып, КГБ хеҙмәткәрҙәре туҡмап ҡайтарған. Мөбинә еңгәй: “Еңгәй, бөтөрҙөләр... үләм, тип кенә ятып үлде”,— ти торғайны.

Әсәйем былай тип өйләй торғайны: “Герман уғышынан ҡайтып

өлгөрмәнеләр, үҙебеҙҙә уғыш башланды. Әйләнгән айын ауылға атлы ғәскәрҙәр килә лә тула, шунда уҡ малға йәбешәләр. Шулай ҙа аҡтар итәғәтлерәк булды. Иҫәнләшеп, хәл-әхүәл орашып, мал-тыуарҙы анап, орап тотондолар. Бер көндө ҡыҙылдар Әбүбәкер хәҙрәтте атырға алып китеп бара. Илаша-илаша, йүгерешеп барып еттек. "Хәҙрәттең бер ғәйебе лә юҡ бит, халыҡҡа изгелектән башҡа, ҡалдырығыҙ инде, зин ар",— тибеҙ. Атманылар, ҡалдырып киттеләр... Ҡыҙылдарҙа күпселек урыҫтар бул а ла, башҡорттар ҙа бар ине. Бер мәл ҡыҙылдар яғында йөрөгән берәү үҙенең бер туған ҡусты ын атып үлтереп, алып ҡайтып ерләне... "Бәлшәүиктәр килә!"— тип өрәнлә әләр, ҡотобоҙ осоп, йәнебеҙҙе ҡулға алып, баҙға төшөп йәшенеп бөтә торғайныҡ".

"Ҡуштүбә ауылынан (Темәстән ун саҡрым алыҫлыҡта, Ирәндек яғында) алты башҡортто атып киткәндәр. Шуларҙың берәү е ҡыҙылдарҙың башлығы Поленовтың ҡылысын тартып алып, ҡулын өҙә сапҡан. Шул башҡорттоң ейәне Ильясов уғыштан алда Түбә руднигында йәшәгән, Поленовты белеп-күреп йөрөгән. уғышта ҡатнашып, Берлинғаса еткән. Пистолет алып ҡайтып, Поленовты, ике дуҫын әм уларҙы яҡлаған бер башҡортто атып үлтергән. Ильясовты егерме биш йылға ултыртып, ун игеҙ йыл үткәс сығаралар. Билал ауылы янындағы Комсомол поселогында йәшәне",— тип атайҙар өйләй торғайны.

Әлеге көндәрҙә Темәстә йәшәүсе Арыҫланов Миндеғол ағай (ауылдың мулла ы) — Башҡорт атлы дивизия ы яугиры. Днепрҙы аша сығыу өсөн барған уғыштарҙағы батырлығы өсөн Советтар Союзы Геройы дәрәжә енә тәғәйен бул а ла, тотҡарлайҙар. Был хаҡта хәбәрҙәр матбуғатта булды. Ә уның улы Рәсүл Арыҫланов БДУ-ла уҡып йөрөгән сағында, әле ҡабул ителмәгән Рәсәй әләмен төшөргәне өсөн, хөкөмгә тарттырылып, эҙәрлекләү-баҫымдарға дусар булып яфаланды. Арыҫлановтар Ҡуштүбә ауылыныҡылар, Поленовтың ҡулын өҙә сабыусы батыр башҡорттоң нәҫелдәре...

Поленов үҙенең ҡан ыҙлығы менән даны сыҡҡан Смоленск полкы ҡыҙылдары менән йөҙ илле саҡрымға уҙылған Ирәндек тауҙарының көнбайышындағы башҡорт ауылдарын талау, кешеләрен сығарып атыу .б. төрлө ҡәбәхәтлектәр менән шөғөлләнгән. Ололар өйләүенсә, Муса Мортазин үҙ янында йөҙләгән яугир әм Йылайырҙа ике полк ҡалдырып, ҡалған яугирҙарҙы, әр ауылда бер командир тәғәйенләп, ғаилә, йорт-хужалыҡ эштәрен хәстәрләү өсөн тарата торған булған (хәҙерге армиялағы увольнение, отпуск кеүек). Поленов үҙенең ҡыҙыл йәллādтәре менән тап ана шул башҡорттарҙы эҙәрләп, андып йөрөгән дә инде.

Ошондай уҡ маҡсат менән, үҙенең ҡыҙыл интернациональ полкын етәкләп, Ирәндектең көнсығышындағы ауылдарҙы талап, малдарын тартып алып Руденко йөрөгән. Монасип ауылынан ун өс башҡортто атырға алып барған саҡта, бер батыр башҡорт: "Егеттәр, барыбер үлтерәсәктәр, уғышып үләйек",— тип Руденконың ҡылысын тартып ала, әм улар уғышып үлә. Был егеттәргә әйкәл ултыртылған.

Әхмәт еҙнә былай тип өйләй торғайны: "Күсейҙе баҫып алалар",— тип сапҡын килгәнгә, сабышып барғайныҡ, алдаттар, аттарын ебәреп, үҙҙәре ыу төшөп йөрөй. Яланғас малайҙарҙы сапҡылай башланыҡ. Арба аҫтына инеп ҡасырға тырышалар. Берәү е атына менеп сапты, ҡыуып етә башлағайным, атынан төшөп, аҙға йүгерҙе. Барып еткәйнем: "Ағай, үлтермә инде!"— тип ағарынды... Ә мин уның ҡултыҡ аҫтына ҡылысымды тыҡтым... Бер башҡорт егетен әрәм иттем, ғүмер буйы шуның өсөн ыҙландым..."

Мәскәү тарафтарынан башҡорт халҡына ҡарата батшалар заманынан уҡ килгән сәйәсәтте дауам итеү өсөн ебәрелгән был ҡыҙыл ғәскәрҙең ҡәбәхәтлектәре тура ында күп яҙҙылар. Иң ентекле яҙылғаны, моғайын, Әкрәм Бейеш яҙмалары-лыр. Мин бары ишеткәндәрем тура ында ғына әҙ-мәҙ яҙыу менән сикләнәм. Ха-

лыҡ хәтере, минеңсә, ошо тәртиптә аҡҡа төшә барырға тейештер.

Башҡорттоң ауыр хәленән файҙаланып, заман ҡатмарлылығын ылтау итеп, халыҡты ҡырып бөтөрөп, рухи әм матди байлыҡтарының сығанағы булған ерҙәренә хужа булып алырға теләүселәр тарихта бихисап. Ошондай үтә лә ҡатмарлы осорҙа башҡорт иленең төрлө тарафтарында, яфа сиккән халҡын яҡлау өсөн батыр ир-егеттәр отрядтар төҙөп, баҫҡынсыларға ҡаршы уғышырға мәжбүр булған. Тау-урмандар ара ына ҡасып, ҡаршылыҡ күр әтергә ынтылған был ир-азаматтарына “милләтсе”, “бандит”, “контрреволюционер” тигән мө өрҙәр тағып, үҙҙәренең ҡылған енәйәттәрен, ҡылған ҡәбәхәтлектәрен аҡлау өсөн бик тә ан ат юл тапҡандар.

Баймаҡ районы Байыш ауылы батыры Хажиәхмәт Унасов күп анлы отряд ойоштороп күтәрелгән. Салауат районы Арҡауыл ауылынан Ҡарабашев ағай Салауат, Мәсетле, Ҡыйғы, Дыуан райондары башҡорттарын яҡлау, аҡлау өсөн бик көслө отряд йыйып уғышҡан. Ул Герман уғышында кавалерияла хеҙмәт итеп, дүрт тапҡыр “Георгий тәре е” менән наградланған. Бер оло ағай өйләүенсә, унының 1200 ҡылыс ыбайлы ы, 26 пулеметы, әр ауылда йәйәүлеләре булған. Отрядын өскә бүлгән дә әле анап үтелгән райондарҙы уратып йөрөргә ҡушҡан...

Имай Насыриҙың “Күҙәй” романы ошолай тамамлана: “Златоуст төрмә енә ултыртылғас, Ҡарабаштың милли тойғолары дүрт стена ара ында юҡҡа сыҡты...” Ләкин ул ба адир, мө абәт, батыр башҡорт ағайының милли тойғолары үҙе иҫән ваҡытта юғалмаған. 90 йәшкә етер алдынан ул 1977 йылда Өфөләге фатирында донъя ҡуйҙы. Бер мәл ултырҙаш булырға ла тура килде. “Мин ул китапты (“Күҙәй” – **Ә. И.)** уҡығаным юҡ. Ҡыҙылдар, аҡтарҙы белмәнем. Халҡымды йәберләп, еребеҙҙе баҫып алырға тырышҡан урыҫтарға, татарҙарға ҡаршы көрәштем”,— тине. Уны тәүге тапҡыр хөкөм итеп, 25 йылға иректән мәхрүм итеүсе судьяның исеме билгеле. Мәскәүгә яҙып, биш йылдан уң ағайҙы ireккә сығаралар, ләкин шул уҡ судья уны ҡабат ултырта. Хатта унын ике “Георгий тәре е”н тартып алалар. Әле Өфөлә йәшәүсе ике улының оло о — подполковник. “Ҡалған ике ордены бар, аҡлайбыҙ”,— ти ул. Ысынында и ә ағай — том-том романдар яҙырлыҡ дәрәжәләге шәхес.

Башҡорт халҡы фажиғәле, ауыр замандар кисереп, бөлгән осорҙа, унын еренә килеп ултырып, нығынып, байып йәшәгәндәрҙән бер төрлө лә ярҙам булмай. Темәс ауылы тулы сауҙагәрҙәр, килмешәк байҙар башҡорттарҙың үтә лә мөшкөл хәлдәренән файҙаланып, үҙ хужалыҡтарында тамаҡ ялына эшләтеп, артабан да байырға тырышҡан.

Түбә алтын приискы ына татар сәнәғәтселәре алты бер туған Рәмиевтар хужа булған. Шахталарға таяу өсөн Ирәндек имәндәре ҡырылған. Шахта баҫып әләк булған башҡорттарҙың хисабы юҡ. Әле 1940 йылда ҡурайсы Мөхәммәт Ҡәҙерғолов ағай, бер туған аға ы Яхья ағайҙың ғаилә ен алып ҡайтҡас, ҡыуышҡа инеп (колхоз яланында бер ҡыуышта йәшәй инек — **Ә. И.**), мине ҡосаҡлап иланы. Арба ында еңгә е, ике бала, әҙерәк ауыт- аба — бына шахтала алтын сығарып йөрөп, ер аҫтында ҡалған башҡорттоң бөтә мөлкәте ошо булған. Ә Рәмиевтар, революция башланғас та, башҡорт ерeнең алтынын тейәп, Мароккоға ҡасҡан. Уларға тыуған ил, башҡорт иле, башҡорт халҡының яҙмышы “бер тин”гә лә тормаған.

Бер әҙәм Закир Рәмиев тура ында “Шағир, миллионер Дәрдмәнд” тигән китап та сығарҙы. Миллионерлығы ысындыр, ә шағирлығы самалы икәнлеге бер кемгә лә сер түгел. Ә Мәскәүгә ҡасып киткән Рәмиевалар Өфөгә ҡунаҡҡа килгән саҡтарында: “Надан башкортларны без укыттык инде”, — тип тотош бер милләттең мәртәбә енә шик тыуҙырырҙай үҙҙәр өйләп йөрөгән. Ошондай әҙәп еҙ үҙҙәрҙе әйтә алырлыҡ интеллегентлыҡтары, тәрбиә еҙлектәре, тимәк, сикләнгән аҡылдары менән кемдәрҙе уҡыта алды икән уң улар?!.

Тәүҙә килеүселәр “беҙ мосолманбыҙ” тип, башҡорттарға тауар, китап атып, ерҙәрҙе өйрәнеп йөрөгән. Әйтәйек, ошондай ҙа хәлдәр булған: бер Ҡөрьәнде бер атҡа алмаштырғандар. Бер йөк Ҡөрьән килтер ә, моғайын, бер өйөр йылҡы алғандыр. Өфөнөң К. Маркс менән Фрунзе урамдары ҡушылған мөйөштә “Чапаев штабы” тип йөрөтөлгән матур бер йорт ултыра (унда РБ Фәндәр академия ының Башҡортостан филиалы урынлашҡан — **Ә.И.**). Был матур йортто аттар атып, байып йөрөүсе бер сауҙагәр үҙенең өйәркә енә алдырған. Өфөлә генә лә ундай ҙур-ҙур йорттарҙы анап бөтөрлөк түгел. Хужалары, революция тура ында үҙҙәр башланғас та, ҡасып китеп бөтә. Башҡорт халҡындағы кеүек тыуған ил, тыуған ер өсөн “аямаған йәнен, түккән ҡанын” кеүек дәрәжәләге тойғоларҙың, рухтың тамсы ы ла булмаған уларҙа. Муса Мортазинда ла йәки башҡа башҡорт ғәскәрҙәрендә лә бер килмешәк тә булмаған. Ә Каширин ғәскәрендә күпселеге элек-электән башҡорттарҙы күрә алмаған Белорет районы урыҫтары йөрөгән. Уларға башҡорттарҙан үс алыр өсөн бигерәк тә уңай мәл тура килә. Йәнә е, Совет власы өсөн көрәшәләр, ә башҡорттар — “Совет власына ҡаршы милләтселәр”. Улар, тыныс башҡорт ауылдарын иҫ киткес мыҫҡыллап, талай-талай, Билал ауылына ҡәҙәр килеп етә.

Тап ошо мәлдә үҙенең Йылайырҙа атҡарған вәхшилектәренән, ҡылған енәйәттәренән бик тә ҡәнәғәт булған Смоленск полкы ла аҡмар башына ҡарай юллана. Ләкин был ҡыҙыл йәлләдтәрҙең кинәнесе оҙаҡҡа уҙылмай. Уны Темәстә Муса Мортазин ҡаршылай әм тар-мар итә. Муса ғәскәрен Билал ауылына бора, ләкин каширинсылар Белоретҡа табан, йәғни үҙ ауылдарына ҡарай ҡасып өлгөргән була. Уларҙы мортазинсылар ауылдарында ҡыуып етеп, ошо “ҡыҙылдар” исеме менән енәйәт ҡылып йөрөүселәрҙе ҡыра. Шул саҡтан алып башҡорт халҡының бөйөк батыр улы Муса Мортазинға “милләтсе” мө өрө тағалар. Сөнки, Мортазинды милләтселектә ғәйепләмәйенсә, үҙ енәйәттәренән нисек итеп аҡланырҙар ине?

Ҡыҙылдар полк командирҙарына Мәскәү фатиха бирә килгән. Тик башҡорт ғәскәрҙәренең көслө булыуы арҡа ында ғына, үҙҙәренең алдарына ҡуйылған сәйәсәтен үҙгәртергә мәжбүр итә: башҡорттар менән килешеү төҙөп, ҡыҙылдар яғына күсереп алыу, үҙҙәре өсөн файҙаланып ҡалыу яғын ҡарайҙар. Ләкин ошондай миссия менән ебәрелгән большевиктар, Муса Мортазинды алдап, Йылайырҙа ауыр енәйәт ҡыла, башҡорттарға ҡот осҡос фажиғә килтерә. Хажиәхмәт Унасовты ла ҡыҙылдар яғына күсергә күндереп, “ өйләшеү, килешеү” өсөн тип алып китеп, ғәскәренән, аҡсыларынан айырып, юлда барғанда аталар. Был турала тарихсы Рифмир Гәрәев былай тип яҙа: “Архивта теге большевиктарҙың маҡтанып яҙған донесениеларын уҡыным. Донесениеларҙа ошо факт өйләнелә: “Бер санала китеп барабыҙ, артҡа әйләнеп ҡара ам, аҡсылар юҡ. Алданғанын Унасов аңланы ла: “Ненавижу я вас, на вас смотреть не хочу, стреляйте!”— тип сананан төштө лә, әйләнеп тә ҡарамай, китә башланы. Шунда беҙ уны атып киттек”.

Йән аямай, ҡан түгеп, күпме ҡорбандар килтергәндән уң, ни айәт, башҡорттар Рәсәйҙә беренсе булып автономия ала — Башҡортостан хөкүмәте төҙөй. Совет власы Башҡортостан хөкүмәтен танырға теләмә ә лә, танырға мәжбүр була.

Муса Мортазиндың комиссары Хәлил ағай Хәлитов 1978 йылда (88 йәштәрҙә булғандыр) васыят әйтеп донъя ҡуйҙы. Ул 1937 йылдан алып 1947 йылға тиклем төрмәлә яфаланған. Ғөмүмән, күргән-кисергәндәрен өйләп биреү мөмкин түгел. “Беҙ ҡылыс менән уғышып йөрөп хөкүмәт төҙөнөк. “Башҡорттар автомобиль алырға тырыша” тип көлөп йөрөгән татар шовинистары беҙ төҙөгән хөкүмәтте баҫып алды. Үҙебеҙҙе ҡулға алып, атып бөттөләр, төрмәләргә яптылар, унан бик-бик ирәктәр генә иҫән ҡайтты. Өлкә комитетта, башҡа совет инстанцияларында, партия органдарында Башҡортостан өсөн, башҡорт халҡы өсөн бер нәмә лә

эшләмәгән, ис ыҙа сикмәгән тәкәббер бәндәләр хөкөм өрә. Халҡыбыҙ кәм етелеп, йәберләнеп, ярлылыҡта көн күреүен дауам итә. Минең ғүмерем бөттө, васыятым шул: Себерҙә оҙаҡ йөрөмә. Ошо өнәренде ташлама. Беҙҙең ҡылыс менән уғышып йөрөгәнебеҙҙе, халҡыбыҙ өсөн ҡорбан булған, ғүмерҙәрен фиҙа ҡылған ир-егеттәребеҙҙе онотмағыҙ, беҙ төҙөгән хөкүмәтте ҡулығыҙға алығыҙ. Илебеҙгә хужа булығыҙ. Халҡыбыҙҙы аҡлағыҙ”,— тип мине аптыратты.

Уйлана торғас: “Ағай, тәүге ике ен үтәрмен, улары минең үҙемә әйтелә. Ә башҡаларын үтәргә минең хәлемдән килмәй ҙә инде”,— тинем. Ул: “Хәлеңдән килерме, юҡмы — мин уны белмәйем. Тик иңә васыят әйтәм, васыят әйтерлек башҡа кешем юҡ. Килә е ялға ҡайтыуыңа мин булмаясаҡмын”,— тип ҡуйҙы. Ә мин: “Ярар, ағай, ышанысыңды аҡларға, васыяттарыңды үтәргә тырышырмын!”— тигән булдым. Онкологик дауахананың бер бүлмә енә үҙе генә урынлаштырылған ине. Тышта йөрөп килгән мәле булғанғамы, кәйефе әйбәт кенә. Оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, рух төшөнкөлөгөнә бирелмәгән. Бойоғоуҙы бөтөнләй белмәгән ымаҡ. Яуабым оҡшағандыр, күрә ең, йылмайҙы ла мин алып барған кедр сәтләүеген услап алды, шытырлатып сәйнәй башланы. Ниндәй генә михнәттәр кисереүенә ҡарамаҫтан, ғүмеренең аҙағынаса ҡылыс тотоп уғышып йөрөгән сағындағы башҡортлоҡ рухын аҡланы ул.

## УҢҒЫ ОСОУ

Грузияның Поти ҡала ынан дүрт саҡрым көньяҡта Ҡара диңгеҙгә батҡан карапҡа радиолокацион прицел менән берәмләп өс бомба ташланыҡ. Диңгеҙ яғынан ағылған болоттар Кавказ ҡаяларына бәрелеп урғыла-болғана ла, ҡуйырғандан-ҡуйыра барып, ҡап-ҡара төҫкә инә.

Тапшырылған эштәрҙе башҡарғас, ҡараңғы болоттар ара ына инеп, ҡайтыу яғына боролам. Тик ни ғәжәп?! Радиокомпас уғы бер урында тик тора. Йүнәлеште юғалтып ҡуймайым тип, Потиға ҡарай-ҡарай, әйләнеш я айым. Штурман, радист, ер менән өйләшергә тырышам — тәрән тынлыҡ. Бына иңә! Ҡап-ҡара болоттар ара ында, Кавказ тауҙары өҫтөндә япа-яңғыҙ йөрөсө әле!..

Берәй самолетҡа эйәреп ҡайтайым тип, полигон яғына йүнәлдем. Берәүҙе табып, йәнәшә бара башлағайным, ул яр буйындағы болот ара ына инде лә юғалды. Төкөп ҡуймайым тип, өҫкәрәк күтәрелдем дә, ни эшләргә белмәй аптырап, тағы түңәрәктәр я ай башланым. Самолетты диңгеҙгә ебәреп, икереп төшөргәме? Юҡ, ярамай! Тәүҙә штурманға икерергә бойорорға кәрәк, унан — радисҡа, иң аҙаҡ ҡына үҙең икерергә тейеш ең. Элемтә юҡ. Ә диңгеҙҙән кем нисек йөҙөп сыға ала?! Өсөбөҙ ҙә кейенгәнбеҙ...

Болоттарҙан өҫкә күтәрелергә булдым. Бәлки, Батуми яғында асыҡтыр? Күтәрел әм, күктә ҡояш ялтырап тора. 6,5 саҡрым бейеклектәге Эльбрус — ҡарағусҡыл бағана — өҫкә йығылып килгән ымаҡ. Был — кеше ҡарашының алданыуы, сөнки ик еҙ-сик еҙ аҡ болоттар, Эльбрусты ҙур тиҙлектә ыйпап, ары ашыға. Эльбрустан 12 саҡрымда — Кутаиси ҡала ы, аэродром, гарнизон. Кутаисиға самалап, болот ара ына сумдым да ҡала өҫтөнә тура килдем. Бына ҡаланы урталай бүлгән йылға аша күпер, тимер юл вокзалы, Самтредиаға киткән тимер юл, таш юл, уларға йәнәшә – ыҙат. Самолетты теге баштан, Самтредиа яғынан, индереп ултыртырға кәрәк.

Ултырырға китеп барған самолет алдан үтеп китте. Хоҙай араланы — төкөшмәнек. Мин тура китеп, Самтредиа өҫтөнән әйләнеш я ап, ултыртыу хәстәрлеген күрәм... Тағы бер самолет үтеп китте. Уңға тайпылдым. Уның артынан барырға ярамай. Двигателдәренән сыҡҡан газ минекеләргә тура кил ә, улар үнәсәк. улға боролоп, ыҙат тәңгәлендә уңға тартып, ултыртыуға түбәнәйҙем. Ә самолет ултырмай ҙа ҡуя, тиҙлек күберәк. Бер метр бейеклектә осоп тик ба-

ра, тәгәрмәстәр ергә теймәй ҙә ҡуя.

Ике саҡрым полосаның урта ындағы арҡыры ыҙыҡҡа еткәнсә тәгәрмәстәр ергә теймә ә, яңынан күтәрелеү яғын ҡарарғамы тигәндә, арҡыры ыҙыҡ күренде, тәгәрмәстәр ҙә ергә тейҙе. Полоса дауамындағы 500 метрға үтермен ти әм, унда ике самолет ултыра икән. Бере е тура, икенсе е унғараҡ тайпылған, миңә и ә урын ҡалмаған. Тәгәрмәстәрҙе яндырып бул а ла туҡтатырға тип, тормоздарға ныҡ итеп баҫам да ебәрмәйем. Полоса аҙағына ун метрҙай ҡалғас, самолет туҡтаны. Стоянкаға алып барып ҡуйҙым да ергә төшөп баҫтым.

Арман ыҙ арып, лыс ыу бо орап, йығылырҙай булып торам. Штурманым Самхарадзе ла килеп сыҡты. Радисым да килде. Самолет технигы: “Какие замечания?”— тип журналын тотоп тора. Лётчиктар уратып алды. Бер кем бер нәмә өндәшмәй, ҡарашып тик торабыҙ. “Связи не было, радиокомпас не работал,— видимо, электросистема...”— тигән булдым. Штурман менән радист: “Я думал, только у меня связи нет”, — тиештеләр. Самхарадзе: “Әйҙә, йәйәү ҡайтайыҡ”,— ти. Тимер юл аша сығып, таш юл буйлап дүрт саҡрым барырға. Самхарадзе мине кафеға алып инде, атыусы грузинға үҙҙәренсә нимәләрҙер өйләй ҙә, миңә күр әтеп, “... от смерти спас” ти. атыусы беҙгә берәр стакан араҡы, ашамлыҡтар ҡуйҙы.

Эсеп-ашандыҡ та, юлға төшөп, яй ғына атлап ҡайтып барабыҙ. Гарнизонға бер саҡрым урында грузин ауылы бар. Самхарадзе шул яҡҡа ымланы. Боролдоҡ. Өс ҡатлы матур йорттоң стена ына терәтеп алынған аласыҡта сыуал яҡты ында грузиндар шарап эсеп, өйләшеп ултыра. Иҫәнләшеп, ихтирам күр әтеп, беҙгә түрҙән урын бирҙеләр. Хужа таш стеналағы бер ҡапҡасты асты ла ағас мискә тартып сығарҙы. Ә теҙелеп киткән ҡапҡастар күп күренә. Самхарадзе: “Он нас от смерти спас...”— тип миңә күр әтә лә грузинса өйләй ҙә өйләй. Ә башҡалары тел шартлата, минең ҡайҙан, кем булыуымды орашалар. “Башҡорт” тигәс, Салауат Юлаевты иҫкә төшөрҙөләр. әйбәт кенә өйләшеп, кружка менән шарап эсеп ултырҙыҡ.

Гарнизонға ҡайтҡас, Самхарадзе үҙенә саҡырҙы. ылыу ғына кәләше мөләйем йөҙ менән, шатланып ҡаршы алды. Биш йәшлек улы, йүгереп килеп, ата ының ҡосағына ташланды. Мул итеп өҫтәл әҙерләнеләр, коньяк ултырттылар. Самхарадзе тағы: “... он меня от смерти спас” тигәнен өйләй башланы. Ҡаҡшаған нервыларым тынысланғандай, хәл кереп, кәйеф күтәрелгәндәй булды. Үҙ фатирыма ҡәнәғәт кенә ҡайтып индем.

“Ошоға тиклем ҡайҙа йөрөй ө-өң!” — тип ҡәйнәм менән кәләшем, улым Азамат миңә ҡарап торалар. “Үлемдән саҡ ҡотолоп ҡайтып киләм...” — ти әм: “Бүтән кеше үлмәй бит, ин ниңә үлә ең?”— тип ҡысҡыралар. Асыуым ҡабарҙы,ҡул елтәнем дә урыныма барып ауҙым. Йоҡоноң исеме генә йоҡо булды, ататтырҙы. Йоҡлап китеүем була, тертләп уянам.

Иртәгә ен эшкә барып, бер сәғәт әҙерләнгәс, тәнәфескә сыҡтыҡ. Таш баҫҡыстан түбәндә егеттәр кисәге хәлгә аптыраша. “Вчера такая сложная погода была: взлетали, встречный – 18! Сажали — попутный 18! (Ә ҡаршы елдең тиҙлеге секундына 15, ә ыңғайы 1 метр бул а ла, осорға рөхсәт ителмәй – **Ә.И.**) При такой погоде когда-то тот-то разбился!”— тип ғәжәпләнәләр.

Мин үҙемдең ни өсөн полосаның ярты ын уҙғанса самолетты ултырта алмауымдың сәбәбен аңланым. Ошондай ҡатмарлы хәлдә, радиокомпас ыҙ, бәйләнеш - еҙ, ике заход я ап, әр бере ендә алдан самолет үткәреп, унға- улға боролоп, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә нисек ултырта алдым икән?! Хоҙай аралағандыр. Эс-бауырҙан күкрәк-йөрәк аша өҫкә күтәрелә килгән зымбырлау-ҡалтыраныу ғәләмәте алҡымыма етә башлағайны, артабан ни булғанын белмәйем.

Төш күрәм: аҡ болоттар ағыла, улар ара ында аҡ халаттар кейгән врачтар осоп

йөрөй. “Зыңҡ” итеп ҡолаҡтарым сеңләп китте. Күҙҙәрем күрә. Иҫемә килдем... Таш баҫҡысҡа йығылғанмын икән. Салҡан алғандар ҙа аҡ халатлы полк врачы нашатырлы спиртҡа манылған мамыҡ менән танау аҫтымды ыйпаҡлай. Ә күктә, ысынлап та, аҡ болоттар ағыла. Торҙом әм кисә уңғы тапҡыр осҡанлығымды аңланым.

Был хәл 1960 йылдың 12 февралендә булды. Иптәштәргә ҡарап: “Моя летная карьера окончена, кому планшет подарить?”— тип маршруттар ыҙылған, документация, таблица-фәлән алынған планшетымды күтәреп торам. “Мы свои планшеты не знаем куда девать, возьми на память”,— тиҙәр. Ә врач: “Пошли, напиши объяснительную”,— тип кабинетына алып инде.

Тбилиси ҡала ындағы округ госпиталендә бер ай тикшереү үткәргәндән уң, осоуға яраҡ ыҙ, тип хәл иттеләр. Тап ошо ваҡытта, 1960 йылдың 16 февралендә, КПСС Үҙәк Комитеты әм СССР Министрҙар Советының берлектәге ҡарары менән беҙҙең дивизияны тараттандар. Мин осҡан самолет тураҡланып-ваҡланып, иретергә оҙатылған. Мин был полкка Цители-скарола дивизия ы таратылғандан уң, ноябрҙә, килгәйнем. Миңә бик иҫке булғанлыҡтан үҙҙәре осорға ҡурҡҡан самолеттарҙы ғына бирә торған булғандар икән.

## Тыуған яҡҡа ҡайтыу

Дивизияла ҡалған таныштар миңә: «Ҡайтма, ни бар инә төньяҡта, бында квартираң бар, аэродром ҙур, эш етерлек»,— ти ә лә, мин уйлағанымдан кире ҡайтманым. Квартираны тапшырып, справка алғас, иптәштәрем бик нык ғәжәпләнде. Улар миндәге башҡортлоҡто, «тыуған илем, Башҡортостаным» тип уйлауҙарымды, күңелем тулы ҡурай моңо булыуын белмәй ҙә, аңламай ҙа ине.

Харьковҡа еткәс, ғаиләне Өфөгә оҙатып, Белоруссияның Барановичи ҡала ына юлландым. Отпускыла ваҡытта Иштуған ағай: “Ишдәүләттең уңғы хаты Зельва станция ынан килде, барып ҡара әле, ҡәбере юҡмы икән?”— тигәйне. Шәрифулла ағай ҙа шунда әләк булғандыр, тип уйлай инем. Барҙым, ораша торғас, бер белорусты таптым. “Тәүге сәғәттә үк хәрби казармаларҙы, бомбалар ташлап, ер менән тигеҙләнеләр. Бер генә пограничник эте менән ағас мискәгә инеп йәшенгән булғайны, артынан мотоцикл менән килгән немецтар атып китте”, — тине ул. Мотоциклы дошман алдаттары көнсығышҡа табан күпләп үткән, өсдүрт көндән уң көнбайышҡа бик күп әсир совет алдаттарын ҡыуғандар. Ошоноң менән был тирәлә уғыш та бөткән.

Барановичиҙан контейнер менән Өфөгә шифоньер, өҫтәл, ултырғыс, сервант-фәлән ебәрҙем дә, Мәскәүҙә телевизор атып алып, үҙем дә Өфөгә ашыҡтым.

Вокзалда такси менән ҡаршы алып, Гоголь урамындағы 13-сө йорт ихата ындағы таҡта арайға урынлаштырҙылар. Темәс педучилище ында элек физика әм математиканан уҡытҡан Камил Ғәлимов ағайҙы эҙләп киттем. 1-се интернат-мәктәпкә эшкә урынлашып, исма ам, ун баланы бул а ла ҡурайҙа уйнарға өйрәтәйем, тип ниәтләндем. Алмайҙар, урын юҡҡа ылтаналар. Мәғариф министрының кадрҙар буйынса урынбаҫарына индем. “Сез, мәктәпләрдә йөрөп, эш табыгыз, аннары мин сезгә назначение бирермен”,— тине был мөләйем генә итеп. КПСС Үҙәк Комитеты әм СССР Министрҙар Советының ҡарарын белмәгән кеүек өйләшәләр. Ошо ҡарарға ярашлы, мине бер ай эсендә үҙ өнәрем йәки теләгем буйынса эшкә урынлаштырырға тейештәр ҙә ба а. Мин таҡта арайҙа йәшәп ятам, алты ай ыҙ квартира булмай, тиҙәр. Прописка ыҙ хәрби комиссариат та иҫәпкә ҡуймай. Совет районы Советы башҡарма комитетына квартира алырға сиратҡа баҫтыҡ. Военкоматта и ә квартира юллау тура ында уйламайҙар ҙа. Аптырағас, минең кеүек бер төркөм кеше Мәскәүгә хат яҙып, 25 ҡултамға менән ебәрҙек. Беренсе булып үҙем ҡул ҡуйҙым. Үтенесебеҙҙе ҡәнәғәтләндерҙеләр.

Октябрь проспектында интернат-мәктәпкә яҡын “Төҙөлөш” туҡталышында бер торлаҡ йорт файҙаланыуға тапшырыла. Тик исемлеккә хәрбиҙәрҙән ун кешене генә индерәләр. 40-сы заводта эшләй инем, исемлеккә эләгеү өсөн көн дә эштән уң такси менән шунда сабам. Төрлө юлдар менән исемлеккә лә инеп, квартираның номерын да яҙҙырып ҡуйҙым. Шулай итеп, хәйләләшеп, урынлашып йәшәй ҙә башланыҡ. Инде интернатҡа эшкә урынлашыу проблема ы ҡалды...

Бынағайыш! Директоры, рекомендация килтер, ти. Военкомат, райком туп аларын көнө буйы тапап, ыңғай яуап ала алмаған, обкомға (КПСС өлкә комитеты) юлландым. Унда хәрби хеҙмәттән азат ителгәндәрҙе эшкә урынлаштырыу буйынса комиссия бар, председателен дә бик маҡтайҙар. Ул Ҡарабаев икән. “Мин әле командировкаға китеп барам, ун көндән кил, хәрби эшкә урынлаштырырмын” ,— тигәс, бергә сыҡтыҡ.

Совет майҙанында Рамазан Ҡотошов осрап, мәсьәләне ыңғай хәл итергә килештеләр. Өҫкә табан атла ам, интернат-мәктәп директоры тора. “Әйҙә, министрға” тип алып китте лә, унда барғас, мине маҡтай ҙа башланы: ҡурайсы, фәлән дә төгән. Министр: “Ярай, ал эшкә”, — тип сығарҙы. Хеҙмәт уҡытыусы ы итеп эшкә алдылар ҙа, йәйге каникул мәле булғас, ваҡытлыса балалар баҡса ы йәшендәгеләргә тәрбиәсе итеп ҡуйҙылар.

Хеҙмәт уҡытыусы ы булып башлағайным, бик ҙур ҡаршылыҡтарға осрап, ташларға тура килде. Мине 5-се детдом класына тәрбиәсе итеп тәғәйенләнеләр. Балаларға иғтибарлы булырға, ысын күңелдән тәрбиәләргә, тормош юлына аяҡ баҫырға ярҙам итергә тырыштым. Быны балалар йылы ҡаршы алды, тыңлаусан булды, татыу ғүмер кисерҙек. Ҡышҡы каникулдарҙа, шәмбе, йәкшәмбе көндәре, аҡса эшлә ендәр өсөн, эшкә урынлаштырып бөттөм. Заводта мастерҙар менән килешеп, үҙаллы йөрөгәндәр.

Миңә партия, профсоюз эштәре буйынса ла бик күп йомош йөкмәтәләр ине. Эшсе персонал ара ында сәйәси дәрестәр үткәреү ҙә минең өҫтә булды. Профсоюздың торлаҡ-көнкүреш комиссия ы рәйесе итеп айланылар. Тәүҙә хаттар ебәреп, аҙаҡ үҙем йөрөп, хеҙмәттәштәремә ун алты фатир алып бирҙерттем. Райкомға ла ошо уҡ эшкә айланылар, эшләнем. Аҙна ына бер йыйылышҡа йөрөргә тура килде. Райкомға килгән ялыуҙарҙы тикшереп, белешмә биреү ҙә минең өҫтә булды. Саҡыр алар, шул көндө үк тикшереп, справка биреп китәм. Абруй ҡаҙандым. Үҙешмәкәр сәнғәт ярыштарында ҡатнашып, Калинин районында беренсе урынды ала торғайныҡ. Уҡыусылар ҙа мәктәпкә беренсе урын алып бирә ине. Осрашыу, сығарылыш кисә е тип, мине яуаплы дежур итеп ҡуялар икән, ысын күңелдән, ихлас ойошторҙом. Таң атып, ҡояш ҡалҡҡансы уйнап-көлөп, рәхмәттәр әйтеп торалар ине.

Интернатта эшләй башлағас та, ҡурайҙа уйнарға өйрәтеү өсөн Абдулла Хәлфетдиновты килтерҙем, ятаҡтан бүлмә юллап бирҙем. Өфөлә прописка ы ла юҡ ине, квартира алдырып, улар шунда китте, радиоузел эшләтеп, бөтә бүлмәләргә, кластарға, ашханаға, ихаталағы ике бағана башына репродукторҙар ҡуйҙырттым. Армияла алған ҡырҡлаған пластинкаларымды алып килеп, радиофондтан бик күп йырҙар яҙҙырып алдым. Ғәзиз Әлмөхәмәтов, Йомабай Иҫәнбаев, Әбдрәхим Исҡужин ағайҙарҙың йырҙарын табып яҙҙырып алдым.

Мәктәптең тәүге ҡатындағы бер класта мин малайҙарҙы ҡурай уйнарға өйрәтәм, йырҙар ҙа тыңлайбыҙ. Үткән- үткән уҡыусылар, уҡытыусылар шул тирәлә туҡтап йәки инеп тыңлай. Тарих уҡытыусы ы Әҙ әм Ғарипов беҙҙең ансамблде фотоға төшөрөп, гәзиткә мәҡәлә ебәргән дә, БДУ профсоюзы Жәлил Кейекбаев шуны уҡып, иғтибар иткән икән. Бер банкетҡа уның орауы буйынса саҡырылғас, эргә енә ултыртты ла “Шул йырҙы беләә еңме, был йырҙы беләә еңме?” кеүек ораўҙар бирә. Мин “Беләм, беләм...” тип ултыра торғас, “Арғужа”ны уйна әле,

тип үтенде, йырлашып киттек. Минең белем тура ында орашып, Жәлил Ғиниәтович: “Миңә уҡырға кил”,— тине. “Тел белмәйем бит”,— ти әм, “Белә ең ин”, — ти.

Уҡырға инеүемде интернатта тәүҙәрәк белмәй ҡалдылар, артабан инде ҡамасаулыҡ итә башланылар. Минең уҡыусыларға тәрбиәсе ҡуймайҙар, шуға сессия барышында эшкә килгеләп йөрөргә тура килде.

Мин насар уҡыманым. Армияла марксизм-ленинизм университетында ике тапҡыр уҡығайным. Ике урында ла ҙур булмаған китапханаларҙың барлыҡ китаптарын ҡарап, уҡып сыҡтым. “Философия үҙлеге” кеүек атып алған китаптарым да күп кенә була торғайны. Минең уҡып йөрөүемде өнәмәгәнлектән, сессиянан ҡайтыуыма берәй боҙоҡлоҡ әҙерләп ҡуялар. Бер мәл, ҡыҙҙарымдың игеҙенең башынан бет таптыҡ, тип шелтә яҙғандар. Бынан башҡа яфаларҙы бик күп күрергә тура килде. Яҙып бөтөрөрлөк тә түгел.

1975 йылдың февралендә, ахыры ы, БДУ-ла “Шоңҡар” әҙәби түңәрәгенең 40 йыллығын үткәргәндә Ҡолшәриповтар йырларға саҡырҙы. “Тәфтиләү”, “Урал бәйете”, “Сибай”ҙың Ғәзиз Әлмөхәмәтов вариантын башҡарҙым. Был йыр бик ҡиммәткә төштө: көслө эҙәрлекләүҙәр башланды. Алдап алып барып, КГБ кешеенә тапшырҙылар, ул минән ғәйеп таба алманы.

Иртәгә енә эшкә бар ам, хеҙмәт кенәгәмде алып тикшереп йөрөйҙәр... “Пиши объяснительную”, тиеүҙәренә: “Я ничего не знаю, кто исправил мою трудовую, пусть тот и пишет”, — тиергә кәрәк булған да уң, белмәгәнмен. Мине, “енәйәтсе” тип, партия йыйылышына ҡуйырға булдылар. Райкомдан бер ҡыҙыҡай килгән, уны ҡултыҡлап, партбюро секретары ҡәнәғәт ҡиәфәттә йөрөп ята. Йыйылышта ҡай ы берәүҙәр бер-бер артлы тороп, бере енән-бере е уҙҙырырға тырышып: “Как это так можно? Коммунист! Я вот не знаю! Я вот коммунист! Не могу понять! Как можно, так!.. Исправлять трудовую книжку! Чтобы присвоить государственные деньги!” — тип шашып өйләне. Ҡайҙан табалар шул хәтлем алама үҙҙәрҙе лә, нисек оялмайҙар әйтергә?! Мине яҡлап Зыя Батталович ҡына сығыш я аны. Фатирына алып инеп, ҡунаҡ итте, шунда әйтте лә инде: “Былар тотондолар инә, ҡотола алмай ың, лучше ултыр, дәлилдәреңде әйтмә, юҡ итәсәктәр”, — тине.

Бер көндө райком пленумына саҡырҙылар. Секретарҙар, ойошторуу бүлеге мөдире мине ихтирам итә ине. Пленум минең эш буйынса бер ҡарарға ла килә алманы. Ә дошмандар шул көндө үк эште тәфтишсегә биргәндәр. Улар, мине саҡырып, аңлатма яҙҙырып ҡайтарҙы. Бер аҙҙан эште ябыу өсөн профсоюздың юллауы кәрәк булды. Әммә директор коллектив йыйылышы үткәрергә теләмәй. “Үҙең йый халыҡты!” — ти. Утыҙ-ҡырҡлап кеше, башлыса эшселәрҙе йыйып, протоколды тапшырҙым. “Бөттө, ҡабат саҡыртмаҫбыҙ”,– тинеләр. Әммә ике-өс көндән тағы саҡырылдым. “Прокурор велел передать дело в суд”, — тиҙәр. Судья хөкөм ҡарары уҡып бөтөрөү менән, залға бер милиционер килеп инде әм хөкөм ҡарарын алып сығып та китте. Урамда “Волга” еңел машина ы тора ине. Бер судья: “С каких пор тюремщиков стали на “Волге” возить”,— тип көлөп ҡалды.

Мине К. Маркс урамындағы зинданға тығып ҡуйҙылар. Ун алты битлек кассация ялыуын тамамлағас, өйгә лә хат яҙҙым. Яңы адвокат табығыҙ, өс көндән ҡушымта ебәрәм, шуны ингән урында уҡ алып, папка ына ал ын, суд ултырышы ваҡытында иң аҙаҡтан ғына сығар ын, тинем.

Мине төрмәнән ҡотҡарырға тырышып, йөҙ ҡултамға йыйылыуға ҡарамаҫтан, суд хөкөм ҡарары буйынса мине йыл ярымға Мәләүез ҡала ындағы дөйөм режимлы колонияға ебәрҙеләр.

Тырышып китапханала эшләнем. Бик күп иҫке китаптарҙы ғәмәлдән сығарып, яңыларын алдырҙым. Екатерина II заманында уҡ төҙөлгән бинаға ремонт та я ат-

тым. Мәскәүҙән килгән полковник, оҡланып: “За что сидишь?”— тине, мин: “За то, что военный человек”, — тип өйләп биргәйнем, “Освободите его немедленно!” — тип ҡысҡырҙы. Профсоюздар өлкә комитетынан юллама килгәс, ҡайтарып ебәрҙеләр.

Өфөгә ҡайтҡас, 20-се мәктәпкә хеҙмәт уҡытыусы ы итеп ебәрҙеләр. 3,5 мең ум бурысым йыйылып киткән. Себергә китеп, аҡса эшләргә уйланым. Аҙнаға дүрт көн кис айын Черниковкаға йөрөп уҡып, ун айҙан ҡыҙыл диплом менән 6-сы разрядлы экскаватор машинисы сифатында Сургут ҡала ына килдем. Мине дизелист итеп бригадаға эшкә ҡушып, ун биш саҡрымдағы “Солнечный” поселогында вагонда йәшәргә урынлаштырҙылар. Эшләп киттем. Берәй ерҙә дизель ватыл а, мине алып китәләр, бер сәғәт-сәғәт ярымда йүнәтәм. Баш инженер, баш механик ихтирам итә, ораған нәмәләрҙе биргеләйҙәр.

Ноябрҙә ауырып киткәйнем, дауаланырға Өфөгә ҡайтырға ҡуштылар. Күтәренеп, лыс ыу булып ҡышҡы кейемдә өйгә индем.

## Башҡортостан суверенитеты юлында

Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында Рәсәй составындағы милли республикаларҙа төп халыҡ вәкилдәренең иң уҡымышлылары, алдынғы фекер йөрөтөүселәре Рәсәйҙә ысын-ысындан федератив дәүләт ҡороу идея ын күтәрҙе. Бер-бер артлы суверенитет тура ында декларациялар ҡабул ителеп, был хәрәкәткә башҡорт зыялылары ла ҡушылды. Әммә республикала уларға ҡаршы көстәр хәрәкәткә килеп, улар рус телле матбуғатта ҡотҡо таратты, башҡорттарҙы яманлап митингылар ойоштороҙо, урамдарҙа, трамвай, автобус, троллейбустарҙа ҡысҡырып, провокацион ғәйбәт сәсте. Был кешеләр бысраҡ йөкмәткеле гәзиттәрен әр йорттоң почта ҡумталарына тыҡты, транспорт туҡталыштарындағы эскәмйәләргә күпләп ҡалдыра торған булды. Башҡортостан Республика ы Президенты вазифа ына Башҡортостан халҡына бер төрлө лә эш күр әтмәгән, кире енсә, халыҡтың байлығын үҙләштергән Р. Ҡадиров, А. Аринин кеүектәр дәғүә ҡылды. Башҡортостан халҡы өсөн бер тинлек тә файҙа килтермәгән әм килтерә лә алмаған әлеге Аринин менән Татар ижтимағи үҙәге башлыҡтарының бере е К. Яуышевтар Башҡортостан халҡына үҙҙәренең милли ойошмалары идара ы исеменән мөрәжәғәт таратты. Ул мөрәжәғәттәрҙә Мортаза Рәхимов тура ында ниндәй генә бысраҡ уйҙырмалар яҙылмағайны! Халыҡ өсөн янып йөрөгән кешене түбән етергә маташып, үҙүҙҙәрен хурлағандар.

...Башҡортостан Юғары Советында суверенит тура ында декларация ҡабул итеү сессия ы бара. Райондарҙан килеүселәр юҡ, баҡ аң, ҡаршы көстәр “Сибай-Өфө” поезына билеттарҙы тотошлайы менән атып алған икән. Өфөгә килә торған юлдарҙа күпләп милиционерҙар ҡуйылған, улар, автобустарҙы үткәрмәй, кирегә ҡыуған. Сессия барған бинаның көньяғындағы уйпат ерҙе ОМОН егеттәре менән тултырғандар. Депутаттарға үтерлек тар ғына юл ҡалдырып, ике яҡлап Өфө йәштәре әм студенттар теҙелгән. Улар тирәләй милиция хеҙмәткәрҙәре, ваҡтөйәге лә түгел, подполковниктар йөрөй. Именлек комитеты хеҙмәткәрҙәре, йәштәр ымаҡ кейенешеп, улар ара ында бутала икән. Ишек алдындағы майҙанда ике төркөм милиция подполковнигы тора. Ҡаршылағы Матросов паркы эсендә үҙенең төркөмө менән билдәле Ҡазан шәхесе Фәүзиә Байрамова ултыра икән.

Депутаттар үткәндә, йәштәр “Суверенитет!” тип ҡысҡырып ҡала. 280 депутаттың ни бары 37- е генә башҡорт, уларҙың да 10-лағаны ғына ысын башҡорт булыуы ихтимал, тинеләр.

Йәштәрҙе баҫҡыста ҡурай уйнарға ҡушып, үҙем майҙанда сығыш я ап тор ам, арттағы төркөмдән бер подполковник килеп тер әктән тарта: “Хватить!”— тип артҡа өйрәй. “Не трогай меня!”— тип ҡысҡырып, ҡулымды тартып алдым. Икенсе төркөмдән бер подполковник килеп: “Ағай, ин ҡай ы райондан?” — ти.

“Баймаҡ, ә үҙең ҡайҙан?”— “Салауат. Ағай, ҡурҡма, беҙ бында торабыҙ”,— тип китте... Түбәнгә төшөп, йәштәргә: “Тел тура ында үҙ сығармағыҙ! Бер генә мәсьәлә — суверенитет”,— тип әйтеп сыҡтым.

Бер ҡыҙ эргәмә килде лә: “Ағай, ана, Айҙарҙы килтерәләр”,— ти. “Ниндәй, ҡай ы Айҙар?”, — ти әм, “ уң, ана бит”,— тип күр әтә. Ҡара ам, теге аслыҡ иғлан итеп палатка ҡороп ятҡан Айҙар Хәлимде килтерәләр икән. Быйма, пальто, бүрек кейгән. Ҡулына Ҡөрьән китабын тотоп, унын өҫтөнә яҙған нәмәләрен алып алған. Шундай меҫкен төҫ менән, йәнә е, ул ас, саҡ атлай был. аҡаллы ике егет уны ҡултыҡлап, ҡыҙғаныу әм йәлләү сырайы күр әтеп, уға ҡарай-ҡарай иплэп кенә атлап килгән була. Айҙар депутаттар янына сессияға инергә теләй икән. Йәнә е, Башҡортостанда күп хоҡуҡтарҙан мәхрүм ителгән татарҙар йәшәй, әм ул шуларҙы яҡлауҙы орап яҙған үтенес менән килгән.

Бына ҡайҙа ул артист! Совет майҙанында ине Айҙар Хәлимдең палатка ы. Үҙен милиционерҙар аҡланы, шулар уҡ ҡаршылағы ашханаға индереп, ашатып йөрөр булған. Беҙҙең йәштәр был күренеште фотоға төшөрөп алған. Айҙар ашап ултырғанда төшөрөлгән фото ошондағы уҡ йәштәрҙә бар ине инде.

Мин, быларҙың килгәнен күргәс тә: “Не допускать!”– тип ҡысҡырғайным, йәштәр, йүгерешеп барып, ҡултыҡлашып, баҫҡысҡа теҙелешеп торҙо ла: “Долой!”— тип ҡысҡыра башланы. Ишеккә табан боролған мөйөштә подполковниктар, Айҙарҙы уратып алып, нимәлер әйтте. Шунан уң ғына теге төркөм кире боролорға мәжбүр булды.

Йыйылған халыҡ ҡыйыҡ аҫтындағы репродукторға баҡҡан. Унан сессияла барған хәлдәр хәбәр ителә. Әммә беҙҙең теләк-өмөттәребеҙ өҙөлдө. Башҡортостан Юғары Советы депутаттары тулы суверенитет өсөн тауыш бирмәне. Тәнәфес иғлан ителгәс, депутаттар залдан сыға башланы.

Тәнәфестән уң депутаттарға, фамилияларын яҙып, карточкалар тарата башлағандар: “Суверенитет как субъект Российской Федерации”. Кто “за”, кто “против?” әр депутат ҡул ҡуйып бирергә тейеш. Шул мәлдә Татар ижтимағи үҙәгенән Кәрим Яуышев йүгереп килеп сыҡты ла: “Требуйте полный суверенитет! Вы на это имеете полное право!”— тип ҡысҡыра башланы. Мин “Яуышев!” тип уға табан йүгерә башлағайным, теге кире әйләнеп ҡасты.

Студенттар мине уратып алып: “Ағай! Ул дөрөҫ әйтә лә инде. Беҙгә бит полный суверенитет кәрәк”,— тиҙәр. Мин: “Кем риза бул ын! Талабыбыҙ юҡҡа сығасаҡ! Шуның менән бары ы ла бөтәсәк. Полный суверенитет талап итеү — ул уғыш. Беҙгә ҡапылда “Суверенный Башҡортостан” тигән үҙ бул а ла ярай”,— тип ныҡыштым. Шул турала “Йәшлек” гәзитенә лә яҙғайным, йәштәр әм башҡалар аңла -ын, тигән уй менән инде. Йәштәр генәме уң әле?! “Ниңә?!.”, “Беҙгә бит...” тигән кеүек мөрәжәғәттәр менән килә лә төртөләләр. Ололар, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙар: “Ниңә ундағыларға әйтмәй егеҙ?!”— тип кешеләр ыңғайына ҡуҙғырышҡан булып, аҡыл өйрәтеп маташҡан булалар. Бер мәл “Обком, горком долой!” мәсьәләләре килеп тыуғайны бит. Иртәгә митинг. Барлыҡ милли ойошмалар ҙа ҡатнаша. Башҡорттар, үҙ төркөмөнөң тыныслығын аҡлау өсөн, 15 кеше тәғәйенләне. “Мин ҡартмын”,– тип ҡаршы кил әм дә, “Әҙ әм ағай, тик ултыр!”— тип мине лә шул иҫәпкә индерҙеләр.

Матросов әйкәле янына иң беренсе булып мин барҙым. Ҡараңғы, торам уйланып. Кеҫәмдә бер бәкенән башҡа ҡорал юҡ. Ҡулымда – бер ҡурай. Ни эшләрбеҙ?

Ана, минең ымаҡ милләт яҙмышы өсөн әрнегән башҡорттар йүгерә-атлай йыйыла ла башланы. Тын алыуҙары йышайған, миңә ораулы ҡараштары менән бағалар. Йәнә е, әйт үҙенде, нишләйек? Бына беҙ.

“Киттек тегендә!”— тип алдан төштөм. Митинг була торған майҙанға – Аҡ йорт янына бар аҡ, унда беҙҙең өсөн бик уңайлы урын бар икән. Стена буйлап те-

ҙелергә булдыҡ. Стена артында, әллә нисә метр түбәндә, машина юлы. өжүм бу-ла ҡал а, уң яҡтан ғына булыуы мөмкин. Ә был беҙгә бик уңай, бөтә халыҡ шул яҡтан ғына киләсәк, милиция ла шул яҡта йөрөйәсәк...

Башҡорттар, лозунгыларын күтәреп, килә лә килә. “Да здравствует дружба народов СССР!”, “Да здравствует дружба народов Башкортостана!”, “Да здравствует дружба башкирского и русского народов!”, “Да здравствует дружба башкирского и татарского народов!” Лозунгыларҙың мәғәнә енә ҡарап, шул тәртиптә берәр метр ара ҡалдырып, теҙеп сыҡтым. Иң уңайлы, иң күренекле урынды башҡорттар алып ҡалды... Халыҡ ағыла. Радиостанция урынлаштырылған машинаны иң уртаға ҡуйҙылар. Арала милиционерҙар, подполковниктар күбәйеп китте.

Бер саҡ алдыма мө абәт, мыҡты кәүҙәле, әйбәт пальто кейгән бер егет килеп баҫты ла, башҡортса: “Ағай, берәй хәл тыу а, миңә мөрәжәғәт ит. Мин ОМОН-дан”,— тип китеп барҙы. Ҡыуанысымдың сиге булманы, ғорурланып, батырайып киттем. Тимәк, мине күҙәтәләр, ҡарауыллайҙар.

Корреспонденттар килеп интервью ала башланы. Берәүҙәре ҡағыҙға, икенселәре диктофонға яҙҙыра. “Мин Мәскәү телевидение ынан”,— тип бер ҡыҙыҡай интервью орап, камераға төшөрә башланы. Ул беҙҙең лозунгыларҙы төшөрөп сыҡҡан, әлбиттә. Мин, ҡулымдағы ҡурайымды күтәреп: “Курай! Башкирский народный музыкальный инструмент. Курай — символ дружбы народов! Поет об истории, жизни, страданиях башкирского народа”,— тип ҡыҫҡа ғына үҙ әйттем.

Артабан бер төркөмдөң “Татар теленә – дәүләт статусы!” тигән лозунг күтәргәне күренде. Ә башҡорт телен дәүләт теле итеп ҡабул иткән ҡоролтай ваҡытында ул лозунг бөтөнләй күренмәгәйне бит.

Ә бына “Татар телен дә Башҡортостанда дәүләт теле итеп ҡабул итеүҙәрен добьемся” тигән листовкалар таратылды. әр подъездың почта йәшниктәренә төшөргәндәр. Башҡорттар йәшәгән фатирҙарҙың ишек тотҡаларына ҡыҫтырғандар. Ә халыҡта – тамаҡ ҡайғы ы. оранып ултырғандарға хәйер таратып бир ендәр ине, бушҡа аҡса әрәм иткәнсе. “Суверенитет бөтә Башҡортостан халыҡтары, улар дуҫ, татыу, мул тормошта йәшә ен өсөн кәрәк” тип Алла ы Тәғәләнән орағанды аман аңламайҙар ахыры.

“Советская Башкирия” гәзитенә академик Толстиков менән Ғәббәс Шафиҡов: “Если Башкирия получит суверенитет, то русским, проживающим на западе и в Москве и в Сибири, на Дальнем Востоке будет затруднено общаться”,— тип яҙ-ҙы. Бына инә, ишетмә әң — ишет... Мин яуап яҙырға мәжбүр булдым: “Не беспокойтесь! Поезда, автобусы и всякий другой транспорт будут ходить. Самолеты будут летать, как всегда, по расписанию. Телефоны, радио, телевидение будут работать беспрепятственно. Читатели своевременно получат газеты, журналы, книги и другую печать... Башкиры препятствовать не будут”.

Артабан башҡорттарҙың 1812 йылғы Ватан, 1941—1945 йылғы Бөйөк Ватан у-ғыштарында рустар менән иңгә-иң тороп, йән-тәнен аямай ил азатлығы өсөн көрәшеүе тура ында яҙҙым. Академик Толстиковтың эшләпә е менән ҡасандыр КПСС Өлкә комитетында эшләгән еренән насар ҡылығы арҡа ында ҡыуылған Шафиҡовты ҡапларға маташыуын дә өҫтәнем. Мәҡәләне редакцияға алып килгәс, берәү ҡыҙара-бүртенә уҡып сыҡты ла: “Не будем печатать!!!” — тип ҡысҡырып ебәрҙе. Мин и ә тыныс ҡына: “Я знаю, что не будете печатать. Прошу зарегистрировать”,— тинем...

Башҡортостанды ике губернаға бүлеп, Ырымбур губерна ын —урыҫтарға, Өфө губерна ын татарҙарға ҡалдырырға тырышыусылар ҙа булды. Байрамова: “Башкортлар кая курай юан үсә, шунда йәшәгәннәр. Уфа ягында булмаганнар. Стройкаларда татарлар гына эшлиләр, юл төзиләр. Ә башкортлар эшләргә

теләмиләр",— тип яҙҙы. Таң ылыу Ҡарамышева быларҙы "Йәшлек" гәзитендә баҫтырып сығарғас, уға: "Кызыңның башына мешок кейдерәбез", — тип хат ебәргәндәр. Ә Айҙар Хәлим, редакцияға килеп, шуның хатын талап алырға маташҡан. Етеҙ, берҙәм бәндәләр. Әммә ундайҙар күп түгел, бармаҡ менән анарлыҡ. Тик бына ошондай ҡоторғандарҙың наҙандары ғына башҡорт тура ында ғәйбәт атып маташа. Арининдың гәзиттәре лә бик күп урыҫ әм башҡа халыҡтарҙың башын бутаны. Ләкин дөрөҫлөк өҫкә сыға барҙы.

Бер мәл Ҡаҙағстандың Аҡтау ҡала ында йәшәүсе башҡорттар саҡырҙы. Унда ҡаҙаҡтарҙың "Парасат" /"Аҡыл"/ ойошма ы үткәргән конференцияла ҡатнаштым. Ҡаҙаҡтар төрлө төбәктән — алыҫтағылары самолетта, яҡыныраҡ йәшәгәндәре поезда, машинала килеп шунда баш күтәреп йөрөгән казактарға ҡаршы сығып, боролорға мәжбүр иткәндәр. Гурьев Рәсәй казачество ының баш ҡала ы түгеллеген, борон-борондан ҡаҙаҡ ере булыуын иҫбат иткәндәр.

Көнбайыш ҡаҙаҡ иҡтисади зона ы президентына Зәки Вәлидиҙең "Ленинға хат"ын, "Башҡорт халҡына хат"ын бирҙем. Ул уҡый бирҙе лә: "Изучать будем. Обращайтесь к нам, что нужно вам, все сделаем!"— тине. Аҡтау радио ынан 15 минутлыҡ сығыш я аттылар. Ҡаҙағстан Президенты Нурсолтан Назарбаев килеп, уран рудалары шахталарын яптырып китте. Уға биреү өсөн алып барған ҡурай, пластинкаларым бар ине. Ҡулымды күкрәгемә ҡуйып, баш эйҙем дә бүләктәремде тапшырҙым. "Ә еҙ үҙегеҙ уйнай беләегеҙме?"— тип ораны Назарбаев. "Урал"ды уйнаным. Ул, күкрәгенә ҡулын ҡуйып, баш эйеп: "Ҙур рәхмәт!"— тине. Ҡаҙағстан Президентына ҡурай бүләк итеп, ҡурай уйнағанымды Алма-Ата телевидение ы күр әтте. Мәскәү телевидение ы и ә ул тәңгәлен төшөрөп ҡалдырҙы.

Ырымбурға, Каруан арайға килгәс, Ишбулатов, Аҡбулатов, Амангилдиндар ҡаршы алып, оҙатып йөрөнө. Каруан арайҙы ҡайтарып биреүҙәрен орап Рәсәй башлығы Б. Ельцинға хат яҙҙыҡ. Уның төҙөлөүенә 150, башҡорттарҙың француз яуына китеүенә 180 йыл тула тип, байрам үткәреү өсөн план төҙөнөк. Әлеге шул Каруан арайҙы дауайлап, ике тапҡыр Өфөләрҙән барып, митинг ойошторҙоҡ. Педучилищела сығыш я аным. Каруан арайҙың акттар залында 3,5 сәғәтлек лекция-концерт бирҙек. Ике магнитофонға яҙып алдылар.

Ҡәҙим Аралбай, унан уң Раил Байбулатов етәкселегендә Ырымбур өлкә енең башҡорт ауылдарында сығыштар я аныҡ. унарсы ауылына ҡурай уйнарға өйрәтә барып, илай-илай ҡайтып киттем. Аҙаҡ был турала "Башҡортостан" гәзитендә "Оҙаҡ йәшәйем ти әң, балалар уҡыт" тигән мәҡәләм баҫылды.

Мөлҡаманов саҡырыуы буйынса Имәнтамаҡ ауылында булып киттем. Ул тирәләге башҡорттарҙың фажиғәле яҙмышы тура ында яҙ аң, бер китапҡа ыймаясаҡ. Башҡорттан бигерәк ситләшкәндәр. өргөнгә алып китмәй ҡалдырылған сабыйҙы (Артур Туҡтағоловтың ата ын) тәрбиәләп үҫтергән апай бик күп өйләгәйне. "Базиков Ғәйнетдин минең ҡәйнешем. Күр әң, әйт әле, кил ен",— тигәйне. Ә ул, ҡайтып ин әм, өйҙә ултыра. уғыш ветераны, яралы, особый отделда хеҙмәт итеп, полковник дәрәжә енәсә үҫкән. Уҫаллығы арҡа ында дәрәжә ен юғалтҡан. Ҡөрьән уҡый, күп доғалар белә, әр саҡ уҡына.

## ИНТЕЛЛИГЕНЦИЯ ӘМ ИНТЕЛЛИГЕНТЛЫЛЫҠ:

***өйләшеүҙе дауам итәбеҙ***

# ҮГӘЙ ЕТЕЛГӘН ҠАТЛАМ

*“Интеллигентлылыҡ — ул донъяны ҡотҡарырға ынтылыу, хәстәрлекле булыу, ауырлыҡты кисерешә белеү”.*

**Николай БЕРДЯЕВ,**
урыҫ философы.

*Теге йәки был халыҡтың донъя цивилизация ындағы роле тура ында тарих фәнендә лә, нәфис әҙәбиәттә лә мәғлүмәттәр күп. Ләкин күпселек осраҡта уларҙа төп иғтибар тотош халыҡ масса ына түгел, ә уның башында тороусыларға бирелеп, уңғыларының интеллигенция вәкилдәре булыуы билдәле. Тәбиғи, сөнки кешелек цивилизация ы үҫеше — аҡыл үҫеше. Быны инҡар итергә тырышыу — үҙе үк мәғәнә еҙлек. Шуға күрә, минеңсә, интеллигентлылыҡ әм интеллигенция тура ында “Ағиҙел” биттәрендә фекер алышыу бик ваҡытлы, урынлы әм оло ә әмиәткә эйә. Ваҡытлы, сөнки ҡай ы берәүҙәр, интеллигенция, мырҙа-кенәздәр кеүек үк, тарихҡа китте, тигән ығымта я ап ҡуйҙы. Урынлы, сөнки интеллигентлылыҡты кешелек йәмғиәтенән йолҡоп алып ташлап булмай, сөнки үҙ аллы фекер йөрөтөү, шәхескә ихтирам, намыҫ әм выждан, көс ҡулланыуҙы ҡабул итмәү кеүек сифаттар ыҙ бер генә йәмғиәт тә тороҡло, тетрәнмәй йәшәй алмай. Оло ә әмиәткә эйә, сөнки “Ағиҙел” — интеллигенция баҫма ы, был фекер алышыу, ис шик еҙ, уның уҡыусыларына ниндәйҙер кимәлдә рухи байлыҡ өҫтәр.*

Уҡыусыға билдәле ҡай ы бер фекерҙәргә туҡталып китке килә. Профессор В. Сафиндың интеллигенцияны “саф рус күренеше” тип атауына, минеңсә, бер аҙ асыҡлыҡ индереү маҡсатҡа ярашлы. Быуаттар буйы крепостной хоҡуҡ бығауҙарында тотолған урыҫ халҡы ысынлап та шул тиклем миктәгән: үҙенең ара ынан уҡымышлы, алдынғы ҡарашлы кешеләр сығарыу әләтенән дә мәхрүм ителгән. Шуға күрә Ватан йәмғиәтен “цивилләштереү” өсөн батшаларҙың мәҙәниәтте Европанан “ташырға” мәжбүр булғанлығы хәҙер бер кемгә лә сер түгел. Тарихтан мәғлүм, батша үҙ тирә ендә кәңәшсе итеп әр саҡ немец, француз, шотланд .б. халыҡтар вәкилдәрен саҡырыр булған. Ошондай уҡ “варягтар” хәрби берәмектәргә лә етәкселек иткән, ҡалалар ҙа төҙөгән, башҡа яуаплы, европаса белем-әҙерлек талап иткән эштәр атҡарған. Дворяндарҙың үҙ балаларын тәрбиәләү өсөн гувернерҙарҙы Франциянан саҡырыуы ла әле онотолоп бөтмәгән. Рәсәйҙе “европала-

штырыу” сәйәсәтен Петр I и ә асыҡтан-асыҡ, йыш ҡына тиңе булмаған тупаҫлыҡ, ҡан ыҙлыҡ күр әтеп үткәргән. Шул уҡ ваҡытта халыҡ, юғары ҡатлам теле буйынса “чернь” хәлендә ҡала килгән. Заманса ҡарашлы, Рәсәйҙә закон, тәртип хөкөм өр өн өсөн күпте эшләгән Екатерина II лә, крепостной хоҡуҡтың зарарлы, кешене кәм еткән күренеш булыуын белә тороп, уны бөтөрөргә баҙнат итмәгән, ҡурҡҡан.

Үрҙә әйтеп үтелгән ауыр шарттарҙа иҙелгән халыҡтың элементар ғына хоҡуҡтарын таныуҙы талап иткән алдынғы ҡарашлы урыҫ халҡы вәкилдәре интеллигенция исемлеген башлап ебәрә лә инде. Был төшөнсәнең популярлашып китеүе Советтар осорона тура килеп, тап шул ваҡытта интеллигенция айырым ҡатламға индереп йөрөтөлә башлай.

Башҡорт халҡы, урыҫтар кеүек крепостной хоҡуҡ йоғонто онда социаль иҙеү кисермәүгә ҡарамаҫтан, тыуған ерҙәренең сит халыҡтар тарафынан баҫып алыныуына ҡаршы быуаттар буйы көрәшеп, бихисап ҡорбандар биргән. Ул ҡорбандарҙың күбе е ғилемле, Ватанын өйгән алдынғы ҡарашлы кешеләр ара ынан булыуы, моғайын, бәхәс тыуҙырмайҙыр. Тимәк, дүрт быуат ярым ситтәр хакимлығы аҫтында йәшәү башҡорттарҙы ла шундай уҡ яҙмыш-тәҡдиргә дусар иткән. Шуға күрә, әлеге шарттарҙа интеллигенцияны “милли”гә бүлеп ҡарау, минеңсә, ғәҙел булмаҫ. Бөгөн Мәскәү тарафтарында илдәге унитар дәүләт сифаттарын көсәйтеү, нығытыу, урындағы халыҡ мәнфәғәттәрен тамам ҡыҫыу – быларҙың тик бер маҡсат: нисек тә бул а элекке ғәҙәттәрҙе аҡлап ҡалыу теләге менән башҡарылған шарттарҙа – бигерәк тә.

“Бөгөн интеллигенция бармы, әллә юҡмы?” тигән орауға ла яуапты төрлөсә бирергә мөмкин. Бар, сөнки, беренсенән, аҡыл хеҙмәте менән шөғөлләнеүселәр – Совет йылдарында был төшөнсәгә тап ошо мәғәнә күберәк алына ине – кәмемәне; икенсенән, уларҙың хеҙмәте әле лә прогресҡа булышлыҡ итеү юҫығынан тайпылмаған. “Юҡ” тип яуаплаусылар и ә рәсми органдарҙың был ҡатламды башҡаларҙан айырып ҡарамауына, йәмғиәттәге ролен бер төрлө лә ба аламауына ғына түгел, күрмәмешкә алышыуына баҫым я ар. Нисек кенә ғәжәп тойолма ын, беҙҙең йәмғиәттә теге йәки был субъект-сифаттың дәүләт тарафынан танылыуы, ихтирам ителеүе ҡанға тамам еңгән, ул РФ Конституция ында “демократик ил” тип аталған Рәсәйҙә лә дауам итә.

Интеллигенцияға мөнәсәбәт реформалар барышында ысынлап та кире яҡҡа үҙгәрҙе. Минеңсә, быға реформаларҙың әхлаҡи эшмәкәрлек булып та, әхлаҡ ыҙ өҙөмтә биреүе сәбәп булды, сөнки интеллигенция вәкилдәре үҙгәрештәрҙе алҡышлап ҡаршыланы бит. Интеллигенцияны информация саралары йөкмәткеенә ҡарап та ба алайҙар, сөнки унда эшләүселәр тап шул социаль төркөмдө тәшкил итә. Эйе, бөгөн ваҡытлы матбуғаттың абруйы самалы, “ташҡа баҫылған” йәмғиәттә элекке кеүек хәҡиҡәттең үҙе тип ҡабул ителмәй. Кем аҡса ын түләй, шул көй айлай, тигәндәй, информация саралары кем финанслай, шуның үҙен өйләргә мәжбүр, йәки ул билдәләгән сиктәрҙән сыҡмаҫҡа. Шуға күрә геройҙарҙы ла ҡәҙимгесә ваҡыт түгел, ә ошо ваҡытты “ижад итеүселәр” айлай. Бынан ике йыл әүәл генә илдә бар икәнлеген йәмәғәтселек бөтөнләй белмәгән дә кеше бөгөн уға идара итә икән, был тап шул хаҡта өйләй.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, үрҙә әйтелеүенсә, беҙҙә интеллигенцияның иммәтен властҡа кәрәклегенә, уның тарафынан ихтирам ителеүенә ҡарап билдәләү урын алған. Был – хата ҡараш, әм ул КПСС замандарынан килә. Демократик йәмғиәттәрҙә интеллигенция, батша Рәсәйендәге кеүек, ҡатламдарға таянып йәшәй, абруй ҡаҙана, тап шул шарттар уны властарҙан азат, бойондороҡ оҙ итеп тойорға мөмкинлек бирә. Бөгөн илебеҙҙә ундай шарттар юҡ, шуға күрә интеллигенция йәмғиәткә

таяна алмай. Тимәк, ул властарға ғына күҙ терәй ала. Беҙҙең башҡортто сит илдәрҙә бер кем дә ҡолас йәйеп көтөп тормай.

Реформалар күп нәмәләрҙеңimmәтен төшөрҙө. Иң элек енәйәтселек юл ярҙы, Рәсәй Ер шарында иң криминаль дәүләттәрҙең бере енә әүерелеп китте. Беҙҙәге хоҡуҡ аҡлау органдарында, судтарҙа эшләүселәр уңғы 10–15 йылда бер нисә (аныҡ мәғлүмәт юҡ – **М.Х.**) тапҡырға артты. Коррупция күрелмәгән бейеклектәргә күтәрелеп, тормоштоң барлыҡ өлкәләрен солғап алды, ил организмында ул зарарламаған бер генә күҙәнәк тә ҡалманы. Былар бөтә е лә – кире миҫалдар. Нисек кенә ғәжәп яңғырама ын, бөгөн, социологтар фекеренсә, реформаторҙарҙың социаль терәге юҡ. Стратегия ыҙ башланған үҙгәрештәрҙе интеллигенция ҡабул итмәне генә түгел, ә йәйы сыҡҡан айын тәнҡитләй килде. Уларҙы ауыҙын ябырға бөгөн бер нәмә генә мәжбүр итә – ирек сик еҙ: ни теләй ең – шуны атып ал, ҡайҙа теләй ең – шунда кит.

Бөгөн милләттең намыҫы булырҙай ҡатламға ҡараған кешеләрҙе атауы ҡыйын, ти Вадим Фәтхиевич. Сәбәп шунда: интеллигенцияның бер өлөшө буржуйға әйләнде, икенсе е власть көйөнә бейей, өсөнсө ө бизнесҡа китте, дүртенсе е, эскелеккә абышып, асарбаҡтар сафын тулыландырҙы. Минеңсә, был осраҡта "сәбәп" түгел, ә "эҙемтә" тура ында өйләргә кәрәк, сөнки совет интеллигенция - ының ошолай кәм етелеүенең сәбәптәре бар, әм күптән билдәле. Үрҙә телгә алыныуынса, 1985 йылда "үҙгәртеп ҡороу", 1991-ҙә "баҙар иҡтисады" идеяларын интеллигенция күтәреп алды – рәсми даирәләрҙә хөкөм өргән иммәттәр уңғы сиккә етеп иҫкергәйне әм бер кемде лә ылыҡтырмай ҙа, ышандырмай ҙа ине.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, илдәге хәл иткес ваҡиғаларҙа ҙур роль уйнаған интеллигенцияның күпселек өлөшө яңы тыуған, тыуҙырыуҙа үҙе ҡатнашҡан баҙар иҡтисады өсөн артыҡ булып сыҡты. Ни өсөн? Был орауға Интернеттан алынған түбәндәге яуаптан да тапҡырырағын мин таба алманым.

> *"Йәмғиәтебеҙҙә әхлаҡлыҡҡа мода урынлаштырылмаған әле,* – ти үҙен Елена Михайловна тип таныштырған ханым. – *Шуға күрә әхлаҡи продуктҡа ихтыяж юҡ. Милли ҡаҙаныштың был төрө ябай әм тиҙ байығыу ыҙма ына тап килмәй. Хатта интеллект кеүек яңы ғилем бирергә әләтле сифат та эшкинмәгән иҡтисадыбыҙҙа ихтыяж тапмай, сөнки яңы белем – сифат яғынан өр-яңы киләсәк. Беҙҙең яңы иҡтисади элита структура ы шуны ҡабул итмәй ҙә инде. Шуға күрә интеллигенцияның "мифлығы" тура ындағы фекерҙәр йәмғиәтте тормоштоң башҡаса булмауына ышандырыу өсөн кәрәк".*

Миңә бынан биш-алты йыл элек интеллигенция мәсьәләләре буйынса күп кенә махсус әҙәбиәт уҡырға, байтаҡ мәғлүмәт тупларға тура килгәйне. Уларҙы ентекләп анализлағандан уң мин түбәндәге ығымтаға килдем: "интеллигенция" тигәндә беҙ башлыса Советтар осоронан ҡалған төшөнсә менән эш итәбеҙ. Ә хәҙерге осор, баҙар иҡтисады өсөн интеллигенция хас түгел, сөнки баҙарҙа ихтыяж менән файҙаланған тауарҙар ғына үтә бит. Ә бөгөн бөтә алдынғы технологиялар сит илдәрҙә ижад ителеп, атып алыу өсөн аҡса, йәғни нефть-газ атыуҙан килгән долларҙар ғына кәрәк мәлдә, властар интеллигенцияға мохтажлыҡ кисермәй.

Профессор Сафиндың, интеллигенция ҡай ы саҡта үҫеп сыға, синыф йәки ҡатлам булараҡ формалаша, тигән орауға яуабы, минеңсә, айырыуса иғтибарға лайыҡ. Бының өсөн, ти Вадим Фәтхиевич, өс шарт: граждандлыҡ йәмғиәте, "урта ҡатлам" формалашыу әм тоталитаризм, милитаризм, унитаризм, монархизм кеүек ынтылышы булмаған демократик дәүләт барлыҡҡа килеү мө им. Был тәрән

фекерҙәр йәшеренгән аҡыллы тезис та, минеңсә, аңлатмаға мохтаж. Тик уны башынан түгел, ә аҙағынан башларға кәрәк. Билдәле булыуынса, тиҫтәләрсә миллион кешене яҡты донъянан өргән Икенсе донъя уғышын тоҡандырыуҙа ғәйепле Германия әм Япония Ҡушма Штаттар баҫымы аҫтында тәүге е “денацификация”, икенсе е “демилитаризация” тигән таҙартыуҙарға дусар ителде. Шуның эҙемтә е булараҡ, Германияла нацизмға ҡаршы кәйефтәр әле лә аҡлана, дөрөҫөрәге, уларҙы закон аҡлай. Японияның хәрби көстәре әле лә юҡ, әм оборона сығымдарынан азат япон халҡы технологиялар, техника ижад итеү буйынса донъяла беренсе урынға сыҡты. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, КПСС етәкселеге ул осорҙа ҡыйралып ятҡан, үҙе үҫтереп тә, икмәккә лә туймаған, юл ыҙ ауылдары була тороп, Йы анға кеше осорҙо, совет халҡы тапҡан-таянғанды сит илдәрҙәге “туғандаш” режимдар менән бүлеште. Коммунизм идеяларынан баш тартып, Романовтар Рәсәйен тергеҙергә аҙаплана башлағас та Рәсәйҙә “декоммунизация”, йәғни КПСС хакимлығы осоронда тупланған ялған иммәттәрҙән баш тартырға баҙнат итмәнеләр. Әллә баш етмәнеме? Ә бит философия фәнен аҙ-маҙ ғына бул а ла белгән кешеләргә шул мәғлүм булырға тейеш: “форма” әм “йөкмәтке” тигән төшөнсәләр бар, әм уларҙың бер-бере енә тап килеүе мотлаҡ. КПСС хакимлыҡ иткән йылдарҙа ижад ителгән алым-ысулдар, шулар йоғонто онда тәрбиәләнгән кадрҙар бөтөнләй ят тәбиғәтле баҙар иҡтисады өсөн яраҡлы түгел. Баҙарҙың үҙ алымдары бар, әм уларҙы инҡар итеү отолоуға ғына килтерә. Үкенескә ҡаршы, беҙ был яңы ҡоролошҡа иҫке кәйефтәр менән килеп индек әм әле лә шуның йоғонто он кисерәбеҙ. Белгестәр бөгөн илебеҙҙең идара итеү өлкә ендә эшләгән кадрҙарҙы ике төргә бүлеп ҡарай. Беренсе е – власҡа КПСС осоронда үрләгәндәр, икенсе е –реформа йылдарында. Йәмғиәт өсөн уларҙың ике енән дә файҙа аҙ, сөнки тәүгеләре күр әтмә генә үтәргә әләтле булып, үҙаллы эшләргә әләт еҙ, икенселәре и ә тиҙерәк байлыҡ туплау хәстәре менән мәшғүл.

Профессор хаҡлы, әм уға академик Ғ. Хөсәйенов та ҡушыла: тоталитаризм, милитаризм, унитаризм, монархизм идеялары менән мауығыусылар власть даирәләре өсөн дә ят күренеш түгел. Был йә әттән бөгөнгө Рәсәй хатта 90-сы йылдарҙағы ынан айырыла, сөнки яңы ында тоталитаризм күренештәре нығыраҡ төҫмөрләнә. Айырыуса Үҙәк әм төбәктәр ара ындағы хоҡуҡтарҙа тигеҙлектең булмауы закондар ижад итеүҙә, власть вертикалендә, информация сараларында . б. өлкәләрҙә сағылыш таба. Мәскәүҙең был йә әттән бер яҡлы өҫтөнлөк алыуын наҙан кеше генә күҙенә элмәҫ. Күп милләтле Рәсәйҙә милли республикаларҙы бөтөрөп, “губерналаштырыу” идея ы менән аташҡан кешеләр тап Дәүләт дума ы коридорҙарында әленән-әле тауыш биреп ҡуя. Йәнә е, был сепаратистик кәйефтәрҙе бөтөрөү, империяны аҡлап ҡалыу өсөн кәрәк. Нисек кенә ғәжәп тойолма ын, ил Конституция ына ҡаршы килгән, уны тупаҫ боҙоу булып күренгән ошо ҡылыҡтары өсөн бер кем дә административ, хатта енәйәт яуаплылығына тарттырылмай. Тимәк, “юғары”раҡта ла был фекер яҡлылар юҡ түгел.

Тағы ла бер дәлил. 2006 йылға дәүләт ҡаҙна ын ҡабул иткәндә Дәүләт дума ы депутаттары ара ынан бер нисә кеше “көс” ведомстволарына, шул иҫәптән оборонаға сығымдарҙың ҡаҙнаның биштән бер өлөшөн биләүен күреп әм ҡаҙнаны “милитаристик” тип атап, был статьяны ҡайтанан ҡарауҙы тәҡдим иткәйне. Ысынлап та, ни хаҡына ине был сығымдар: ил уғышҡа әҙерләнәме, әллә өжүм ҡайтарырғамы? Яуап булманы, ә бына уңғы айлауҙарҙа теге “тауыш күтәргән депутаттар Думаға үтмәне лә ҡуйҙы. Ә ил ҡаҙна ының иң тос өлөшө әле лә шул статьяларҙа...

Йәмғиәттә урта ҡатламдың формалашыуы – икенсе шарт, сөнки теге йәки был дәүләттең тотороҡлолоғон, именлеген ошо ҡатлам тәьмин итә. Көнбайыш Европа,

Ҡушма Штаттар тәжрибәһе быға икеләнергә урын ҡалдырмай. Әммә бөгөн илдә урта ҡатламдың булыу-булмауы, күпме процент тәшкил итеүе һәм уға кемдәрҙең ҡарауы ғына түгел, ғөмүмән, нимә ул “урта ҡатлам”, тигән һорауға нигеҙле яуап та юҡ. Тәжрибәле социолог Р. Насибуллиндың мәғлүмәттәре буйынса, бөгөн рәсәйҙәрҙең 70 проценты сама һы үҙен урта ҡатламға инәм, тип иҫәпләй икән. Сөнки, уларса, өҫтәлдә ашап-эсер ризыҡ, өҫтә бер ҡат кейем, йәшәр урын бул а, кеше урта ҡатлам була, имеш. Нисек ябай! Был, әлбиттә, хәҡиҡәткә тап килмәй. Тартып- уҙғанда ла илебеҙҙә был төркөмгә ҡараусылар 10-15 проценттан артмай. Ә бына урта ҡатлам ишәй ен өсөн, белгестәр фекеренсә, илдә прогрессив алым система ы индереү, хеҙмәткә түләүҙә реформа үткәреү кеүек мө им сараларҙың ғәмәлгә ашырылыуы мотлаҡ. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, нефть долларҙарының мул ямғырына башы әйләнгән федераль хөкүмәт был мәсьәләләргә иғтибар итергә йыйынмай кеүек.

Граждандыҡ йәмғиәте формалашыу өсөн нигеҙ үрҙә атап үтелгән ике шарттан уң ғына алына. Уны указ буйынса ғәмәлгә ашырып булмай. Бындай йәмғиәт барлыҡҡа кил ен өсөн Бөйөк Британияға бер нисә быуат, АҠШ-ҡа бер нисә тиҫтә йыл кәрәк булған. Ә беҙҙең бындай дәрәжәгә ҡасан етәсәгебеҙҙе самалап та әйтеп булмай. Уға ҡамасаулыҡ итеүсе төп фактор, ис шик еҙ, илдә империяса фекер йөрөтөүҙең аҡланыуы, шул дәүерҙә урынлашҡан ғөрөф-ғәҙәт, фекерләү мода ы шәхестәргә эсендәген асыҡтан-асыҡ әйтергә ирек бирмәй. Граждандыҡ йәмғиәте – беҙҙең өсөн йыраҡ хыял, сөнки беҙ үҙебеҙҙе граждандар итеп тоймайбыҙ. Кем ул гражданин? Ул – милеккә хужа, үҙ тәртибе өсөн яуап бирә, властарҙан азат, ирекле фекер йөрөтә, властарҙы айлап, йәмғиәткә хеҙмәт иттерергә өлгөрөп еткән шәхес. Беҙҙә властан ек енәләр, әммә етәксе вазифа ы тәҡдим ит әләр, ҙур ризалыҡ менән менеп ултыралар ҙа шул уҡ “традициялар”ҙы дауам итәләр...

Ил башлығы сағында В. Путин граждандыҡ йәмғиәтенең нигеҙҙәрен алыу өсөн ике аҙым я ап ҡараны: тәүге е – Граждандар форумы үткәреү, икенсе е – Йәмәғәт палата ы ойоштороу. Элекке дәүләт башлығының был тәртибе хуплауға лайыҡ, сөнки маҡсаты изге ине. Әммә күҙгә бәрелеп торған етеш еҙлектәренә күҙ йомоу ҙа ярамайҙыр. Бере ен генә атап үтәйек: Йәмәғәт палата ына ағзаларҙы Путин үҙе билдәләне, артабан ошо тәғәйенләнгән кешеләр үҙҙәре башҡаларҙы тәҡдим итеп Палатаны тулыландырырҙы. Был өр-яңы башланғыс, әлбиттә, йәмғиәткә файҙа килтермәне, сөнки йәмәғәтселек ҡатнашлығынан тыш башланған эштең шундай эҙемтә менән бөтәсәге көн кеүек асыҡ ине. Йәмәғәт палата ы ағзаларын йәмәғәтселек үҙе билдәлә ә, әйтәйек, ваҡытлы матбуғатта фекер алышыу тәртибендә, отошлораҡ булмаҫ инеме ни? Ә былай Палатаға шоу-бизнес вәкилдәре үтте лә китте... Бөгөн уларҙың эшмәкәрлеге тура ында кем белә, әм Палатаның йәмғиәткә ниндәй файҙа ы тейҙе? Ғөмүмән, ни ҡырҙы ул уҙған осорҙа– беҙгә бер ни ҙә билдәле түгел. Ике палаталы парламент – Федераль йыйылыш була тороп, тағы бер палата ойоштороу мохтажлығы бар инеме уң? Әллә Рәсәйҙең ул саҡтағы президенты уларға шикләнеп ҡаранымы, әллә депутаттарҙың халыҡ мәнфәғәтен сағылдырмағанын беләме?

Шул уҡ ваҡытта йәмғиәттә азат фекер өсөн мөхиттең тарая барыуын уҡыр ҙа ишетә-күрә бит. 2000-се йылдар баштарында бер-бере енән ныҡлы айырылған телеканалдар, башҡа информация саралары хәҙер бер-бере ен ҡабатлай: бер үк кешеләр, бер үк хәбәрҙәр. Бәхәс тыуҙырырҙай тапшырыуҙар онотолдо, популяр журналистарҙы державасы шовинистик рухлылары алмаштырҙы. Бынан бер нисә ай элек Рәсәй телеканалында журналистика өлкә ендә бөтөнләй билдә еҙ, руханиҙар ҡатламына ҡараған берәүҙең Византия империя ының тарҡалыу сәбәптәрен бәйән иткән тапшырыуы үтте. Уны күр әтеүҙең, сәбәбе минеңсә, шунда: ошондай

уҡ күренештәр әлеге Рәсәй миҫалында ла асыҡ сағыла. Тимәк...

Фекерҙе, әйҙә, уҡыусы үҙе дауам ит ен.

Әлбиттә, хәҙерге Рәсәйҙе хан заманындағы Византия менән сағыштырыу килешеп бөтмәй. Бөгөнгө Рәсәй заман ҡалыптарына, халыҡ-ара хоҡуҡ система ына яраҡлашып килә. Әммә уның йөкмәтке е барыбер тәүҙә батшалар, артабан КПСС кейҙергән форманан арына алмай. Көньяҡ Осетияла булып үткән август ваҡиғаларында, сит ил информация саралары хәбәр итеүенсә, Рәсәй хәрбиҙәре үҙен тейешле юғарылыҡта күр әтә алманы, илдең тышҡы сәйәсәте насар дан яуланы. Эйе, беҙҙең иҫке, ҡартайған система әр саҡ ауыр ҡуҙғала, әм ул хәрәкәткә кил ен өсөн нимәнеңдер ныҡ итеп төртөп ебәреүе мотлаҡ.

Рәсәй уҡыусылары өсөн бик популяр булған “Комсомольская правда” гәзите А. Солженицындың үлеменә бәйле “Умер пророк в своем Отечестве” тигән ҙур мәҡәлә ен беренсе биттән ат башындай хәрефтәр менән башлап ебәрҙе. Илдә киң билдәле шәхес, Нобель премия ы лауреатын уңғы юлға оҙатҡанда ил башлығы В. Медведев менән хөкүмәт рәйесе В. Путин да телевидение камера ы алдында сығыш я аны. Бер үҙ менән әйткәндә, хөрмәт баштан ашҡайны. Әммә ошо айҡанлы тел осон ҡысытып торған бер фекерҙе лә әйтмәү мөмкин түгел.

Солженицындың ике: земстволар, йәғни урындағы үҙидараны тергеҙеү әм халыҡты аҡлау, үҙенсә әйт әк, сбережение народа – идеяларын тормошҡа ашырыу өсөн шәхесе алдында баш эйгән ил башлыҡтары нимә ҡыра алды уң? Рәсәйҙә земстволар бармы, халыҡ ихтыяждарын улар нисек ҡәнәғәтләндерә? Ә бит халыҡ аман да эскелек, енәйәт тупрағында меңәрләп әләк була, әм быға тиңе булмаған “автомобилләштереү марафоны” ла ҡушылып, үлеүселәр нисбәте яу яланынан алынған мәғлүмәттәрҙе хәтерләтә. Шул уҡ ваҡытта Кремль нисә ай инде әсәлек капиталы, йәғни аҡса менән ҡыҙыҡ ындырып (бындай хәл донъяла тәү тапҡыр күҙәтеләләр, моғайын) балалар табыуҙы арттырырға тырыша. Был ис тә аҡылға ыймай: кеше баланы үҙе өсөн таба бит, ә хөкүмәт заказы буйынса түгел. Хатта аҡсаға бул а ла. Беҙ беләбеҙ: бала Алла ы Тәғәлә ҡушыуы буйынса үҙ ризығы менән тыуып, нисек кенә ғазап сикмә ен, ғүмере бөтмәй тороп, яҡты донъянан китмәй.

Тик беҙҙең берҙе өйләп, икенсене уйлап, өсөнсөнө эшләп үҫкән быуын бындай хәлдәргә вайым ыҙ. Ошо күҙлектән ҡарағанда, Медведев менән Путиндың да, Солженицындың идеялары бик күркәм, халыҡсан, әммә уларҙы ғәмәлләштереү – икенсе эш, тип фекер йөрөтөүе ихтимал түгелме ни? Ихтимал, сөнки билдәле инглиз философы А. Тойнбиҙың, беҙҙе элекке ғәҙәттәр әр саҡ арттан эйәреп, эҙәрлекләп килә, тигән фекерен был тағы бер тапҡыр раҫлай. үҙгә ҡеүәт итеп, Ә. Үтәбайҙың “Бел әң ине, көтөү боролғанда алға сыға малдың аҡ ағы” мәҡәлә ендәге “беҙ үҙебеҙгә ҡаршы өндәшеүсене, беҙҙең фекер менән риза булмаусыны шундуҡ юҡ итергә тырышабыҙ, ишектәрҙе ундайҙар өсөн шарт ябабыҙ”, тигән юлдарын килтереү урынлы. Был йәм еҙ күренеш тамырҙары борондан килеп, инкивизицияның заманса сағылышы булып тора. Тик интеллигентлылыҡ менән уның бер генә уртаҡлығы ла юҡ, хатта ул интеллектлы кеше өсөн ят сифат.

Шулайын шулай ҙа, әммә кадрҙар сәйәсәтендә “лайыҡлы”ларҙы айлап алыу тап ошо принцип нигеҙендә алып барылмаймы икән. Уның иң сағыу күренешен Кремль башлығы булып алғас В. Путин күр әтте: бөтә кадрҙарҙы ла Санкт-Петербургтан килтерҙе. Кем хәтерләй: был варягтар ара ында аҡылы менән ҡояшты ҡапларҙай, йәғни, башҡортса әйт әк, ауыҙы менән ҡош тоторҙайҙары бар инеме? Әлбиттә, Путин үҙе белгән кешеләргә нығыраҡ ышанғандыр, әммә шуның менән ул үҙе белмәгән кешеләргә ышанмауын да күр әтеп, (был етәксе өсөн бик насар сифат) үҙенең ба а ын төшөрөп ташланы.

Шул уҡ ваҡытта Әхмәрҙең интеллигенция тура ында үҙ барғанда, дини аспект хаҡында уйланырға кәрәк, интеллигенция вәкиле дин еҙ була алмай, тигәнерәк фекерендә әм унан алдағы “барына ла риза булып, шөкөр итеп йәшәү хәҙерге башҡорт милли интеллигенция ы вәкилдәренә төҫ булырға тейеш түгел” тигәне менән ҡаршылыҡҡа килмәйме икән? Мосолман, башҡортса “күндәм” мәғәнә ен бирә. Тағы ла асыҡлабыраҡ әйткәндә, күндәмлек, тимәк, шөкөр итеп йәшәү – мосолман өсөн закон. Әйткәндәй, был йә әттән ислам православиенан бик аҙ айырыла.

Көфөрөрәк яңғыра а ла, шуны әйтмәй булмай: бөгөнгө цивилизацияның этәргес көсө булып 50 – 60-сы йылдарҙа Көнбайыш Европала яралған ҡулланыу йәмғиәте (общество потребления) төҙөү идея ы авторҙары мосолман да, православный ҙа булмаған бит. Ә протестанттар (инглиз) әм католиктар (француз). Әгәр ҙә инглиздәр нефть табырға өйрәтмә ә, бөгөнгө Сөғүт Ғәрәбстандында аман да дөйә менеп йөрөмәҫтәр инеме ни? Тимәк, әр нәмәне уйлап өйләү хәйерле.

Рәсәйҙең әлеге сәйәси-психологик ҡоролошо граждандар өҫтөндә ауыр йөк булып ята, сөнки ул иң элек граждандар мәнфәғәтен түгел, ә дәүләттекен хәстәрләй. Тәү ҡарашҡа бында бер ниндәй ҙә хилафлыҡ юҡ кеүек. Эш шунда: шәхестәр үҫтермәгән дәүләт үҙе лә үҫешә алмай. Бердяевтың Вадим Фәтхиевич килтергән тезисына шуға күрә мин бер ҙә ғәжәпләнмәйем. Эйе, әлеге ҡоролош күптәргә оҡшамай. Уны урамда ла, транспортта ла, кухняларҙа ла үгәләр. “Пар” шуның менән сығып бөтә әм айлауға барып, граждандлыҡ бурысын намыҫ ҡушҡанса үтәргә етмәй. Кешеләр демократик дәүләтте, азатлыҡты президент әм хөкүмәт төҙөп-килтереп бирер, тигән кеүегерәк кәйеф менән көн үткәрә бирә. Татлы алданыу, тик уны ҡыҙыл ҡар яуғансы көтөргә тура килмәҫме икән? Власть коридорҙарында ултырғандар и ә был фекерҙе уртаҡлашмай, улар бөтөнләй икенсе юҫыҡтараҡ фекер йөрөтә.

Беҙ Көнбайыш цивилизация ына эйәреп, уны ҡабатларға тырышып йәшәгәндә бер фекергә, минеңсә, иғтибар итеү артыҡ булмаҫ. Ҡай ы берәүҙәрҙә, демократия яғынан үҫешкән дәүләттәрҙә интеллигенция юҡ, уның кәрәге лә юҡ, тигәнерәк ҡараш йәшәп килә. Шул уҡ Интернетта сит илдә ун йылдан ашыу йәшәгән бер ханымдың түбәндәге хәбәре был ҡарашты кире ҡаға: был элеккесә, СССР-ҙа секс юҡ, тигән кеүегерәк яңғырай, – ти ул. Европала социаль-демократик иммәттәрҙең юғарылығы интеллигенцияға етеш йәшәү өсөн шарттар тыуҙыра. Үҙен интеллигент анаған кеше социал-демократтар өсөн тауыш бирә әм бер ҡайғы ыҙ ижад итә.

үҙҙе йомғаҡлап шуны әйтке килә: беҙ интеллигенцияға күберәк өмөттәр бағлап, уға хас булмаған сифат биреп, бурыстар ҡуйып интекмәйек. Интеллигенцияның тәрбиәүи функция ы ла парткомдар менән бергә тарихҡа китте. Әлбиттә, интеллигенция, ыңғай атмосфера булғанда, күпте әйтә алыр ине. Быны ын йәмәғәтселек унан көтөргә хаҡлы. Цивилизация моронлаған дәүерҙәрҙә үк аҡыллы эшкәңәштәре менән ватандаштарына юл күр әткән, насар юлдан ҡурсалаған граждандар кеүек. Бының өсөн, моғайын, телеканалдарҙың, ваҡытлы матбуғаттың саҡырыуын да көтөргә кәрәкмәйҙер.

**Мәхмүт ХУЖИН.**

# БАЛА ТАПТЫРЫРҒАМЫ, ӘЛЛӘ БАЙЛЫҠ АРТТЫРЫРҒАМЫ?

уңғы йылдарҙа матбуғатта “демографик хәл”, “демографик сәйәсәт”, “депопуляция” кеүек үҙҙәр бик йыш ҡулланыла. Рәсәй халҡының бик тиҙ кәмей барыуының йәмәғәтселекте лә, ил етәкселеген дә ҙур хафаға алыуы тура ында өйләй был. Әлбиттә, борсоулы хәл бер бөгөн килеп тыуманы, социологтар фекеренсә, уның объектив әм субъектив сәбәптәре байтаҡ. Шуға ҡарамаҫтан, илебеҙҙә ғаилә институты буйынса ныҡлы ғилми тикшеренеүҙәр әле бул а күренмәй, ғаилә үҫеше динамика ын төрлө яҡлап өйрәнеү өсөн ышаныслы статистик мәғлүмәттәр ҙә етерлек түгел. Тәбиғи, бындай хәл-ваҡиғаның сәбәптәрен аңларға әм аңлатырға тырышыуҙар ҙа фараз-күҙаллауҙар кимәлендә генә. Тимәк, көрсөктән сығыу өсөн теге йәки был даирәләр тарафынан тәкдим ителгән сиселештәр ҙә буталсыҡ әм бәхәсле.

Төп дәлилдәрҙең бере е—илебеҙҙә ғаиләнең аҡсалата килеме башҡа алдынғы илдәр менән сағыштырғанда күпкә түбән әм баланы ашатып-кейендереп, белем бирерлек итеп үҫтереү-тәрбиәләү өсөн шарттар тыуҙыра алмай. Ләкин был дәлилгә күптәрҙең шунда уҡ ҡаршы төшөүе ихтимал: йәшәү сифаты юғары булған Германия, Нидерланды, Франция кеүек илдәрҙә лә халыҡ иҫәбенең тәбиғи артыуы түбәнәйә, был дәүләттәрҙә лә халыҡ йыл айын кәмей бара бит. Күрә ең, Көнбайыш илдәре өлгө өндә йәшәргә ынтылған йәмғиәттә ир менән ҡатындың әр бере енең иҡтисади үҙаллылыҡҡа ирешә барыуы ғаилә мәнфәғәттәренә тап килеп бөтмәй. Был осраҡта бала табыу өсөн отпускыға сыҡҡан ҡатын-ҡыҙ иҡтисади яҡтан отола: ул оҙайлы ваҡыт эш хаҡы алыуҙан мәхрүм ителә әм, иң мө име, профессиональ кимәле буйынса ла үҙенең хеҙмәттәштәренән артта ҡала, тимәк, карьера үҫеше тотҡарлана. Етмә ә, уға ирен ғаиләне ашатып-кейендереүсе сифатында танырға тура киләсәк, ә “көнбайышса” йәшәү рәүеше быныңменән ис кенә лә килешә алмай.

Халыҡ анының кәмей барыуы Рәсәй йәмғиәте әм етәкселеге эшмәкәрлегенең иң алғы планына күсте. Был аңлашыла, сөнки халыҡ юҡҡа сығыу алдында тора икән, бүтән проблемаларҙы хәл итергә тырышыуҙан ни мәғәнә? Статистика аяу ыҙ: уңғы ун биш йылда рәсәйҙәр 7 миллиондан ашыуға кәмегән, ә сит илдәрҙән күсеп килеүселәр булмаған хәлдә был күр әткес 11 миллионға уҡ барып етер ине. Шуға күрә лә “Рәсәй Федерация ының 2025 йылға тиклемге демографик сәйәсәт концепция ы” алдына үтә ҙур маҡсат ҡуйыла: 2015 йылға тиклем халыҡ иҫәбен 142-143 миллион кимәлендә тотороҡландырып, 2025 йылдан халыҡтың арта барыуына өлгәшергә…

Башҡортостандағы демографик хәл Рәсәйҙең уртаса кимәле менән сағыштырғанда яҡшыраҡ, ләкин был тынысланырға ис мөмкинлек бирмәй, сөнки халыҡтың тәбиғи кәмеүе беҙҙең республикала ла дауам итә. Тыуымды арттырыу, йәшләй ауырып әм имгәнеп үлеүҙе кәметеү, йәшәү сифатын яҡшыртыу юлы менән халыҡты арттырыуға өлгәшеү юлдары, тормоштоң үҙе кеүек үк, күп төрлө. Ошо маҡсатта эш итеүҙең хоҡуҡи нигеҙен булдырыу — шулар иҫәбендә.

Башҡортостан Республика ының Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтайы ҡабул иткән закондар ошо нигеҙҙе алды, тип ышаныслы әйтергә мөмкин. Фекерҙе дәлилләү өсөн, уларҙың уңғы осорҙа ғына ҡабул ителгәндәрен анап китәйек:

— *"Башҡортостан Республика ында бала хоҡуҡтарының төп гарантиялары тура ында";*

— *"Башҡортостан Республика ында балаға айлыҡ пособие тура ында";*

— *"Башҡортостан Республика ында ғаиләне, әсәлекте, аталыҡты әм балалыҡты аҡлау тура ында";*

— *"Башҡортостан Республика ында күп балалы ғаиләләргә дәүләт яҡлауы тура ында";*

— *"Башҡортостан Республика ында йәш ғаиләләргә дәүләт яҡлауы тура ында";*

— *"Етем әм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙы социаль яҡлау буйынса өҫтәмә гарантиялар тура ында".*

Исемдәренән үк күренеүенсә, был закондар ғаиләне яҡлауҙың нигеҙҙә матди яғын күҙ уңында тота. Дәүләттең ғаиләгә ярҙамы 90 процент самаына аҡсалата сығымдарға, шул иҫәптән әр төрлө пособиелар тәғәйенләү әм уларҙы арттырыуға ҡайтып ҡала. Юғарыла анап үтелгән закондар пособие күләмен, уны кемдәр алырға хоҡуҡлы булыуын әм ҡай ы осор эсендә алырға мөмкин икәнлеген билдәләй. Бынан тыш, етем балаларға белем алыу, медицина хеҙмәтләндереүе, аулыҡты нығытыу, мөлкәт әм торлаҡҡа хоҡуҡ буйынса өҫтәмә гарантиялар, күп балалы ғаиләләргә микроавтобустар биреү тәртибе .б. билдәләнгән.

Беҙҙең илдә тиҫтәләрсә йылдар буйы "беренсе планда — дәүләт, ижтимағи мәнфәғәттәр, ә ғаилә проблемалары — уңынан" тигән фекерҙе аңға еңдереп килделәр. Ни айәт, урау-урау юлдар менән бул а ла, "беренсе урында — ғаилә" тигән ябай хәҡиҡәткә төшөнөргә насип булды. Тимәк, был хәҡиҡәт буйынса эш иткәндә, дәүләт, матди ярҙам күр әтеүҙән тыш, ғаиләләге тәрбиә мәсьәләләренә лә ҡыҫылырға бурыслы. Ә ғаиләләге тәрбиә йыш ҡына тейешле кимәлдән түбән. Күп етем балалар — эскесе ата-әсәләрҙең балалары айырыуса — кәрәкле тәрбиәүи-матди шарттарҙың нимә икәнен дә белмәй үҫә, балалыҡ шатлығынан мәхрүм. Был кескәй граждандарҙың аңында ғаиләнең абруйы ла бик түбән булыуы ихтимал. Ә был и ә, үҙ сиратында, демографик хәлде ҡатмарлаштыра ғына. Шуға күрә патронат тәрбиә булдырыу ҙа илебеҙҙә үҙенән-үҙе тигәндәй көнүҙәк мәсьәләләрҙең бере енә әүерелде. Бындай тәрбиәне кем нисек теләй, шулай итерлек үҙағышына ҡуйырға ярамай, уның хоҡуҡи нигеҙҙәре булыуы мотлаҡ.

Республикабыҙ парламенты бынан ике йыл элек "Башҡортостан Республика ында патронат тәрбиә тура ында" закон ҡабул иткәйне. Уның

төп идеяһы шул: баланың ғаиләлә йәки ғаиләгә яҡын шарттарҙа тәрбиәләнеүе маҡсатҡа ярашлы. Патронат (латин телендә “ҡурсалаусы” мәғәнәһендә) тәрбиәнең баланы ғәҙәттә уллыҡҡа (ҡыҙлыҡҡа) алыуҙан айырмаһы шунда: тәүге осраҡта урындағы опека һәм попечителлек органдары хоҡуҡтар менән бурыстар тураһында патронат ғаилә менән килешеү төҙөй. Патронат тәрбиәселәр эш хаҡы ала, ләкин был баланың ата-әсәһе булып иҫәпләнмәй, хатта законлы вәкиле лә була алмай. Ике йыл өҙөмтәләре күрһәтеүенсә, балалар йортона ҡарағанда ғаилә шарттарында йәшәүҙе өҫтөн күргән етемдәр бик күп, һәм патронат ғаиләләр һаны арттандан-арта бара.

Бер үк ваҡытта Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай опека һәм попечителлек органдары тураһындағы законды ла камиллаштыра барып, уңғы йылдарҙа уға өс тапҡыр үҙгәрештәр индерҙе. Башҡортостанда әүҙем тормошҡа ашырылған иҡтисади һәм социаль сәйәсәт демографик хәлдең ҡырҡыулашыуын тотҡарланы. Һөҙөмтәлә тыуым арта, үлем кәмей. 2001 йылда, мәҫәлән, республикала 21,8 мең бала тыуһа, 2006 йылда 45 мең, ә былтыр хатта 51 мең бала тыуҙы. Ләкин тыуым үлемде уҙып китә алмай әле. 2007 йылда, мәҫәлән, Башҡортостанда 55 мең кеше вафат булды.

Халыҡтың тәбиғи кәмеүен туҡтатыу, Ер йөҙөнән тамам юғалмау өсөн ниндәй саралар күрелеүе мотлаҡ?

Был һорауға яуап биреүе еңелдән түгел. Быйыл 17 июлдә Башҡортостан Республикаһы Президенты М. Ғ. Рәхимов Башҡортостан Республикаһының 2025 йылға тиклемге демографик сәйәсәт концепцияһын раҫлаған Указға ҡул ҡуйҙы. Концепция үҙ эсенә алған йүнәлештәрҙе һанап сығыу ғына ла бурыстың ни тиклем ҡатмарлы булыуына ишаралай: халыҡтың репродуктив һаулығын нығытыу, социаль әһәмиәтле ауырыуҙарҙы кәметеү, эскелеккә һәм наркоманияға ҡаршы көрәш, ғаиләнең рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрен тергеҙеү, дәүләттең балалар күберәк тыуыуҙы дәртләндереүе, мәктәпкәсә йәштәге балалар учреждениелары селтәрен киңәйтеү, торлаҡҡа хаҡтың әлегеләй тиҙ артыуына юл ҡуймау, хеҙмәт баҙарын урындағы мәнфәғәттәргә яраҡлаштырыу, ситтән күсеп килеүселәргә ярҙам, спортты үҫтереү һ.б.

Шуныһы бәхәсһеҙ: ошо күрһәтелгән, күҙ уңында тотолған һәм, ихтимал, киләсәктә барлыҡҡа киләсәк йүнәлештәр буйынса эшләүҙең ыңғай һөҙөмтәләренә тиҙ арала ғына ирешерлек түгел. Совет власы бөтә йәмғиәттең барлыҡ күҙәнәктәрен күҙәтеү аҫтында тотоу юлында үҙенә иң оҙаҡ ҡаршылыҡ күрһәткән ҡәлғәне – ғаиләне емереү өсөн ҡулынан килгәндең барыһын да эшләне кеүек: әсәне, бала тәрбиәләүҙән айырып, тракторға ултыртты, мәсет һәм сиркәүҙәрҙе емерҙе, ғаиләнең матди нигеҙе булған мал-тыуарҙы һәм ер биләмәләрен колхозға берләштерҙе, сәйәси тәрбиә эшен пионер һәм комсомол ойошмаларына йөкмәтте, күберәк эш хаҡы алыуға стимулды бөтөрҙө... Билдәле, был процесс бер-ике йыл ғына барманы, ә тиҫтәләрсә йылды үҙ эсенә алды.

Тимәк, ғаиләне тәбиғи хәленә ҡайтарыу өсөн дә ҙа оҙаҡ йылдар талап ителәсәк.

**Рәшит КӘЛИМУЛЛИН**.

## РУХИ БУЛӘК

Тәрән тамырлы башҡорт әҙәбиәте тарихына намыҫ, тоғролоҡ, ғәҙеллек кеүек кешелек донъя ындағы иң күркәм әхлаҡи сифаттарҙы бүләк итеүсе күренекле шағир әм прозаик, республика матбуғатында ми ырбанлы етәксе әм халыҡ мәнфәғәтен яҡлаусы дәүләт эшмәкәре Төхфәт Йәнәбиҙең тыуған ауылындағы музейына аяҡ баҫыу менән, уның ғәзиз төйәге тура ындағы шиғри юлдары иҫкә килеп төшә:

*Сылтырап аҡҡан*
*алҡын шишмәкәйе*
*Мең йылдарҙан бирле йырлаған.*
*Таңдар атҡан саҡта,*
*тынлыҡ ярып,*
*Тал турғайҙары ла сырлаған.*
*Сусаҡ тауы торған*
*күкрәк киреп,*




*Төхфәт Йәнәбиҙең әҙәби музейы урнынлашҡан мәктәп.*

*Шишмә йырын тыңлап ма айған.*
*Күккә үрләп үҫкән*
*аҡ ҡайындар*
*ан ыҙ йылдар үҫеп ҡартайған.*
*Матур йәйҙәр буйы*
*ал сәскәле*
*Киң туғайҙар торған тын ғына.*
*Сәскәләрҙән*
*сәскәләргә ҡунып,*
*Күбәләктәр осҡан моң ғына.*

Ошо моңло хис менән музейға инә ең. Иғтибарыңды шундуҡ бай йөкмәткеле экспозициялар, үҙенсәлекле ҡомартҡылар йәлеп итә. Уның тәүге өлөшө үткән быуаттың ауыл тормошона бағышланған. Тарихи сығанаҡтарҙан билдәле булыуынса, Йәнәби-Урсай ауылына Меңле ырыуы башҡорт ҡәүемдәре нигеҙ алған. Ун етенсе быуат башында Бишбүләк, Бәләбәй яғына килеп ултырған сыуаш ҡәүемдәренә ер биреү документтарында Йәнәби башҡорттарының да ҡул тамғалары бар. Атап әйткәндә, бөйөк сыуаш шағирҙары Константин Иванов менән Яков Ухсайҙың тыуған төйәге Ыҫлаҡбаш, Илекәй Мең ерҙәрендә урынлашҡаны билдәле.

Ауыл ғәжәйеп матур урында: әр кемде оҡландырырлыҡ Сусаҡ тау битләүендә, көмөш ыулы, яр ыу хисле Йәнәби йылға ының риүәйәттәрҙә, эпостарҙа данланған Димгә ҡушылған тәңгәлендә ултыра.

Ошо хозур тәбиғәтле төбәктә 1894 йылдың 14 февралендә Төхфәт Йәнәби (Төхфәт Кәлимуллин) донъяға килгән. Ата ы Кәлимулла таш сығарыу, таштан өйгә нигеҙҙәр, таш келәттәр, таш ҡоймалар алыу менән шөғөлләнә. Әсә е Шәмсениса ҡул эшенә лә, шиғри үҙгә, йыр-бейеүгә лә ма ир, уҡымышлы, ярҙамсыл әүлиә ҡатын була. Уларҙың ғаилә ендә алты бала үҫә: Ғилмениса, Шәмсеҡәмәр, Төхфәт, Аллаяр, Искәндәр, Хәтирә.

Төхфәт ауылдың Вәли мулла оҫтабикә ендә ике ҡыш, унан уң мәктәптә дүрт йыл сама ы белем нигеҙҙәрен өйрәнгәс, Стәрлебаш мәҙрәсә енә бара. Бында ул бай ҡаҙаҡ шәкерттәренә аш бешереп, сәй ҡайнатып өс йыл уҡый, әммә мәҙрәсәләге белем биреү тәртибе бик үк оҡшап етмәй. 1912 йылда Төхфәт мосолман донъя ында әйбәт даны сыҡҡан “Хөсәйниә” мәҙрәсә енә инергә уйлап, кеҫә енә дүрт ум аҡса алып, ауылдарынан 250 саҡрымдағы Ырымбур ҡала ына йәйәү сығып китә. Ләкин уның был хыялы тормошҡа ашмай — мәҙрәсәгә уҡырға алмайҙар. Ни өсөн тигәндә, бында уҡыу тәртибе икенсерәк. “Хөсәйниә”лә шәкерттәргә 14 йыл белем бирәләр. Башланғыс бүлектә — 3-4 йыл, урта бүлектә — 3-4, уртанан юғары — 3-4, юғары — 2-3 йыл. Башҡа мәҙрәсәләрҙә и ә икенсе уҡыу йорттарында белем алып килгән шәкерттәр, имтихан тапшырып, үҙҙәре теләгән бүлектә уҡыуын дауам итә алған. Мәҫәлән, Мәжит Ғафури Үтәш, Ҡыйышҡы, “Рәсүлиә”, “Мөхәмәҙиә”, “Ғәлиә” мәҙрәсәләрендә уҡый. Ә “Хөсәйниә”лә тик башланғыс бүлеккә генә шәкерттәр ҡабул иткәндәр. Йыш ҡына матбуғатта, берәй күренекле шәхес тура ында үҙ сыҡ а “ул “Хөсәйниә” мәҙрәсә ен тамамланы” тип яҙалар. Был хәҡиҡәткә тап килмәй. игеҙ-туғыҙ йыл белем алған 18 йәшлек егет бала-сағалар янына әфтиәк өйрәнергә керә алмай бит инде. Тәүҙә Төхфәт Ырымбурҙа, унан уң Аҡтүбәлә эш эҙләп ҡарай. Ниәте килеп сыҡмағас, ҡаҙаҡ йәйләүенә балалар уҡытыусы ы — “мүлдәкә” булып китә. Шағирҙың “Бормалы юлдар” әҫәрендә ошондай юлдар бар.

*... Мин барылған*
*Йорттоң төп хужа ы,*
*Аҡ аҡаллы кеше — Йылҡыбай.*
*Тамыр-томороңдо*
*Ҡалдырмайса*
*орашырға бер ҙә иренмәй.*
*“Нуғайбысың*
*Йәки истәкмесең?*
*Ҡай илдеке, тәҡсир, буласыз?*
*Ой, жарыҡтыҡ,*
*Бала ғынасыз ғуй,*
*Нә ҡылып соң хәлфә булғансыз?”*
*Теҙеп алып китте*
*Аҡ аҡалым*
*Бер-бер артлы төрлө ораүҙар,*
*Йәшем, тоҡомомдо,*
*Тағы унда*
*Ҡалдырманы бере ен орау ыҙ.*
*Йәшемде әйткәс:*
*“Ой-бай, чырағым,*
*Аҡбалаға ҡордас икәнсез,*
*Ҡодай ҡотло ҡылсын,*
*Жарыҡтым,*
*Әйтәүер, жөдә нәгез икәнсез”,—*
*Тип ысҡындырҙы был ҡарт*
*Тора торғас,*
*Ҡыҙ барлығын әйтеп бер мәлде.*
*Күрмәгәнмен әле*
*Аҡбала ын,*
*Тағы башта уйҙар көрмәлде.*
*Ҡарт өйләнә бирә*
*Үҙенекен,*
*Ә минең баш уның ҡыҙында.*
*“Нисек итеп кенә*
*Ҡунырмын уң?*
*Ҡунғаным юҡ ҡыҙҙар ҡуйынында”,—*
*Тием эстән генә,*
*Үҙ-үҙемә*
*Ҡурҡыныслы ораүҙар ҡуям.*
*Үҙемде бер*
*Ауға төшкән ҡоштай*
*Сурлы булып ҡалғандай тоям.*

Төхфәт бер йыл тирә е ҡаҙаҡ балаларына белем биреп, кеҫә енә 40 ум аҡса алып, яңынан Ырымбурға килә әм мосолмандарҙың 5-се мәхәллә мәсетенә ҡараған имам-хатип мөдәррис За иҙулла Хабибулла улы Кашаев етәкселек иткән “Заиҙулла” мәҙрәсә енә уҡырға инә. Билдәле булыуынса, был мәсет әм мәҙрәсә “Хөсәиниә”нән алдараҡ, 1887 йылда уҡ, эшләй башлаған. “Бында уҡыу Стәрлебаштағыға ҡарағанда яҡшыраҡ ине”,— ти Төхфәт Йәнәби үҙенең автобиографик яҙмаларында. Ул уҡырға ингән 1913 йылда мәҙрәсәлә 15-тән 22 йәшкәсә 50




*Яҙыусы ижадына арналған стенд.*

шәкерт белем алып йөрөй. За идулла хәҙрәттән тыш, бында Хөбәйәхужа Абдулбаянов, аталы-уллы Хәйрулла әм Абдулла Катаевтар, Абдулхәким Үтәгәнов, Абдрахман Насировтар имам мөғәллим хеҙмәтен үтәй. Мәҙрәсә янында дүрт айлыҡ урыҫ телен өйрәнеү курстары ла эшләй. Бөгөнгө көндә лә был бинала мәсет әм мәҙрәсә бар, тик ул “Сөләймәниә” тип атала.

Бына ошо “За иҙулла” мәҙрәсә ендә уҡыған осорҙа Төхфәт Йәнәби тәүге шиғырҙарын, мәҡәләләрен яҙып гәзиттәргә тәҡдим итә. Әммә ижади эшкә тормош тәжрибә ен туплағас ҡына ныҡлап тотона. “Башпрофсоветтың мәҙәниәт бүлеге мөдире булып эшләү миңә башланып ташланған әҙәбиәткә яңынан ҡайтырға мөмкинлек бирҙе. Мин бында Башҡортостан тарихында беренсе булған татар телендә (сөнки ул ваҡытта Башҡортостанда бөтә матбуғат татар телендә ине) “Эш таңы” исемендә гәзит сығарҙым әм шул ваҡыттарҙа аслыҡҡа ҡаршы көрәшкә ҡаратылған, шулай уҡ милли тартыштарға ҡаршы әм башҡа темаларҙа шиғырҙар яҙа башланым”,— тип яҙа ул үҙенең автобиография ында.

Төхфәт Йәнәби үҙе кеүек ярлы-ябаға өсөн йәшәү, ижад өмөтө уятҡан Октябрь революция ын күңел күтәренкелеге менән ҡабул итә. Яңы власть органдарының сәйәси эшмәкәрлеген халыҡҡа аңлатыу эшендә актив ҡатнаша. Ҡыпсаҡ-Ете ырыу, Арғаяш кантондарында, Башпрофсоветта етәксе вазифаларын башҡара. Енәйәтселек менән көрәшә. 1924 йылдан – республиканың төп гәзите “Башҡортостан”да секретарь, ә 1926 йылдан – яуаплы мөхәррире. Бер үк ваҡытта ул “Яңы юл”, “Октябрь” журналдары мөхәррире, ВКП(б) Өлкә комитеты, БашЦИК ағза ы, Башҡортостан Яҙыусылар союзы етәксе е лә була.

Күренекле яҙыусы әм йәмәғәт эшмәкәренең тыуған төйәгендәге музейы РСФСР Министрҙар Советының 1964 йылдың 27 июндәге 788-се ҡарары нигеҙендә ойоштоpола. Ошо мәлдә ауылдағы мәктәпкә лә күренекле яҙыусының исеме бирелә. Музей тәүҙә айырым йортта була. Хәҙер ул тирә-яҡҡа йәм биреп сәскәләр ара ында ултырған ике ҡатлы мәктәптең оло бер бүлмә ендә урынлашҡан.

Музей ойоштороуҙа, ҡомартҡылар менән тулыландырыуҙа, ул саҡтағы мәктәп уҡытыусылары Ҡәләмов, Ша иев, Зарипов, Фәхретдинов, яҙыусының ҡатыны Хәҙисә Ғәли ҡыҙы Йосопова (Кәлимуллина) ныҡ ярҙам күр әтә. Музейҙың икенсе өлөшөндә Төхфәт Йәнәбиҙең тормошона әм уның ижади эшмәкәрлегенә бағышланған экспозициялар ҡуйылған. Шағирҙың әсә е Шәмсениса республикала билдәле йәмәғәт эшмәкәре була. Ауыл Советы рәйесе, 1928 йылда үткән Эшсе, Крәҫтиән әм Ҡыҙылармеец депутаттары Советының Бөтә башҡорт съезы делегаты, Рәсәй ҡатын-ҡыҙҙары съезы делегаты була әм башҡа байтаҡ йәмәғәт эштәрендә ҡатнаша. Музейҙа уның башҡа делегаттар менән төшкән фото ы ла урын алған. Төхфәт Йәнәбиҙең ҡатыны Хәҙисә Ғәли ҡыҙы Йосопова (Кәлимуллина) тура ында ла материалдар бар. Ул, халыҡ дошманы ҡатыны булараҡ, биш йыл төрмәлә ултыра. Унан уң өргөндә: Ырымбур өлкә е Орск ҡала ында заводта



*Төхфәт Йәнәби ҡәләмдәштәре менән. 1927 йыл.*

аш бешереүсе була, Украинала шахтала эшләй. 1957 йылдан алып ғүмеренең уңғы көнөнә тиклем иренең ижадын яңынан халыҡҡа ҡайтарып биреү өсөн тырыша.

Билдәле булыуынса, арҙаҡлы яҙыусы әм йәмәғәт эшмәкәре Төхфәт Йәнәби ижадының, тормошоноң сәскә атҡан осоронда нахаҡҡа ғәйепләнеп, 1938 йылдың 10 июлендә дуҫтары Ғабдулла Амантай, Булат Ишемғол, Мөхтәр Байымов, Дауыт Юлтый менән бергә атып үлтерелә.

Музейҙа шулай уҡ ауылдың ғорурлығы Социалистик Хеҙмәт Геройы, СССР Юғары Советы депутаты, алдынғы механизатор Шифа Рәжәповҡа арналған стенд, яҡташ яҙыусылар, күренекле мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре хаҡында өйләүсе материалдар ҡуйылған.

Бына ошо бай ҡомартҡылар аҡлаған музейҙың етәксе е булып егерме ете йыл инде тарих уҡытыусы ы Рәйхана Мортаза ҡыҙы Шахмина эшләй. Ул яҙыусы әҫәрҙәренең үҙенсәлектәре, биография ын аныҡлаусы яңы материалдар менән таныштыра. Төрлө әҙәби кисәләр, диспуттар ойоштора. Данлыҡлы яҡташтарын, хеҙмәт әм уғыш ветерандарын, каникулға ҡайтҡан студенттарҙы йыйып ауыл тарихы, күренекле кешеләр тура ында фә емле осрашыуҙар үткәрә. Рәйхана Мортаза ҡыҙының был изге эшендә ныҡлы ярҙамсылары бар: ҡәйнә е, сәсәниә Фәүзиә апай, йыр-бейеүгә, әҙәби ижадҡа әләтле ҡыҙҙарҙы Алия, Нурия (хәҙер юғары уҡыу йорто студенттары), мәктәп директоры Рәүеф Ба ауетдинов, урындағы хужалыҡ етәксе е Рифәт Хәбибуллин, ауыл хакимиәте башлығы Сәғүрә Дәүләтшина.

Билдәле булыуынса, бөйөк башҡорт шағиры Мифтахетдин Аҡмулланың тыуған төйәге Туҡ анбай ҙа Йәнәби-Урсай ауылы хакимиәте ҡарамағында. әр йыл айын үткән Аҡмулла көндәрен ойоштороуҙа Сәғүрә Тимерхан ҡыҙының роле бик ҙур. Биш ауылды (Туҡ анбай, Сафар, Йәнәби-Урсай, Сатай, Рус Урсайы) төҙөкләндереү, тәртиптә тотоу, килгән ҡунаҡтарҙы башҡорт йолалары менән ҡаршы алыу, аш- ыу әҙерләү кеүек мө им эштәр уның иңенә төшә. Башҡортостандың байрамда ҡатнашҡан әҙәбиәт, сәнғәт ә елдәренең фекеренсә, Сәғүрә Тимерхан ҡыҙы Дәүләтшинаның байрам ойоштороуҙағы эшмәкәрлеге оло маҡтауға лайыҡ. Ул Төхфәт Йәнәби музейын да күҙ уңынан ысҡындырмай, әр осрашыуҙың урта ында була, ярҙам итә.

Бөгөнгө көндә Рәйхана Мортаза ҡыҙы күренекле яҙыусының 115 йыллыҡ юбилейын үткәреү пландары менән янып йәшәй. Беҙгә и ә Төхфәт Йәнәбиҙең әҙәби әм рухи бүләген халыҡҡа еткереүҙә уға әм яҡташтарына уңыштар теләй е генә ҡала.

**Фәнис ЯНЫШЕВ.**

## БАТЫР РУХЫ ӘР БЕР ТАШЫНДА

60 йыл элек кенә милли батырыбыҙ исемен йөрөткән иң ҙур ҡалаларҙың бере е Салауат урынында бәләкәй генә бер нисә ауыл булған. Нефть ятҡылыҡтары табылғас, яңы ҡалаға нигеҙ алына. Ярты быуаттан аҙ ғына ашыу ваҡыт эсендә Салауат Башҡортостандың мәҙәниәт, мәғариф өлкә е ныҡлы үҫеш алған, ҡеүәтле предприятиелары булған, тоторoҡло иҡтисадлы ҡала ына әүерелә. Янында күк ел тауҙары ла, ҡуйы урмандары ла булған гүзәл тәбиғәт ҡосағында урынлашҡан ул.

Салауат ҡала ының Аҡ аҡалдар советы ағза ы Биктимер Ғафуров – буласаҡ ҡаланың символик ҡаҙағын ҡаҡҡан кеше.

...Биктимер бала сағынан уҡ зирәк, белемгә ынтылыусан бала була. Үҙ ауылында урта мәктәп булмағанлыҡтан, ул 8 саҡрымдағы Ишембайға йөрөп белем ала. Хеҙмәт юлын 1943 йылда " Ишембайгаз" тресында слесарь булып башлай. Күп тә үтмәй, смена начальнигы булып китә. Тик, сәләмәтлеге насарланыу сәбәпле, ауылына ҡайта әм колхозда эшкә тотона, унарсылыҡ менән дә шөғөлләнә. 1947 йылдың көҙөндә, шулай Ағиҙел туғайҙарындағы күлдәргә төшөп барғанда, ҡаршы ына юл ыҙ-ни еҙ бер машина килгәнен күрә. Машина униң янында туҡтап, кабинанан оҙон буйлы, ҡаҡса кәүҙәле ир төшә әм, иҫәнләшкәс, йомшаҡ ҡына итеп:

– Кем була ың, егет? Танышайыҡ, – тип ҡулын уҙа. – Мин Алексей Филаретов булам, Мәскәүҙән ( уңынан ул 18-се комбинаттың директоры була).

– Биктимер мин, Ғафуров, – тип яуап бирә егет әм шунда уҡ орау ҡуя: – Был яҡтарға ниндәй елдәр ташланы? Әллә Мәскәүҙән унар итергә килдегеҙме?

Биктимерҙең был орауына икенсе ҡунаҡ Иван Колесников ( уңынан ул – комбинаттың партия ойошма ы секретары) яуаплай:

– Беҙ, туған, унарсылар түгел, инженер-төҙөүселәр. Әле бына ин баҫып торған ерҙә ҡала төҙөргә уйлайбыҙ. Быға нисек ҡарай ың? – тип йылмая.

Егет тә юғалып ҡалмай:

– Ә беҙҙә ҡала бар. Ана күренеп тора – Ишембай, – тип яуап ҡайтара. Унының үҙҙәре ҡунаҡтарҙы дәртләндереп ебәрә.

– Ә беҙ тағы ла матурырағын төҙөйәсәкбеҙ. ин бит – ерле халыҡ вәкиле. Кил әле яҡынырaҡ! Мә, үҙ ҡулдарың менән беренсе ҡаҙығын ҡағып ебәр, – тип башы осланған аҡ таҡта киҫәге менән сүкеш уҙа. Үҙе ғорур ҡиәфәттә тирә-яҡ гүзәллегенә ҡараш ташлап: "Бында яңы социалистик ҡала үҫеп сығасаҡ! Ә ана тегендә комбинат корпустары теҙелеп китергә тейеш", – тип төньяҡ-көнбайышҡа табан борола.

"Почет Билдә е" ордены кавалеры Биктимер Ғафуров – илле йыл ғүмерен "Салауатнефтеоргсинтез" йәмғиәтенә бағышлаған хөрмәтле хеҙмәт ветераны.

– Быйыл юбилей тантаналары уҙғанда комбинатҡа тағы ла барырға тура килде. Беҙ эшләгән дәүер менә сағыштырғанда – ер менән күк ара ы! әр цехта,

ҡоралмала – тәртип, төҙөклөк, эш урындарында – компьютерҙар. Килде бит замана йәштәргә! – ти ул.

Хаҡ үҙҙәр. Бөгөн “Салауатнефтеоргсинтез” асыҡ акционерҙар йәмғиәте – Рәсәйҙең нефть әм газ эшкәртеү сәнәғәтендә киң танылған предприятиеларҙың бере е. Нефть продукттары әм нефть химия ы продукция ы етештереү әм сит илдәргә сығарыу күләме буйынса уға тиңдәр ирәк. Федераль кимәлдәге “Эксперт РА” бойондороҡ оҙ ба а агентлығы ба алауынса, “Салауатнефтеоргсинтез” йәмғиәте нефть химия ы тармағының иң ҡеүәтле предприятиелары ара ында беренсе урында. Ә быларҙың бары ы ла – 60 йыл йыйылған тәжрибә, көн айын камиллашыу өҫтөндә эшләү өҙөмтә е.

Республика, ҡалабыҙ абруйын күтәреүсе, социаль-иҡтисади үҫешен тәьмин итеүсе төп предприятиеларҙың бере енә быйыл 60 йыл тула. Ул саҡтағы 18-се комбинат таш күмер, мазуттан бензин әм дизель яғыулығы алыусы завод булараҡ проектлана, әммә, 60-сы йылдарҙа нефть сығарыуҙың йәнләнеп китеүе арҡа ында, бында күпләп нефть химия ы әм нефть эшкәртеү объекттары төҙөлә. 70-се йылдарҙа предприятие СССР-ҙа әм сит илдәрҙә киң билдәле эре нефть химия ы комплексына әүерелә. Шул заманда уҡ уның үҙ ремонт база ы, социаль объекттар селтәре була. 1980 йылда нефть химия ы комбинаты “Салауатнефтеоргсинтез” етештереү берекмә енә әйләнеп, бер нисә йылдан Башҡортостанда сығарылған нефттең сирек өлөшө, Ырымбур ятҡылығынан алынған газ конденсаты тотош бында эшкәртелә. 1986 йылдан предприятие барлыҡ эштәрҙе үҙ килемдәре иҫәбенә алып бара башлай.

“Салауатнефтеоргсинтез” йәмғиәтенә бөгөн ете завод инә. Нефть эшкәртеү заводында нефть продукттары, битум, бензол, толуол етештереү өсөн сеймал сығарыла; минераль ашламалар заводы азотлы ашламалар етештерә; “Синтез” заводы айырыуса оксоспирттары (бутил, изобутил, изооктив) менән билдәле; нефть химия ы заводында, нефть химия ы продукция ынан тыш, көнкүреш тауарҙары ла сығарыла; катализаторҙар етештереү заводы цеолитлы катализаторҙар әм силикагелдәр я ай; “Мономер” заводында бензол, этилбензол, стирол, этилен әм пропилен, төрлө полистиролдар сыға; ремонт-механика заводы йылылыҡ алмашыу аппаратура ы, стандарт ыҙ ҡорамалдар эшләү әм ремонтлау менән шөғөлләнә. “Салауатнефтеоргсинтез” йәмғиәте йылдан-йыл атыуға сығарған продукцияла экспорттың өлөшө даими үҫә. Салауаттар продукция ын әлеге көндә 42 сит ил, шул иҫәптән АҠШ, Бөйөк Британия, Ҡытай, Швецария атып ала. Предприятие Башҡортостандың алым түләүселәре ара ында керемдәр күләме буйынса – икенсе урында. Уның өҙөмтәле эшмәкәрлеге тотош төбәк өсөн иҡтисади әм социаль үҫеш нигеҙе булып тора.

Компанияның ҡаҙаныштары, илебеҙ иҡтисадына индергән өлөшө федераль әм халыҡ-ара кимәлдә күп тапҡыр юғары ба аланды. “Салауатнефтеоргсинтез” 2003 йылда “Рәсәйҙең иң яҡшы 1000 предприятие ы әм ойошма ы” Бөтә Рәсәй конкурсының тәүге 100 номинанты иҫәбенә инде. Шул уҡ йылда ул Халыҡ-ара реаль иҡтисад академия ы үткәргән конкурстың “Нефть химия ы сәнәғәтенең заманса предприятие ы” номинация ында “Төбәк иҡтисады лидеры” дәрәжә енә эйә булды. “Рәсәйҙең иң яҡшы экспорты” конкурсында “Иң йылдам үҫеүсе экспортер” номинация ында лауреат, “Башҡортостан Республика ының иң яҡшы экспортеры” дипломы, “Рәсәйҙә социаль яуаплы бизнес булдырыуға индергән өлөшө өсөн” махсус номинация ында лауреат әм “Алтын Меркурий” милли премия ы, “Башҡортостан Республика ының иң яҡшы сәнәғәт компания ы” билдә е,

республиканың химия  әм нефть химия ы сәнәғәтендә беренсе урын  әм генераль директор Д. Ә. Шәүәлиевҡа I дәрәжә дипломы, Сифат кубогы бирелеүе, башҡа наградалар – ныҡышмалы эш  өҙөмтә е.

60 йыллыҡ юбилейын химиктар ҡала көнө менән бергә үткәрҙе. Был сараларҙа Башҡортостан Республика ы Президенты Мортаза Рәхимов, Премьер-министры Раил Сарбаев, күрше ҡала-район хакимиәттәре башлыҡтары, башҡа мәртәбәле ҡунаҡтар ҡатнашты. Уларҙы ҡала хакимиәте башлығы Хәлил Рәхимов, "Салауат-нефтеоргсинтез" йәмғиәтенең генераль директоры Дамир Шәүәлиев оҙатып йөрөнө. Ҡунаҡтар үҙенең 60 йыллығын билдәләгән предприятие эшмәкәрлеге, уның яңы технологиялары, үҫеш концепция ы, киләсәккә пландары менән танышты, "Нефтехимик" мәҙәниәт  арайында урынлашҡан хеҙмәт даны музейында булды. Стадионда йыйылған халыҡ алдында сығыш я ап, М. Рәхимов Салауат ҡала ының уңыштарын билдәләп үтте. 2007 йылда ҡала төрлө кимәлдәге ҡаҙналарға миллиард  умдан ашыу аҡса күсергән. Уртаса эш хаҡы буйынса ла Салауат алдынғы урындарҙы биләй. Төп предприятие менән ҡаланың барлыҡ башланғыстарҙа бер маҡсатлы булыуы, берҙәм үҫеше ике енең дә киләсәккә ышаныс менән ҡарауы тура ында  өйләй. Юбилей уңайынан ҡаланың иң лайыҡлы кешеләре Президент ҡулынан дәүләт наградалары алды. Мортаза Рәхимовтың салауаттарға иң ҙур бүләге – 11 микроавтобус. Бөгөн улар 1-се маршрут буйынса пассажирҙар ташый. Халыҡҡа уңайлы  әм заманса "Мерседес-Бенц" автобустары оҡшай. Был транспорт экологик яҡтан башҡаларға ҡарағанда отошло, яғыулыҡты ла аҙыраҡ ҡуллана.

"Салауатнефтемаш" предприятие ы марка ы менән сыҡҡан тауарҙарҙы Башҡортостандың, Рәсәйҙең яғыулыҡ-энергетика комплексында яҡшы беләләр. Тауарҙарҙың сифатын даими яҡшыртыу аша нефть-газ эшкәртеү ҡоролмалары баҙарында позицияларҙы нығытыу үҙенең төп маҡсаты икәнлеген коллектив яҡшы аңлай. Ошо рәүешле генә ойошманың иҡтисади  әм социаль бурыстарын хәл итеп була.

"Салауатнефтемаш"тың етештереүсәнлегендәге тотороҡлолоҡто иҡтисади күр әткестәр ҙә иҫбатлай. Былтыр предприятиела 1,1 миллиард  умлыҡ тауар сығарыу күҙаллан а, ғәмәлдә ул 1,108 миллиард  умдан артҡан. Үҫеш 2006 йыл менән сағыштырғанда 121,6 процент. "Салауатнефтемаш"тың генерль директорының беренсе урынбаҫары Рәфил Абдуллин билдәләүенсә, "Транснефть", "Роснефть", "Газпром", "Салауатнефтеоргсинтез", "Өфөнефтехим", "Өфөоргсинтез" "Ырымбургазпром" кеүек билдәле  әм ҙур  ойошмаларҙың заказсы булыуы ла күп нәмә тура ында  өйләй. Тимәк, улар тап ошо предприятие тауарҙарына өҫтөнлөк бирә, ҡорамалдарҙың сифатына ышана. Йәмғиәттә сифат сәйәсәте маҡсатлы тормошҡа ашырыла, ҡулланыусыларҙың ихтияжын ҡәнәғәтләндереү, етештереүгә идара итеү система ын камиллаштырыу  әм тауарҙың сифатын яҡшыртыу өсөн сифат менеджменты система ы индерелгән. Технологик процестар камиллаштырыла, яңы конструкциялар  әм изделиелар эшләнә, ҡоролмалар яңыртыла  .б. 2007 йылда "Салауатнефтемаш" сығарған "Шэрыкъ-5" нефть үткәргестәр фильтры башта "Башҡортостандың иң яҡшы тауарҙары" дипломы менән бүләклән ә, уңыраҡ ошо уҡ ҡорамал 10-сы Бөтә Рәсәй "Рәсәйҙең иң яҡшы 100 тауары" конкурсының дипломанты булып китте. Ошо еңеү нигеҙендә "Рәсәйҙең иң яҡшы 100 тауары" программа ын ойоштороусылар советы предприятиеның генераль директоры Юрий Черныхты "Сифат өлкә ендәге ҡаҙаныштары өсөн" тигән почет-

лы знак менән бүләкләй. “Шэрыкъ-5” фильтры нефть үткәргестәрҙең урҙырыу ҡоролмаларын механик ҡатышмаларҙан, парафин-ыҫмала ултырмаларҙан, сит әйберҙәрҙән аҡлау өсөн тәғәйенләнгән. Ике йыл инде ул “Рәсәйҙең иң яҡшы 100 тауары” логотибын мәғлүмәти-реклама маҡсатында ҡулланыу хоҡуғына эйә.

Бөгөн Салауат халҡы ошо ике сәнәғәт гиганты, башҡа предприятиелары эшмәкәрләге менән хаҡлы ғорурлана. Тауар етештереү буйынса ҡала – республикала икенсе, төрлө кимәлдәге ҡаҙнаға алым күсереүҙә – өсөнсө, бер кешегә уртаса килем буйынса беренсе урынды биләй.

Дөйөм үҫешкә, уңыштарға ҡала эшҡыуарҙары ла ҙур өлөш индерә. Салауатта кәсепселектең тәүге аҙымдары 80-се йылдарҙағы кооператив үҫеше менән бәйле. Ул ваҡытта уҡ ҡала Советы башҡарма комитетында шәхси хеҙмәт эшмәкәрлеге әм кооперативтар төҙөү буйынса комиссия булдырылғайны. Кооперативтарҙың эшмәкәрлеген күҙәтеү, ярҙам итеү өсөн улар берәй предприятие база ында ойоштторола.

Ашханалар тресы ҡарамағында бәшмәк үҫтереү менән шөғөлләнеүсе “Лесной” кооперативы тәүгеләрҙән булып 1987 йылда эш башлай. Артабан ҡала көнкүреш ҡорамалдары ойошма ында декоратив балаҫ уғыу буйынса “Светлана”, технологик ҡорамалдар фабрика ында биҙәкләү эштәре буйынса “Малахит” әм башҡа бер нисә кооператив барлыҡҡа килә.

Шәхси эшҡыуарлыҡ предприятиеларының бары ына ла баҙар иҡтисады шарттарына яраҡлашырға насип булмай. Шулай ҙа күбе е етәкселәренең характер ныҡлығы, зирәклеге арҡа ында үҙ эшен аҡлап ҡына ҡалмай, бөгөн дә үҫеш юлында. Улар – биҙәкләү материалдары магазиндары селтәре етәксе е А. П. Богданов, полиграфия әм компьютерлаштырыу хеҙмәттәре күр әтеүсе ойошманың етәксе е С. А. Сергеев, аппартуралар йүнәтеү буйынса үҙ участка ын тәүгеләрҙән булып ойоштороусы, әле көнкүреш техника ы магазиндары селтәре хужа ы И. Н. Буслаев. Салауатта ун биш йылдан ашыу М. В. Сокольниковтың “Ортикон сауҙа йорто”, Р. Н. Народовскаяның “Аврора”, В. М. Дементьевтың “Комфорт”, “Шатура-мебель” магазиндары уңышлы эшләп килә. Мебель етештереү менән И. Б. Бобылев, В. И. Максимов, О. А. Власов, В. Г. Коргунюк кеүек эшҡыуарҙар бер йыл ғына шөғөлләнмәй, уларҙың тауарҙары ҡалала ғына түгел, республикала ла ҙур ихтыяж менән файҙалана.

Эшҡыуарҙар сафы яңы әм йәш көстәр менән әүҙемерәк тулылана. Уларҙың тауар етештереүгә өҫтөнлөк биреүе яңы технологиялар әм материалдар үҙләштереүе ҡыуаныслы. Ҡала эшҡыуарҙары етештергән пенополистирол плитәләрҙе, пластмасс әйберҙәрҙе, металлопластик конструкцияларҙы, сауҙа ҡорамалдарын ҡала халҡы теләп ала.

“Кәсепселеккә дәүләт ярҙамы тура ында” республика законының ҡабул ителеүе лә тармаҡ үҫешенә булышлыҡ итмәй ҡалмай. Ошо законды тормошҡа ашырыу йөҙөнән 1999 йылда Салауат эшҡыуарҙары берләшмә ендә шәхси эшҡыуарлыҡ, сауҙа әм йәмәғәт менән бәйләнеш, көнкүреште хеҙмәтләндереү, ремонт-төҙөлөш эштәре буйынса хоҡуҡи әм финанс тәьминәте секторҙары ойошторола. Ҡала хакимиәте менән берлектә ул Салауатта эшҡыуарлыҡты үҫтереү программа ын эшләгән. Уның бурысы эшҡыуарҙарҙы мәғлүмәт менән тәьмин итеү, өнәрҙәрен камиллаштырыу өсөн төрлө семинарҙар, консультациялар ойоштороу, хоҡуҡ-мәнфәғәттәрен яҡлау менән бәйле.

Нефть химия ы, машиналар төҙөү предприятиелары булған Салауат ҡала ында эшкәртеүсе, үҙ тауарҙарын етештереүсе кәсепселек предприятиеларына эш башлау өсөн сеймал да, башҡа мөмкинлектәр ҙә етерлек. Шуның өсөн, киләсәктә тап

тауар етештереүсе ойошмалар алға сығыр, тигән өмөт бар. Шулай уҡ ҡалала эшҡыуарҙар эшмәкәрлегенән ҡала ҡаҙна ына килгән килемдең тос булыуы өсөн дә эшләргә лә эшләргә кәрәк.

Урындағы милиция тарихы ҡала йылъяҙма ы менән бергә башлана. Тимәк, тәртип аҡсылары ла быйыл үҙҙәренең 60 йыллыҡ юбилейын билдәләй. Бөгөн ул тулы ынса комплектланған, ЮХХДИ, патруль-пост хеҙмәте, иҡтисади енәйәттәргә ҡаршы көрәш, эксперт-криминалистик әм аҡ бүлектәре эшмәкәрлеге буйынса күр әткестәр юғары ғына. 2007 йылда Салауат ҡала ы эске эштәр идаралығы БР Эске эштәр министрлығының иң яҡшы бүлектәренең бере е тип танылды. Идаралыҡта оператив әҙерлекте үҫтереү, террористик акцияларҙы, ойошҡан енәйәтселекте, техноген ҡазаларҙы булдырмау өсөн уҡыуҙар ойошторола. Иң әҙерлекле хеҙмәткәрҙәр Чечен Республика ында терроризмға ҡаршы операцияларҙа ҡатнаша.

Ҡаланың эске эштәр идаралығында 26 служба бар. Хеҙмәттән тыш, улар үҙешмәкәр сәнғәт, спорт (ете спорт мастеры, туғыҙ спорт мастерлығына кандидат, төрлө разрядлы 35 хеҙмәткәр бар) менән шөғөлләнеп, төрлө ярыштарҙа призлы урындар ала.

Рәсәйҙә балаға башланғыс әм урта дөйөм белем биреү мотлаҡ булып тора. Салауатта ла урта дөйөм белем биреүгә ҙур көс алына.

Әммә ҡалабыҙҙа, сабыйҙарҙың күплегенә ҡарамаҫтан, балалар баҡсалары етешмәй. Мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында сабыйҙар ентекле тәрбиә ал ын өсөн бөтә шарттар булдырылған. Башҡортостандың йәш гражданын тәрбиәләүгә милли белем биреү система ы ҙур өлөш индерә. Рухи-әхлаҡи тәрбиә уҡыусыларҙа туған тел, мәҙәни традицияларға ихтирам уятыу юлы менән алып барыла. Дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытыу белем биреү усаҡтарының бары ында ла ойошторолған.

Салауаттың сығарылыш уҡыусылары Рәсәйҙең генә түгел, сит илдәрҙең юғары уҡыу йорттарында белем алыу мөмкинлегенә лә эйә. Уҡытыусыларыбыҙ әм уҡыусыларыбыҙ – төрлө конкурстар еңеүселәре. Быйыл үткән “Йыл тәрбиәсе е” конкурсында – Наталья Шишкова, “Башҡорт телен уҡытыу буйынса тәрбиәсе” конкурсында – Рәғиҙә Сәлихова, “Йыл уҡытыусы ы”ярышында – Ирина Макарова, “Башҡорт теле әм әҙәбиәте йыл уҡытыусы ы” бәйге ендә Миңзәлә Йомалина еңеүселәр булды. “Мәғариф” өҫтөнлөклө милли проекты сиктәрендә мәктәптәрҙең матди-техник база ы нығытыла, инновацион белем биреү программалары индерелә. 2006–2007 йылдарҙа алты мәктәп 1-әр миллион умлыҡ грант алды.

Салауатта йәнең теләгән өнәр айларға мөмкин. 5 профессиональ-техник училищенан тыш, сауҙа-кулинар лицейы, музыка училище ы, медицина, индустриаль, иҡтисад әм педагогия колледждары бар. Йәштәргә юғары белем алыу өсөн Өфө дәүләт нефть-техник университеты, Сервис институты, Хеҙмәт әм социаль бәйләнештәр академия ы филиалдары, коммерцияға ҡараған төрлө филиалдар етерлек. Өфө дәүләт нефть-техник институтының Салауат филиалы – Башҡортостанда менеджмент система ы сертификатын алған юғары уҡыу йорттарының бере е. Ә Салауат индустриаль колледжы былтыр бөтә Рәсәй конкурсында еңеп 30 миллион ум грант алды.

Халҡыбыҙҙың милли батыры исемен йөрөткән ҡалала башҡорт гимназия ы булмауы мөмкин түгел. Йәш булыуына ҡарамаҫтан, гимназиябыҙ белем, тәрбиә юлынан ышаныслы атлай. Ун йылдан ашыуыраҡ ваҡыт эсендә үҙенең традиция-

ларын булдырған, ярай ы уҡ ҙур уңыштарға өлгәшкән мәктәп ҡала, республика кимәлендә үткәрелгән төрлө сараларҙа әүҙем ҡатнашып, ҡайнап йәшәй.

2005/2006 уҡыу йылында гимназия “Мәғариф” өҫтөнлөклө милли проект сиктәрендә Рәсәй Президенты грантына лайыҡ булды. Ә уҙған уҡыу йылында инновацион йүнәлеш буйынса ҡала кимәлендә үткәрелгән конкурста беренсе урын яуланы.

БР Президенты тарафынан булдырылған “ әләтле балалар” программа ын тормошҡа ашырыу буйынса ҙур маҡсатлы эш алып бара. Мифтахетдин Аҡмулланың тыуыуына 175 йыл тулыуға арналған республика фәнни-тикшеренеү эштәре конкурсында Сәүиә Бикмөхәмәтованың уҡыусы ы Минзилә Ҡорбанова икенсе урынға лайыҡ булды. Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуына 450 йыл тулыуға арналған республика иншалар конкурсында 11-се класс уҡыусы ы Алина Ғарифуллина – беренсе урын (уҡытыусы ы Резеда Килсенбаева), 9-сы класс уҡыусы ы Илнур Байгилдин (уҡытыусы ы Сәүиә Бикмөхәмәтова) өсөнсө урын яуланы. Йәш сәсәндәрҙең “Урал батыр” эпосы буйынса респулика конкурсында беҙҙең гимназия уҡыусылары әүҙем ҡатнаша, уңыштар ҙа ҡыуаныслы.

Быйылғы уҡыу йылында Күмертау ҡала ында уҙғарылған “Аҡмулла вариҫтары” исемле йәш сәсәндәр зона конкурсында 11-се класс уҡыусы ы Алина Ғарифуллина “Тел – тере шишмә” номинация ына лайыҡ булды. Ҡалабыҙҙың педагогия, индустриаль колледждары нигеҙендә үткәрелгән конференцияларҙа уҡыусылар үҙҙәренең эштәре менән уңышлы сығыш я аны.

аулыҡ аҡлау – ҡала именлегенең иң мө им күр әткестәренең бере е. “ аулыҡ” милли проекты тормошҡа ашырыла башлау Салауат ҡала ы өсөн дә әйбәт өҙөмтәләргә өмөт бирә. Был милли проектҡа ярашлы, дауалау учреждениелары 2006 йылда 3 млн. 633 мең умлыҡ ете, ә 2007 йылда 12 млн. 900 мең умға 18 ҡорамал алған. Ҡала ҡаҙна ынан проектты ғәмәлгә ашырыуға 2006 йылда 1 млн. 265 мең ум, 2007 йылда 12 млн. 727 мең ум бүленгән, ҡаҙнанан тыш сығымдар ҙа йәлеп ителгән. “Газпроммедстрах”, страховкалау компания ы 2-се ҡала дауахана ына 8 млн. умлыҡ УЗИ аппараты, “Салауатнефтеоргсинтез” асыҡ акционерҙар йәмғиәте бала табыу йортона етлекмәй тыуған балалар өсөн 9 млн. умға ике тын алыу аппараты алып биргән. Былтыр дауалау учреждениеларында матди техник база нығынған, өс “Ашығыс ярҙам” автомобиле алынған. 2006 йыл менән сағыштырғанда 2007 йылда 127-гә күберәк сабый донъяға килгән. Салауат дауахананалары аулыҡтарын нығытырға күрше ҡала әм районларҙан да киләләр. Был медицина хеҙмәткәрҙәребеҙҙең юғары әҙерлеклелеген дә иҫбатлай.

БР хирургтар ассоция ы 2007 йыл өҙөмтәләре буйынса 2-се дауахана мөдире, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы Николай Трудневты “Республиканың иң яҡшы хирургы” тип билдәләп, уға “Алтын скальпель” тапшырҙы. Был абруйлы исем йыл айын билдәле бер операция өсөн бирелә. Былтыр йәй Салауаттың 1-се хирургия бүлегенә ғүмере ҡыл өҫтөндә торған бер егетте килтерәләр. Уның эске йән органдары хәнйәр менән йәрәхәтләнгән була. Бындай минуттарҙа, ғәҙәттә, иң тәжрибәле табип Николай Труднев операцияға тотона. өҙөмтәлә уның әм башҡа хеҙмәткәрҙәрҙең тырышлығы арҡа ында егет, оҙаҡ түшәктә ятҡандан уң, аяҡҡа баҫа.

Салауат – йәштәр, спорт ҡала ы. Бында физик яҡтан сәләмәт, рухи йә әттән бай шәхес тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бирелә. Сәләмәтлек, спорт әм сәләмәт тормош, наркоманияны, эскелекте әм тәмәке тартыуҙы иҫкәртеү йылдарында

үткәрелгән саралар ошо маҡсатҡа йүнәлтелде. Балалар  ау-сәләмәт, физкультураны  әм спортты үҙ ит ен өсөн ҡалабыҙҙа күп төрлө секциялар эшләй. Яңыраҡ асылған “Салауат” спорт-концерт комплексы үҙе генә ни тора! Унда фитнес-клуб та, ырғалаҡ та  .б. бар. Ни айәт, “Вега” бассейны ла төҙөлөп бөттө. “Алмаз”ды төҙөкләндереү буйынса ҡыҙыу эштәр бара, яҡын араларҙа ул үҙ ишектәрен асасаҡ.

“Салауат саңғы ы”н үткәреү – үҙе бер йола. Саңғыла ҡарты-йәше теләп йөрөй. Ике йыл Рәсәйҙең 84 ҡала ы менән бер рәттән, ҡалабыҙ “Рәсәй саңғы ы” байрамын уҙғара. Ә быйыл ошо марафонда ҡатнашырға 3 меңгә яҡын кеше сыҡты. “Милләттәр кросы-2007” спорт сара ында мәктәп уҡыусылары ғына түгел, өлкәндәр ҙә әүҙем ҡатнашты. Иң ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс спорт төрөнөң бере е – спидвей, шулай уҡ велосипедта уҙышыу айырым урынды биләй. Уның әр бер ярышы – халыҡ өсөн ҙур байрам. Еңел  әм ауыр атлетика, ҡышҡы  әм йәйге полиатлон, өҫтәл теннисы ярыштарына ҡала халҡы теләп йөрөй. “Снайпер” үҫмер балалар спорт мәктәбе тәрбиәләнеүселәренең күптәре – республика, Рәсәй, донъя чемпиондары.

Салауат үҫешкән спорт база ы менән дан алған. “СССР-ҙың 50 йыллығы” стадионында  әм “Салауат” спорт клубында төрлө ярыштар үткәрелә. Ҡалабыҙҙа 40-ҡа яҡын спорт залы, 10-лап хоккей корты бар.

Күп милләтле халыҡ йәшәгән ҡалабыҙҙың мәҙәниәте лә күп яҡлы  әм сағыу.  әр байрам  әм тантана ҡала мәҙәниәт йорттары үҙешмәкәр артистарының, мәктәп балаларының, төрлө предприятиелар художество коллективтарының сығыштары менән биҙәлә. Халыҡ яратып өлгөргән “Ағиҙел” халыҡ бейеүҙәре ансамбле, “Родничок” өлгөлө балалар хореография ансамбле, “Весна” бал бейеүҙәре халыҡ ансамбле, “Ил ам шишмә е” фольклор-эстрада төркөмө  әм башҡа коллективтар ҡалала ғына билдәле түгел, ә Башҡортостан  әм Рәсәй, хатта халыҡ-ара конкурстар лауреаттары.

Билдәле шәхестәрҙең байтағының яҙмышы Салауат менән бәйле. Тамара Ғәниева, Гөлназ Ҡол арина, Зилә Сәғәҙиева Салауат педагогия колледжын тамамлаған. Бөгөн ҡалала йәшәп ижад иткән яҙыусы Мөхтәр Сабитовтың “Көт  ин мине, Рәйсә” романы 2007 йылда “Иң яҡшы йыл романы” номинация ында еңеүсе тип билдәләнде.

Ҡалала башҡортса нәшер ителгән гәзит тә “Салауат” исемен йөрөтә. Йәш, энергия ы ташып торған коллектив, барлыҡ ижади ҡомарын эшкә егеп, телебеҙ, мәҙәниәтебеҙ  ағында арымай-талмай эшләй, салауаттарға рухи аҙыҡ бирә.

Иң күренекле сәнғәт усағы, халыҡҡа рухи, мәҙәни тәрбиә биреүсе Салауат башҡорт дәүләт драма театры тура ында айырым  өйләп китмәү мөмкин түгел.

Театр коллективы хаҡында  үҙ алып барыр алдынан, башҡорт милли сәхнә сәнғәтенең барлыҡҡа килеүе, уның үҫеш юлына туҡталып китеү фарыз. Сөнки был театр, милли традиция ҡанундарына таянып, 1933 йылда Ауырғазы колхоз-совхоз театры ерлегендә ижад донъя ына аяҡ баҫа. Уның тәүге профессиональ режиссеры Е. А. Сыртланова-Шляхтина була. Өфө театр училище ын тамамлап, Ауырғазы театрына килгән йәш таланттар сәхнә сәнғәте серҙәренә төшөнөп, халыҡ ара ында тиҙ арала дан-шөһрәт яулай.

1956 йылда Ауырғазы театры Салауатҡа күсә. Бында үҙҙәренең ҡанаттарын нығытып, ижад мөмкинлектәрен асҡан байтаҡ актерҙар бөгөн республикабыҙ театрҙарында башҡорт милли сәнғәтен артабан камиллаштырыу өлкә ендә ба алап

бөткө өҙ урын алған. Театрҙың әлеге директоры Наилә Байкова ҡала хакимиәте менән берлектә бинаны төҙөкләндереү, аяҡҡа баҫтырыу буйынса ҙур эштәр алып бара. Салауат театры быйыл үҙенең 75 йыллыҡ юбилейын билдәләй. Ул тамашасыларҙы спектаклдәр, яңы премьералар менән генә ҡыуандырып ҡалмай, гастролдәргә сығырға ла өлгөрә. Театр артистары бөтә Башҡортостанды, Рәсәйҙе урап сыҡты. Салауатта тәүгеләрҙән булып 1993 йылда "Театр яҙы" республика фестивале үткәрелде. Былтыр ғына театр тарафынан 280 спектакль, 5 премьера ҡуйылған. Улар ҡайҙа ғына сығыш я а а ла, тамашасылар  әр ваҡыт алҡышлап ҡаршы ала. Беҙҙең актерҙарҙы Ырымбур, Силәбе өлкәләрендә, Татарстан, Үзбәкстанда ла яҡшы беләләр. Ә иң алыҫ юлы – ҡытайҙың Мишань провинция ы.

Ғөмүмән, Салауат башҡорт дәүләт драма театры үҙенең юбилейын тәрән фекерҙәр, ташҡын хистәр, көслө характерҙар, образдар ижад итеп, халҡыбыҙҙың уйкисерештәрен тәрән сағылдырып, сәнғәт донъя ының гүзәл киңлеген сик еҙ эҙләнеүҙәр аша үтеп, яңынан-яңы ижад бейеклектәре менән ҡаршылай.

Быйыл ҡала өсөн тағы ла бер мө им ваҡиға булды: "Салауат йыйыны-2008" республика фольклор байрамы үтте. Йыйынды тантаналы асыуҙа ҡатнашҡан Башҡортостан Президенты Мортаза Рәхимов сығышында, Салауат Юлаев башҡорт милләтенең бөтә булмышын сағылдырып, ғорур халҡының иң яҡшы сифаттарын үҙендә туплаған, тине. "Ҡыҫҡа ғына ғүмере эсендә башҡарған эштәре менән ул бары ының да  өйөүен яуланы, төрлө милләт кешеләрен дуҫ, берҙәм булырға өндәп яуға күтәрелгән көслө рухлы шәхес", – тине ул. Эйе, йыйындың төп өлөшө тәрән йөкмәткеле, тарихи мәғлүмәтле театрлаштырылған тамаша менән башланып китте  әм башҡорт йолаларына бай, милли традицияларыбыҙға таянып ойошторолған халыҡ байрамына әүерелде. Оло йыйындың хужалары – салауаттар  әр конкурста  ынатмай призлы урындар яуланы: тирмәләр конкурсында – беренсе , "Салауат йыйыны батыры" бәйге ендә Рәмзил Байназаров – өсөнсө, ә "Сая ҡыҙҙар" ярышында Нәркәс Мөхәмәтйәнова беренсе урынды яуланы.

Башҡорт халҡының милли батыры исемен йөрөткән ҡалала Салауат исеме менән бәйле урындар байтаҡ. Ҡалаға ингән урында стела, ошо стеланың Салауат гербында  үрәтләнеүе, Салауат Юлаев бульвары, иҫтәлекле таҡтаташ батыр исемен мәңгеләштереүсе символдар булып тора. Салауат ҡунаҡтарын иң беренсе булып Салауат Юлаев стела ы ҡаршы ала. Был  әйкәл Ленинград скульпторы А. В. Семченко проекты буйынса эшләнгән, архитекторы – Ю. М. Бриллиантов. Стела Салауат ҡала ының 40 йыллыҡ юбилейы уңайынан 1988 йылда асыла. 12 метр бейеклектәге тимер-бетон пилон өҫтөндә – ҡоштоң стилле  үрәтләнеше. Ә уның өҫтөндә – милли батырыбыҙҙың баҡырҙан эшләнгән өс метрлыҡ скульптура ы. Атҡа атланған Салауат Юлаев ҡулдарын өҫкә күтәреп, әйтер ең дә, көрәштәштәрен алға әйҙәй. Скульптура силуэты йыраҡтан ҡарауға иҫәпләнгән,  ыбайлы  әм ыласын милли батырыбыҙҙың мәңге ireккә ынтылыуын кәүҙәләндерә.

Ҡалабыҙҙа тәүгеләрҙән ҡуйылған  әйкәл – Салауат Юлаев бюсы. Ул 1955 йылдың 23 октябрендә үк Богдан Хмельницкий урамындағы балалар скверына ҡуйыла. Бюст бронзанан эшләнгән  әм алғы өлөшөндә "Салауат Юлаев" тигән яҙыу бар, гранит  пъедесталда батырҙың ышаныслы юлдашы булған ҡалҡан, ҡылыс  әм йәйәнең барельеф  үрәте төшөрөлгән. Авторы – Т. Нечаева. Бюст элек торған скверҙан батыр исемен йөрөткән бульварға 2004 йылда күсереп ҡуйыла,  әм был урамды ҡаланың иң матур урыны итеүгә тәүге башланғыс була. Бөгөн аллея бөхтә итеп йыйыштырылған, бюст тирәләй  әм паркта аллы-гөллө сәскәләр ултыртыл-

ған, балалар өсөн яңы уйын майҙансыҡтары бар, фонтан эшләнгән. Был аллея – салауаттарҙың иң яратҡан ял итеү урындарының бере е.

Салауат Юлаевтың тыуыуына 225 йыл тулыу айҡанлы 1977 йылда ҡалабыҙҙың "Октябрь" кинотеатрында мемориаль таҡтаташ ҡуйыла. Постамент – тәбиғи Урал ташынан. Уны Ишембай районындағы Салауат Юлаев мәмерйә енән алып килгәндәр. Ташта – Салауат Юлаевтың бронза барельефы әм "Бында Ырымбур тракты буйынса 1773 йылдың октябрендә Емельян Пугачев ғәскәренә ҡушылыу өсөн Салауат Юлаев атлылар отряды менән уҙған" тигән яҙыу. Халыҡ легенда ына ярашлы, был урында туҡтағанда Салауат батырҙың атының даға ы юғала. Был даға Салауат ҡала ы өсөн бәхет даға ы була ла инде.

үҙемдең аҙағында ҡалабыҙҙың күренекле шағиры, композитор, ҡурайсы, Рәсәй әм Башҡортостан Журналистар союзы ағза ы Иҙел Хәлимовтың "Салауат" гәзите биттәрендә ойошторолған шиғырҙар конкурсында беренсе урынды алған әҫәренән өҙөк тәҡдим иткем килә:

*...Эх, Салауат! Нисек түҙҙең икән*
*Тотҡонлоҡта, ситтә илеңдән!?*
*Ике быуатҡа шул уңланым мин*
*Ҡотҡарырға ине үлемдән...*

*Ә шулай ҙа инең рухың тере,*
*Мәңге йәшәр халҡың телендә;*
*Йыр булып та, нур булып та йәшәр*
*әр кемдең дә күңел түрендә.*

*Рухың пәйғәмбәрҙәр рухы булып*
*Йәшәр Башҡортостан илендә.*
*Мәңге йәшәй Балтик буйҙарында –*
*ин бит баш эймәнең үлемгә!..*

*Донъя үҙе – инең тыуған ерең,*
*Исемең йәшәй туған халҡыңда:*
*Салауаттар булып беҙ йәшәйбеҙ*
*Янмаҫбыҙ беҙ утта-ялҡында!*

*... уңланым, тим, ине ҡотҡарырға,*
*Ә ин тере, иҫән, Салауат!*
*Анау, урам буйлап сабый килә,*
*Батыр рухы – тере аманат!*

**Рима ҠОТЛОҒӘЛЛӘМОВА.**

# МӘХМҮТ КАШҒАРИ ЙЫЛЫНА АРНАЛҒАН КОНКУРС ЙОМҒАКТАРЫ

2008 йылдың ЮНЕСКО тарафынан Мәхмүт Кашғари (1029 — 1101 йылдарҙа йәшәгән, аҫыл хеҙмәттәр, мәҫәлән, Диван лөғәт әт-төрк энциклопедия ын ижад иткән бөйөк зат) йылы тип аталыуы айканлы Евразия Яҙыусылар Берләшмә е халык-ара хикәйәләр конкурсы иғлан иткәйне. Абруйлы бәйгене беҙҙең регионда ойоштороуға "Ағиҙел" журналы редакция ы ла байтак көс алды: журналдың 4-се анындағы дүртенсе битендә конкурс шарттары баҫылып сыкты, жюри, уның сәркәтибе тәғәйенләнде.

өйөнөскә күрә, сағыштырмаса кыҫка вакыт — өс ай эсендә Башкортостанда йәшәгән дәғүәселәрҙән башкорт, урыҫ, татар телдәрендә утыҙға якын хикәйә алынды. Авторҙары — төрлө йәштәге (18—71), төрлө өнәр кешеләре — әҙиптәр, матбуғат хеҙмәткәрҙәре, инженер, китапханасы, хатта табип та бар. Тема йә әтенән сикләү юк ине.

Ни айәт, кулъяҙмалар ентекле ба аланды әм псевдонимдар (Актамыр, Айтуған, омай, Юлыктәгин, Нәзирә .б.) асыкланды. Хәлбүки, жюри Башкортостан ерлегендә Рәсәй ысынбарлығын нәфис үрәтләгән, милли рух, хиспафос менән уғарылған, укымлы тел-стиль саралары менән тукылған юғары художестволы әҫәрҙәргә өҫтөнлөк бирергә тырышты.

Ил-төбәк коласында уҙған ябык конкурстың өҙөмтәләре түбәндәгесә:

Беренсе премияға (500 евро) "Төшлөктәге төш" хикәйә е өсөн танылған прозаик **Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА - ҒАЙСАРОВА** (Өфө — Голландия) лайык булды. Әҫәр Евразия әҙиптәренең дөйөм йыйынтығында донъя күрәсәк.

"Рәнйемә миңә, олатай!" хикәйә е менән икенсе урынға Өфөнән китапханасы **Наза ӘХМӘҘИЕВА** сык а, өсөнсө приз "Хирург" исемле әҫәре өсөн әҙибә **Зөбәржәт ЙӘНБИРҘИНАҒА** (Стәрлетамак) тапшырыласак. Кариҙел район гәзите тәржемәсе е **За ит МУРСИЕВ** ебәргән "Кыпсак кыҙы" хикәйә-хикәйәте и ә дәртләндереү премия ы менән ба аланды.

"Ағиҙел" мөхәрририәте конкурста якшы ба а алған тиҫтәнән ашыу әҫәрҙе киләсәктә, әлбиттә, бәғзеләрен тәржемәләп, журнал укыусылар хөкөмөнә тәкдим итмәксе. Әҫәрҙәр М. Кашғари исемендәге конкурс эмблема ы менән баҫыласак.

Ә конкурс дауам итә. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: халык-ара кимәлдә гран-при яулаусы әҫәр 6000 евро менән бүләкләнә. Икенсе урын өсөн 4000 евро, өсөнсө премия — 2000 евро, йәнә 1000 евролык дәртләндереү призы булдырылған.

"Ағиҙел" журналы мөхәрририәте әм конкурс жюрийы Халык-ара Мәхмүт Кашғари йылына арналған хикәйәләр бәйге ендә еңеүселәрҙе, шулай ук әммә катнашыусыларҙы ихлас тәбрикләй, күңелдәренә ил ам, кәләмдәренә кеүәт теләй.

# БӘЛКИ, ТАНЫУСЫЛАР БАРҘЫР?

Ҡәҙерле "Ағиҙел" журналы редакция ы. Бәлки, ошо фото үрәттән үҙҙәренең туғандарын таныусылар булыр.

Атайымдар Ишҡәле олатай менән күп ваҡыттар ҡурай уйнап, ҡунаҡ булышып йәшәне. Ишмулла ағай ҙа хәл белешергә килеп, ҡурай уйнап, үҙе лә ҡушлап йырлап ултырыр ине. Беҙ, бала-саға, тамаша ҡылып, инеп-сығып йөрөйбөҙ. Ишҡәле олатайҙың әбейе матур йырлай, әсәйем "Мөғлифә" көйөнә ойота баҫып, бейеп китә торғайны. Әңгәмәләшә, ҡунаҡ булыша, ғүмерҙәр үтеп тә бара. Быйыл атайыбыҙға (фотола улдан ситтә ултыра) йөҙ йәш тулды. Байғужала, ауылдаштар байрамына йыйылғанда, аят уҡып, был датаны билдәләп үттек. Фәттәх Игебаевтың өс улы ла донъя ҡуйҙы, биш ҡыҙы, Аллаға шөкөр, иҫән әле. Таралышып бөткәнбеҙ, ирәк осрашабыҙ, юл хаҡтары ла бик ҡыйбат. Бәлки, журналда уҡыусылар ара ында фотола төшкәндәрҙең туғандары барҙыр.

**Ултыралар:**

1. Фәттәхетдин Игебаев, 1908 йылда Ҡаҙырша ауылында тыуған. уғыштан уң Байғужа ауылында йәшәне. Мәш үр ҡурайсы, Йомабай Иҫәнбаев, Ишҡәле Дилмөхәмәтовтар рәтендә тора.
2. Ишҡәле Дилмөхәмәтов, Матрай районы Иҫке Яҡуп ауылынан. Данлыҡлы Ишмулла, Сәйфулла ҡурайсыларҙың ата ы. Көслө әм мәш үр ҡурайсыларҙың бере е.
3. өләймән Йомағужин, Бөрйән районынан.

**Баҫып торалар:**

4. Рәхмәтулла Бүләкәнов, Баймаҡ районынан.
5. Әсхәт Үтәев, Матрай районы Матрай ауылында 1921 йылда тыуған. Уның универсаль икәнлеген әйтеп тора ы ла юҡ. Ҡурайсы, йырсы, гармунсы, мандолинала уйнауы, оҫта итеп бейеүен иҫкә алып өйләүселәр ҙә табылды. Икенсе Бөтә Донъя уғышынан яраланып ҡайтып, 1943 йылдың авгусында тағы ла фронтҡа китеп, әләк булды.
6. Мәхмүт Ғәлин, Баймаҡ районынан.



**Х. Собханғолова,**
**Йылайыр районы.**

## Аксаков көндәрендә

Ил амлы вә ҡоласлы, сағыу сараларға бай XVIII Халыҡ-ара байрамға быйыл Болгария, Белоруссия, Мәскәү, Ырымбур, Рязань, Златоуст .б. тарафтарҙан вәкилдәр килде. Өфөләге С. Т. Аксаков әйкәленә сәскәләр алғас, ҡунаҡтар Аксаков гимназия ында "Аксаков дәрестәре"ндә ҡатнашты, живопись әм фотография күргәҙмә ен ҡараны, шунан Шаҡшаға яҡын Ҡасим ауылына – элекке имениеға сәфәр ҡылды. Студенттар балы, балалар концерты – әммә е лә халыҡта онотолмаҫ тәьҫораттар уятты. Өфө районының Зубово ауылында фольклор әм этнографик саралар гөрлә ә, Ҡырмыҫҡалы районының Иҫке Ҡыйышҡы ауылында Сергей Аксаковҡа бюст асылды.

Иң хәтерҙә ҡалғаны, әлбиттә, – ҡасандыр Аксаков халыҡ йорто тип йөрөтөлгән Башҡорт дәүләт опера әм балет театры бина ында уҙған тантаналы кисә.

– Быйылғы байрам мәш үр яҡташыбыҙҙың улы – Иван Сергеевич Аксаковтың тыуыуына 185 йыл тулыуға арналыуы менән ә әмиәтле,– тине тәбрик үҙендә БР Президенты Мортаза Рәхимов. – Йәмәғәт эшмәкәре, шағир әм публицист, патриот булараҡ, уның исеме Болгария Республика ында ла хөрмәт менән телгә алына.

– Болгарияла 2008 йыл Рәсәй йылы символы менән бара,– тип сығыш я аны Болгарияның Рәсәй Федерация ындағы илселеге советнигы Вера ханым Шатилова. – Йәнә шул: Болгарияның дәүләт булараҡ ойошоуына күп көс алған Иван Аксаковтың юбилейы Шипкалағы хәл иткес алыштың 130 йыллығына (1877–1878 йылдарҙағы урыҫ-төрөк уғышы осоронда Мәскәү славян хәйриә комитеты етәксе е И. С. Аксаков болгар дружиналарына бик күп аҡса әм ҡорал ебәреү ойоштора. – **Ред.)** тура килеүе оло мәғәнәгә эйә.

Тулҡынландырғыс минуттар... Республика башлығы Аксаков премия ының яңы лауреаттарына – "Наш современник" журналының баш мөхәррире шағир Станислав Куняев менән фронтовик-яҙыусы Талха Ғиниәтуллин – Анатолий Генатулинға юғары наградалар тапшырҙы. 83 йәшлек әҙиптең хисле яуап үҙен мәртәбәле йыйын айырыуса йотлоғоп тыңланы: "Үҫмер сағым Ураҙҙа уҙҙы – әле лә йәйҙәрен Учалы яҡтарына ҡайтып торам – шиғырҙар яҙҙым. Ябай ғына, тәбиғәткә арнап йә мөхәббәте кире ҡағылған егет хаҡында... Хыяллана инем: йәнә е, шағирҙар ғына йәшәгән Өфөгә барырмын да танылыу ҡаҙанырмын әм фырт костюм кейеп, беләккә сәғәт тағып, теге ҡыҙ йәшәгән өй эргә енән уҙырмын әле берәй тип. Яҡшы ын да, насарын да, хатта хәтәрен дә үҙ эсенә йомған күп йылдар аҡты. Ленинградҡа яҡын фронтҡа эләктем, Карел боғаҙынан Эльба ярынаса яуҙа айҡаштым. Аҙаҡ, әйтергә яра а, Мәскәүҙә оҙайлы плацдарм яуланым. Инде бына бини ая ваҡыт уҙғас, Өфөгә килдем, ә юҡ, алдатса айбарланып аяҡ баҫтым... Рәхмәт!"

Шулай итеп, Бөтә Рәсәй премия ы лауреаттары сафына башҡорт исем-шәрифтәре өҫтәлде. Ҡотло бул ын! Быға тиклем маҡтаулы премияға Василий Белов, Валентин Распутин, Валерий Ганичев, Михаил Чванов лайыҡ булғайны.

С.Т.Аксаков исемендәге быйылғы премияларын әм тәбрикнамә ен 14 студент Өфө округ ҡала советы рәйесе Ирек Ниғмәтуллин ҡулынан алды. Артабан БМО-ның транспорт комиссия ы хеҙмәткәре В.В.Новиковҡа славян яҙма ы әм мәҙәниәте халыҡ-ара фондының Почет грамота ы тапшырылды. Тантана республика сәнғәт оҫталарының оҡланғыс концерты менән тамамланды.

Иртәгә енә автокаруан Бәләбәй тупрағына – Надеждиноға елдерҙе. Сиркәү ҡыңғырауҙары саң ҡаға... Ҡунаҡтарҙы ҡурай моңо менән милли кейемдәрҙәге хужалар икмәктоҙ, йыр-бейеү менән ҡаршылай. Дмитриев храмында ғибәҙәт ҡылғандан уң әммә е лә "Надеждино" тарихи-мәҙәни үҙәгендә яңы асылған Оҫталыҡ йортона атланы. Тирә-яҡ ауылдарҙан йыйылған бала-саға бында төрлө ҡул эштәре, биҙәү кәсептәрен үҙләш-

терәсәк, әүәҫкәр сәхнә сәнғәте серҙәренә төшөнәсәк. Былдай уҡыу-тәрбиә усағы әлегә Рәсәйҙә берҙән-бер генә икән. Ә Приют ҡасаба ында әм Бәләбәй ҡала ында халыҡ-ара байрамда ҡатнашыусылар уҡыусы әм эшсе йәштәр менән аралашты, кинәнеп "Өмөт ҡыңғырауҙары" исемле әҙәби-музыкаль сарала сығыш я аны.

***

Байрам алдынан ғына Славян яҙма ы әм мәҙәниәтенең халыҡ-ара фонды вице-президенты, Аксаков Йорт-музейы директоры, яҙыусы Михаил Чванов "Рус мәҙәниәтен үҫтергәне өсөн" Санкт-Петербург фән әм сәнғәт академия ы тарафынан быйыл ғына булдырылған скульптор Вячеслав Михайлович Клыков исемендәге миҙал менән бүләкләнде. Ҡәләмдәшебеҙҙе тәбрикләйбеҙ!

## Мәскәү менән күрешеү

Еңеү паркында Ватан уғышында батырҙарса әләк булғандар иҫтәлегенә сәскәләр алыу тантана ында РБ Президенты Мортаза Рәхимов, Мәскәү ҡала ы мэрының беренсе урынбаҫары Владимир Ресин, БР хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев, тармаҡ етәкселәре, Өфөнөң почетлы граждандары, уғыш ветерандары, күп халыҡ ҡатнашты. Хәрби дан музейында Мәскәү өсөн алыш ҡа армандары (бөгөн уларҙан йөҙ ҙә дүрт яугир иҫән- ау) менән осрашыуҙа делегация етәксе е Мәскәү мэры Юрий Лужковтың сәләм хатын уҡып ишеттергәс, фронтовиктарҙың әр бере енә микротулҡынлы мейес бүләк ителде. "Быйыл мине яңы фатир менән шатландырған, күп кенә яуҙаштарыма автомобиль биргән Башҡортостан етәкселегенә рәхмәтлебеҙ. Мәскәү хөкүмәтенә лә рәхмәт – 1941 йылда бөйөк ҡала өсөн ҡалҡандай торҙоҡ: Еңеү Мәскәүҙән башланды!"– тине отставкалағы минометсы Әхсән ағай Бабичев.

БР Милли музейында "Мәскәү мегаполисы. 10 йыллыҡ үҫеш" фотокүргәҙмә ен, ә Башҡорт дәүләт опера әм балет театрында "Рудольф Нуриев" экспозиция ын асҡанда ла Мәскәү – Башҡортостан мәҙәни-тарихи бәйләнештәре хаҡында йылы үҙҙәр яңғыраны.

Тантаналы кисәлә республика етәкселәре, БР Хөкүмәте ағзалары, РФ Дәүләт Дума ы әм БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаттары, йәмәғәтселек вәкилдәре, ҡунаҡтарҙың рәсми делегация ы – Мәскәү мэрия ы әм ведомстволары, департаменттары, предприятиелар, банк, эшҡыуарлыҡ, киң мәғлүмәт вәкилдәре ҡатнашты. Байрам гала-концертын и ә СССР-ҙың халыҡ артисы, РФ Дума ы депутаты Иосиф Кобзон, Рәсәйҙең халыҡ артистка ы Валентина Толкунова ише эстрада, йәнә балет әм театр йондоҙҙары биҙәне.

Конгресс-холда баш ҡаланың ҡырҡҡа яҡын предприятие ы үҙенең фәнни-техник ҡаҙаныштарын күр әт ә, ыңғайҙан ҡунаҡтар республикабыҙҙа етештерелгән транспорт әм махсус техника күргәҙмә ен ихлас ҡараны. Күргәҙмәне асҡанда Владимир Ресин Башҡортостанды "иҡтисади тотороҡлоҡто үҫтереү йә әтенән ышаныслы төйәк" тип баланы. Ысынлап та, Мәскәү менән Башҡортостандың иҡтисади алыш-биреше йылдан-йыл нығый. Былтыр, мәҫәлән, тауар әйләнешендә Мәскәүҙең өлөшө 4,4 процентҡа етте – был Рәсәй төбәктәре ара ында республикабыҙ бишенсе урынды биләүен аңлата.

Ике төбәк белгестәренең берлектәге ғаилә, демография, шулай уҡ йәштәр сәйәсәтенә, шифахана-курорт система ына, төбәк-ара кооперация, эшҡыуарлыҡ, замана технологияларына ҡағылышлы "түңәрәк өҫтәл"дәр уҙғарыуы ла ә әмиәткә эйә.

Мәскәүҙәр "Алексеевка" совхозында, Рәсәй Фәндәр академия ы Өфө ғилми үҙәгенең Археология әм этнография музейында, Өфөнөң үҙәк ҡала китапхана ында ла көтөп алынған ҡунаҡтар булды. Баш ҡаланың Фән әм сәнғәт сәйәсәте департаменты менән БР Фәндәр академия ы ара ында ғилми хеҙмәттәшлек буйынса килешеү төҙөлдө. Башҡорт дәүләт университетында башҡорт әм урыҫ телдәрендә донъя күргән бик тә күркәм "Башҡорт шиғриәте антология ы"ның исем туйы гөрләп уҙҙы. "Динамо" стадионында Башҡортостан әм Мәскәү спортсылары билбаулы көрәш буйынса көс ынашты: иҫәп – 3:3 – "халыҡтар дуҫлығы" еңде. М.Ғ.Рәхимов менән В.И. Ресин ҡулдарынан иҫтәлекле миҙалдар, вымпелдар алған батырҙар киләсәктә лә ярышырға үҙ ҡуйышты.

Мәғлүм ки, 2007 йылдың 1 июлендә Башҡортостан менән Мәскәү ара ында үҙара Дуҫлыҡ әм хеҙмәттәшлек хаҡында килешеү төҙөлгәйне. Килешеү ҡарарҙарын бойомға ашырыу буйынса Башҡортостан Республика ы менән Мәскәү хөкүмәтенең 2008 – 2010 йылдарға берлектәге эшмәкәрлеген күҙ уңында тотҡан протоколға ҡул ҡуйыу, шулай итеп, “Мәскәү көндәре – 2008” программа ының төп сара ы булып

йылъяҙмабыҙға инәсәк.

***

Прозаик Рәлис Ураҙғолов менән шағир Дамир Шәрәфетдинов әҙәбиәт өйөүселәр менән осрашыуҙар үткәрҙе. Шағир Шәриф Бикҡолдоң тыуған ауылы – Ҡырмыҫҡалы районының Ҡарлыман ауылы мәктәбендә, шағирҙың музейында, Архангел районының Аҙау мәктәбендә яҙыусылар үҙҙәренең ижади пландары тура ында өйләне, матбуғатта донъя күргән әҫәрҙәре тура ында фекер алышты. Мәктәп уҡыусылары, уҡытыусылар менән мәғариф система ы, телде өйрәнеү, заман күренештәре тура ында ҡыҙыҡлы әңгәмәләр ойошторолдо.

***

Баш ҡаланың Нефтселәр мәҙәниәт а-райында шағирҙар Тамара Искәндәриә менән Хисмәт Юлдашевтың ижад кисә е уҙҙы.

"Башҡортостан ҡыҙы" журналының баш мөхәррире урынбаҫары Тамара Искәндәриә-Юлдашеваны БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай , БР Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт әм полиграфия буйынса эштәр идаралығы, Мәғариф, Мәҙәниәт әм милли сәйәсәт министрлыҡтары, Башҡортостан Яҙыусылар союзы, Өфө ҡала ы ҡала округы хакимиәте вәкилдәре, шағирәнең тыуған яғы Ишембай ҡала ы әм районы етәкселәре, ауылдаштары әм ҡәләмдәштәре Риф Тойғон менән Хәсән Назар ҡотланы. БР Президентының мәғлүмәт сәйәсәте буйынса дәүләт советнигы Гөлдәр Камалова оҙаҡ йылдар мәҙәниәт өлкә ендәге хеҙмәте өсөн Мортаза Рәхимовтың әҙибәгә яҙған Рәхмәт хатын уҡып ишеттерҙе.

Ижад кисә е йыр-бейеү менән аралашып барҙы. Замандаштар ғына түгел, яҙмыштарын бергә бәйләп, матур ғаилә төҙөп, өс ба адир ул үҫтергән ике шағирҙың тормош юлына байҡау, ижад баҫҡыстарын барлау рәүешендә алып барылған тамашаның режиссеры – Вилүрә Иҫәндәүләтова, сәхнәне Фәрхәд Ихсанов биҙәгән. Башҡортостандың халыҡ артисткалары Рәйлә Аҙнаҡаева менән Светлана Хәкимованың, йырсы Венера Юлгилдинаның сығыштары, "Гранде" ритм-балеты бейеүҙәре кисәне тағы ла балҡытып ебәрҙе. Нескә лирик Тамара Искәндәриә әм ижадында тос фекерле Хисмәт Юлдашевтың ҡара-ҡаршы тороп шиғри бәхәс рәүешендә шиғыр уҡыуҙарын тамашасы көслө алҡыштарға күмде.

***

Яҡуп Ҡолмойҙоң тыуыуына 90 йыл тулыуға арналған хәтер кисәләре Ишембай ҡала ының мәҙәниәт арайында әм тыуған ауылы Ҡанаҡайҙа үтте. Был сарала Бөтә Донъя башҡорттары ҡоролтайынан (конгресс) Ҡәҙим Аралбаев, әҙиптәр Рәшит Низамов, Риф Мифтахов, Мансаф Ғиләжев, Фәниә Чанышева, Әнисә Та ирова, Тимерғәле Килмөхәмәтов, З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте директоры Зөфәр Тимербулатов, журналист Миләүшә Ҡолмөхәмәтова, шулай уҡ шағирҙың яҡташтары: Өфө сәнғәт академия ы профессоры, йырсы Римма Мусина, БР халыҡ артистка ы Суфия Ҡорбанғәлиева, йырсылар Шәмсиә Нагаева, Альберт Ша иев, композитор Айрат Ҡобағошов, шағирҙың улдары Булат әм Марат, ҡыҙы Зәйтүнә Ҡолмөхәмәтовалар, ҡусты ы, Рәсәй Федерация ының Сит ил эштәре Министрлығының Көнсығыш илдәре буйынса Департаменттың начальник урынбаҫары Азамат Ҡолмөхәмәтов ҡатнашты.

Байрам сара ын Ишембай ҡала ы әм районы хакимиәте башлығы Марат Ғайсин асты. Ишембай ҡала ы әм районы Ҡоролтайы етәксе е, "Торатау" гәзитенең баш мөхәррире Вәдүт Исхаҡов, мәҙәниәт бүлеге мөдире Әлфиә Тимербулатова, яҡташтары, Яҡуп Ҡолмой исемендәге Ҡанаҡай 11 йыллыҡ урта мәктәп директоры Әлфинур Латипова, Ҡанаҡай ауыл биләмә е хакимиәте башлығы Гөлнара Кәримова, ауыл мәҙәниәт клубы мөдире Гүзәл Янбаева, З. Вәлиди исемендәге башҡорт гимназия ы уҡытыусылары әм уҡыусылары, Яҡуп Ҡолмой исемендәге Ҡанаҡай урта мәктәп уҡытыусылары әм уҡыусылары, ауылдаштары сығыш я аны. Байрам сара ында Я. Ҡолмой шиғырҙарына яҙылған йырҙар яңғыраны.

Я. Ҡолмой исемендәге мәктәп музейына яҙыусылар әм килгән ҡунаҡтар иҫтәлекле бүләктәр, мәктәп китапхана ына китаптар тапшырҙы. Шағирҙың ата ы Хәйрулла Ҡолмөхәмәтов ултыртҡан баҡсаға сәйәхәт ҡылдылар, Я. Ҡолмойҙоң ҡәберенә сәскәләр алдылар.